# Ағиҙел

**Өфө,**
**ғинуар**
**2012**

**1(1065)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаçары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаçары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баçырға ҡул ҡуйылды 11.01. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баçылды.
Шартлы баçма табаҡ 15,6. Иçәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 521 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0001.12.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баçма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баçылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2012 (1,1065)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР ҺӘМ ШИҒРИӘТ

**Хәмит Ирғәлин.** Алыҫ Көнсығыш ҡиссаһы. ....................................6
**Рәшит Шәкүр.** Уйҙарымда – көн сыуағы. Ш и ғ ы р ҙ а р . ................53
**Рамай Ҡаһир.** Көндәрем китте аяҙға... Ш и ғ ы р ҙ а р . ....................63
**Марис Нәзиров.** Үрләгәндә ғүмер түбәһенә... Ш и ғ ы р ҙ а р . .......69
**Спартак Ильясов.** Сағымдағы олоу. Б ә й ә н . ..............................76

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Имдат Авшар. Йән** өшөткөс төш. Х и к ә й ә . ..............................120

ШИШМӘЛӘР

**Земфира Аҡбутина.** Башҡортостан. Ш и ғ ы р ҙ а р . ....................131
**Мөнир Иҡсанов.** Тибә йөрәк. Ш и ғ ы р ҙ а р . ...............................133

ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Ләйсән Мараҡанова.** Күк сәскәләр. Х и к ә й ә . ............................136

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Суфиян Поварисов.** Башҡорттоң баллы һүҙе. .............................141

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Рауил Бикбаев.** Шағир яҙмышы *(Хәсән Назарға 70 йәш)*. ............146

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Зәйтүнә Шәрипова.** Балҡыштарға бай ғүмер
*(Роберт Байымовтың тыуыуына 75 йыл)*. ..................................155

ПУБЛИЦИСТИКА

**Миҙхәт Саҙрыев.** Ауылһыҙ ил – бөлгән ил. ..................................159
**Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлин.** Башҡорттар китте һуғышҡа. ................164
**Салауат Әсфәтуллин.** Тарихҡа яңы «аңлатма»мы был? .............181

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Гөлфирә Әхмәтшина.** Мәктәп ғорурлығы. ................................187

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА И ПОЭЗИЯ

**Х. Иргалин.** Дальневосточная быль.
**Рашит Шакур, Рамай Кагир, М. Назиров.** *Стихи.*
**С. Ильясов.** Волчий вой. *Повествование.*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**Имдат Авшар.** Страшный сон. *Рассказ.*

РОДНИКИ

**З. Акбутина, М. Иксанов.** *Стихи.*

ПРОБА ПЕРА

**Л. Мараканова.** Незабудки. *Рассказ.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**С. Поварисов.** Благородное слово башкир.

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**Р. Бикбаев.** Судьба поэта
*(Хасану Назару 70 лет).*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**З. Шарипова.** Светлая жизнь
*( 75 лет со дня рождения Р. Баимова).*

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Садрыев.** Страна без деревень — нищая страна.
**А. Янгалин.** Шли башкиры на войну...
**С. Асфатуллин.** Новое «толкование» истории?..

МУЗЕИ — ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Г. Ахметшина.** Гордость школы.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



## *2012 йыл – Рәсәй тарихы йылы*

2012 йылды илебеҙ Президенты Д. А. Медведев «Рәсәй тарихы йылы» тип иғлан итеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Быны үткәнде өйрәнеү генә түгел, ә иң юғары кимәлдә сәйәси, ижтимағи, әхлаҡи, этик, хатта йәмғиәттең философик нигеҙҙәрен күҙаллап сығырға бурыслы оло сара тип атарға кәрәк. Тимәк, был сара йыл дауамында Рәсәй Федерацияһы составындағы субъекттарҙы, уларҙа йәшәгән халыҡтарҙы, милләттәрҙе бер-береһенә яҡынайтыуға, дуҫлаштырыуға, ихтирамлы булыуға ярҙам итәсәк. Һәр хәлдә, шуға өмөтләнергә урын бар. Финанс-иҡтисади кризис, Ер шарының төрлө төбәктәрендәге һуғыш-низағтар, теге йәки был дәүләт эсендәге сыуалыш-түңкәрелештәр барған саҡта был бик мөһим. Сөнки, ҙурҙан ҡупҡанда, уртаҡ бишек — ерҙә тыуып, бер үк ерҙә йәшәйбеҙ.

Башҡортостан йылъяҙмаһы — элекке СССР, бөгөнгө Рәсәй халыҡтары тарихының айырылмаҫ бер өлөшө. Башҡорттарҙың рус һәм башҡа халыҡтар менән һыйышып-килешеп йәшәүенең бер нисә быуатлыҡ өлгөлө тарихы бар беҙҙә. Әйтәйек, 2006 йыл республикала Рәсәйгә ҡушылыуҙың 450 йыллығын билдәләнек, 2011 йыл Башҡортостанда Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы булды. Тимәк, дуҫлыҡ күперенә күптән баҫҡанбыҙ, күптән ошо юҫыҡта эшләйбеҙ һәм татыулыҡ ҡанундары буйынса йәшәйбеҙ. Ошо рух бөгөн дә йәшәй һәм республикала байтаҡ милләт вәкилдәренең һыйышып йәшәү, тотанаҡлылыҡ нигеҙе булып тора.

Әлбиттә, тарихыбыҙҙа «аҡ» таптар ҙа күп әле. Уларҙы асаһы ла асаһы, халыҡҡа еткерәһе бар. Быны, беренсе сиратта, белгестәр: тарихсылар, философтар, археологтар эше, уҡытыусылар, әҙәрмәндәр, тыуған яҡты өйрәнеүселәр һөҙөмтәле эшләй ала. Үткәндәргә оло ихтирам йөрөткән, һоҡланған һәм шуны башҡаларға ла еткерергә ашҡынған һәр ҡайһыбыҙ ошо эшмәкәрлеккә үҙ өлөшөн индерһен ине. Тарих барҙа — бөгөнгө бар, бөгөнгөбөҙ барҙа — киләсәк бар!

Был мөһим саранан «Ағиҙел» журналы ситтә ҡалмаясаҡ. Һан һайын героик һәм аяныслы үткәнебеҙҙе яҡтыртҡан, үткәндән бөгөнгөгә күпер ташлаған публицистик мәҡәләләр, очерктар, документтар, иҫтәлек-хәтирәләр, художестволы әҫәрҙәр даими баҫыласаҡ. Хәйерле сәғәттә, дуҫтар! Әйҙәгеҙ, ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ, ошо юҫыҡта берҙәм бергә-бергә эшләйек һәм йәшәйек!

**Әмир ӘМИНЕВ,**
**журналдың баш мөхәррире.**



Хәмит
ИРҒӘЛИН

# АЛЫҪ КӨНСЫҒЫШ ҠИССАҺЫ

## *Фажиғәле төн*

Алыҫ Көнсығыш... 1938 йылдың йәйге төндәренең береһендә СССР сиктәрен һаҡлаусы атлылар дивизияһы командиры Михаил Елизарович Добрягин фатирында телефон шылтыраны. Йоҡоло комдив карауаты эргәһендә торған тумба өҫтөндәге телефон трубкаһын, ауыр ҡыбырлап, ҡолағына терәне.

– Тыңлайым.

Дивизия элемтә үҙәге дежурныйының ҡуҙғыған тауышы ишетелде:

– Комдив иптәш! Һеҙҙе "Н" заставаһынан полковник Сенькин һорай. Тоташтырырғамы?

– Тоташтыр. – Комдив тороп уҡ баҫты.

Бер нисә секундтан застава начальнигының әллә бәлйерәгән, әллә шаңҡыған тонок тауышы ишетелде.

– ...комдив...

– Тыңлайым.

Сенькин ауыр көрһөндө, унан һуң пауза урынлашты.

– Һин нимә, полковник?! Алло! Ишетәһеңме мине?.. Ни булды? Ниңә өндәшмәйһең?

Трубкала кинәт икенсе тауыш ишетелде.

– Комдив иптәш! Был – "Н" заставаһы командиры урынбаҫары, комиссар Дудников!

Комдивтың асыуы ҡабарҙы.

– Һеҙ нимә унда, майор?! Бөтәгеҙ ҙә иҫерек түгелдер бит?.. Комиссар!

– Комдив иптәш! Бында... Бында шундай хәл... Шундай хәлдәр!.. Юҡ, булдыра алмайым...

---

*Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Хәмит Ирғәлин (1950) Федоровка районының Юлдаш ауылында тыуып үҫкән. Юғары белемле.*

*Өс проза, пьесалар һәм очерктар китабы, ун бишләп пьеса, күп һанлы публицистик әҫәрҙәр авторы, һәүәҫкәр рәссам.*

– Ә мин һеҙгә доклад яһарға бойорам!

– Комдив иптәш! Беҙҙең застава башҡаса юҡ…

– Нисек “юҡ”?! Һеҙҙә – өс эскадрон, комиссар. Комиссар, дауам ит!

Майор ауыр ыңғырашҡан тонда саҡ әйтә алды:

– Шулай килеп сыҡты, комдив иптәш…

Добрягин эргәһендә йоҡлап ятҡан ҡатынын иҫләп кенә донъя тетрәтеп ҡысҡырыуҙан тыйылып ҡалды.

– Нисек “юҡ”?! Нишләп застава юҡ?! Һөйлә! Үҙ ҡулдарым менән атып үлтерәм!

– Тыуған ил мине ғәфү итмәйәсәк! Мин һеҙгә мәшәҡәт ҡалдырмаҫҡа тырышам, комдив иптәш… – Атыу тауышы яңғыраны, комиссар трубкаһы янында ғына. Артабан гөрһөлдәп ауыр нәмә ҡолағаны, трубканың шалтырап ҡатыға бәрелгәне ишетелде лә, йәнә тынлыҡ урынлашты.

Михаил Елизарович үрһәләнеп ырғып торҙо.

– Алло, алло! Яуап бирегеҙ! Кем бар унда?

Трубкала ҡабат полковник Сенькин тауышы ишетелде:

– Иптәш комдив! Комиссар Дудников минән алдараҡ өлгөрҙө…

– Полковник! Туҡта! Ашыҡма!.. Сенькин, ишетәһеңме мине?

– Ишетәм, иптәш комдив, ишетәм.

– Сережа! Сергей Петрович! Аҡылһыҙланма! Ҡара уны!.. Мин хәҙер барып етермен. Хәҙер!.. Тыныслан! Килештекме? Ә? – Яуап булманы. – Беҙ бит һинең менән ҡарт яугирҙар! Һин бит – командир! Боевой командир! Ныҡ бул! Сережа, беҙ бит дуҫтар! Ә? Аңланым: һиндә нindәйҙер “ЧП”. Донъя булғас, ни генә булмай. Тағы бер әйтәм: аҡылһыҙланма! Мине көт! – Добрягин застава менән элемтәне өҙөп, дивизия штабына шылтыратты. – Миңә кисекмәҫтән автомобиль ебәрегеҙ! Мин штабҡа барып еткәнсе ҡарауыл взводы менән ике эскадронды тревога менән күтәрегеҙ! Взвод – машинала, эскадрондар һыбай көтһөн!

…Комдив ултырған еңел машина артынан һалдаттар тейәлгән “полуторка” “Н” заставаһына еткәндә “подъем”ға ваҡыт күп ине әле. Урман, ҡыуаҡтар менән ала-сола ҡапланған сопкалар араһындағы ҡалтыр-ҡолтор юлдарҙан бик тиҙ булмаһа ла, әллә ни оҙаҡ та елдермәнеләр. Ярай әле, ямғырҙар тынып, юлдарҙың ҡоро торған ваҡыты. Юҡһа, һыбайлылар ҙа тиҙ үтә алмаҫ ине.

Бында ҡасандыр маньчжурҙар ауылы булған, уныһы тарҡалып юҡҡа сыҡҡан. Үткән быуаттың урталарында Рәсәй үҙ биләмәләрен Манчьжурия ерҙәре хисабына киңәйткәндә көньяҡ тарафтарға күсенеп киткәндәр. Йәштәре, тау-таш һәм урмандарҙа көн итеп, урыҫтарға һөжүм итеп һәм талап көн күргән, урыҫтарҙы “ҡан дошман”дары тип иғлан иткән бандиттар йәки хунхуздар отрядтарына ҡушылған. Әле ташландыҡ, емерек ауылдың алыҫ бер осонда һәлберәп бөткән өс-дүрт йорт йән аҫырап ята. Застава урынлашҡан хужалыҡ – ошо ауылдың ҡәҙимге ҡойма менән уратып алынған ҙур ғына мәктәбе.

Оло ҡапҡанан яй газ менән ингәндә фаралар яҡтыһында казарма алдында ҡаршы алыусы ҡырҡлап хәрбиҙең тигеҙ сафы күренде. Автомобиль туҡтар-туҡтамаҫтан, артҡы урында ултырған икәү ашығып сыҡтылар ҙа алғы ишекте астылар. Комдив сығып олпат һынын турайтыуға, тегеләр уның ике яғына баҫты. Яңғырауыҡлы командалар аҫтында “полуторка”ларҙан һалдаттар дөбөрләшеп ырғып төштө лә йүгерешеп теҙелде. Әле генә геүләп торған ишек алдында ҡапыл тынлыҡ урынлашты. Ҡаршы алыусылар сафы алдында торған полковник Сенькин хәрби устав буйынса Добрягин ҡаршыһына килеп баҫты.

– Комдив иптәш!..

Уға доклад яһарға форсат бирмәнеләр. Комдивтың ян-яғындағы ике әзмәүер

полковникты етеҙ генә ҡултыҡлап алдылар ҙа, кобураһын ысҡындырып, наганын һурып та сығарҙылар.

– Әкрен, полковник, әкрен…

Бер үк ваҡытта һалдаттар сафы, мылтыҡтарын тоҫҡап, застава хәрбиҙәрен ҡулсаға алды һәм ҡорал һалыуҙарын талап итте. Ҡамауҙағылар бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ һәм үкенесһеҙ, хатта ки битараф ҡиәфәттә ҡоралдарын, талап ителмәһә лә, бил ҡайыштары менән бергә һалып, ергә ырғытты. Былар барыһы ла бер нисә минутта башҡарылды. Комдив әзмәүерҙәренә китергә ымланы, шунан һуң ғына:

– Үпкәләмә, Сергей Петрович, – тине, – үҙең белеп тораһың, шулай кәрәк таптым. Ә хәҙер доклад яһа, йә күрһәт, ниҙәр ҡупты?

Полковник казармаға рәхим итеүҙе һорап ым яһаны. Баҫҡан һайын ыңғырашып торған иҫке таҡта күтәрмәгә менгәс, шығырлатып солан ишеген асты һәм дөм-ҡараңғы соланға тәүҙә үҙе инеп сумды. Ҡайҙалыр төп урта ишекте асҡас, солан иҙәненә аяҡ аҫтын абайларлыҡ һүрән яҡты таралды.

– Үтегеҙ, комдив иптәш.

Алғы бүлмәлә оҙаҡ яныуҙан ҡыуығы ныҡлы ҡарайған кәрәсин шәменең һөрөм аңҡыуы, тағы ла аңлатып булмаҫлыҡ әллә ниндәй ауыр еҫ ҡаршы алды. Комдив төпкәрәк үтеп туҡталды ла, был тарафта йыш булыуына ҡарамаҫтан, тәүге ҡат күргәндәй, бүлмәгә күҙ йүгертеп сыҡты. Тәҙрәһеҙ, ҡаршы стена юғарыһына Сталиндың быялаланған ыҡсым портреты, уның аҫтына ос яғын аҫҡа төшөрә биреп байраҡ, байраҡтан һулдараҡ һәр кемгә таныш “Һин Ҡыҙыл Армияға үҙең теләп яҙылдыңмы?” тигән ҡағыҙ плакат эленгән. Ошо һанаулы ғына символикалар аҫтында стенаға һөйәп ултыртылған тумба, тумбала телефон, үтә күренмәле быяла ҡара һауыты, ағас һаплы ручка, оҙаҡ ҡулланыуҙан әрпешләнеп һәм тышы керләнеп бөткән журнал, бүлмәгә эс бошорғос яҡтылыҡ сәсеүсе шәм. Тумба менән һул мөйөштәге “голландка” мейесе арауығында беләгенә ҡыҙыл сепрәк бәйләгән дневальный һалдат ҡанға батып ята. Уң яҡта – ҡулдарын артҡа ташлап салҡан ауған, донъяуи мәшәҡәттәрен түңәрәкләгән комиссарҙың йәнһеҙ кәүҙәһе.

Комдивтың башы еңелсә ҡалтыранды, сырайы тартышты. Ул, ҡарт бүре кеүек, дәһшәтле ҡараштарын полковникка төбәне. Комдивтың зәһәр ҡарауы уға бер нисек тә тәьҫир итмәгәндәй күренде. Ҡымшанманы ла. Ғажизлыҡ һәм сикһеҙ хәсрәт менән ҡараған күҙҙәрҙә айбаныу, ҡурҡыу, буйһоноу билдәләренең эҙе лә күренмәне. Сенькин субординация талаптарын онотҡан йәки һанға һуҡмаған дезертир ише тымтайып тора бирҙе.

Комдивтың артына ҡаушырылған ҡулдарының бармаҡтары ҡарманып ниҙер эҙләгәндәй тарбаңлашырға тотондо. Бер нисә тапҡыр аяҡ остарына ҡалҡынып-ҡалҡынып, кәүҙәһе менән алға талпынып ҡуйҙы. Был уның полковниктан ниндәй ҙә булһа аңлатма биреүен көтөп-көтөп тә, аҙаҡҡы сиктә түҙемлеге бөтөүенең билгеһе ине.

Полковник, ауыҙ асып ни ҙә булһа әйтәһе урынға, тумбалағы дневальный шәмен алды ла мейес эргәһендәге икегә асылыусы ишекте асты. Тупһа аша төпкә, ҡараңғылыҡ ҡосағына, үтеп бер аҙым ғына атланы һәм, артынан әйҙәгәнен аңлатып, комдивҡа боролдо.

Комдив алғы бүлмәләгенән дә хәтәрерәк ниҙер көткәнен аңланы, ытырғаныуын күрһәтмәҫкә тырышып, өнһөҙ ҡараштары менән әйҙәүсе полковникка табан атланы. Казарма ишеге аша төпкә һонолоу менән ҡараңғы төпкөлдән бөркөлөп сыҡҡан көслө еҫтән, маңлайына кҫәк алғандай, ҡапыл артына тартылды, уҡшый биреп, ауыҙ-танауын ҡапланы. Ҡан еҫе ине был. Алғы бүлмәләгенән йөҙ

тапҡырға, мең тапҡырға көслөрәк ҡан эсе! Ошо еҫтән ут-һыуҙарҙы кискән, донъяның ерендә лә, диңгеҙендә лә заманында штык атакаларына барып, ҡылыс менән аяуһыҙ сабышып хәтәр алыштар уртаһында йөрөгән ҡарт яугир артына сигенде… Дәһшәтле яуҙарҙа ҡандар йылға булып аға. Уларҙың еҫен ел тарата, йылғаларын ямғыр йыуа, ҡарҙар ҡаплай, ер үҙенә йота… Ниһайәт, яуҙарҙағы ҡырылыш ысын мәғәнәһендә үлтереш, ойошторолған ҡәҙимге үлтереш булыуға ҡарамаҫтан, уны "вәхшилек" тип түгел, ә саҡ ҡына шымарта биреп "һуғыш" тип атайҙар. Хатта фәлсәфәүи аҡларға тырышып "һуғыш – сәйәсәттең дауамы" тип ебәрәләр…

Һалдаттар хырылдашып йоҡлайһы урынға ҡәбер тынлығы хөкөм һөргән, ҡан еҫе урғыған, Әжәлдең төпһөҙ, ҡараңғы тамағы ише күңел ытырғандырып, өңрәйеп ҡараған ҡот оҫҡос казарманы комдив үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр күрҙе…

## *Интернатта*

Тыуған ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәп кенә булғанға күрә, беҙ, Юлдаш балалары, артабан күрше Батыр һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә интернатта ятып уҡый торғайныҡ. Әле нисектер, ул саҡ Батырҙа матур күңелле халыҡ йәшәй ине. Өҫтәүенә, мәктәп директоры хөрмәтле Фәсхетдин Фәхретдин улы Зәйнәғәбдинов (күптән инде мәрхүм, ауыр тупрағы еңел булғыры) ағайыбыҙ сығышы менән беҙгә ауылдаш та булғас, үҙебеҙҙе ят ауылда бик үк сит итеп тойманыҡ.

"Интернат" тип, бәлки, яңғырауыҡлы ла атағанбыҙҙыр. Өфөләргә китеп, әллә ниндәй ысын интернаттарҙа уҡып, каникулдарға ҡайтып танау күтәреп йөрөгән ҡайһы бер ҡыу баштар алдында мах бирмәй, "беҙ ҙә интернатта уҡыйбыҙ" тип ебәрер инек.

"Интернат" тигәнебеҙ эстән урталай таҡта менән генә бүленгән ҙур ғына йорт ине. Бәләкәйерәк яғында дүрт-биш бөртөк ҡыҙ, оло яғында эреле-ваҡлы ете-һигеҙ малай көн иттек. Ике ауыл бер колхоз булғанға күрәлер, ашау-эсеү, түшәк-фәлән, яғыулыҡ менән тулыһынса колхоз тәьмин итте. Бер уҡыу йылына ул саҡтағы аҡса менән ете-һигеҙ һум ғына түләйбеҙ ҙә, әйҙә йәшә лә йәшә, уҡы ла уҡы! Биштән башлап һигеҙҙе бөтөргәнсе тиҫтә ярымлап бала, бер ғаилә ағзаларылай, шул бәләкәй генә ояла буйтым ғүмер һөрҙөк. Ғәмһеҙ бала сағыбыҙҙың иң яҡты, иң саф, иң бәхетле йылдары шул интернатыбыҙҙа үтте.

Уҡытыусыларҙан бик тә уңдыҡ. Хәҙер күптәре фани донъяны ҡалдырған инде. Исемдәрен ҡәҙерләп күңел түребеҙҙә йөрөтәһе генә ҡалды… Уҡытыусыларҙан тыш беҙҙең, интернат балаларының, тағы бер ятраҡан кешеһе бар ине. Ул – интернат тәрбиәсеһе Мөстәҡим ағай Хәлитов. Урта буйлы, егеттәрҙәй ыҡсым кәүҙәле, етеҙ хәрәкәтле, зәңгәр күҙле, алсаҡ һәм алһыу йөҙлө, етендәй ерән сәсле, тыныс холоҡло, ипле һүҙле, үҙе етди, иғтибарлы, тыйнаҡ һәм йыйнаҡ, бер үк ваҡытта талапсан да, мөләйем һәм күркәм кеше ине ул. Дүрт йыл уның тәрбиәһе аҫтында йәшәп, кемделер әрләгәнен, кемгәлер ҡысҡырғанын, ниндәйҙер педагогик язалар менән ҡурҡытҡанын, ата-әсәләргә хәбәр итеү менән янағанын һ.б. хәтерләмәйбеҙ.

Шулай, балаларҙы әрләмәй, күҙ ҡарашы менән генә тыңлата алыуға һәләтле уҡытыусылар менән тәрбиәселәр бар. Улар – Хоҙай биргән педагогтар. Минең тәүге уҡытыусым, ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерле Йомабикә апай Усманова шундайҙарҙың тәүгеһе булһа, Мөстәҡим ағай Хәлитов икенсеһе ине…

Кисен арып, асығышып мәктәптән интернатҡа йүгерешеп ҡайтып инеүебеҙгә, аш бешереүсе Орҡоя Әлемғужина инәйебеҙ бешергән тәмле-тәмле ҡайнар аштар беҙҙе көтөп тора. Шаулашып-көлөшөп тамаҡ туйҙырып бөтөүебеҙгә

әкрен баҫып, йылмайып Мөстәҡим ағайыбыҙ килеп инә. Шып-шым булабыҙ. Ҡурҡыштан түгел, тәрбиәсене хөрмәт итеүҙән. Өҫтәл янына ултырып, беҙгә, малайҙарға, өндәшмәй генә күҙ йөрөтөп сығыуына, уҡыу әсбаптарыбыҙҙы тотоп, шым ғына өҫтәл янына йыйылабыҙ. Ике-өс сәғәтлек дәрес әҙерләү мәле башлана. Кем нисек шөғөлләнгәне ағайҙың күҙ уңынан ысҡынмай. Ул бер ҡасан да “Ултыр! Эшлә!” тигән ҡолаҡ ярғыс күрһәтмә бирмәне. Йүгәнһеҙләнә башлаған малайҙарҙан тәүҙә ниндәй өй эше бирелгәнлеген һораша, шунан һуң эшләп бөтөүе-бөтмәүе менән ҡыҙыҡһына. Бөтөрһәң, дәфтәреңде күрһәт. Бөтөрмәһәң, дәрес әҙерләргә нимә ҡамасаулауын белгеһе килә. Ниндәйҙер хәйлә табып мутлашһаң, икенсе малайҙарҙың ярҙам итеүен талап итә. Үҙ-ара ярҙамлашыу принцибы. Ошонан һуң хәйләләшеп, ҡул ҡаушырып ултырып ҡара инде!.. Мөстәҡим ағай барында беҙ эргәбеҙҙә атай күҙәтеүен тоя инек. Шуғалыр ҙа киске дәрес әҙерләү ваҡыты “таш тояҡтар” өсөн иң тәртипле ваҡытыбыҙ була торғайны. Мөстәҡим ағай махсус педагогик белемле кеше түгел, нигеҙҙә колхоз хисапсыһы ине. Ә ниндәй ҙә педагогик тактҡа, әҙәпкә, түҙемлеккә, балаларға ҡарата матур мөнәсәбәткә эйә ине! Бөйөк Ҡытай философы Лао Цзының “Аҡыллы кешелә белем булмаҫ, белемлеһендә аҡыл булмаҫ” тигәне уның миҫалында раҫ сыға түгелме?..

Дәрестәр әҙерләнеп бөтөүгә, дежур малай иҙән уртаһына йылы һыу һалынған тас килтереп ҡуя. Ағайыбыҙ аяҡтарыбыҙҙы йыуҙыртып, юрған аҫтарына инеп ятҡанға тиклем ҡарап ултыра ла сәғәт теп-теүәл ун берҙә: “Отбой, балалар! Йоҡлағыҙ!” – тип ҡайтып китә.

Ял көнө йәкшәмбенән тыш, беҙ һәр иртәлә ағайыбыҙҙың: “Балалар, тороғоҙ!” тигән баритонына уяна инек. Команданы ишетеү менән һуҙылып-мыҙылып ятыу юҡ, ырғып тороп кейенәбеҙ ҙә гимнастикаға сығабыҙ. Кәрәкле күнекмәләрҙе Мөстәҡим ағай саф алдында үҙе күрһәтеп тора. Беҙ уға эйәреп яһайбыҙ. Бер йылды, яңы уҡыу йылы башланып торған тәүге көн иртәһендә, гимнастика башланғас, ағай әҙгә генә туҡталып, минең ике туған һеңлемә:

– Ғәшүрә, һиңә ике ҡуллап яһарға кәрәк, – тине лә артабан дауам итте. Уҡыуға тәүге тапҡыр килеп, Мөстәҡим ағайҙың гимнастика үткәргәнен беренсе тапҡыр күргән Ғәшүрә, күнекмәләрҙе ағайҙың үҙе кеүек һыңар ҡул менән генә эшләргә кәрәк, тип уйлаған шул.

Эйе, ул һыңар ҡуллы ине, һул ҡулын һуғышта ҡалдырып ҡайтҡайны. Беҙ, бәлки, шуның өсөн дә уны уҡытыусыларға ҡарағанда ла нығыраҡ хөрмәт иткәнбеҙҙер. Дәрес әҙерләүҙәр ҡыҫҡараҡ кистәрҙә, иртәгә ял көнө тигән шәмбе кисендә, беҙҙең үтенес менән фронт хәтирәләрен һөйләр ине. Бына ҡайҙа ине ул малайҙарҙың һушын ала торған хикәйәләр! Ҡайҙа ул шаярыу?! Шылт та иткән юҡ! Ҡолаҡтар ҡарпайған, күҙҙәр таҫрайған, ауыҙҙар асылған! Ағайҙың ауыҙынан сыҡҡанды йотоп ҡына ултырабыҙ.

Беҙ, интернат малайҙары, мәктәп китапханаһы менән генә риза булмай, ауыл китапханаһына йөрөп китап уҡырға әүәҫләнеп алғайныҡ. Кемебеҙҙер берәү ниндәйҙер китап алып ҡайтып уҡып сыға ла ҡалғандарҙы шуның йөкмәткеһен һөйләп аптырата. Тегенең урыҡ-һурыҡ хикәйәләрен тыңлайбыҙ-тыңлайбыҙ ҙа, ахырҙа, ишеткәндәр менән мөрхәтһенмәй, шул китапты сиратлап үҙебеҙ алып уҡыйбыҙ. Степан Злобиндың “Салауат Юлаев” романы менән дә шулай килеп сыҡты. Кемгәлер Салауаттың иптәштәре менән бөркөт ауына йөрөүе, кемгәлер яңғыҙы хәнйәр менән айыу үлтереүе, кемгәлер Бохайырҙың төнгө ҡараңғыла әйттерелгән кәләше Әминә тип... кәзәне ҡосаҡлау мәҙәктәре оҡшаһа, мине, башҡорт халҡының данлы үткәненә һоҡланыуҙан тыш, Юлай ҡарттың табын

ҡороп, йәштәргә Рәсәй армияһы составында алыҫ-алыҫ илдәргә яу сабыуҙарын һөйләгән эпизоды йәлеп итте. Фронт хәтирәләрен һөйләп ултырған сағында мин Мөстәҡим ағайҙы Юлай ҡартҡа оҡшата торғайным. Ул – Юлай Аҙналы, ә беҙ – Юлай ҡарт йорто егеттәре! Бына бит ҡайҙарға киткән уйҙары бот буйы хәстрүштең! Беҙҙең быуын фронтовик улдарында һәм ҡыҙҙарында һуғыштың утын-һыуын кискән атайҙарыбыҙ менән ғорурланыу хисе көслө була торғайны. Донъяла иң көслө ил – беҙҙең ил, һәм уның ҡаһарман яугирҙары – мотлаҡ беҙҙең атайҙар! Эргәбеҙҙә атайҙар булғанда беҙ тышҡы дошмандарҙан ғына түгел, төнөн урамда ен-пәрейҙәрҙән дә ҡурҡмай инек…

Ғәмһеҙ ғүмер башыбыҙҙың һил кистәрендә һуғыш ғәрәсәттәре тураһында һөйләгәндә Мөстәҡим ағай үҙе ниҙәр кисерҙе икән? Һуғыш һөрөмөнә сәсәгән йәшлек йылдары өсөн әсенеүҙәре яңырмағанмы? Меңәрләгән саҡрымлы яу яландарында ятып ҡалған иптәштәрен һәм дуҫтарын иҫләп бәғере өҙгөләнмәгәнме? Аҙаҡҡы сиктә яраланып, госпиталдәрҙә тән һәм йән ғазаптары уҙғарыуҙарын иҫләп күңеле яңынан иңрәмәгәнме? Тиҫтәләрсә миллион ғәзиз баштарҙы харап иткән, ир-арыҫландарын ғәрип-ғөрәбә яһаған; миллиондарса әсәләрҙең һәм сабыйҙарҙың әсе күҙ йәштәрен түктереп етем ҡалдырған; миллионлаған алма кеүек аҫыл ҡыҙҙарҙы мөхәббәттәренән мәхрүм итеп, түлле килеш түлһеҙ ҡалдырған, тағы лә әллә ниндәй һәм йәнә әллә ниндәй, билдәле һәм билдәһеҙ бихисап афәттәр килтергән ҡәһәрле һуғыштың ниҙән килеп тыуыуы, кемдәр арҡаһында сығыуы, барыһы өсөн бөтәһен дә үҙ елкәһендә күтәргән күндәм һәм түҙемле халыҡ алдында бер көн килеп кемдәр иҫәп-хисап тоторға тейешлеге тураһында уйланғанмы?

Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ, тип юҡҡа әйтелмәгән. Ул һөйләгәндәрҙең күбеһе ғәмлерәктәребеҙҙең күңел дәфтәренә юйылмаҫлыҡ булып уйылып яҙылғандыр. Әлеге ҡиссабыҙҙы Мөстәҡим ағай ул саҡ: “Японлар бер төндө беҙҙең тотош бер заставабыҙҙы һуйып киттеләр”, – тип башлағайны. Ярты быуатлап ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, хөрмәтле ағайыбыҙҙан ишеткәндәр ҡағыҙға төшөрөүҙе даулап тынғы бирмәне…

90-сы йылдар башынан, яңы осор башланыу менән, Рәсәй тарихын теләһә кем һәм кем нисек теләй – шулай әллә күпме “тарих” яҙҙы. Бөгөн килеп, балаларҙы мәктәптә ниндәй дәреслек буйынса уҡытырға, аҙаҡ юғары уҡыу йорттарына инеү имтихандарын ниндәй дәреслек буйынса тапшыртырға белмәй ҡаңғырышалар.

* * *

Мөстәҡим ағайҙың Алыҫ Көнсығыш иҫтәлектәрен төплөрәк аңларға теләү маҡсатынан мин өҫтәлмә әҙәбиәт менән таныштым. Әйтергә кәрәк, совет осоронда яҙылған демогогия ла, һуңғы ун-ун биш йыл эсендә теләһә ниндәй шарлатан яҙған уйҙырма ла түгел, ә дөрөҫлөккә ныҡ яҡын торған (абсолют хәҡиҡәт бер ҡайҙа ла юҡ, тиҙәр), үкенескә ҡаршы, киң ҡатлам уҡыусыһына аҙ билгеле мәғлүмәттәрҙе ҡулландым. Шуларҙан һуң “Тыуған ил алдында изге хәрби бурысын үтәүсе кавалерист Мөстәҡим Хәлитов ул саҡ үҙенең ниндәй ҙә ҡатмарлы, буталсыҡ, хәүефле һәм әшәке хәрби-сәйәси зонала хеҙмәт итеп йөрөгәнен үҙе аңланымы икән?” тигән һорау тыуҙы. Уның иҫтәлектәрен һалдат күҙлегенән генә ҡарап бәйән итеүҙән ғәҙәти, тоҡос очерк тыуар ине. Шуға күрә лә мин, фажиғәле ваҡиға сюжеты менән бер рәттән, хикәйәне тулыраҡ аңларға һәм баһаларға ярҙам итеүсе параллель тарихи, хәрби-сәйәси ярҙамсы сюжет ҡулланыуҙы хуп күрҙем.

**Нигеҙҙә ике сығанаҡҡа таянылды:**

*Беренсеһе – Н. Н. Голованова, А. А. Егоров, В. П. Подольников. История войн. В 3-х томах. Ростов/Дон., изд-во “Феникс” 1997. (На основании “Всеобщей военной истории новейших времен” Н.С.Голицына, 1877; “Военной энциклопедии” коллектива военных историков; “Истории военного искусства” Е. А.Разина; “Советской военной энциклопедии” коллектива авторов);*

*Икенсеһе – коллектив авторов Лондонского, Кэмбриджского, Оксфордского, Огайского, Анкарского университетов. (Атлас Всемирной истории. Лондон, 2001.; Перевод на русский язык. ЗАО “Издательский Дом Ридерз дайджест”, Москва, 2003).*

*Хәл-ваҡиғалар Рәсәй, Корея, Маньчжурия, Япония (Корея 1910 йылдан Япония составында) сиктәре һәм мәнфәғәттәре киҫешкән урында бара.*

## *Ҡояш ҡалҡҡан илдә*

**Автор фаразы**

**Беҙҙең илаһи мәмләкәтебеҙ донъяның башы һәм муйыны, барса халайыҡтар уның ҡулы аҫтында. Яңыраҡ үҙҙәренең меҫкен йәндәр икәнлеген аңламаған, Көн батышынан килгән шаҡшы вәхшиҙәр башҡа халайыҡтарҙы тапап уҙҙы. Ниндәй ҙә оятһыҙ ҡылыҡ!**

**Айзава Сейшисаи. 1825 йыл.**

Борон замандарҙа… хатта ки бик борон замандарҙа!.. Яҡынса беҙҙең эраға тиклем 2000 йыл элгәре маньчжур батшаһы диңгеҙ ярында осар ҡоштарҙың Көн сығышына киткәндәрен күҙәтеп торғандан һуң ярандарына:

– Минеңсә, шул тарафтарҙа ниндәйҙер Ер бар кеүек. Юҡһа, ҡоштар ул яҡҡа тиктәҫкә генә осмаҫ, – тигән. – Сос егеттәр менән сая ҡыҙҙар кәмәләргә тейәлһендәр ҙә офоҡ арьяғына сәйәхәт ҡылып ҡайтһындар. Ҙур һыу уртаһында яңы ерҙәр тапмаҫтармы?

Хаким ихтыярын кисекмәҫтән үтәргә тотонғандар. Ҡыйыу йәштәр бихисап кәмәләргә тейәлешеп, сикһеҙ диңгеҙҙең билдәһеҙ киңлектәренә юл алған. Хаким китеүселәрҙе көндәр, айҙар, йылдар буйы көткән. Ҡайтмағандар... Ахырҙа, төңөлөп ҡуйған.

Сәйәхәтселәр ҡоштар осҡан яҡҡа, Көн тыуышына табан көн-төн йөҙгәндән һуң, балыҡтары ҡайнашҡан йылға-күлдәргә, емеш-еләкле хәтфә туғайҙарға, кейеккә бай ҡалын урмандарға, бейек-бейек тауҙар уратып алған, ямғырына ла, ҡарына ла бай, йылыһы ла, һалҡыны ла етерлек ғәжәйеп хозур утрауҙарға килеп төшкән. Хакимдар иҙеүенән тәкәттәре ҡороған сәйәхәтселәрҙең күңеленә яңы төбәк бик тә хуш килгән, һәм улар ошонда донъя ҡороп, ирәүәнләп мәңгелеккә йәшәргә ҡалған. Күп быуаттар ишәйеп, үҙ батшалыҡтарын төҙөп, ғүмер һөргәндәрендә утрауҙарға сит-яттарҙан берәү ҙә килеп аяҡ баҫмаған. Был тарафтарҙа хөр рухлы, бәхетле дәүләт йәшәгәнен бер кем дә белмәгән. Утрауҙағылар сит ерҙәр менән аралашырға үҙҙәре лә атлығып тормаған… Япон халҡының һәм дәүләтселегенең килеп сығыуы тураһында ошондай легенда йәшәй.

Үҙеңде күршеңә танытҡың килһә, һыйла, унда ла танымаһа, туҡма, тигән башҡорт әйтеме бар. Япондар кореялыларға күпме дәрәжәлә ҡунаҡсыл булғандарын әйтеү ауыр, мәгәр беҙҙең эраның 360 һәм 662-663 йылдарында Кореяға баҫып ингәс, донъяла “япон” тигән халыҡ барлығына тиҙ төшөнгәндәр. Тарихты үҫтерелгән игендәр, тыуҙырылған йырҙар менән түгел, ә һуғыштар, йәғни дәүләт кимәлендә ойошторолған үлтерештәр, талауҙар, емереүҙәр, яндырыуҙар…

икенсе төрлө әйткәндә, быуаттар буйы бөртөкләп төҙөлгән донъяны бер мәл эсендә ҡыйран тартыу менән билдәләргә күнеккән тарих фәнендә Япония йылъяҙмаһы ошо ике яуҙан йәки уның тәүге императоры Дзимму (600 йыл) идара иткән осорҙан башлана. (История войн. Т.1., с. 284).

869 йылда Корея диңгеҙ юлбаçарҙары Японияға барымта менән килә. Артабан, XIII быуат башына тиклем, Япония – тыныс һәм сәскә атыусы ил. Дөрөç, ил эсендә ваҡыты менән фетнәләр ҡубып тора, кенәзлектәр һәм төрлө кландар араһында ҡайһы берҙә ҡан ҡойғос ыҙғыштар сыға. Үҙ-ара һуғыштар, нигеҙҙә, өс клан: Тайра, Минамото, Фудзивара араһында бара. 1185 –1199 йылдарҙағы һуғыштарҙа Миномото Еритомо кланы өçтөнлөк алыуға ирешә, ул бөтә Японияла үҙенең хәрби диктатураһын урынлаштыра. Үҙен беренсе сёгун (баш командующий) итеп иғлан итә. Илдә сёгундар идараһы һәм сёгунаттар осоро башлана.

Япония XIII быуат башында беренсе тапҡыр сит дәүләт тарафынан етдиябырылыуға дусар була. Ҡом-таш араһында тыуып үçкән Монголияның берҙәнбер адмиралы, Сыңғыҙ хан вариçы Хубилай кореялылар флоты менән ике тапҡыр Японияға һөжүм итә, ике яуы ла уңышһыҙ тамамлана. Шулай ҙа монголдар 1274–1381 йылдарҙа баçып инә алғандар.

1592–1598 йылдарҙа япондар үҙҙәре ҡытайлылар яҡлауы менән файҙаланған Корея еренә баçып инә. 1592 йылда Ҡытайҙың үҙен өлөшләтә һәм Пекинды алалар. Япон императоры йорто ваҡытлыса Пекинға күсеп тора.

1603 йылда ил менән идара итеүсе Токугава сёгунаты дәүере башлана. Улар хакимлығы һәм династияһы сёгундар тәртибе ҡолатылғансы, XIX быуат уртаһына тиклем, дауам итә. Ошо уҡ йылда ҡулдары ҡысығанда ара-тирә һуғышып ала торған берҙән-бер яҡын күршеләре Корея менән солох төҙөлә. Токугавалар ҙа, кореялылар ҙа был солохҡа Токугава идараһы ҡолатылғансы йәки ике быуат ярым буйына тоғро ҡалалар. Ошо уҡ токугавалар 1606–1614 йылдарҙа үҙ-үҙенә бикләнеү сәйәсәте үткәрергә тотоналар. 1638 йылға тиклем Англия, Испания сауҙагәрҙәре, ил эсендә болалар ҡуптарырға аçтан ут һалыусы португалиялылар, теләһә ниндәй миссионерҙар һәм христиандар илдән һөрөлә. Сөнки болалар һәр саҡ христиан лозунгылары аçтында үтә. Хирадела Голландияның, Нагасакиҙа Ҡытайҙың берәр генә сауҙа базалары ҡалдырыла. Японияның үҙ-үҙенә бикләнеү сәйәсәте Көнбайыш ижад иткән бик күп һәм туҙға яҙылғандан, бигерәк туҙға яҙылмаған теләһә ниндәй уйҙырмаларға күмелгән. Токугава сёгундары идара иткән дәүерҙә Япония тышҡы донъя менән теләһә ниндәй мөнәсәбәттәрҙән тулыһынса тип әйтерлек баш тартып, изоляцияла йәшәй. Ил эсендә тыныслыҡ хөкөм һөрә.

Һиндостанға, Һинд океаны бассейнына, Көнсығыш Азияһына европалылар XVII быуат башында йышлай. Голланд ҡәүеме 1601–1603, инглиздар 1608, 1666 йылдарҙа пәйҙә булдылар. Һәр береһе үҙ миссияһын сауҙа мөнәсәбәттәре урынлаштырыу һылтауы менән башлай ҙа, китә артабан талау, баçып алыуҙар, ҡаршылыҡ күрһәткән урындағы халыҡтарҙы аяуһыҙ ҡырыу, бер үк ваҡытта йоғонто мөхите өçөн үҙ-ара өҙөшөүҙәр.

1643–1646 йылдарҙа Якутск бастругынан сыҡҡан Василий Поярков етәкселегендәге урыç экспедицияһы Рәсәй тарихында беренсе тапҡыр ҡытайҙар менән осрашты. Рәсәй, Көнбайыш кеүек, тәүҙә сауҙа мөнәсәбәттәре урынлаштырып ваҡлашып торманы. 1653 йылда Ҡытай империяһы биләмәләренә асыҡтан-асыҡ яу менән китте лә барҙы. Һәм... маньчжурҙарҙан ҡотола алғандары кире ҡайтты... (1800 –1870 йылдарға Һиндостан, Һинд Ҡытайы өлөшләтә, Австралия менән Океания тулыһынса тиерлек Көнбайыш экспансияһы аçтында ҡалды.)

Ошо хәлдәрҙе Японияла белмәй, күрмәй ултырҙылармы икән? Азия Европа колонияһына әйләнеп бөтөп барған бер мәлдә Алыҫ Көнсығышта, бәлки, берҙән-бер Япония үҙ-үҙенә бикләнеү сәйәсәте хаҡына бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап ҡала алғандыр? Үҙ-үҙеңә бикләнеү, бәлки, ул саҡ Япония өсөн алдан күрә белеүҙең бер сағылышы булғандыр? XII быуат аҙағынан XVII быуат башына тиклем сёгунат системаһы, үҙенең иҙеүсе асылына ҡарамаҫтан, йәмғиәт үҫеше өсөн идараның тәбиғи һәм тарихи формалашҡан ысулы булһа, XVII быуат башынан Азия ҡитғаһында Көнбайыш колонизацияһына ҡаршы зарури иммунитетҡа әйләнгәндер?

1850 –1860 йылдарҙа Көнбайыш егеттәренең түҙемлеге шартланы: бөтә донъяға тиерлек хужа булып ултырғандарында ҡыҫыҡ күҙле шул бер Японияның “холоҡһоҙлоғон” нисек кисермәк кәрәк?! Һәм киттеләр былар ҡыҙып, һай, киттеләр! Америка, Франция, Голландия, Англия эскадралары Япония порттарын, яр буйы ҡалаларын дөбөр-шатыр артиллерия утына тотто: “Ас порттарыңды сауҙа өсөн, и баста!” Үҙ сиратында Япония ла ут менән яуап бирә, ләкин 1856 йылда барыбер һөжүм итеүсе илдәр менән, шул иҫәптән Рәсәй менән дә, сауҙа килешеүе төҙөргә мәжбүр була. Японияны утҡа тотоуҙа ҡатнашырға Рәсәйҙең форсаты булмай. Ул был ваҡытта Маньчжуриянан бөгөнгө Приморье крайын, Амур өлкәһен тартып алыу, ундағы муньчжурҙарҙы Маньчжурия төпкөлөнә департациялау, Владивосток портына нигеҙ һалыу менән мәшғүл.

Интервенциялар һәм аслыҡ илдә болалар, баш күтәреүҙәргә килтерә. Шуны ғына көтөп торған Көнбайыш егеттәре үҙҙәренең һыналған һәм яраҡкан кәсептәренә – болғансыҡ һыуҙа балыҡ тоторға керешә. Асыҡлабыраҡ әйткәндә, французлар Токугава режимына, инглиздар император яҡлыларға ярҙам итәләр. Һөҙөмтәлә 1866 йылда Токугава режимы ҡолай, ил тарихында ҡатылығы һәм рәхимһеҙлеге сегундарҙан бер нәмәһе менән айырылмаған император идараһы яңынан башлана. Быға тиклем Япония бай, халҡы ишәйә барған ил булыуға ҡарамаҫтан, хәрби йәһәттән ул Көнбайыш державаларынан күпкә ҡалыша. Пушка уттары менән порттарын астырыу Көнбайыш державаларының Японияға ҡарата экспансияларының башы ғына ине. Был хәлде В.И. Ленин ҡарап торһа, мотлаҡ: “Промедление смерти подобно”, – тиер ине. Япония императорҙары ла, күрәһең, Лениндан наҙаныраҡ булмағандыр, улар илде кисекмәҫтән реформалар һәм модернизациялар юлына баҫтыра. Император Муцухито Англиянан ашығыс ярҙам ала башлай. 1850 –1920 йылдар арауығында Япония үҙ-үҙенә бикләнеп йәшәүен туҡтата, һәм һөҙөмтәлә ул донъяның иң көслө дәүләттәре рәтенә инеүгә өлгәшә. Көнбайыш державаларының Японияға өҙләкһеҙ баҫымы, уны үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланырға тырышыуҙары илдә феодаль ҡоролоштан тиҙерәк арынырға, илдең ғәйәт ҙур мөмкинселектәрен тиҙерәк файҙалана башлауға көслө этәргес була. Япония бойондороҡһоҙлоғона янаған державалар үҙҙәре үк Японияның үҫеше өсөн модель булып хеҙмәт итә. 1915–1920 йылдарҙа Англия менән АҠШ ярҙамынан көсәйгән Япония үҙе милитаристик дәүләткә әйләнә. XIX быуаттың икенсе яртыһында уҡ әле Япония иҡтисадының көслө, үҙенсәлекле яҡтары үҙен белгертә: йылдам үҫеүсе ауыл хужалығы; баҡыр һәм тимер рудалары, ташкүмер булыуы; ғалимдарҙың Көнбайыш фәне һәм техникаһы ҡаҙаныштарын өйрәнеүе; сауҙа һәм кредит үҫеше һ.б.

Япония өлгәшкән “иҡтисад мөғжизәһе” сере – тәү сиратта илдең һәм милләттең көслө сифаттарын оҫта файҙаланыуҙа. 1872 йылда феодаль йөкләмәләрҙе аҡсалата түләүгә алмаштырыу үҙәк хакимлыҡ маҡсаттарына үтә лә ярашлы була. Ил үҫешен ныҒыта барып, хөкүмәт ер һалымдарынан килгән килемдәрҙе заводтар, фабрикалар, бигерәк тә стратегик әһәмиәткә эйә сәнәғәт тармаҡтарын

төҙөүгә йүнәлтә. Был саралар, үҙ сираттарында, металлургия һәм хәрби заводтар, туҡымалар етештереүсе фабрикалар продукцияларын импортлауҙан ҡотолорға ярҙам итә. Сәнәғәт үҫешендә субсидиялар, һалым ташламаларын файҙаланыу юлға һалына.

Хөкүмәт дәүләт менән идара итеү системаһында ла реформалар үткәрә. 1872 йылда ер феодалдарҙан һатылып алына, уны һатыу-һатып алыу рөхсәт ителә. Бер үк ваҡытта йәмғиәттә социаль ҡатламдар өҫтөнлөгө бөтөрөлә. Феодаль ғәскәр дөйөм хәрби бурыс үтәүсе хеҙмәткәрҙәр армияһы менән алмаштырыла. Үҙеңдә бик ҙур хакимлыҡ мөмкинселектәре ҡалдырһа ла, император конституция иғлан итә. 1872 йылда халыҡ мәғарифы системаһы һәм, Франция менән Германия өлгөһөн файҙаланып, хоҡуҡ нигеҙҙәре булдырыла. Оҙаҡламай Япония үҙенсәлекле индустриализация өлгөһөнә әүерелә. 1918 йылға сеймалды күпләп импортлап, әҙер продукцияны экспортлап Ҡытай, АҠШ һәм башҡа күп илдәрҙең баҙарҙарына бәреп инә. Японияның тышҡы сауҙаһында миллион иеналарҙа 1872–1882 йылдарҙа экспорт 30,3, импорт 32,6 тәшкил итһә, 1918–1922 йылдарҙа экспорт 1779,9, импорт 1936,5 миллион иеналарға етә. 1871 йылда әйләнешкә индерелгән иена тәүге осорҙа долларға ҡарата курсында бергә-бер нисбәте менән алмаштырыла. 1894 йылда ике иенаға бер доллар тура килеп, 1931 йылға тиклем шулай дауам итә. Ошо дәүерҙә Японияның тышҡы сауҙа структураһы ҡырҡа үҙгәрә: тәүҙәрәк әҙер продукция импорттың яртыһын, экспорт 7,2 процентын ғына тәшкил итһә, 40 йылдан һуң әҙер продукция экспортта 40 процент, ә импорт 15 процент тәшкил итә. Ошо оло үҙгәрештәр һөҙөмтәһе булып ил халҡы һан яғынан үҫә. 1873 йыда япондар 35 миллион булһа, 45 йыл эсендә, йәғни 1918 йылға 20 миллионға арта!

Күреүебеҙсә, “яҡты киләсәк”кә барыу өсөн япондарға илдәренең аҫтын өҫкә әйләндереп “Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы”н үткәреп йөрөү зарурлығы булмаған.

Мотлаҡ япон реформалары һәм модернизациялары тип нарыҡламағанда ла, XX быуат аҙағында беҙ ҙә үҙебеҙҙә шуларға оҡшашыраҡ нимәләрҙер эшләргә тырышып ҡараныҡ. Тик ул “нимәләр”ҙән нимәләр килтереп сығарғаныбыҙҙы бер кемгә лә әйтмәйбеҙ...

## *Н-сы заставала*

Комдив Добрягин полковниктың нурһыҙ, ҡырыҫ ҡараштары менән яңынан осрашҡас, сараһыҙҙан эскә үтте. Төпкә табан бер нисә аҙым атлағас та тайып йығыла яҙҙы. Эргәһендәге ике эйәрсене тотоп ҡалды. Иҙән ҡатҡан, ойоған һәм әле һаман кибә алмаған ҡан күләүеге менән ҡапланғайны.

Полковник, ике яҡлап урынлашҡан өсәр ҡатлы нарҙар бағаналарына тотона-тотона, әкрен һәм һаҡ баҫып, төпкә китте. Комдив, исмаһам, ниндәй ҙә булһа ауыр яралыны, һушһыҙ булһа ла терене, көсһөҙ генә булһа ла тын алғанды күрергә теләп, уңлы-һуллы ҡараны. Берәйһенең ыңғырашҡанын ишетергә теләп, тынлыҡҡа ҡолаҡ һалды. Кем булһа ла тауыш биреүен талап итеп ҡысҡырғыһы килде. Тик йәшәү билдәләре булған кәүҙәне күрергә теләге артҡан һайын, шарран-ярран ятҡан мәйеттәр мыҫҡыллы битарафлыҡ, шомло ҡараңғылыҡ, рәхимһеҙ тынлыҡ менән яуап бирҙе. Комдив бер нисә мәйет янында әҙгә генә туҡталды. Зәғиф ут яҡтыһында йөҙҙәренә текләп ҡараны, беренсеһенең һалынып торған ҡулын күтәреп һалды, икенсеһенә мәғәнәһеҙ хәстәрлек күрһәтеп, төшөргә торған юрғанын рәтләп япты. Ә застава командиры Сенькин, харап ителеп олаҡтырылған ышаныслы мөриттәрен юллап ҡараңғы йәһәннәм тарафтарын гиҙгән хәсрәтле пәйғәмбәр ише, ҡоромланыуҙан яҡтыһы зәғифләнгән

шәмен башы осона күтәреп атлай ҙа атлай... Казарма төбөнә барып еткәс, ул боролоп комдивты көттө.

Комдив һуңғы нарҙағы һуңғы һалдат мәйетенә оҙаҡ ҡарап торҙо. Уның да ҡул-аяҡтарын рәтләп һалды, кәүҙәһен турайтты. Үҙ үлеменә үҙе ышанмағандай әле һаман тултырып ҡараған шар асыҡ күҙҙәрен йомдорҙо...

Ҡатиллыҡ, йыртҡыслыҡ, яуызлыҡ, әшәкелек һалдатты мыҫҡыл иткән, мәсхәрә ҡылған! Йоҡлаған түшәгендә этлек һәм мәкерҙән йәндәре ҡыйылған яугирҙар мөхите Әжәлдең ҡанлы туйын яу яландарының ғәҙел алышында күреп өйрәнгән комдивтың, тәжрибәле ҡарт һуғыш бүреһенең, ҡурын алды... Яугир мәйете өҫтөндә бысраҡ тантана бейей! Көслө, аяуһыҙ һәм мәкерле дошман алышҡа саҡыра...

Комдив тағы сайҡалып китте, аяҡтары тайыуҙан түгел... Ә полковник башын баҫып, утын күтәреп атлай ҙа атлай. Ишеккә табан түгел, мәғәнәһеҙлеккә, өмөтһеҙлеккә, йәһәннәмгә, мәңгегә бәхетһеҙ мосафир булып, ҡотолғоһоҙ һәләкәтенә... баҡыйлыҡҡа юл алды...

Застава командиры кабинетына кергәс тә, Добрягин кисекмәҫтән араҡы килтерергә ҡушты. Берәрҙе мул ғына итеп һалып эскәс, телдәре сиселәһе урынға, икеһе ике яҡҡа ҡарап бер килке һөйләшмәй ултырҙылар. Ниһайәт, Сенькин алпан-толпан баҫып комдив алдына килеп теҙләнде. Дөрөҫөрәге, әзмәүер кәүҙәһе гөрһөлдәп, туғарылып төштө.

– Михаил Елизарович... Ат мине... Михаил Елизарович! Ишетәһеңме?!. Мине үлтер!.. Исмаһам, ҡоралымды кире бирергә бойор. Һиңә ялынам.

Әсенеүен, бәғере теленеүен төпкә йәшерергә тырышҡан Добрягин, көс-хәл менән тыныс күренергә тырышып:

– Ашыҡма-а, – тине. – Атырҙар... Һинең менән минән һорамаҫтар... Тор әле, ултырма ҡаршымда йәнемде көйҙөрөп... Тор, тинем бит!.. Рәхәт, атылалар ҙа ҡотолалар... Бик шәп булғас, яуап тоторға кәрәк. Төшөнәһеңме?! Яуап тоторға! Артыңдан теләһә нәмә сәйнәп ҡалмаһындар өсөн! Артабан теләһәң ни эшлә...

Комдив ҡараңғы тәҙрәгә ҡарап, полковник өҫтәлгә эйелеп йәнә бер аҙ тын ултырҙылар. Добрягин Сенькинға исем-шәрифе менән дә, хәрби дәрәжәһе менән дә түгел, бары тик сәйер тонда:

– Йә, нишләйбеҙ? – тине. Был тауышта янау ҙа, ҡурҡытыу ҙа, дәрәжә өҫтөнлөгө менән файҙаланыу ҙа ишетелмәне. Киреһенсә, кеше хәленә керә белеүен, бәләне бергә күтәрергә, яуапты бергәләп тоторға, яҙмыштарҙы уртаҡлашырға әҙерлеген аңлатыуы, шул уҡ ваҡытта килеп тыуған көрсөктән сығыу юлдарын күрмәүен, ниндәй ҙә булһа сара ҡыла алмауын тумалатыуы ла ине.

Полковник һорауҙы яуапһыҙ ҡалдырҙы, һүҙ алып барырға берҙән – теләге, икенсенән дарманы ла юҡ ине.

– Ну, килерҙәр!.. Килделәр, ти... Шунан? Тикшерерҙәр. Артабан – хөкөм. Трибунал! Ну, аттылар ҙа, ти... Шуларҙың нимәһе яңылыҡ та нимәһе ҡурҡыныс?.. Хәҙер, ана, меңәрләп ҡулға алалар, меңәрләп аталар. Бөтәһе лә халыҡ дошманы! – Комдив, ауыр көрһөнөп, пауза яһаны. – Икенсе берәр нәмә уйлап табаһы ине, Сергей Петрович... – Добрягин яндырайланып ҡысҡырҙы. – Икенсе берәр нәмә! Төшөнәһеңме?!

– Нимә уйлап тапмаҡ кәрәк, командир?! Нимә?! Яу яланын ташлап ҡасҡан ҡурҡаҡ йәнме ни мин?.. Илен һатҡан хыянатсы булһам! Тиңһеҙ яуҙа ғәскәрен ҡырҙырған белдекһеҙ командирмы! Ундайҙарҙың барыһына ла статья бар, ә миңә?..

– Борсолма, табырҙар!

– Борсолмайым, ҡурҡмайым. Шулар рәтенә генә китеп барһам, һай, анһат

булыр ине. Йөҙ тапҡыр трибуналға бирегеҙ, йөҙ тапҡыр атығыҙ. Миңә барыбер әҙ!.. Закондан алда минең үҙ хөкөмөм бар – намыҫым хөкөмө... Йомһам да, асһам да күҙ алдымда тик торалар. Минең малайҙарым!.. Шаян һәм уйсандар, тәрбиәлеләр һәм ата шайтандар, оҙондар һәм тәбәнәктәр, егәрлеләр һәм ялҡауҙар... Әллә кемдәрҙең ғәзиз балалары...

– Хистәргә бирелер ваҡыт түгел, Сергей Петрович.

– Көнөң әшәкеләрҙе хөкөм итә торған трибуналға ҡалып ултырһын инде! Беҙ һинең менән шундай егеттәрме ни, Миша?!

– Бөтә хикмәт бына шунда шул, – тине комдив һуҙып. – Һин – хата йәки енәйәт ҡорбаны түгел, ә провокация ҡорбаны. Аңла: дәүләт-ара провокация ҡорбаны! Усал һәм ғәййәр дошман һинең аша бөтә Ҡыҙыл Армияның битенә төкөрҙө, хур итте, намыҫын ергә һалып тапаны! Һине халыҡ-ара ойошмалар адвокаттары ғына аҡлай ала.

– Улар кемдәр? Коминтернмы? Милләттәр Лигаһымы? Бөткәндәр, ти, уларға мөрәжәғәт итеүсе һинең менән минең кеүек... – Комдив тороп, ишекте асып соланға күҙ һалды һәм, ишекте ныҡлабыраҡ ябып, кире килеп ултырҙы.

– Беҙҙе етәкселек башы аша ырғып Париждарға ла Лондондарға мөрәжәғәт итеп йөрөгәндәрҙе күргәнең бармы?.. Үҙеңде әйтеп тормайым, нәҫелеңде ҡоротторҙар! Нәҫелеңде! Комиссар еңел ҡотолдо.

– Һинән әле комиссар өсөн дә үс аласаҡтар. Күңелеңде киң тот! Беҙҙә һирәк хөкөм итәләр, ғәҙәттә, үс алалар. Ана, тегендәгеләр... – Добрягин төртә бармағын өҫкә күтәрҙе. – Үҙҙәренең булдыҡһыҙлыҡтары, томаналыҡтары өсөн, үҙҙәренең имгәктәр икәнлеген йәшерер өсөн теләһә кемде ғәйепләргә, теләһә кемде харап итергә әҙерҙәр... Тәк, Сергей, етте!.. Ә хәҙер әйт: һаҡсылар ҡайҙа булған? Постар ниңә сигнал бирмәгән? Йәшерен һағауылдар ниңә өндәшмәгән?

– Улар бөтәһе лә мәйет, Михаил Елизарович.

– Аҡылға һыймаҫлыҡ! Береһе булмаһа, береһе ниндәйҙер тауыш бирергә тейеш ине бит?

– Шулай... Үкенескә ҡаршы... Барыһы ла үҙ урындарында торған, тик уларҙы тауыш-тынһыҙ, тып-тын ғына юҡ иткәндәр. Бысаҡ бәреп алғандар. Шәхсән үҙем тикшереп сыҡтым.

Комдив оҙаҡ баш ҡағып уйланып ултырҙы, хатта баш ҡағыуын туҡтатырға онотҡанға ла оҡшап ҡуйҙы.

– Да, Сергей... Ябай ҡунаҡтар килмәгән беҙгә! Алдан уҡ күҙәтеп, өйрәнеп, ныҡлы әҙерләнеп килгәндәр. Ысын башкиҫәрҙәр! Йырлап торған тупһанан да казармаға оҫта үтә белгәндәр.

Полковник үҙен иҫәңгерәткән тетрәнеү шауҡымынан айный төштө, буғай. Һулышы йышайҙы, бит һәм күҙ тамырҙары тартышты, күҙҙәрен ҡурҡыныс таҫырайтып, сайҡала-сайҡала тирә яғына ҡаранды.

– Тереләй һуйҙылар! – тине, ауыр ыңғырашып. – Тереләй! Һай, тереләй! Ә бит яу яланында түгел!

– Провокация. Ысын провокация! Йотторҙолармы? Йотторҙолар!

Полковник кинәт комдивтың күкрәгенән алды.

– Михаил Елизарович! Бир миңә бер нисә эскадрон! Ғәрәсәт булып ябырылам! Кәбеҫтә урынына турайым! Ҡасып-боҫоп түгел! Үлтереүсе булып түгел! Яугир булып!

– Полковник!.. – Добрягин Сенькинды һелкеп урынына ултыртты. – Бына шулай!

Полковник күкрәк тултырып бер уфтанды ла башын тотоп, күҙҙәрен йомоп тынып ҡалды.

– Нимә һорағаныңды үҙең аңлайһыңмы? Ә, Сергей? – Комдив, полковниктың ҡыҙғаныс ҡиәфәтен күргеһе килмәй, ситкә ҡарап дауам итте. – Беҙ – сик буйы һаҡсылары, оноттоңмо?! Өҫтәүенә, үҙ еребеҙҙә түгел, ә бәхәсле, сит территорияла! Баянан бирле “провокация” тип ултырабыҙ. Бәлки, уларға, ысынлап та, һинең тығылыуың ғына кәрәктер? Шуны ғына көтөп тораларҙыр? “Полковник Сенькиндың ике эскадроны ҡанға ҡан үс алды” тимәҫтәр. “Совет ғәскәрҙәре Маньчжурияға бәреп инде” тип донъяға яр һалырҙар! Шуны уйланыңмы?.. Порт-Артур һиңә әҙ булдымы? КВЖД һуғыштары һиңә аҙ булдымы? Мин... Мин!.. – Комдив фекерен әйтеп бөтөрмәне. Әлеге хәлгә ярашлы мин һине кисекмәҫтән ҡулға алырға тейешмен, тимәксе ине, тик тыйылып ҡалды, дөрөҫөрәге, теле әйләнмәне. Быны эшләргә уның ҡулы бармаҫ ине, теләге лә юҡ ине. Ә кем белә, бәлки, ул полковникты һуңғы тапҡыр күрәлер?.. Ошо уй уны, хакимлыҡ күрһәтеп, сыпраңлауҙан тыйып тора. Упҡын ситендә ҡоларға торғанға бармағы менән төртөр ҙә, аҙаҡ, үҙен-үҙе ғәфү итә алмай, ғүмере буйы үкенер...

– Сережа... Бәлки, тим, берәр нәмә уйлап ҡарарбыҙ, ә?

– Кәрәкмәй. Бөтәһе лә ҡыйралды, түңкәрелде!

– Ә шулай ҙа...

– Маҙаһыҙлама. Тын ғына ултырғым килә.

– Йырып сыҡҡыһыҙ көрсөктәр булмай, тиҙәр.

– Минең хәлемде Аллаһы Тәғәлә генә үҙгәртә ала. Ә ул йыраҡ, ишетмәй.

– Минең башҡа бер фекер килгән кеүек...

Казарма яғында застава биләмәһенә гөжләп автомашина кереп туҡтағаны ишетелде. Бындай машиналарҙы ауыр ыңғырашыуынан, һәлмәк хәрәкәтенән танныйҙар. Хәҙер илдә бындай машиналарҙы танымаусылар аҙ.

Комдив тәҙрәгә ташланды, тышҡа бер секунд ҡына күҙ һалды ла, ҡырт боролоп:

– Ҡайҙан?! Нисек ишетеп өлгөргәндәр улар?! – тине, тыны бөтөп.

– Төкөр, Михаил Елизарович. Үҙем хәбәр иттем.

– Өлгөрмәм, тигәнһеңдер! Эх, Сережа!..

Полковник комдив күҙҙәренә тултырып ҡарап бәләкәй генә пауза яһаны ла, күҙҙәрен йомоп, еңелсә генә баш эйеү ишараты яһаны...

Уңарсы булмай, өс-дүрт эйәрсенен эйәртеп, өттөрә баҫып махсус хеҙмәт майоры килеп инде. Үҙе менән ҡыҫҡаса, ашыҡ-бошоҡ ҡына таныштырғандан һуң, баритонын баҫҡа оҡшатырға үтә лә тырышып, бөтә һүҙҙәрен бер нота ҡалыбына һалып, застава командиры полковник Сенькиндың ҡулға алыныуын белдерҙе. Ярандар полковникты йәһәт кенә ҡапшап, тентеп сыҡтылар. Стена буйына ултыртып ҡуйҙылар ҙа, ян-яғына һаҡҡа баҫтылар. Майор комдив менән ҡулға алыуҙы шартына килтергәндән һуң ғына ҡул биреп, мәғәр һауалы иҫәнләште. Иғтибарын шунда уҡ шешәгә йүнәлтте. Бындай һауытты үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр күргәндәй, бармаҡ остары менән генә сирҡанып, тотоп әйләндергеләп, ентекләп танышып сыҡты ла, комдивҡа уҫал һәм шикле текләшеп, өҫтәлгә кире ултыртты. Майорҙың һәр хәрәкәтен күҙәтеп ултырған Добрягин шешәлә ҡалғанды кисекмәҫтән ҡойоп эсте лә ашыҡмай ғына тәҙрәгә табан боролоп ултырҙы.

Майор телефондан шылтыратырға тотондо. Армия штабы менән элемтәгә инеп, заставаға килеп етеүе, застава командирын ҡулға алыуы, кисекмәҫтән тикшереү башлаясағы тураһында доклад яһаны. Трубканы ҡуйғас, комдив алдында дәрәжәһе түбән булыуға ҡарамаҫтан, вазифаһы юғарылыҡҡа ҡыуанған кешеләй мыҫҡыллы ла, тантаналы ла йылмайып бер килке рәхәт сиккәндән һуң, француз телмәренә оҡшатып, танау эсенән:

– Комдив иптәш, беҙҙе ҡалдырып тороуығыҙҙы һорайым, – тине.

## Бүрене бүре ашағанда

Бөткөһөҙ болалар, сит дәүләттәрҙең тығылыуы арҡаһында Ҡытай XIX быуат ағышында тәрән көрсөк кисерә. Оҙаҡ ваҡыттар буйы ил хакимдары илдә үҙгәрештәр үткәреү зарурлығын инҡар итеп килде. Ниһайәт, шуны аңлау быуат аҙағында реформаларға мөрәжәғәт итергә мәжбүр итте. Бер үк ваҡытта, реформаларға һуңлап тотоноу һөҙөмтәһе булараҡ, 2000 йыл хөкөм һөргән хакимлыҡ ҡоролошо ҡоланы.

XVII–XVIII быуаттарҙа маньчжурҙар династияһы идара иткән Цинь империяһы үҙ ҡеүәтенең юғары нөктәһенә күтәрелә. Ҡытай хакимдары үҙ илдәрен донъя цивилизацияһының үҙәге итеп һанай. Тик улар үҙҙәренең технологиялар, етештереүҙәр, йәшәү кимәленең Көнбайыштан артта ҡалыуын аңламай. Маньчжурҙар 1793 йылда Бөйөк Британияның күсеп ултырыу ирке, Ҡытай буйлап ирекле хәрәкәт итеү, тышҡы сауҙаны либералләштереүҙәрҙән торған талаптарынан баш тарта. Хакимиәт әфиун баҙарын тыйырға маташҡаны өсөн беренсе әфиун һуғышында Бөйөк Британия Ҡытайҙы еңелеүгә дусар итә, 1842 йылда Гонконгҡа хужа була, һәм бишләп порт сауҙа өсөн асыла. Был порттарҙа сит илдәр Ҡытай юрисдикцияһына буйһонмайынса һатыу итеүгә, үҙ идараһын булдырыуға, ғәскәр һәм полиция тотоуға хоҡуҡ ала. Ҡытайҙың был еңелеүе XVIII быуаттан бирле килгән көрсөктөң яңырыуына килтерә. Илдә ҙур-ҙур ихтилалдар ҡуба. Шуларҙың иң дәһшәтлеһе 25 миллион кеше ғүмерен өҙгән тайпиндар һәм няньцзюнь ихтилалы һанала.

Илдәге өҙлөкһөҙ болалар менән тәртипһеҙлектәр Ҡытай һәм уның сателлиттары биләмәләренә сит дәүләттәр баҫып инеүгә ҡулай шарттар тыуҙыра. 1840–1860 йылдарҙа Рәсәй империяһы бөгөнгө Приморье, Амур өлкәһен, Көнсығыш Ҡаҙағстан, Ете һыу ерҙәрен һәм Тываны тартып ала.

Айгунь, Харбин, Суйфыньхэ (шул иҫәптән Хәсән күле тирәләре) ҡалалары урынлашҡан Төньяҡ Маньчжурия ерҙәрен Рәсәй үҙ мөхитенә әйләндерә.

1860 йылда Пекинды инглиздар менән француздар биләй. 1884–1885 йылдарҙа Һинд Ҡытайы өсөн һуғышта Франция Ҡытайҙы еңә.

1894 –1895 йылдарҙағы һуғышта Япония Ҡытайҙы ерҙә лә, диңгеҙҙә лә еңеүгә өлгәшә. Тайванды (Формоза), Ляодун ярымутрауын, Пенхуаледао утрауҙарын баҫып ала. Көньяҡ Маньчжурияны үҙ йоғонтоһо зонаһы итә.

Көньяҡ Ҡытай, йәғни Юньнань, Гуйчжоу, Гуанси, Гуандун провинциялары – француздар; тулыһынса Тибет менән Янцзе бассейны – инглиздар; Шаньдун провинцияһы Германия мәнфәғәттәре йоғонтоһона эләгә.

Сит илдәр ҡулы аҫтында ҡалыу арҡаһында, илдә йәнә ихтилалдар ҡуба. Баш күтәреүҙәр Германия, Бөйөк Британия, Япония, АҠШ, Рәсәй, Франция, Австро-Венгрия, Италия ғәскәрҙәре тарафынан баҫтырыла. Ил рәхимһеҙ талана, ҙур-ҙур контрибуциялар һалына.

Ҡытай, дәүләт булараҡ, тарҡалыу, юҡҡа сығыу хәленә килеп етә. Ҡытай халҡы алдында артабан илдең дәүләт булып ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһе килеп баҫа.

1901 йылдан һуң илдә бихисап маньчжурҙарға ҡаршы ойошмалар ойоша. 1905 йылда Сунь Ятсень етәкселегендә Ҡытайҙың революцион берлеге барлыҡҡа килә. Бер нисә тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осрауға ҡарамаҫтан, 1911 йылда башланған күтәрелеш дөйөм революцияға әйләнә. 1644 йылдан бирле идара иткән маньчжур хакимлығы ҡолай. 2000 йыл дауам иткән традицион император идараһы юҡҡа сыға. 1912 йылдың 1 ғинуарында Сунь Ятсень беренсе ваҡытлы президент итеп иғлан ителә. Ҡытай халҡының ил эсендәге болаларға сик ҡуйыу,

ил тарҡалыуын туҡтатыу, сит ил баҫҡынсыларын илдән ҡыуыу һәм элекке империя сиктәрендә Ҡытай дәүләтен тергеҙеү өсөн 1949 йылда ғына тамамланыр оҙайлы көрәше башлана.

## *Комдив ниңә бойоҡ?*

Ишек алдына сыҡҡас, комдив, башын артҡа ташлап, күҙҙәрен йомоп, көрһөнгәнгә лә, уфтаныуға ла оҡшамаған тауыш менән саф, һалҡынса һауаны күкрәк тултырып һулап бер аҙ тыныслыҡ юллап торҙо ла китель төймәләрен ысҡындырып ебәрҙе. Салғыйҙарын ян-яҡҡа елбәгәйләп, һалмаҡ баҫып, мәгәр эре атлап казармаға табан китте.

Махсус хеҙмәт командиры тупһаға ҡуйған һаҡсы юлына арҡыры төшкәс, комдивтың асыуынан мейеһенә ҡан бөркөлдө. Бер үк ваҡытта зиһене асылып, башын ауара килтергән уйҙарҙан арынып киткәндәй булды.

– Һин нимә?!.. – Үҙенекеләр араһында үҙенә ҡарата күптән инде һаҡсыларҙың устав талабын үтәмәүенә күнеккән комдив тишеп ҡараны. Һалдаттың генерал-майор йондоҙҙарын күрә тора иҫе лә китмәне. Һоҡланыуҙар өсөн яратылмаған һытыҡ йөҙөн тағы ла йәмрәйтә биреп, бер аҙым артына сигенде лә, ләм-мим өндәшмәҫтән, ҙур тәүәккәллек менән винтовкаһы көбәген комдивҡа йүнәлтте. Асыҡ ишек аша ишетелгән һөйләшеүҙәрҙән комдив эстә тикшереүселәр эшләгәнен аңланы. Билгеле, был осраҡта һаҡсы ниндәйҙер дәрәжәле кешене генә түгел, Хыҙыр Ильястың үҙен дә үткәрмәҫ. Добрягин ситкә боролоп, үртәлеүҙән үҙ алдына ҡаты һүгенде. Уңарсы булмай, ҡайҙандыр ике ярҙамсыһының береһе килеп етте. Унһы ауыҙын асырға ла өлгөрмәне, комдив таң алдынан килеп тулған барса транспортты казарма артына күсереп ҡуйырға, яман хәлдәр тыуып киткәнсе ишек алдында ниндәйерәк күренеш булһа, әле лә күҙимге күренеш тыуҙырырға бойорҙо.

– Ғәфү, комдив иптәш. Нишләп?

– Тегендә!.. Кордон аръяғында!.. Ҡайтҡас та йоҡларға ятмағандарҙыр бит?! Ана ғына торалар!.. – Михаил Елизарович үҙҙәре баҫып торған тау битләүенән шыйыҡлана барған төн ҡараһы еңелсә томан менән аралашҡан шаршау артындағы, хәҙергә асыҡ күренмәгән алыҫ киңлеккә ымланы. – "Ҡылыҡты ҡылып" ҡайттылар ҙа төндә таң аттыра алмай ыҙа сигәләр! Тиҙерәк биноклдән күҙәтергә! Беҙҙең ығы-зығы килгәнде күреп ауыҙ йырырға!.. Шуға күрә беҙҙә тып-тыныс булырға тейеш! Бер нисә ат бәйле торһон. Егеттәр тупһаға ултырып тәмәке тартһын, кәрт уйнаһын. Кәрт уйнаһындар, тинем! Нимәһенә аптыраның?.. Шатланмаһындар… Беҙҙә бер ни ҙә булмаған. Төшөндөңмө?

– Ишек алды былай ҙа тыныс, Михаил Елизарович.

– Ысынлап та… Ә атлылар ҡайҙа?

– Казарма артында, урманда.

– Машиналар?

– Беҙҙекеләр ҙә, уларҙыҡылар ҙа казарма артында. Уларҙың командиры тап һеҙ теләгәнсә күҙ алдынан алып ҡуйырға бойорҙо. Килеп төшкәс тә.

– М-мда… Беҙҙең командирҙар ҡайҙа?.. Застава командирҙары ҡайҙа, тинем.

– Улар, комдив иптәш, ҡулға алынды.

– Ҡулға алынды?! Нисек?

– Шулай. Махсус хеҙмәт майоры әмере. Барыһын да йәшелсә келәтенә яптырып, өҫтәренән үҙ һаҡсыларын ҡуйҙы.

Добрягин ошонда ғына ишек алды буш икәнлегенә иғтибар итте. Ашығып казарма артына сыҡты. Ул яҡта ишек булмау сәбәпле, ике тәҙрәнең рамдарын

алғандар ҙа, тәҙрә төптәренә эсле-тышлы трап һалып, шуның аша инеп-сығып йөрөйҙәр. Барыһы ла – махсус хеҙмәт төркөмө кешеләре, комдив менән килгәндәрҙән бер кем дә күренмәй. Добрягиндың уйҙарын уҡып торғандай, ярҙамсыһы:

– Бигерәк ҡаты тотонғандар! – тине. – Эҙләп-һорап тороу юҡ. Эстә хәрби прокурорҙар, следователдәр, суд-медицина экспертары эшләй.

Комдив өндәшмәне. Ҡаштарын йыйырып бер аҙ уйланып торғас, сәй әҙерләргә, ял итеү өсөн аулаҡ бүлмә табырға ҡушты. Бойороҡ үтәлгәнсе үҙе урманға – эскадрондары хәлен белергә китте. Ҡуҙғалып, биш-алты аҙым атлағас, ярҙамсыһын саҡырып алып:

– Казармала тикшереүҙәр бөткәс тә миңә хәбәр итәһегеҙ, – тине. – Ерләү хәстәрен шәхсән үҙем ҡарармын. Ишеттеме ҡолағың?!

Ярҙамсы, комдивтың зәһәр ҡараштарынан әйтелгәндең бойороҡтан бигерәк ниндәйҙер дәһшәтле киҫәтеү икәнлеген тиҙ аңлап, честь бирергә ашыҡты…

…Әҙерләнгән сәйгә Добрягин тотоноп та ҡараманы. Бүлмә буйлап үрһәләнеп ары-бире йөрөнө, тәҙрәнән оҙаҡ итеп тышҡа ҡарап торҙо. Аҙаҡ, кителен дә сисмәй, устарын башы аҫтына һалып, карауатҡа һуҙылып ятты, түшәмгә ҡарап уйға талды. Дөрөҫөрәге, дошман яуызлығынан зиһене тарҡалып, шаңғып ятты. Өҫтәүенә, майорҙың ҡылығы хәтерен ҡалдырҙы, һарыуын ҡайнатты. Шулар барыһы бер башҡа тулып, комдивтың уйлау һәләтен имгәтте…

Байтаҡ ваҡыт уҙҙы. Тыштан ара-тирә һөйләшеүҙәр, ары-бире йөрөгәндәре ишетелеп торҙо. Бер нисә тапҡыр кемдәрҙер килеп, комдив янына инергә даулашып ҡараны, тик бер кемде лә кертергә ҡушылмаған һаҡсының ҡәтғи, хатта ки тупаҫ яуабынан килеүсе  кире китеп барҙы. Үҙенекеләр килмәгәнен белә комдив.

Йонсоуҙары менән шаңғыуҙары оло йәштәге командирҙы, ниһайәт, ойота башлағанда, һаҡсыһы инеп, махсус хеҙмәт төркөмө командиры килгәнен хәбәр итте. Добрягин керергә рөхсәт бирҙе…

Бөткөһөҙ уйҙарға тарыған майор тегеләй-былай сөсөләнеүһеҙ генә өҫтәл янына ултырҙы. Тәү осрашҡандағынан да көслөрәк ҡырыҫланған һәм ҡара янған йөҙөн комдивҡа күрһәтергә теләмәгәндәндер, башын ситкә бороп, тынып ҡалды.

– Шунан? – тине Добрягин, мәғәнәле һәм күпмелер тупаҫ итеп.

– Эшләйбеҙ… Һеҙҙе тикшереү төркөмөнә йәлеп итергә онотҡанбыҙ, – тине майор һәм, комдивтың асыулы ҡарашын күҙ ҡырыйы менән күреп, пауза яһаны. – Үпкәләшер ваҡыт түгел, Михаил Елизарович. Минең вазифам менән эшем шулай ҡуша… Әйткәндәй,  бер аҙ әңгәмәләшеп алыуға нисек ҡарайһығыҙ, комдив иптәш?

– Яңы ғына иҫегеҙгә төштөмө?

– Мин шаяртмайым…

– Башлағыҙ допросығыҙҙы, майор!

– Ну, комдив иптәш!.. Ниңә үгеҙҙе улай мөгөҙөнән алырға? Ҡәҙимге әңгәмә. Нимәһе бар уның?

– Башлағыҙ… Минең шәхесемдә һеҙҙе нимәләр ҡыҙыҡһындыра? Тартынмағыҙ!..

– Хәрби хеҙмәтегеҙҙе ҡасан һәм ҡайҙа башлауығыҙ хаҡында… – Майор генералдың һөйләүен үтендеме, әллә мотлаҡ яуап бирелергә тейеш һорау бирҙеме – билгеһеҙ, тумалтты ла, башлағанын осламай, тынып ҡалды.

Добрягин ихлас көлдө.

– Нишләп һеҙ минең хаҡта минең үҙемдән һорайһығыҙ?.. Һеҙ бит, ғәҙәттә,

кеше хаҡында кеше үҙен үҙе белгәндән дә күберәкте беләһегеҙ… Армия штабында һәр командирға ентекле шәхеснамә төҙөлгән… – Йәнә бер аҙ бер-береһенә тексәйешеп ултырҙылар. – Хәрби хеҙмәтем минең, майор иптәш, ун туғыҙ йәшемдә Порт-Артур окоптарынан башланды. Япон блокадаларынан, япон яуҙырған йәҙрә ямғырҙары аҫтындағы траншеяларҙан!.. Рәсәй һалдатының тәне һәм ҡаны ер менән буталған әжәл боламыҡтарынан!.. “Варяг” крейсерының һыу төбөнә китеүҙәренә, “Аврора”ның яу диңгеҙен ташлап Филиппин ярҙарына ҡасыуына шаһит булыуҙарҙан…

– “Аврора”? Һеҙ хаталанмайһығыҙмы?

– Эйе, эйе, тап үҙе! Октябрь ихтилалы башланыуға сигнал биреп туптан атҡан “Аврора”! Нева ярҙарында мәңгелеккә якорь ташлаған крейсер… Япон һалдаты менән штыкка штык килеп сәнсешеүҙән башланым мин хәрби хеҙмәтемде! Боғаҙҙар сәйнәшеп, йәшәү өсөн сыйышыуҙарҙан! Ел-дауыллы, ҡарлы-боҙло Маньчжурия далаларын иңләп иҫәпһеҙ-хисапһыҙ юғалтыуҙар аша Рәсәй сигенә сигенеүҙәрҙән… – Комдивтың күҙҙәре уҫал ялтыраны, тамағына тығылған ғазап төйөрөн ҡабат-ҡабат йотоп аҙапланды. – Нишләп быларҙы һеҙгә минең үҙемдән ишетеү кәрәк булды? Һеҙ, чекистарҙың, командирҙар контингенты тураһында хәбәрҙар булмауығыҙ мөмкин түгел. Ҙур командирҙар хаҡында бигерәк тә… Әлеге фажиғәгә минең үткәндәремдең ни ҡыҫылышы бар?.. Киреһенсә, мин һеҙҙән һорарға тейеш тикшереү барышы тураһында.

– Ҡағылыш бар… Командирҙар тураһында өлгөрөрбөҙ. Артабан тыңлайым. Яңынан башлаһағыҙ ине, Порт-Артурҙан. Онотолмаһа, ентекләберәк.

– Һалдат онотмай. Бигерәк тә Порт-Артур фажиғәһен…

Майор, ниндәйҙер иҫ китмәле хәбәр әйтеүҙән ҡоро ҡалыуҙан ҡурҡҡандай:

– Рус һалдатының сыҙам һәм ҡаһарман икәнлеге һәр кемгә мәғлүм, – тип комдивты бүлдерҙе. – Һалдаттарыбыҙ менән беҙҙең ғорурланырға хаҡыбыҙ бар.

Добрягин, майорға бер аҙ хәсрәтләнеп ҡарап ултырғас:

– Үҙегеҙгә ҡайҙа, ниндәй фронтта һуғышырға тура килде? – тине.

Һорауҙан майорҙың йәберһенеүе йөҙөнә сыҡты. Әйтерһең дә, уны көтмәгәндә кәмһеттеләр, мыҫҡыл иттеләр. «Ҡайҙалыр фронта һуғышып йөрөүҙәр минең өсөн түгел» тигән яуабы, теле менән әйтелмәһә лә, йөҙөндә ярылып ята ине.

Уңайһыҙ хәлдән тиҙерәк арынырға теләгәндәй, комдив сираттағы һорауын бирҙе.

– Әйтегеҙ әле, майор, түҙемлек йәки ҡаһарманлыҡтар күрһәтергә бурыслымы һалдат?

– Ниндәйҙер сәйер һорау… – тип мығырланды майор. – Һалдат булғас, әлбиттә, бурыслы!

– Юҡ, иптәш майор, юҡ, – тине Добрягин тәүәккәл һәм ышаныслы рәүештә. – Һалдаттың бурысы дисциплиналы һәм ҡыйыу булыуҙа. Хәрби бурысын еренә еткереп үтәүҙә. Ә теләһә ниндәй аслы-туҡлы йөрөүҙәргә, өшөү-туңыуҙарға, кергә һәм бысраҡҡа батып, бет һимертеүҙәргә, сирләп үлеүҙәргә дусар ителеп, шуларға түҙеү – ҡаһарманлыҡ түгел. Ә йәшәүгә, һуғышырға тейешле шарттар тыуҙырмаған генералдарҙың эшкинмәгәнлеге, ғәмһеҙлектәре, аңралыҡтары арҡаһында ҡорбан булыу.

– Ғәфү итегеҙ, үҙегеҙҙең дә генерал икәнлегегеҙҙе онотоп ебәрмәнегеҙме?

– Генералдар өҫтөнән дә генералдар бар, майор…

– Төпкә төшәм, тип уйламайһығыҙмы?

– Мин – һалдат, майор!.. Ғүмерем буйы һалдат булдым. Ә Порт-Артурҙы мин һеҙгә көндөкөн көнгә, айҙыҡын айға һөйләй алам!

## *Аждаһаны уятыу*

***1904-1905 йылғы Рус-япон һуғышы хаҡында уйланыу***

*…Япондар туп аталар,*
*Порт-Артурҙы ваталар.*
*Ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы ҡулһыҙ*
*Тилмерешеп яталар…*

**Япон һуғышы бәйетенән**

Ҡытайҙағы үҙ-ара эреле-ваҡлы ыҙғыш-болалар, һуғыштар, бигерәк тә 1850–1860 йылдарҙағы Маньчжурия хакимлығына ҡаршы киң ҡоласлы баш күтәреү империяны ярайһы ҡаҡшата. Һөҙөмтәлә империя икегә тарҡала, үҙәк хакимлыҡ юҡҡа сыға, Ҡытай үҙе колониаль һуғыштар алып барыусы эре мәмләкәттәр өсөн табышҡа әйләнә.

Ҡытай менән Япония араһындағы Корея өсөн өҙлөкһөҙ тартыш 1894–1895 йылдарҙа асыҡ һуғышҡа әйләнеп, ҡытайҙарҙың еңелеүе менән тамамлана. Япония иһә, йәш хәрби держава роленә өлгөргәнлеккә уңышлы һынау тотоп, 1895 йылдың 17 апрель солохонда Ҡытайҙы Кореяның мөстәҡиллеген танырға, 200 миллион таэль контрибуция түләргә мәжбүр иткәс Формоза (Тайвань), Пескадор утрауҙарын һәм Ляодун ярымутрауын үҙ составына ала.

Японияның үҫә барған нәфсеһен сикләү маҡсатында 1895–1900 йылдарҙа Рәсәй, Франция, Германия, Англия араһында Ҡытай ерендә концессия (сәнәғәт предприятиелары, порттар, тимер юлдар һ.б. төрлө объекттар төҙөлөштәре өсөн аҡса бүлеү), үҙҙәре уйлап тапҡан хоҡуҡтар һәм әҙәм аңламаған ташламалар өсөн аяуһыҙ ярыш башлана (Англия шул замандарҙа уҡ арендалаған Гонконгты Ҡытайға XXI быуат башында ғына кире ҡайтарҙы. **– *авт. иҫкәрмәһе***). Рәсәй, Япониянан алда өлгөрөп, бөгөнгө Приморье крайы менән Амур өлкәләрен үҙенә ҡушҡандан тыш, 1900 йылда Маньчжурияны тулыһынса һәм Порт-Артурҙы биләй. 1897–1903 йылдарҙа Транссебер тимер юлын Порт-Артур менән бәйләү өсөн Көнсығыш Ҡытай тимер юлын (КВЖД) төҙөй (Рәсәй төҙөгән тип иҫәпләнә, әммә бәхәсле).

1894–1895 йылдарҙағы Япон-Ҡытай һуғышы һөҙөмтәләрен туҡтауһыҙ ревизиялағаны, Кореяға үҙ йоғонтоһон үткәрергә тырышҡаны өсөн Япония Рәсәйгә ҡаршы һуғышҡа әҙерләнә. Икенсенән, баҫып алыуҙарға сик белмәгән Рәсәйҙең Японияның Цусима боғаҙы ғына айырып торған Порт-Артурға килеп төпләнеүе Японияны хафаға һалмай ҡалмағандыр. 1902 йылда Англия менән берлек килешеүе төҙөй. Англия һәм АҠШ ярҙамдары менән армияһын яңыса ҡоралландырыуға өлгәшә.

1904 йыл башына Япония һуғыш алып барыу өсөн әҙер була. Ошо йылдың 8 февралендә вице-адмирал Хейхатиро Того флоты Порт-Артур гаванендә якорҙа торған Рәсәй флотына һуғыш иғлан итмәйенсә, иҫкәрмәҫтән һөжүм яһап, 17 караптың 8-ен зарарлай һәм портты диңгеҙҙән блокадаға ала.

Иртәгәһен, 9 февралдә, вице-адмирал Камимура эскадраһы Чемульпо портында (Корея) торған ике урыҫ карабын – “Варяг” менән “Кореец”тарҙы атакалай. “Кореец” батырыла, “Варяг” зарарлана. Япондарға улъяға бирмәү маҡсатында, карап командаһы “Варяг”ты үҙе һыуға батыра. Был алышта урыҫтарҙың, яраланыусылар һәм һәләк булыусылар менән бергә, йәмғеһе 122 кешеһе сафтан сыға. Һуңғараҡ ошо “Варяг” хаҡында дөйөм билдәле тарихи йыр тыуҙырыла. Йырҙы Граждандар һуғышы осоронда, һәр ике яҡтың да етәкселеге тыйыуға ҡарамаҫтан, ҡаһарманлыҡҡа саҡырыусы йыр итеп аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа йырлай. СССР-ҙа 1945 йылға тиклем тыйылған йырҙар иҫәбендә йөрөһә лә.

Япония һуғышты февралдең 10 ғына иғлан итә. Ошо көндө Чемульпо янында континентҡа Японияның ҡоро ер ғәскәрҙәре инә. Порт-Артурға туранан-тура һөжүм йәки ҡамап тотоу башланғансы, уны Мукден ҡалаһы тирәһенә тупланған Рәсәй армияһы корпусынан айырып тотоу сараһын күрәләр. 40 меңлек гарнизон менән Порт-Артурҙы, һөйләүҙәренсә, әйтеп бөткөһөҙ йыбытҡы (күрәләтә кем тәғәйенләгәндер?) генерал Анатолий Стессель обороналай. Янында унан да булдыҡһыҙыраҡ Алыҫ Көнсығыштың вице-губернаторы, генералиссимус һәм адмирал Евгений Алексеев ултыра. Порт-Артурҙы ерҙән ҡамау ҡулсаһы тоташмаҫ элек үк ул, портты ташлап, Ляоян ҡалаһына – Рәсәйҙең ҡоро ер ғәскәрҙәре тупланған урынға ҡаса *(История войн. Т.2, с. 601)*. Урыҫтарҙың Мукден корпусы, ғөмүмән, беҙҙең Алыҫ Көнсығыштағы ҡоро ер ғәскәрҙәре менән Рәсәйҙең хәрби министры Алексей Куропаткин шәхсән етәкселек итә. Уның ғәскәре һуғыш башланған мәлдә генерал Штакельберг (35 меңлек), генерал граф Келлер (30 меңлек), генерал Засулич (7 меңлек) армияларынан, тағы ла 40 меңлек резервтан ғибәрәт.

А. Куропаткинға ҡаршы генерал Тамесада Курокиҙың 1-се, генерал Ясукато Окуҙың 2-се, генерал Мичисура Нодзуҙың 4-се, генерал Марэсукэ Ногиҙың 3-сө армиялары ҡаршы килә. Һуңғыһына Порт-Артурҙы алыу бурысы йөкмәтелгән була.

Японҙарҙың планы буйынса Рәсәй менән һуғыш ике этаптан торорға тейеш. Беренсе этапта Рәсәйҙең Алыҫ Көнсығышында туңмай торған берҙән-бер порты – Порт-Артурҙы ҡулға төшөрөп, Рәсәй флотын ҡышҡы осорҙа диңгеҙҙә һуғыш хәрәкәттәре алып барыуҙан мәхрүм итеү; урыҫтарҙың Алыҫ Көнсығыш флотын, ғөмүмән, тар-мар итеү. Икенсе этапта Маньчжурияла Рәсәйҙең ҡоро ер ғәскәрҙәрен юҡ итеү йәки Маньчжуриянан ҡыҫырыҡлап сығарыу.

...Һуғыш башланғанда Япония флоты 6 яңы линкорҙан, 1 иҫке линкорҙан, 8 бронялы крейсерҙан, 25 еңел крейсерҙан, 19 эсминецтан, 85 торпедо катерынан, 16 бәләкәй караптан тора.

13 апрелдә яңы тәғәйенләнгән Рәсәй флоты командующийы адмирал С.Макаров Владивостоктан Порт-Артурға походҡа сыға. Уның эскадраһын 7 иҫкергән крейсерҙан, 9 бронялы крейсерҙан, 25 эсминецтан, 30-ҙан ашыу ваҡ караптан торған көс тәшкил итә. Шул көндө үк, һуғыш хәрәкәттәре барған районға барып та етмәҫ элек, адмирал ултырған флагман “Петропавловск”, япондар ҡуйған минаға тарып, һыу төбөнә китә. Адмирал С. Макаровты юғалтыу флот өсөн дөйөм һәләкәткә әйләнә. Артабан флот һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнашмай, порттарҙа, ышыҡ урындарҙа тик тороуҙы хуп күрә.

Тымыҡ океан эскадраһына ярҙамға ашыҡҡан йәнә бер булдыҡһыҙ адмирал *(История войн. Т.2, с. 607)* – Зиновий Рождественский етәкселегендәге Балтик эскадраһы ла (8 линкор, 8 крейсер, 9 эсминец һәм бер нисә ваҡ карап) Цусима боғаҙында япон хәрби караптары тарафынан юҡ ителә. Бары бер нисә генә карап Владивостокка китеп һәм Манилаға (Филиппин) ҡасып иҫән ҡала. Урыҫтар 10 мең кешеһен, япондар 3 торпедо катерын һәм 1 мең кешеһен юғалта *(История войн. Т.2, с. 608)*. С.Макаров урынына тәғәйенләнгән контр-адмирал Вельгельм Витгефт, батша әмере буйынса, Рәсәй флотын Порт-Артур тирәләренән Владивостокка алып китә. 10 августа Һары диңгеҙҙә 6 линкорҙан, 5 крейсерҙан, 8 эсминецтан торған Витгефт эскадраһын вице-адмирал Камимура эскадраһы атакалай. Һөҙөмтәлә сәғәт ярымлыҡ алыштан һуң Алыҫ Көнсығышта Рәсәй флоты йәшәүҙән туҡтай. Адмирал Витгефт һуғыш барышында һәләк була. Урыҫ караптары тәртипһеҙ рәүештә сигенә. Уларҙың бер өлөшө япондар тарафынан батырыла, бер нисәһе нейтраль һыуҙарға йөҙөп ҡотолоп ҡала,

ҡалғандары кире Порт-Артурға ҡаса. Уларын, Порт-Артурҙы алғас, япондар ярҙан туп яуҙырып батырып бөтөрә. Диңгеҙҙә япон флоты хакимлыҡ итә башлай.

Тымыҡ океанда флотһыҙ ҡалыу һәм Беренсе урыҫ революцияһы тоҡанып китеүе Рәсәйҙе Ляодунды (Порт-Артур урынлашҡан ярымутрау), Көньяҡ Сахалинды юғалтыу менән килешергә, Японияның Маньчжуриялағы "махсус хоҡуҡтарын" танырға мәжбүр итә. 1910 йылда Япония Кореяны аннексиялай, 1919 йылда Тымыҡ океандағы Германия ҡулы аҫтындағы утрауҙарҙы баҫып ала. 1918–1922 йылдарҙа Маньчжуриянан Рәсәйҙең Байкал аръяғы ерҙәренә ябырылыуҙар ойоштора…

XIX быуаттың икенсе яртыһынан, Көнбайыш державалар, Ҡытай һәм Рәсәй өҙлөкһөҙ төрткөләй торғас, Япон аждаһаһын уяттылар. Ҡылана торғас, ҡаш төҙәтәбеҙ тип күҙ сығарҙылар, Көньяҡ-Көнсығыш Азияла бер колониянан да күрмәгәнде күрҙеләр, һәммәһе лә тиерлек япон туҡмағын ашаны. Япондар 1894 йылдан башлап 1945 йылға тиклем кемде теләһәләр, шуны баҫтырып йөрөтөп ажғыртып туҡманы. 1941 йылдың 7 декабрендә Перл-Харборҙа американдарға күрһәткән тамуҡ уты үҙе генә лә ни тора! Бүтәндәр 500 йылда ла ҡыла алмаған илбаҫарлыҡтарҙы Япония 50 йылда күрһәтте *(История войн. Т.2, с. 193)*.

## *Порт-Артур тигән таш ҡала*

Апрель-май айҙарында Порт-Артур тирәһендә хәрби хәрәкәттәр әүҙемлеге күҙәтелмәй кеүек. Был тик тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай. Асылда япондар ашыҡмай ғына көс туплай, портты яйлап ҡына ныҡлы ҡулсаға ала бара.

Хәрби министр А.Куропаткин Порт-Артурҙы ҡалдырып, өҫтәлмә ярҙам килгәнсе ғәскәрен Мукден ҡалаһы тирәһенә тупларға тотона. Рәсәй ғәскәренең һуғышҡа әҙер түгеллеген яҡшы аңлай хәрби министр. Шуға күрә ул портты планға ярашлы һәм аңлы рәүештә ҡалдыра. Уның уйынса, бер аҙ хәл туплап, контрһөжүмгә күскәнсе, порттың дошманға ҡаршы торорлоҡ ҡеүәте бар. Флоттан тыш ҡына ла 40 мең һалдат һәм офицерҙан торған гарнизон аҙ көс түгел. Винтовкалар менән пулеметтар етерлек, 506 орудие ла була, аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ юҡ.

Сәнскеле сым тартылған траншеялар менән тоташтырылған форттар, башҡа нығытмалар, ҡалҡыулыҡтар оборона комплексын ысын мәғәнәһендә дәһшәтле итә. Уны, әйткәнебеҙсә, япондарҙың 80 меңлек һалдаты, 474 ялан һәм ҡамау орудиелары булған Марэсукэ Ноги армияһы алырға тейеш.

Петербургтан бүрәнә үтә бүре күреп ултырған Николай батшаның тығылыуы арҡаһында, Куропаткин штабында берҙәм фекер булмай. Батша күрһәтмәһе менән эш иткән Алексеев генерал Засуличтың 7 меңлек армияһын дошман ҡамауын өҙөүгә ташлай. Фарманды батырҙарса үтәргә тырышып ҡараһа ла, Засулич ярты армияһын ҡырҙырыу гонаһына бата.

Йәйге айҙар бәрелештәр менән үтә.

7-8, 19–24 августа, 15–30 сентябрҙә, ноябрь башында генерал Ноги, бер нindәй юғалтыуҙар менән дә иҫәпләшмәйенсә, урыҫ нығытмаларына дүрт тапҡыр уңышһыҙ ябырыла. 5 декабрҙә хәл иткес штурмда ул данлыҡлы 203-сө ҡалҡыулыҡты яулауға өлгәшә. Ошо яуы урыҫ гарнизонының яҙмышын хәл итә лә инде. Ҡалҡыулыҡҡа урынлашып алғас, япон артиллерияһы урыҫ позицияларын һәм гавандағы флотын ай буйы тип әйтерлек рәхимһеҙ утҡа тота. Оборона траншеяларындағы беҙҙең ата-бабаларыбыҙ, күреүебеҙсә:

*Япондар туп аталар,*
*Порт-Артурҙы ваталар, –*

тип рифма өсөн генә йырламағандар.

Яңы 1905 йыл тотош гарнизонға һәләкәт алып килә. 2 ғинуарҙа генерал Стессель 23 мең һалдаты менән япондарға баш һала. Дошман бик күп орудие һәм башҡа төр атыу ҡоралдарын, һуғыш кәрәк-яраҡтарын, аҙыҡ-түлек запастарын улья итеп ала. Япондар, хәбәрһеҙ юғалғандар, яраланғандар һәм һәләк булғандар менән бергә, 59 мең яугирын юғалта 34 мең япон киҙеүләп торған, тиҙәр. Беҙҙекеләр 31 мең кешеһен юғалта. *(История войн. Т.2, с.604)*.

Генерал Марэсукэ Ногиҙың 3-сө армияһы Порт-Артурҙың эшен бөтөрөп, Куропаткин армияһына хәл иткес ударҙар яһашыр өсөн, Куроки, Нодзу, Оку армияларын туплаған маршал Ивао Ояма корпусына ярҙамға ашыға.

1904 йылдың 25 авгусынан 3 сентябренә тиклем Ляоян тирәһендә Ивао Ояманың 125 меңлек ғәскәре Куропаткиндың 158 меңлек ғәскәренә тәүге етди һөжүмен ойоштора. Япондар 23 мең, урыҫтар 19 мең кешеһен юғалтыуға ҡарамаҫтан, Куропаткин үҙен еңелгәнгә һанай һәм төньяҡҡа, Мукден ҡалаһына, сигенә, ә Ояма уны эҙәрлекләй.

Октябрҙең 5-нән алып 17-һенә тиклем ғәскәрен 200 меңгә тиклем көсәйткән Куропаткин менән Ояманың 170 меңлек армиялары икенсегә ҡаты бәрелешә. Һөҙөмтәлә урыҫтар 40 меңләп, япондар 20 меңләп кешеләрен юғалтып, хәлдән тайып туҡтап ҡуялар.

1905 йылдың 26-27 ғинуарында Ояmaға Марэсукэ Ноги ярҙамға килеп еткеләгәнсе, 30 мең кешелек тулыландырыу алған Куропаткин контрһөжүм яһай. Ике көнлөк алыштарҙан һуң операция һүнеп ҡала.

Маньчжуриялағы һуғыштар, нигеҙҙә, февралдең 21-нән марттың 10-на тиклем булып үткән Мукден алыштары менән тамамлана. Был ҡан ҡойғос бәрелештә 70-80 саҡрымлыҡ фронт линияһында һәр ике яҡтан 320-шәр мең яугир ҡатнаша. Маршал Ояма урыҫтарҙы "ҡамап алып юҡ итеү" ысулына күсә. Шуны һиҙенеп, ҡыйратылған, әммә еңелмәгән Куропаткин һуғыштан оҫта сығып, ғәскәре менән Харбин ҡалаһына сигенә. Был алышта Рәсәй армияһы 100 меңләп кешеһен, бик күп мөлкәтен юғалта. Рәсәй ғәскәрҙәренә үлемесле яра һалына. Япондарҙың бот буйы, беҙҙекеләрҙең баһадир буйлы булыуҙары ла роль уйнамай. Япондарҙың юғалтыуы 70 меңләп ҡорбан тәшкил итә. Теүәл бер йыл барған һуғыш, нигеҙҙә, ошоноң менән ослана. Һуғыштың бөтөүе 1905 йылдың 6 сентябрендә АҠШ президенты Теодор Рузвельт аралашсылығында Нью-Хэмпширҙа "Портсмут солохо" тигән килешеү менән нығытыла. Рәсәй Японияға Порт-Артурҙы, Сахалиндың яртыһын бирә. Уларҙан тыш, Маньчжуриянан китә, Японияның Кореяға йоғонтоһон таный.

Рәсәй үҙ тарихында быңдай рәхимһеҙ еңелеүҙе Батый хан ябырылыуынан һуң кисергәне юҡ ине. Хатта Наполеон да Рәсәйгә япондар килтергән хәтлем зыянды килтерә алмағайны. Икенсе Бөтә донъя һуғышынан һуң 60 йылдан ашыу ғүмер үтеүгә ҡарамаҫтан, барса илдәр үҙ-ара килешеп-ярашып бөткәндә, Рәсәй менән Япония араһында, 1956 йылғы ниндәйҙер төҫһеҙ бер декларациянан башҡа, әле һаман тыныслыҡ килешеүен кәүҙәләндергән ныҡлы солох юҡ. Был билдәһеҙлек нигеҙендә ике күрше илдең үткән быуаттың тәүге яртыһында өҙлөһөҙ ыҙғыштары шауҡымы ятмаймы икән?

## *Допросҡа тиң әңгәмә*

– Бына ошо була минең хәрби биографиям, майор иптәш. 1904-тә һуғышҡа киткәнемдән бирле мин ошонда, Алыҫ Көнсығышта. Утыҙ дүрт йыл...

– Полковник Сенькин тураһында ниҙәр әйтә алаһығыҙ?

– Уның тураһында ниҙер әйтергә уйлаһам, үҙем хаҡындағы хикәйәне яңынан ҡабатларға тейешмен. Беҙ уның менән армияға бергә саҡырылдыҡ, шул

замандарҙан гел йәнәшбеҙ. Барыһын да бергә уртаҡлаштыҡ. Әсеһен дә, сөсөһөн дә. Беҙ уның менән яҡташтарбыҙ: Муром еренән. Бер волостан, хатта бер ауылдан.

– Әммә икегеҙҙең социаль сығышы ике төрлө. Ул – дворяндар нәҫеленән, помещик балаһы, ә һеҙ – крәҫтиән. Яңылышмаһам, һеҙҙең ғаилә уларға бил бөккән.

Комдив йәнә көлдө.

– Әйттем бит мин һеҙгә, һеҙ кешене кеше үҙ-үҙен белгәндән дә һәйбәтерәк беләһегеҙ, тип. Беҙ уның менән бала саҡтан уҡ бергә үҫтек. Дуҫ булып тиһәм, арттырыу булыр. Беребеҙҙең барин, беребеҙҙең батрак икәнен һиҙмәнек.

– Һуғышта нисек бергә булып сыҡтығыҙ?

– Мине, йәшем етеү сәбәпле, былай алдылар, ә Сенькин һуғышҡа үҙе теләп китте. Һуғыш башланғас ҡына үҙенең дворян икәнлеге иҫенә төштө. Ватанға дошман янағанда, дворян алғы сафта булырға тейеш. Элекке йола буйынса. Мобилизация пункттарында беҙҙе айырманылар.

– Һуғышта барин янында деньщик кеүек йөрөнөгөҙмө?

– Майор иптәш, кәрәгенән артыҡ төпкә төшмәйһегеҙме?

– Ғәфү… Ә шулай ҙа синфи уяулыҡты оноторға беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ.

– Белгегеҙ килһә, Порт-Артур гарнизоны дошманға баш һалғанда, мине, контузия алған һушһыҙ һалдатты, был яҡҡа подпрапорщик Сенькин күтәреп тә һөйрәп алып сыҡмаған булһа, мине фани донъя күптән онотҡан булыр ине, йәки әле һаман япон әсирлегендә йөрөр инем… Башҡаларҙа эшем юҡ, мәгәр һуғыш беҙҙе тигеҙләне, дуҫлаштырыу ғына түгел, хатта туғанлаштырҙы. Эйе, батрак менән баринды!

– Бик ҡыйыу белдереү яһанығыҙ, комдив иптәш. Үҙегеҙҙе пролетар аңын, синфи уяулығын юғалтҡан йәки юғалта барған командир тип уйламайһығыҙмы?

– Фронтта йәшәү менән үлем тураһында күберәк уйлайҙар, майор.

– “Ә майор иптәш”!

– “Иптәш”, “иптәш”!

Тикшереү барған урындан килеп еттеләр. Ебәрелгән кесе дәрәжәле офицер тикшереүҙең хәҙергә өлгәшелгән һөҙөмтәләре тураһында сатнатып һөйләй башлағайны, майор тегене ым менән генә туҡтатып, тышҡа әйҙәне. Докладты ҡайҙалыр тышта тыңлап бөткәс, күп тә үтмәне, кире инде.

– Ҡыҙылармеецтар мәйеттәрен ерләү хәстәрен күрә башлау кәрәктер. Ҡорбандарҙың күп, бигерәк тә дәүләт сиге яҡын булмау сәбәпле, үҙ еребеҙгә… – Комдив майорға аҫтан ҡараш ташлап, тамаҡ ҡырып алды. – Сиктең теге яғына күсереп ерләү мөмкинселеге юҡ, тип уйлайым. Һәр мәрхүм һалдатҡа шәхсанә ҡәбер ҡаҙыу ҙа мөмкин түгел… Минеңсә, казарма артындағы буш урындан да һәйбәтерәк вариант юҡ. “Теге” яҡтар ни менән мәшғүлебеҙҙе күрмәһендәр... Ерләүҙе ойоштороуҙы үҙемә алам.

– Аңлайым, комдив иптәш. – Майор, ауыр ҡалҡынып, сығыр яҡҡа ыңғайланы. Добрягин тәҡдименә бөтә яуабы шул “аңлау” менән бөттөмө, тигәндә, урамға сыҡҡас:

– Һәләк булған заставаларҙың командирҙарын ерләү эштәренә йәлеп итмәгеҙ, – тине. – Хәҙергә барыбер уларҙан һорау алыу… улар менән әңгәмәләшеү бара. Мин һеҙгә улар менән әлегә аралашмаҫҡа тәҡдим итәм. – Чекист кеҫә сәғәтенә ҡарап алды. – Бер сәғәттән яңынан ошонда осрашабыҙ. Мин армия штабы менән элемтәгә инергә тырышам. Уларға… уларға Мәскәү нимә тигәндер… Шуны көтәбеҙ.

– Армия штабы менән һөйләшергә, һеҙ килгәнсе, өлгөрмәй ҡалдым. Минең дә командующийға доклад яһайһым бар.

– Кәрәк булғанда әйтербеҙ… Командующий һеҙҙең бындалыҡты белә.
– Сенькин менән әңгәмәләшеп бөттөгөҙме?
– Юҡ. Уның менән мин генә һөйләшәм… Һүҙ бөтмәйенсә уның да бер кем менән аралашырға хаҡы юҡ.
Майор кинәт кенә бер ҡатлыраҡ бәндә ҡиәфәтенә инергә һәм йылмайырға тырышып ҡарап ҡуйҙы:
– Комдив иптәш, әйтһәгеҙ ине: ҡасандыр һуғыш ваҡыттарындамы… ну нисектер… һеҙгә полковник Сенькиндың японлар менән аралашыуына шаһит булырға тура килмәнеме?
Добрягин ҡаштарын йыйырып бер аҙ уйланып торҙо, унан һуң тәүәккәл рәүештә:
– Булдым! – тине. – Тура килде.
– Әһә, әһә!.. Нисегерәк? Ниндәй шарттарҙа? Ҡасан? Ҡайҙа?
– Ул мәлғүнде әйтәһегеҙме?! Йөҙәрләгән, хатта меңәрләгән япон менән аралашты! Значит, былай… Беҙ Порт-Артур траншеяларында ултырабыҙ. Японлар өҙлөкһөҙ атакалай. Тегеләрҙе ҡырып һалып ҡуябыҙ. Яу тынған араларҙа тегеләрҙе күмергә йыш ҡына подпрапорщик Сенькин взводын ебәрәләр... Бына шунда ул үле японлар менән ғарыҡ булып аралашты. Туйыуынан, хатта, өҙлөкһөҙ һүгенә торғайны.
Майорҙың балҡып киткән йөҙөн һөрөм ҡапланы.
– Шул ғынамы?
– Ниңә, әҙме ни? – Бер-береһенә тештәре үтмәгәнгә асыҡтан-асыҡ әсенешеп тә үкенешеп секерәйешеп торҙолар. – Хәҙер герман да япон шпиондарын тотоу модала.
– Сенькин – барыбер дворян, батша армияһы офицеры! – тине майор тештәре араһынан.
– Аптырамағыҙ, майор! Һәләк булған эскадрондар командирҙарының яртыһы тиерлеге – барон Унгерн, адмирал Колчак офицерҙары… Яңылыш ишетмәнегеҙ.
– Нишләп улар бында, заставала?
– Заманында сит ерҙәргә китергә теләмәгәндәр, ә Рәсәй эсенә юлдары өҙөлгән… Улар нейтраль зонала… Ҡыҙылмы, аҡмы икәнлегенә ҡарамай, Рәсәйгә хеҙмәт итеү – уларҙың һуңғы йыуанысы.
…Әйткәненсә, майор бер сәғәт эсендә генә килә алманы, артығыраҡҡа китте. Атлыларына һөйләшеүгә ярашлы күрһәтмәләр биргәндән һуң, комдив майорҙы көтөп ултырҙы. Килештерә, ҡәһәрең! Дилбегәне шым ғына тартып ала белә. “Мәскәү” ти бит әле ул… Шулай, бындай осраҡ менән Мәскәү кисекмәҫтән хәбәрҙар булырға тейеш. Алдынан алды был майор. Өлгөр, һәләк өлгөр! Икенсе берәр төрлө хеҙмәт кешеһе булһа, комдив белер ине нисек һөйләшергә! Ә был егеттәр менән түҙемлек күрһәтергә генә ҡала. Быларҙың үҙ аҡылдары үҙендә, үҙ хөкөмдәре үҙендә… Бик үк дорфалыҡ күрһәтмәһә лә, Сенькинды ҡалдырып, уның менән “әңгәмәләшеп” ултырыуы – үҙе һорау алыу түгелме ни?! Тик бына Сенькин менән нисек мөғәмәлә итәләрҙер?
Әллә ниндәй аңлап булмаҫлыҡ хәлдәр тыуып китте ил эсендә. Күпләп-күпләп ниндәйҙер халыҡ дошмандарын фаш итә башланылар. Һис бер шиккә эйә булмаған, һин дә мин эшләп йәки хеҙмәт итеп йөрөгәндәрҙе уйламағанда-көтмәгәндә төн йөҙөндә килеп ҡулға алалар ҙа, аҙаҡ тегеләре ғәйеп була ла ҡуя. Ишеткән-белгәндәр һүҙенсә, ҡулға алыныусылар менән төрмәләр тулған. Төньяҡта һәм Себер төпкөлдәрендә ҙур-ҙур лагерҙар ғибәрәт. Атылыусыларҙың һанын бер кем яҡынса ла атай алмай. Блюхер, Якир, Тухачевский кеүек оло дәрәжәләге хәрбиҙәр фажиғәһе комдивты бигерәк тә тетрәндерә ине. Ысын

булһалар, халыҡ дошмандары Союздың мөһим Европа өлөшөндә генә әүҙемләшкәндәрме, ә бына Алыҫ Көнсығышҡа яҡынлашҡан һайын ҡулға алыуҙар баҫыла барған кеүек.

Шуларҙы уйлап, Добрягиндың төндәрен йоҡолары осоп ятҡаны бар. Комдив хеҙмәт иткән ғәскәрҙәрҙә хәҙергә тыныс, ҡулға алыуҙар ишетелмәгән кеүек. Ғәскәр Маньчжурия ерендә булғанға теймәй тороуҙарымы? Әллә хәҙергә ҡулдары етмәй торамы? Япон һуғышына алынып, ошоға тиклем тыуған-үҫкән яҡтарына бер тапҡыр ҙа ҡайтып әйләнмәүҙәренә Сенькин менән икәүләп йыш ҡына бошонһалар ҙа, һуңғы ваҡытта үҙҙәренең ҡулға алыуҙарҙан алыҫта йәшәүҙәре болоҡһоған күңелдәрен баҫыуға бер аҙ сәбәпсегә лә әйләнде.

1905 йылда Сенькиндар донъяһын ихтилалсылар яндырып юҡ иткән. Күп тә үтмәне, Сенькиндың ата-әсәһенең бер-бер артлы донъя ҡуйыуҙары тураһында хәбәр алдылар. Ике тома етем дуҫ уйлаштылар ҙа, һуғыш тамам булғас та ошо Алыҫ Көнсығышта хәрби хеҙмәттә ҡалдылар.

Ата-әсәһенән бәләкәйҙән ҡалып, көтөр кешеләре булмаһа ла, тыуған ер – тыуған ер булып ҡала. Онотолмай! Донъя мәшәҡәттәренән арынып, уйҙарға талһаң, бөтмәй ҙә, китмәй ҙә торған татлы хәтирә булып иҫкә төшә лә тора…

Эйе, ошоғаса был тарафтарҙа тыныс ине әле. Бына хәҙер, үткән төн фажиғәһенән һуң, әллә нәмәләр башланыуы бар. Ни менән бөтөрөн Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белә… Сит-ят яҡтарҙа орҙо-бәрҙе хәбәр һөйләргә өйрәнгәндәргә, бәлки, бөгөн килеп ауыҙҙарын үлсәп асыу, һүҙҙәрен һайлап һөйләү ваҡыты килгәндер? Тик бына Сенькин менән нишләрҙәр, иҫән ҡалған командирҙарҙы ниндәй тәҡдир көтә? Уларҙың бит күбеһе ошо яҡтарҙа утты-һыуҙы кисеп тәжрибә туплаған, ил таянырлыҡ аҫыл егеттәр! Һәм бөгөн килеп уларҙан ЧК допрос ала. Эй, Алланың эштәре, тиң… Ә, бәлки, бында Алланың бер ҡатнашы ла юҡтыр? Булған хәлдә лә, бәлки, ул ҡаты һынау ғына ебәргәндер? Һынауын ебәргән дә, мин биргән баш менән баштарын ҡотҡара алырҙармы, ни сара күрерҙәр икән, тип һынап ултыралыр?.. Ә баш бит түмәргә һалыу өсөн түгел, уйлау өсөн бирелгән… Түмәргә үҙең һалмаһаң да һалдырырҙар! Һаҡлана алмаған баш намыҫы таҙалығын нисек иҫбатлар?

## Рәсәйҙең утлы ҡаҙаны

*Крәҫтиәндәрҙең фәҡир һәм аяныс тормошо көндән-көн насарлана барҙы. Ас халыҡҡа ҡарау үҙе генә лә ҡот осорғос тәьҫир итә ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ғазаплы тормош менән үлемдәр уртаһында ҙур-ҙур биләмәләр, затлы йыһаздар менән тулған мөһабәт һарайҙар күбәйҙе, помещиктар банкеттар, балдар, концерттар, һунарҙар менән тулы хөр тормошта йәшәй бирҙе.*

**Сергей СЕМЕНОВ,**
**крәҫтиәндәр лидеры, 1912 йыл**

XIX быуатҡа Рәсәй бөйөк держава булып аяҡ баҫа. Уның экономика статусы халыҡ-ара һиҙелерлек артта ҡалыуы һәм Ҡырым һуғышында (1853 – 1856) еңелеүенән һуң әкренләп күтәрелде. Армияһы фиҙакәр һуғышыуға ҡарамаҫтан, Бөтә Донъя һуғышы һынауҙарын Рәсәй күтәрә алманы, йәмғиәт тарҡалды, революциялар монархияны юҡҡа сығарҙы.

1815 йылда Рәсәй иң ҡеүәтле державаларҙың береһе ине. Һуғыштарҙа үҙенүҙе аямаған рус дворянлығы йәмғиәттә үҙенең лидерлығын раҫланы, мәгәр был либераль үҙгәрештәрҙе тотҡарлауға сәбәпсе булды.

Александр I (1801 – 1825) менән Николай I (1825 – 1855) батшалыҡ иткән дәүерҙә Рәсәй дворянлыҡҡа, армияға һәм чиновниктарға таянған аграр ил булып ҡала килә. 1825 йылдың декабрендә Европа идеялары менән йәшәгән самодержавиеға ҡаршылар батша хакимлығын сикләргә тырышып ҡараны. Нигеҙҙә офицерҙарҙан торған декабристар ихтилалы баҫтырылды, ихтилал алдынан ғына тәхеткә ултырған Николай I ҡаты цензура индерҙе.

Сит илдәрҙә Рәсәйҙе консерватив көстәр рәтенә хисапланылар. Николай I идара иткән дәүерҙә, революцион көстәргә ҡаршы көрәштән тыш, Рәсәй үҙ йоғонтоһон Балҡан ярымутрауында һәм Яҡын Көнсығышта көсәйтергә тырыша. 1849 йылда Рәсәй Венгриялағы ихтилалды баҫтырҙы. 1853 йылда Ҡырым һуғышы башлана: Солтан Вифлеем ғибәҙәтханаһының асҡысын православныйҙарҙан алып католиктарға тапшыра. Ҡырым һуғышы башланыуға шул сәбәпсе була. Рус армияһы Молдавия менән Валахияны баҫып ала. Төркиә Рәсәйгә һуғыш аса.

Дини бәхәстәр католик тәғлимәтен яҡлаусы Франция менән православиены яҡлаған Рәсәйҙе етди дипломатик ҡаршылыҡтарға килтерә. Был ҡаршылыҡтарҙан Иерусалим менән Вифлеем өҫтөнән идара иткән Төркиә лә ситтә ҡала алмай. Был һуғышта Николай I Константинополь һәм Урта диңгеҙ боғаҙҙарын (Босфор менән Дарданелл) яулап, Төркиә өҫтөнән хакимлыҡ итергә ниәтләнә. Был ниәтен Рәсәй Төркиә вассалы Румынияны баҫып алыу менән (1853, июль) тормошҡа ашыра башлай. Яҡын Көнсығышта көстәр нисбәтенең үҙгәреүен теләмәгән Англия менән Франция Төркиәне яҡлап Константинополгә үҙ хәрби флоттарын ебәрә һәм һуңғараҡ (1854, март) Рәсәйгә һуғыш иғлан итәләр. 1853 йылдың 4 ноябрендә Көньяҡ Румыния ерендә Ғүмәр паша (хорват Михаэл Латтас) Рәсәй ғәскәрҙәрен ҡыйрата. Австрия ла үҙ именлеге өсөн борсола. Пруссия менән оборона альянсы төҙөгәс, Төркиә фатихаһы менән, Австрия ғәскәрҙәре Дунай кенәзлектәре ерҙәренә баҫып инә. Рәсәйгә Австрия ябырылыуы янай. Рәсәй Румыния ерҙәренән һәм башҡа Дунай кенәзлектәре ерҙәренән еңелеүгә дусар булып сигенә. 1854 йылдың йәйендә (июнь – июль) Англия, Франция, Пруссия, Австрия талап иткән шарттар буйынса, нигеҙҙә, Төркиәнең именлеген һәм территориаль бөтөнлөгөн талап иткән тыныс килешеүҙе Рәсәй танымай. Был килешеүҙән баш тартыуҙың һөҙөмтәһе булып Франция һәм Британия флоты Фицроу Джеймс Генри Сомертсет, лорд Раглан һәм Англия генерал-майоры, француз маршалы Арман де Сет-Арно етәкселегендәге экспедиция Ҡара диңгеҙгә инә. Маҡсаттары – Төркиә яр буйҙарының һәм диңгеҙ юлдарының хәүефһеҙлеген булдырыу; Севастополдәге рус базаһын юҡ итеп, Ҡара диңгеҙҙә Рәсәйҙең яңғыҙы баш-баштаҡлыҡ ҡылыуҙарына сик ҡуйыу. Артабан Рәсәй өсөн күңелһеҙ тамамланған Ҡырым һуғышы йәки Севастополде обороналау һәм уны юғалтыу ваҡиғалары була.

Төркиә менән Сардинияны иҫәпләмәгәндә, донъяның көслө илдәренән һуғышта Рәсәй үҙенең еңелеүен танырға мәжбүр һәм, Европала еңелгәндән һуң, иғтибарын Азияға йүнәлтә. Яңы батша Александр II реформалар үткәреүҙе ҡайғыртырға керешә.

Александр II Рәсәйҙе либераллаштереүҙән артыҡты үҙгәртергә теләмәй, илдең экономикаһы менән армияһын яҡшыртыуҙы ҡайғыртмай. Ул үҙе лә, вариҫы Александр III тә самодержавиенан башҡа идара формаларын танымайҙар. 1861 йылда крепостной ҡоллоҡ бөтөрөлә. 1864 йылда, ваҡыт талабы менән, идара итеүҙең яңы институты – земстволар ойошторола. Ошо уҡ йылда закондар сығарыуҙа бер аҙ үҙгәрештәр күҙәтелә. Армияның көсөн нығытырлыҡ әҙ-мәҙ яңылыҡтар индерелә. Әммә ил эсендәге тамырҙан үҙгәрештәргә Александр II

ҡәтғи ҡаршы була. Шуның өсөн дә 1881 йылда народоволецтар тарафынан үлтерелә.

Крепостной ҡоллоҡ бөтөрөлгәндән һуң Рәсәй индустриализация йүнәлешен ала. Үҙ мөмкинлектәре булмау сәбәпле, уны тормошҡа ашырыу тулыһынса сит ил займдарына бәйле була. 1913 йылға Рәсәй капиталының өстән бер өлөшө тиерлеге сит ил кампанияларыныҡы. Займдарҙың иң күп өлөшө Францияға тура килә. Шөкөр, беҙ ул бурыстарҙы, нигеҙҙә Францияға, XXI быуат башында булһа ла кире ҡайтара алдыҡ.

Александр III әҙ һөйләй, күберәк эшләй. Индустриализация тормошҡа ашырыла башлай. Яңы армия менән флот төҙөлә, транспорт һәм банк системалары барлыҡҡа килә. “Иң һәйбәт урыҫ батшаһы” халыҡ патриотизмын оҫта файҙалана. Шуға күрә лә ул батшалыҡ иткән осорҙа народниктар йәки Көнбайыш яҡлы либералдар тынып торорға мәжбүр була.

Һуңғы рус батшаһы Николай II (1894 – 1917) “рус ерҙәренең лайыҡлы хужаһы була алманым”  тип яҙып ҡалдырған, тиҙәр. Ул идара иткән осорҙа йәмғиәттәге ҡаршылыҡтар үҙҙәренең юғары нөктәһенә күтәрелә. Көнсығышта япондар менән һуғыш барғанда илдә оло  фетнә – Беренсе рус революцияһы ҡуба. Һуғышта флотты юғалтыу, Алыҫ Көнсығышы ҡоро ер ғәскәрҙәренең ҙур юғалтыуҙарға дусар ителеп рәхимһеҙ еңелеү кисереүе, ихтилал арҡаһында һуғышты туҡтатырға тура килә. Боларған халыҡты тынысландырыу өсөн батшаны сәйәси ирек һәм закондар сығарыу органы – Дәүләт Думаһын ойоштороу вәғәҙә иткән манифест яҙырға өгөтләй алалар. Халыҡ ул манифесты:

*«Царь испугался,*
*Издал манифест.*
*Мертвым – свободу,*
*Живых под арест»,* –

тигән киң таралыу тапҡан таҡмаҡ менән баһалай. Һуңғараҡ Николай II яйлап барыбер элекке идара итеү ысулына күсә.

1914 йыл етеүгә күптәр ихтилал көтөп йәшәй. Беренсе Бөтә донъя һуғышы башлана. 1914-1915 йылдар бик ауырға тура килә. 1917 йылдың февралендә буржуаз-демократик революция еңә. Николай II тәхеттән ваз кисә, империя юҡҡа сыға. (Ғәҙеллек хаҡына иҫкәрмә: 1917 йылдағы ике ихтилалдан һуң илдең исеме танымаҫлыҡ итеп үҙгәртелде, ә империалистик асылы шул килеш ҡалды.)

Ҡырым һуғышында еңелгән Рәсәй төп иғтибарын Көнсығышҡа йүнәлтте, тигәйнек.  1856 – 1876 йылдарҙа Коканд ханлығы, Көньяҡ Ҡаҙағстан, 1877 – 1900 йылдарҙа Төрөкмәнстан, Көнсығыш Тажикстан,  өлөшләтә Көнсығыш Ҡаҙағстан кеүек мосолман халыҡтары йәшәгән ерҙәр Рәсәй составына яулау йәки дипломатик юлдар менән индерелә. 1858 – 1860 йылдарҙа, Цинь империяһының тарҡалыр сиккә етеүен  файҙаланып, Төньяҡ-Көнсығыш Ҡытайҙың, икенсе төрлө әйткәндә, Маньчжурия еренең оло ғына өлөшөн (бөгөнгө Приморье крайы менән Амур өлкәләре; Владивосток ҡалаһына 1860 йылда нигеҙ һалына), шул уҡ йылда шул уҡ Ҡытай составына ингән тувалар ерен (Тыва Республикаһы) Рәсәй үҙенә  ҡушты.

Егерменсе йылдар уртаһына тиклем өҫтә хәтергә алынған тарихи ваҡиғалар үткәс, хәҙер инде Рәсәй империяһы түгел, ә Советтар иле, икенсе төрлө әйткәндә, “СССР”-ҙа Граждандар һуғышы тамамланыр-тамамланмаҫтан СССР Алыҫ Көнсығышы сиген Харбин тирәһенән Порт-Артур менән бәйләүсе Маньчжурияны ашанан-аша һалынған тимер юлы өсөн, оҙаҡҡа һуҙылған иҫке бәхәс СССР менән Ҡытай араһында яңынан һәм яңы көс менән ҡубып китә. Хөрмәтле

уҡыусы “Граница” тигән нәфис фильм сериалын, ундағы төп герой – Шараповты, серияларҙың береһендә мотлаҡ һөмһөҙ һәм яуыз йөҙлө Ҡытай хәрбиҙәренең совет хәрби әсирҙәре мәйеттәрен ҡапсыҡтарға һалып машиналарҙа беҙҙең сиккә килтереп ташлап китеүҙәрен, ҡапсыҡтарҙың береһенә “КВЖД нас, а не вас” тигән яҙыу ҡалдырғандарын хәтерләйҙер.

Ҡылана торғас, ҡытайҙар “доигрались”. 1929 йылда тәҡәте ҡороған СССР етәкселеге мәсьәләне хәрби юл менән хәл итергә ҡарар итә. Хәрби операция барышында совет генералдары, үтә илһамланып китеп һәм үҙ белдектәре менән, артығын тырышып ташлайҙар, йәғни КВЖД линияһын ғына алаһы урынға, бөтә Маньчжурияны икенсе тапҡырға тулыһынса биләйҙәр. Тик совет ғәскәрҙәре Милләттәр Лигаһы баҫымы аҫтында ғына Маньчжуриянан сығарыла. СССР артынса Маньчжурияны Япония ғәскәрҙәре биләй һәм япондар маньчжурҙарға президент етәкселегендә Маньчжоу-Го дәүләтен төҙөп бирә. Совет ғәскәрҙәре Маньчжурия еренән сығып бөтмәйенсә 1905 йылда уҡ нығынып алған Рәсәй аҙаҡ Корея–Маньчжурия “сиктәре билдәләнмәгән” ерҙә туҡтап ҡала. Маньчжоу-Го хөкүмәте, япондар ҡурсалауына таянып, совет ғәскәрҙәренең сығып бөтөүен талап итәсәк. СССР талапты һанға һуҡмай. Шуның арҡаһында “Хәсән күле янындағы һуғыштар” тигән дөйөм исем аҫтында 1937-1938 йылдарҙа эреле-ваҡлы һуғыштар ҡабатланып торасаҡ. Популяр тарих фәнендә “Алыҫ Көнсығыштағы провокациялар” тип кенә аталған ваҡиғалар иһә үрҙә йыш телгә алынған “История войн” тигән абруйлы хеҙмәттә “Иғлан ителмәгән һуғыш” тип баһалана.

Беҙ бәйән иткән ҡиссала генерал Добрягин, полковник Сенькин, кавалерист Мөстәҡим Хәлитовтар нәҡ шул утлы “ҡаҙан” эсендә ҡайнайҙар.

## Ҡасыу

Үткән төн фажиғәһе, унан һуң баштарҙы ауырға килтергән тулы бер көндән үлеп йонсоғанын Добрягин кис еткәс кенә, ғәмәлдә бөтә арыу-талыуҙары йөрәген ҡапыл ғына һулытҡас, быуынһыҙ иткәс, мейеһенә эҫе ҡапҡас ҡына һиҙҙе. Күҙҙәре йомолоп барған генерал кисекмәҫтән ял итеп алыу кәрәклеген аңланы. Ул йәне менән тәне һораған ялды хәҙер биреп ҡалмаһа, һуңғараҡ, тырышһа ла, йоҡлай алмаясаҡ. Икенсе бер йоҡо бөтөргәненә тиклем ни сирле лә, ни иҫән хәлдә аңҡы-тиңке йөрөр. Шуға күрә ул кинәт кенә барыһына ла ҡул һелтәне лә, тиҙерәк Сенькин кабинетына инеп, диванға оҡшаш ҡаҡ ағас һикегә ауҙы. Ауыр һулап күп тә ятманы, тертләй-тертләй, һаташа-һаташа буталсыҡ төштәргә батҡан тынысһыҙ, мәгәр бик ваҡытлы һәм кәрәкле йоҡоһона талды. Коридорҙағы һаҡсыһына тәфтиш майоры түгел, шайтандың үҙе килһә лә маҙаһыҙламаҫҡа бойорҙо.

Һай, ваҡыт тигәнең! Кемдәрҙе генә үҙгәртмәй ҙә кемдәрҙе генә бөкмәй ул! Бар ине айҙар буйы ҡоро-һары менән туҡланып Порт-Артур траншеяларында бет һимерткән саҡтар! Япондар Порт-Артурҙан бәреп сығарғандан һуң, йәндәрен ҡотҡарып, Мукден ҡалаһына тиклем (Көньяҡ Маньчжурия) сигенеүҙәр, сафта аяҡ өҫтө йоҡлап барған замандар! Мукдендан һуң Төньяҡ Маньчжурияға еткәнсе, япондар эҙәрлекләүе туҡталғансы ҡан ҡойғос һәм һәр берендә еңелеү әсеһен татытҡан өҙләкһеҙ арьергард һуғыштары! Ә хәҙер улайтып булмай... Йәштәр иллеләрҙән үткәс, эштәр икенсерәккә әйләнә икән...

Добрягин өс сәғәтләп серем иткәйне, ҡараңғы төшөр мәлдә ерле юҡҡа тертләп уянды ла яңынан йоҡлай алманы. Һуңғы бер тәүлектәге ваҡиғалар үҙ заставаһында булғанды иҫләү йоҡоһон ҡасырҙы. Тышҡа сығып үҙе алып килгән эскадрондарҙың хәлен дә белешеп йөрөгәһө килмәне. Ярҙамсылары ҡайғыртыр,

ни өсөн эйәрткән уларҙы? Кабинетта ут тоҡандырырға ла ҡушманы. Кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә бер-бер артлы тәмәке көйрәтте. Быңдай осраҡта фронтта ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрен-үҙҙәре “беҙ янғансы тәмәке янһын” тигән булып тынысландыра торғайны.

Яйлап ҡараңғы төштө, ығы-зығылар баҫылып, тышта тынлыҡ урынлашты. Добрягин ултырғысын тәҙрәгә яҡынырак шылдырҙы һәм ҡараңғы кабинеттан тышҡа төбәлде. Күҙ бәйләнгәнсе лә ул алыҫ-алыҫтарға һуҙылып киткән эреле-ваҡлы, алалы-сулалы сопкалар теҙмәләренә ҡарап ултырҙы. Донъя һаман үҙ урынында, сопкалар ҙа… Араларҙы бары алдатҡыс төн шаршауы ғына бүлеп тора, ҡараңғылыҡ артында сит ерҙәр… Хәүеф-хәтәр янаған тарафтар… Өндәшмәй тора-тора ла һаман берәй һеңгәҙәтә һуғып ҡуя торған тарафтар… Добрягиндың ҡасандыр яуҙаштары ятып ҡалған сит ерҙәр. Нисә меңдәр ул юғалған баштар... Нисә тиҫтә, нисә йөҙ мең икән? Берәйһе һананымы, һанаһа, осона сыға алдымы икән?

*…Тихо вокруг сопки,*  
*Все покрыто мглой.*  
*Вот из-за туч блеснула луна,*  
*Могилы хранят покой…*  
*Белеют кресты,*  
*Это герои спят.*  
*Прошлого тени кружат давно,*  
*О жертвах боев твердят…*  
*Тихо вокруг,*  
*Ветер туман унес,*  
*На сопках Маньчжурии воины спят,*  
*И русских не слышат слез…*

Төн урталары еткәндә донъяны елле-дауыллы ямғыр баҫты. Ямғыр башланып күп тә үтмәне, күҙенә аҡ-ҡара элмәй әлһерәп тә борхорап майор килеп инде. Әҙәм аңларҙай барлы-юҡлы һүҙҙәрен, тыуа-тыуғандан бирле әпсене ише ятлап бөткән һүгенеү һүҙҙәре шәлкеме менән ҡушып яр һалып аҡырҙы:

– Хыянат!.. Хыянат!..

Комдив ләм-мим өндәшмәй, ашыҡмай ғына шәм тоҡандырҙы. Филтәне нығыраҡ сығарып, кабинет эсе тегене-быны абайларлыҡ яҡтыға тулғандан һуң, лысма һыуланған, баҫкан урынында түҙеп тора алмаған майорға баштан-аяҡ сәйер ҡараш ташлап алғас, сикһеҙ ғәжәпләнеп, мәгәр һәләк тыныс рәүештә:

– Ниҙәр бар, майор? – тине.

– Ҡасҡандар! Ҡасҡандар, ҡәбәхәттәр!

– Кемдәр ҡасҡан? Аңлайышлыраҡ һөйләп булмаймы?

– Кемдәр булһын?! Һеҙҙекеләр! Командирҙар! – Майор комдивҡа йөҙгә-йөҙ терәлә яҙып бер екерҙе лә, ҡапыл хәлһеҙләнеп, ултырғысҡа лыпын ултырҙы. Шыңшыуға ла, ыңғырашыуға ла оҡшамаған меҫкен һәм йәмһеҙ тауыш менән илдә яңы хакимлыҡ урынлашҡандан һуң үҙ теләге менән ваз кискән Аллаһының исемен иҫенә төшөрҙө. – О, Господи! Бөтөрҙөләр, ҡәбәхәттәр! Харап иттеләр! Китте башҡынайым, китте!

– Бүтән баштарҙы ҡайғыртамы тиһәм… Ҡайҙа бикләгәйнегеҙ?

– Йәшелсә баҙына!

– Тапҡанһығыҙ урын.

– Шунан башҡа тәҙрәһеҙ тораҡ таба алманым.

– Командирҙар һеҙгә юлбаҫар түгел, баҙға ябып ҡуйырға…

Майор, еүеш башын тырышып-тырышып ойпалап, илдә-көндә ишетелмәгән әллә ниндәй ғәжәби ымлыҡ гөлләмәләре менән көйлө һыҙланып, һыҡраныуын дауам итте.

Комдив Сенькиндың мөйөштә элеүле торған плащ-палаткаһын иңенә һалды ла:

– Киттек, – тине.

– Ҡайҙа?!

– Йәшелсә баҙына!

– Юҡ, мин тәүҙә Армия штабына хәбәр итәм!

– Өлгөрөрбөҙ! Тәүҙә ҡарарға кәрәк, тикшерергә!

– Юҡ, мин хәбәр итергә бурыслы!

– Маңлайығыҙға пуля алырға өлгөрмәм тиһегеҙме?

Майор һажлатып телефон аппаратын борғоларға кереште. Өҙлөкһөҙ дежурныйға өндәште, ух та пых трубкаға өрҙө. Яуапҡа дежурный тауышы түгел, хатта элемтәнең ғәҙәти шытырҙауҙары йәки геүләүҙәре лә ишетелмәне. Тып-тын! Майор йәнә ҡысҡырынды:

– Саботаж! Провокация! Элемтә өҙөлгән! Өҙгәндәр!

Комдив тынысландырырға тырышты. Ел-дауыл, буран, ямғыр ваҡыттарында элемтә өҙөлөү ҡәҙимге күренеш икәнлеген аңлатты. Сымдарҙы йә ағастар ҡолап өҙә, йә эпән-төпән генә ултыртылған бағаналар үҙҙәре йығыла. Ямғыр туҡтап, көн ултырмайынса үрһәләнеүҙән файҙа юҡ.

– Бында һеҙгә Рәсәй түгел, беҙ сит ерҙә, – тип тиҙ һүрелтте майорҙы генерал. – Миңә усал ҡарауығыҙҙан файҙа юҡ. Бында барыһын да көтөргә мөмкин…

Йәшелсә баҙын барып ҡарау ҡасыу характерына ниндәй ҙә булһа криминал юрарлыҡ һөҙөмтә бирмәне. Эйе, командирҙар ысынлап та ошонда ябылған, ысынлап та юҡтар. Шып-шым, шып-шыма сығып ҡасҡандар.

– Ә һаҡсылар? – тине Добрягин майорға. – Улары ҡайҙа? Һаҡсылар бит һинең егеттәр ине!

Күҙҙәрендә мылтығы булһа атып йығырҙай итеп ҡарап торған майорҙың ғәрлегенән күҙҙәренә хатта йәш эркелгәндәй итте. Белмәйем, тип екерҙе тикшереүсе. Комдивҡа килгәнсе заставаны тетеп эҙләгән. Командирҙарҙан бигерәк, үҙ хеҙмәткәрҙәрен. Улары ла һыуға төшкән кеүек ғәйеп.

Йәшелсә баҙынан һуң майор комдивты ҡорал складына алып барҙы. Тикшереү башлағаны бирле майор ул бында ла һаҡҡа үҙ кешеһен ҡуйғайны. Һаҡсыны арттан килеп шаңғыта һуҡҡандар ҙа ауыҙына сепрәк тултырып, башына ҡапсыҡ кейҙереп, аяҡ-ҡулын бәйләп яҡындағы шыршы олонона сырмап киткәндәр. Кемдәр һөжүм иткәнен дә әйтә алмай.

– Шуларҙың ғына эше инде! Шулар!.. – тип майор туҡтауһыҙ ҡарғанды.

“Ҡорал склады” тигәндәре ауыл мунсаһы хәтлем генә. Боҙолмай торған аҙыҡ-түлектең дә бер өлөшө шунда һаҡлана ине. Өҫтән-мөҫтән генә ҡараштырып сығыу ҙа йөҙгә яҡын гранатаның, ундан артыҡ ҡылыстың, иллегә яҡын торофей япон штык-хәнйәренең һәм командирҙарҙың ҡоралһыҙландырғандан һуң бында тапшырылған шәхси ҡоралдарының юҡлығы асыҡланды. Бер үк ваҡытта консерваларҙың, шәкәрҙең, төйөлгән сохарыйҙың, тәмәкенең байтағы күренмәй.

– Бына күрҙегеҙме? – тине әлһерәгән һәм хәсрәткә батҡан майор. – Һаҡсыларҙы үлтереп, үҙҙәре ҡоралланғандар! Аҙыҡ-түлек төйнәгәндәр! И – за кордон! Үҙе бер банда!

– Нисек “за кордон”?! Ни һөйләгәнегеҙҙе үҙегеҙ аңлайһығыҙмы, иптәш майор?!

– Бүтәнсә уларға юл ҡайҙа? Үҙебеҙҙең яҡҡамы? Хәҙер ҡаптырасаҡтар! Хөкөм ҡарары әҙер: “Халыҡ дошмандары”! Бөттө-китте шуның менән!.. Ах, ысҡындырҙым ҡәбәхәттәрҙе, ах, ысҡындырҙым!..

Майор ыуаланыуын кинәт туҡтатып, кисекмәҫтән арттарынан ҡыуа төшөүҙе талап итте. Комдив ҡапыл-ҡара өндәшмәгәнгә лә бәйләнде.

– Һеҙ нимә, быңдай төндә?! – тине комдив, иҫе лә китмәй. – Ярар… Минең кавалеристарҙы сығарабыҙмы, әллә һеҙҙекеләрҙеме? – Һуңғы һүҙҙән майор һыуына төштө. – Бына шулай. Быныһы – бер. Икенсенән, ҡойоп ямғыр яуғанда, өҫтәүенә, күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡара төндә эҙҙәрен нисек табырбыҙ?

Асығын әйтергә баҙнат итмәгәнгә, майор уратып-суратып комдивтың ҡасыуҙа ҡатнашлығы барын тумалтып аҙапланды. Комдив уның өҙләкһеҙ һөйләнеүҙәренә иғтибар итмәне.

– Башымды ҡаңғыртмағыҙ әле, майор, – тине ул. – Мине бүтән шик борсой. Икенсе нимә-ә…

– Тағы ни булыуы мөмкин?

– Был төндәге лә, үткән төндәгеләр ҙә хунхуздарҙың этлеге түгелме икән, тим.

– Хунхуздар? Улары кемдәр?

– Хунхуздармы?.. – Комдив майорға һынаулы ҡарап ҡуйҙы. – Күреүемсә, һеҙ беҙҙең яҡта яңы кеше. Яңылышмайыммы?

– Иркутскиҙан. Бында күсерелеүемә дүрт ай тула.

– Шулайҙыр… Урта Азиялағы баҫмасыларҙы ишетә беләһегеҙҙер бит?

– Беләм!

– Хунхуздар ҙа шулар ише башкиҫәрҙәр. Баҫмасылар – Үзбәкстанда, хунхуздар – Төньяҡ Маньчжурияла. Бигерәк тә беҙҙең заставалар тирәһендә мыжғып йөрөйҙәр. Юҡһа барыһын да япондарға япһарырға күнеккәнбеҙ. Япондан бигерәк Маньчжур хунхуздары тәҡәтте ҡорота. – Комдив, хәҡиҡәтте иртәгә асыҡларға, уяулыҡ менән һаҡты көсәйтергә кәңәш итеп, Сенькин кабинетына китеп барҙы.

…Кабинетҡа инеп, ямғыр һыуҙары һырҡырап ағып торған плащ-палаткаһын элгәс, ул брезент туҡыманы усында ҡыҫып бер аҙ уйланып торҙо ла, ауыр көрһөнөп:

– Ах, Сергей, Сергей!.. – тип ҡуйҙы.

Ҡапыл комдивтың башына уй һуҡты: ҡаты, ҡайнар сәй эсеп алырға!

…Комдив яһалған сәйен яртылаш та эсеп өлгөрмәне, йәнә майор килеп инде. Был юлы элекке ише ҡуҙғыған һәм алабарман эшем эйәһе түгел, ә күшеккән һәм шаңғыған тауыҡ ине. Йәнәһе, ошо тәңгәлдән үтеп барған, кабинет тәҙрәһендә ут күренгәнгә генә ингән. Комдив уны һыйға теүәл йөрөүе менән маҡтап алды. Һаҡсыһынан тиҙ генә күлдәк-ыштан менән сылғауына тиклем өрәңы һалдат формаһын килтертеп, өҫ-башын алмаштыртты. Шунан һуң ғына һыуынған сәйҙе яңыртып, табынға ултырҙылар. Сәй янына комдив ихтыяры менән араҡы ла килеп ултырҙы.

Комдив майорҙы өндәшмәй-тындашмай ғына һыйланы. Алдында – аш, ике ҡулы буш. Бер-береңә сөсөләнешеп, ҡыҫташып ултыра торған табын түгел. Майор үҙенә һалынған араҡыға үсексән, холоҡһоҙ бала кеүек маңлайы аҫтынан ҡарап, йөҙөн һытып оҙаҡ уйланып ултырғандан һуң, бур бесәй табындан ит сәлдергәндәй, бик етеҙ генә ауыҙына төп ҡутәрә ҡаплап ҡуйҙы. Артынан ни ҙә булһа ҡабырға ла онотоп, ауыҙынан әсеһе киткәнсе яланып та ялманып, мутлығымды күреп торған кеше булманымы, тигән кеүек, тирә-яғына алан-йолан шикле ҡаранып ултырҙы. Ул араҡы артынан ҡайнар сәй эсеп, кәүҙәһенә иҙрәткес

йылылыҡ йүгергәндән һуң ғына йән һәм тән тыныслығы һиҙҙе. Йәмерәйгән йөҙөнә һиллек билдәләре ҡалҡты, һулышы дөрөҫ ритмға инде, уҫал күҙҙәре йыуашланды…

Майорҙың хәлгенәһенең остоҡ ҡына үҙгәреше лә һиҙҙермәй генә һынап ултырған комдивтың иғтибарынан ысҡынманы. Тәкәбберлектең аръяғына сығып, һауаланыуҙан алйып йөрөгәндең күҙ алдында, бисараға булмағанда ла, үшәнгә әүерелеүенән яңғыратып көлгөһө килде. Тик улай ярамай… Икеһе лә дыуамалды һыуындырған, мейеһеҙҙе уйландырған, батырҙарҙы һиҫкәндергән хәлгә тарып ултыралар.

Комдив ярым-яртылаш араҡылы шешәне ҡулына алып, ҡағыҙына ҡарап ултырҙы ла:

– Һәйбәт нәмә, – тип кире өҫтәлгә ҡуйҙы. – Билгеле, белеп эскәндәргә… Мин был тарафтарҙа Порт-Артур оборонаһынан бирле. Утыҙ дүрт йыл! Әйтеүе генә анһат… Ошо нәмәнең ярҙамын тойоп йәшәйем. Маҡтанғандан түгел: самалап эсә беләм…

– Михаил Лазаревич, беҙҙең ниндәй хәлдә ҡалыуыбыҙҙы артабан һөйләп тороу урынһыҙ. Һеҙҙеңсә, беҙҙең тәүге һәм кисектергеһеҙ бурысыбыҙ низән ғибәрәт?

Комдив шәм ҡыуығын алып, филтәнең файҙаһыҙ көл киҫәгенә әйләнгән өҫкө өлөшөн шырпы бөртөгө менән ҡырып төшөрҙө, бормасынан бороп өҫкәрәк ҡалҡытты ла ҡыуыҡты кире шәм селтәренә ултыртты. Шунан һуң ғына бөтә кәүҙәһе менән боролоп, вайымһыҙ тонда:

– Майор! – тине. – Һеҙ тикшереү төркөмө менән килдегеҙ ҙә заставала идараны тулыһынса үҙ ҡулығыҙға алдығыҙ. Һеҙгә сикләнмәгән хоҡуҡтар бирелгән икән, бөтөнөһөн дә үҙегеҙгә хәл итеү урынлы булмаҫмы?

– Йәғни бөтә яуаплылыҡ бер минең өҫтә булып сыға?

– Ә һеҙ нисек уйланығыҙ? Минең ҡулымдан тартып алып башлағанһығыҙ икән, рәхим итегеҙ, эште ахырына тиклем еткереп ҡуйығыҙ. Тикшереү эштәренән мине бөтөнләй ситләштереүегеҙҙе нисек аңларға? Мин һеҙгә кем? Мин бында ни өсөн килгәнмен?

– Юҡ, Михаил Лазаревич! Улай булмай. Беҙ икәү яуап бирергә тейешбеҙ!

– Ғәфү, балаҡай, беҙҙән әле бер кем дә яуап талап итмәй. Хәҙергә! Ә һеҙ яуап тоторға әҙерләнә башланығыҙ. Нишләп һеҙ башығыҙҙы ҡотҡарыуҙы уйлай башланығыҙ? Үҙегеҙҙең башығыҙҙы! Һеҙҙе бында үҙегеҙ тураһында түгел, тәү сиратта ана теге егеттәрҙең яҙмышын хәл итергә ебәргәндәр. Тәүҙә улар өсөн отчет бирегеҙ… Өҫтәгеләргә! Шунан һуң ғына үҙ башығыҙҙы уйларһығыҙ… Унан һуң һеҙҙең тикшереүҙәрегеҙ барышында ғәйеп булған ғәйепләнеүселәрҙең ҡасыуы өсөн отчет, кәрәк булһа, яуап тоторһоғоҙ.

– Улар – һеҙҙең командирҙар! Бында һеҙҙең застава!

– Тағы бер иҫегеҙгә төшөрәм: һеҙ мине тикшереү эштәренән ситләштерҙегеҙ, шуға күрә тикшереү барышындағы эҙемтәләр өсөн дә үҙегеҙ яуап бирәсәкһегеҙ. Мине буталдырмағыҙ!

– Мин улай риза түгел!

– Ә һеҙ нисек уйлағайнығыҙ? Килеп төшәм, һә тигәнсе кем хыянатсы, кем халыҡ дошманы, кем япон шпионы икәнлеген асыҡлайым, ғәйеплеләрҙе тейәп алып ҡайтып аттырам да, тоғро хеҙмәтем өсөн сираттағы дәрәжәне, миҙал йәки орден ҡушып, алам да, шуның менән вәссәләм, тигәйнегеҙме?.. Ә?.. О-о, нисек тә ымһынып ултырып ҡалдығыҙ! Һимеҙ ҡалъя ауыҙға төштө генә тигәндә, шамбы ҡойроғо кеүек, ҡулдан шыуып ҡасты! Тегендә, ил эсендәгеләй, тегендәй-

быңдай бисаралар ғына түгел, ә “хәрби енәйәтселәр”, “хәрби шпиондар” ойошмаһын фаш итәм генә тигәндә!.. Унда өйрәнгәнһегеҙ аҡты ҡараға, ҡараны аҡка мансып… Ә бында – хужаһыҙ территория!

– Күрәм, комдив иптәш, ҡайҙа икәнлегемде… һеҙҙең ҡыйыу һөйләшеүегеҙҙән. Гел генә нейтраль һыҙатта ултырмаҫһығыҙҙыр бит? Иртәгә дивизия штабына ҡайтырға тура килер… Ә?

– Ҡайтырмын, майор, ҡайтырмын. Һеҙҙең менән бергә… Аяҡ-ҡулығыҙҙы шыҡрайтып бәйләп армия штабына тапшырырға! Төркөмөңдө ҡоралһыҙландырып! – Майорҙың күҙҙәре шар булды. – Мине сәбәпһеҙгә тикшереү эштәренән ситләштергәнең өсөн. Шикле хәрбиҙәр төркөмөн ҡасырғаның өсөн. Төркөм йыраҡ ҡасып өлгөргәнсе застава менән Союз араһында элемтәне өҙҙөргәнең өсөн!

– Алдаҡ! Яла! Яла яғыу! Ышаныслы совет следователенә яла яғыу!.. Оятһыҙлыҡ! Ой, ниндәй оятһыҙлыҡ!

– Мин факттарҙы констатациялайым, майор! Хәл-ваҡиғаға бөтә застава шаһит. Минең донесениема бөтә застава ҡул ҡуйыр. Башығыҙҙы ҡотҡарыу тураһында бына шунда ҡайғыртырһығыҙ… Иртәгә атылырға тейешле “халыҡ дошмандары” янына камераға барып керергә теләмәһәгеҙ, хәҙер үк төркөмөгөҙҙө алығыҙ ҙа ҡасыусыларҙы ҡыуа сығығыҙ. Миңә тимәгәйе хет Ирандан, хет Ҡытайҙан бороп алып ҡайтығыҙ.

– Мин?!.. Минең төркөм?! Һеҙ нимә, комдив иптәш, үҙ аҡылығыҙҙамы?!

– Нимә, әллә кавалеристарҙы сығарырғамы?.. Төркөмөгөҙҙө, шуға ла ярамаған, ни тип алып килдегеҙ?.. Һеҙ бешергән бутҡаны ниңә беҙгә ашарға? Һеҙҙең төркөм хушбуй бөркөтөп кенә заставала ултырһын, ә минекеләр билдән ямғыр һыуы кисеп сопкалар араһында эт булып йөрөһөнмө?!

Майор ни әйтергә белмәгәндер инде:

– Ошондай ҡойма ямғырҙамы, комдив иптәш? Ошондай төн уртаһындамы? – тине, йыуашланып.

– Улайһа, майор иптәш… Беренсеһе… сыпраңламағыҙ! Йәнемде көйҙөрөп… Тызламағыҙ, сәбәләнмәгеҙ!.. Көн тыуһын, шунан күҙ күрер, хәҙергә бер ни ҙә ҡылырлыҡ түгел… Икенсеһе… – Комдив уйға батты ла, әллә онотто башлағанын, әллә… тынып ҡалды.

Ҡолаҡ ҡарпайтып тыңлап ултырған майор түҙмәне:

– Икенсеһе, комдив иптәш? Икенсеһе… – тип төпсөндө.

– Икенсеһеме?.. Түҙемлек… Сабырлыҡ… Яйлап асыҡланыр… Һыуға төшкәндәй юғалырға таш түгелдәр. Барыбер берәр осо килеп сығыр… Ә элемтәне, майор иптәш, һеҙгә төҙәтергә тура килер.

– Комдив иптәш! Михаил Лазаревич! Һуң, минең егеттәргә элемтәне боҙоу нимәгә кәрәк?!

Комдив, ҡулын һелтәй-һелтәй, майорҙың ай-вайына ҡуймай, үҙенекен тылҡыны:

– Һеҙҙекеләр, һеҙҙекеләр, һеҙҙекеләр! Һеҙҙән башҡа эт тә түгел. Былдай төндә, һеҙҙекеләрҙән башҡа, хунхуздар ҙа йөрөмәҫ!..

Комдив әйтәһен әйткәнгә һанап, майор яҙмыштан уҙмыш юҡлыҡҡа әсенеп, байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙылар.

– Нимә, арыттырҙымы? – тине Добрягин. – Ял итеп алыу кәрәк. Ә бына был нәмәне… – Комдив шешәне бер ситкә шылдыра бирҙе, – тағын һораһағыҙ ҙа бирмәйем. Сама белгәндәргә генә файҙа ул… Хәйер, тәмле йоҡо хаҡына бер нисә йотҡанда зыян итмәҫ… – Һәм ул шылтыратып һауыттарға араҡы ҡойҙо… Бер аҙҙан, һаман шул уҡ ҡараңғы тәҙрәнән күҙҙәрен алмай, комдив талсыҡҡан һәм ҡарлыҡҡан тауыш менән яй ғына йыр һуҙҙы:

*Тихо вокруг,*
*Ветер туман унес.*
*На сопках Маньчжурии воины спят,*
*И русских не слышат слез.*
*Плачет,*
*Плачет мать родная,*
*Плачет молодая жена.*
*Плачут все как один человек,*
*Злой рок и судьбу кляня…*

– Майор… Майор, тим. Ишеткәнегеҙ бармы был йырҙы?

Комдив артына боролоп ҡарағайны, тегеһенең ҡайһы арлалыр ағас диванға ҡырын ятып тәмле йоҡоға талғанын күрҙе. Үҙе лә, шәм филтәһен уты һүнгәнсе баҫты ла, башын ҡаушырылған беләктәренә һалып, ултырған килеш тынып ҡалды.

…Добрягин һаман да ҡараңғы казарма урталығынан атлай. Сенькин ҡоромға батҡан шәмен башы осона күтәреп алдан бара. Уның алға эйелгән кәүҙәһе атлаған һайын эйелә бара, эйелеүе көмрәйеүгә, көмрәйеүе кәкрәйеүгә, кәкрәйеүе бөксәйеүгә алмашына. Ҡабарып өҫкә күтәрелгән арҡаһы аша башы ла күренмәй, мәгәр шәм тотҡан ҡулы һаман юғарыраҡ күтәрелә. Шәме дөрләп янған торонбашҡа әүерелә. Торонбаштан урғыған ҡором-һөрөмлө ялҡын дуғаланып та борғоланып өҫкә күтәрелә. Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ тармаҡтарға тармаҡланып, донъяны ялмай. Донъяға ҡып-ҡыҙыл ут та һөрөм бураны тулған. Һәндерәләрҙәге һалдат мәйеттәре, яланғас аяҡтарын болғап, Добрягинға тибеп ҡалырға тырыша. Ауыҙҙарын салшайтып, йөҙҙәрен йәмрәйтеп ниҙер ҡысҡыралар, йоҙроҡ болғап янайҙар…

Ҡолаҡ тондороп ни шаулайҙар тиһә, “Комдив иптәш!” тип зыулашалар икән. “Комдив... иптәш!” Бер саҡ иҫәпһеҙ-хисапһыҙ ҡулдарҙың береһе Добрягиндың алҡымынан матҡып әләктереп алды ла зырлатып һелкергә тотондо. Добрягиндың һулышы быуылды, тыпырсынды, туланы, мәгәр ҡыпһыуырҙай бармаҡтарҙан ысҡына алмай ыҙа сикте. Ярҙам итергә Сенькин күрмәй, ул һаман башын баҫып атлай ҙа атлай.

– Комдив иптәш! Комдив иптәш!

– А-ах!.. – Добрягин уянып та китте, быуылып сәсәй башланы. Коридорҙағы һаҡсы инеп, иңбашынан һелкеп уята, имеш!

– Һеҙ һаташаһығыҙ.

– Уф-ф… Рәхмәт…

Һыҙылып ҡояш ҡалҡып килә ине. Яңы көн тыуған. Боларып яуған ямғыр тынған, көн аяҙ.

Һалдат мундиры кейгән майор нисек ятһа, шул килеш әле һаман мырлап йоҡлай…

## Хунхуздар, йәғни фронтһыҙ фронт

“Хунхуз” – ҡытайса “ҡыҙыл һаҡаллылар” тигәнде аңлата икән. “Криминал” гәзитенең 2008 йылғы 29-сы һанындағы “Дерзкие налеты хунхузов” тигән мәҡәләлә улар Рәсәй Алыҫ Көнсығышына, нигеҙҙә, Приморье менән Владивосток ҡалаһына Маньчжуриянан үтеп кергән юлбаҫарҙар шайкалары тип атала. Хунхуздар рэкет, талау, юл баҫыу, аҡсалата әжер алыу маҡсатында кешеләрҙе урлау һәм башҡа төрлө енәйәтсел эштәр менән шөғөлләнгән. Айырым осраҡта меңәр кешегә еткән, ғәҙәттә, бысаҡ, револьверҙар менән ҡоралланған отрядтары хеҙмәттән ҡасҡан

ҡытай һалдаттарынан, крәҫтиәндәренән, урыҫ каторжандарынан торған. Араларында грузиндарҙың да булғаны мәғлүм. (Ниндәйҙер интернационал бандалар...)

XX быуаттың унынсы йылдарында Владивостокта һәм уның биҫтәләрендә көпә-көндөҙ, асыҡтан-асыҡ хунхуз төркөмдәре урамдарҙа йөрөп ятҡан. Һис кемде һанға һуҡмай, теләгән бер ҡара ҡылыҡтарын ҡылып йөрөгәндәр. Мәҫәлән, Владивосток урамдарында гимназист балаларҙы урлап китеү ғәҙәти күренеш булған. Бала гимназист икән, тимәк, уның ата-әсәһе хәлле. Балаларын кире ҡайтара алыу өсөн ата-әсәләрҙе ҙур аҡсалар түләтергә мәжбүр иткәндәр. 1909 йылдың сентябрь һандарының береһендә "Дальний Восток" тигән гәзит 11 йәшлек Афиноген Лаврушин менән 12 йәшлек Сергей Шмелев тигән малайҙар урланып, ҡайҙалыр йыраҡҡа, сопкалар, урмандар төпкөлөнә алып кителеүе; малайҙарҙың яйын табып төндә тотҡонлоҡтан ҡасыуҙары; үтеп барыусы тауар поезына йәбешеп, Владивостокка кире ҡайтыуҙары тураһында хәбәр итә.

Бала-сағанан тыш, хунхуздар чиновниктар менән эшҡыуарҙарҙы урларға яратҡан. 1908 йылдың июнендә "Голос Москвы" гәзите Алыҫ Көнсығышта исеме билдәле эшҡыуар Склинский тигән кеше хаҡында түбәндәгене хәбәр итә. Маньчжурия аша үтеүсе Транссебер магистрале өлөшө булған КВЖД-ла бүрәнә ташыу өсөн бер нисә йөҙ саҡрымлыҡ тимер юлы тармаҡтары хужаһы Склинский участкаһына инженер Гареликты хунхуздар урлай ҙа уның өсөн 50 мең һум аҡса талап итә. Эш КВЖД управляющийы генерал Хорватовҡа, сик буйын һаҡлау хеҙмәте генералы Чичаговҡа, урыҫ консулдарына, Ҡытай властарына тиклем хәбәр ителә.

1908 йылда "Амурский край" гәзите "Хунхуздарҙың яуызлығы саманан ашты, – тип яҙа. – Урыҫтарға ҡарата сикһеҙ нәфрәт йөрөткән, беҙҙең "трехлинейка" винтовкалары менән ҡоралланған был мәлғүндәр хатта алтын каруанына һөжүм итергә батырсылыҡ иткән. Ҡораллы каруан һаҡсыларын туҙҙырып, 16 бот алтындың 10 ботон (160 кг) талап киткәндәр".

Хунхуздар урыҫ утарҙарына йыш һөжүм итәләр, утарҙарҙа йәшәүселәрҙе рәхимһеҙ үлтерәләр. Мәҫәлән, 1908 йылдың июнендә Ольгинск трактындағы Изместьев утарына иллеләп хунхуз һөжүм ҡылып, бер объездчикты, бер һаҡсы кореецты, бер хеҙмәтсене, хужабикәне, өйҙәге өс ҡыҙҙы, бер малайҙы үлтереп китәләр.

Хунхуздар хәрәкәте Приморьела 1860 йылдан башланып (Приморьены урыҫтар биләп, Владивостокка нигеҙ һалғас, тип аңларға кәрәк. – ***авт.***) 1930 йылдарға, СССР үҙ сиктәрен ныҡлы бикләгәнгә тиклем, дауам итә. Артабан хунхуздар Ҡытайҙа 1911–1912 йылдарҙа башланып, 1949 йылда ғына тамамланған революциялар, граждандар һәм сит ил интервенттарына ҡаршы һуғыштар тулҡындарына ҡушылып китә. Нигеҙҙә, уларҙың бер өлөшө генерал Чандың (Чан Кайши) гоминдансылар ("Милли партия", 1912 йылда ойошторола, лидеры – Сунь Ятсень) хәрәкәтенә, икенсе өлөшө Мао Цзедундың коммунистик армияһына ҡушыла.

Хунхуздарҙың ҙур хәрби етәкселәргә әйләнеп киткәндәре лә бар. Мәҫәлән, Чжан Цзолинды (1873–1928) "ҡарт маршал" ҡушаматы аҫтында Ҡытайҙың милитарист хакимдары иҫәбендә йөрөткәндәр. Ул Урыҫ-Япон һуғышы осоронда Маньчжурияла хәрәкәт итеүсе, япондар яғында һуғышыусы хунхуздар башлығы була. А. Куропаткин һөжүм итеүсе регуляр япон ғәскәренә генә түгел, партизан һуғышы алып барған ерле маньчжурҙарға ла ҡаршы һуғышырға мәжбүр булған, тигән һығымта яһаниһәк, урыҫ армияһының уңышһыҙлыҡҡа осрауына артыҡ ғәжәпләнергә урын ҡалмай.

1906 йылда, япондарҙың өгөтләүе буйынса, Чжан Цзолин үҙ отряды менән ҡытайҙар армияһы составына ҡушыла һәм дивизия командиры итеп тәғәйенләнә. 1918 йылдан япондар ҡурсалауы аҫтында Маньчжурияны контролдә тота. Граждандар һуғышы ҡыҙған мәлдә (бәлки, Маньчжурия мөстәҡиллеге өсөндөр? – ***авт.***) Ҡытайҙың У Пэйфу кеүек милитаристары, шулай уҡ генерал Чандың гоминдансылары менән дә ҡан ҡойғос һуғыштар алып бара. Ул АҠШ ориентацияһына күсергә ниәтләнгән сағында, 1928 йылда, шәхси поезында япон разведкаһы ойошторған диверсияға тарып һәләк була.

## *Еп нәҙек урындан өҙөлә*

*Революция – ул күтәрелеш һәм ҡыйралыштар аша бер синыфтың икенсеһен ҡолатыуы.*

**Мао Цзедун. 1927 йыл.**

1912 йылдан Ҡытайҙа рәхимһеҙ эске анархия башлана. Гоминдансылар һәм коммунистар власть өсөн үҙ-ара өҙөшә. Бынан файҙаланып, Япония илдең төньяҡ-көнсығышында яңынан-яңы райондарҙы баҫып ала. 1945 йылда Япония еңелгәндән һуң, Граждандар һуғышы 1949 йылда коммунистар еңгәнгә тиклем дауам итә.

1912 йылда республика иғлан итеү ил алдында торған бурыстарҙы хәл итмәне. Революцион хәрәкәт лидеры Сунь Ятсенды, ваҡытлы президент итеп һайланып, бер нисә аҙнанан һуң элекке Цинь империяһы генералы Юань Шикай алмаштырҙы. Ҡытай мәсьәләләре яңыса экономика, бюджет булдырыу системаһы юҡлығынан, асыҡ порттар аша илдең аяуһыҙ таланыуынан ғибәрәт. Тибет менән Монголия – Бөйөк Британия менән Рәсәй контроллегендә, Япония экспансияһы көсәйгәндән-көсәйә. Беренсе Бөтә донъя һуғышы алдынан Япония Германия арендалаған территорияларҙы баҫып ала һәм Ҡытайҙы сеймал базаһына әйләндерер “Егерме бер талап” ҡуя. Юань Шикай уларҙың күбеһен кире ҡағыуға ҡарамаҫтан, Японияның Шаньдун, Маньчжурия һәм Эске Монголияға ҡарата дәғүәләренә ҡаршы тора алмай. 1916 йылда, Юань Шикай вафатынан һуң, илдә власть провинция милитаристары ҡулына күсә. Егерменсе йылдарҙа илде милитаристарҙың үҙ-ара ыҙғыштары тетрәтә. Сит дәүләттәр һаҡлауы аҫтындағы порттар ғына тыныс көн итә.

Беренсе Бөтә донъя һуғышынан һуң Ҡытайҙа революцион хәрәкәт яңы көс менән дөрләп китә. Уға сит илдәрҙең тығылыуы, экономик эксплуатациялау, шулай уҡ Японияның позицияларын хуплаусы Париж конференцияһы ҡарарҙары сәбәпсе була. 1923 йылда Сунь Ятсендың Гоминдан партияһы 1921 йылда ойошторолған коммунистар партияһы менән берлек төҙөй. 1925 йылда Гоминдан партияһын генерал Чан Кайши етәкләй. Сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәштә генерал Чан штабында совет генералы Василий Блюхер етәкселегендә хәрби кәңәшселәр төркөмө эшләй. (Ҡытайҙар уны Б.К. Галин тип белгән.) Генерал Чан Ҡытайҙы берләштереү маҡсатында, бер нисә тапҡыр атаҡлы Төньяҡ походтарын ойоштора. 1927 йылдың июлендә Ҡытай коммунистарының совет хәрби кәңәшселәре менән берлектә власты ҡулға төшөрөү заговоры асыҡлана. Һөҙөмтәлә гоминдансылар коммунистарҙы хөкүмәттән ҡыуып сығара, һуңғараҡ уларҙы ҡыйрата, ә СССР менән мөнәсәбәттәрен өҙәләр. Гоминдансылар менән коммунистар араһында ҡанлы һуғыш тоҡана. 1939 йылдың май – сентябрь айҙарында совет генералы Георгий Жуков өс дивизия, биш бронетанк, бер нисә монгол берләшмәләре менән Халхингол өлкәһенә поход яһай. Ул япондарҙың Квантун армияһы етәксеһе генерал Кенкиши Уеда тарафынан бәреп сығарыла. Өҫтәрәк әйтелеп үтелеүенсә, СССР 1929 йылда уҡ

Маньчжурияны биләп ҡарағайны, тик 1930 йылдың ғинуарында кире сығырға мәжбүр булды. 1928 йылға Чан Кайши Көньяҡ һәм өлөшләтә Үҙәк Ҡытай өҫтөнән генә контроллек итә, ә ҡалған өлөштәрендә теләһә кемдәр хужа булып йөрөй. 1931–1933 йылдарҙа Маньчжурияла япондар хакимлыҡ итә. Япон баҫып алыуҙарына ҡаршы гоминдансылар менән коммунистар йыш ҡына ваҡытлыса килешеп, бергәләп тә көрәшәләр. Икенсе Бөтә донъя һуғышы осоронда коммунистар илдең күпселек өлөшөн биләй. 1945 йылда Маньчжурияға ингән совет ғәскәрҙәре баш һалған Квантун (япон)армияһының барса ҡоралын Мао Цзедундың коммунистар армияһына тапшыралар. Шуның арҡаһында генерал Чан армияһы менән Мао армиялары араһында көстәр нисбәте ҡырҡа үҙгәрә лә, гоминдансылар еңелеүгә дусар була. Генерал Чан гоминдансылар ҡалдығы менән, континенталь Ҡытайҙы ҡалдырып, Тайвань утрауына сигенә. Һөҙөмтәлә ике Ҡытай дәүләте барлыҡҡа килә. 1949 йылдың 1 октябрендә Ҡытай Халыҡ Республикаһы иғлан ителә.

Бөгөнгө рус тарихсыһы профессор Александр Панцов – генерал Чан Кайшиҙың биографияһын ентекле өйрәнеүсе – Чандың Маоға һәм уның режимына ҡарағанда күпкә кешелеклерәк булыуын билдәләй. Генерал Чан ғүмеренең аҙағынаса Тайвань Республикаһы президенты вазифаһын башҡарҙы. Өҙләкһеҙ дауам иткән коммунистик баҫымдарҙан, янауҙарҙан АҠШ яҡлауы менән файҙаланды. 1975 йылда вафат булды. Әлеге көндө профессор Мао Цзедундың биографияһы өҫтөндә эшләй (Рәсәй радиоһы, 8 июль, 2009 йыл).

1937 йылдың 7 июлендә Япония Ҡытайға баҫып инә. Азия ҡитғаһы өсөн Икенсе Бөтә донъя һуғышы ошо датанан башлана. Һеҙ уҡыған ҡиссабыҙ геройы Добрягинға был оло һуғыштың башланыуы тураһында армия штабынан хәбәр алырына һанаулы ғына сәғәттәр ҡалды.

## *Блюхер менән һөйләшеү*

Тикшереүселәр ике фаразда туҡталды. Беренсеһе – ысын мәғәнәһендә тышҡы дошман тарафынан бик оҫта башҡарылған дәүләт-ара провокация. Икенсеһе – дошман башҡарған, мәгәр беҙҙең яҡтан Совет власына ҡаршы дошманлыҡ позицияларында торған үҙебеҙҙең контрреволюцион, һатлыҡ элементтарҙың, йәғни беҙҙең сафтарға үтеп ингән дошман шпиондары булышлығы, хатта ҡатнашлығы менән эшләнгән енәйәт. Тикшереүселәр тәүгеһендә туҡталырға булдыра алалар ине. Әммә дошмандың яуызлыҡты сәнғәт оҫталығында юғары кимәлдә башҡара алыуына ышана алмау уларҙы бер вариантта ғына туҡталмаҫҡа мәжбүр итте. Ә икенсе фараз полковник Сенькин һәм уның командирҙары өсөн һәләкәт, уның ҡарауы, тикшереү төркөмө өсөн ҡулай. Крәҫтиәндән башлап халыҡ комиссарҙарына тиклем репрессиялар ҡыҙған бер мәлдә ниндәйҙер Сенькиндарҙы аяп, ниңә үҙ башыңды хәтәргә дусар итергә? Нисек теләһәң шулай һорау алырға ла, фәрештәнән “Иблисмен” тип енәйәтте таныу ҡағыҙына ҡул ҡуйҙырырға ла – вәссәләм! Шунда халыҡ дошманын да, япон шпионын да – йәнең теләгән бөтәһен әүәләп була. Ҡалғанын трибунал ҡарай.

Тикшереүселәрҙең шул ниәтен еткерҙеләрме, әллә үҙҙәре һиҙемләнеме – ҡастылар, мәлғүндәр! Бөтә эште харап иттеләр!

Майор иртәнге сәй әҙер булғас ҡына уянды, битен йыуып алғас та үҙенекеләр яғына ашыҡманы. Комдив мыйығы аҫтынан ғына йылмайҙы ла, ниндәй ҙә булһа һүҙ ҡатыуҙы урынһыҙ һанап, табын менән идара итергә тотондо. Кисә шешәлә ҡалғанды ғәҙел уртаҡлап стакандарға һалды, ҡайнар сәй ҡойҙо...

Ашап-эсеп бөтөүгә телефон шылтыраны. Элемтә яңырыуға шатлығын йәшерә алмай, майор комдивҡа йылмайып ҡараны.

– Егеттәр тырышҡан – тапҡандар өҙөктө. – Комдивтың ашҡынып тормауын күреп, трубканы майор алды ла шунда уҡ Добрягинға һондо.

– Командарм... Блюхер һеҙҙе һорай.

Трубканы ҡолағына терәгәс, комдив, ысынлап та командарм алдында торғандай, һынын турайтты.

– Тыңлайым, Василий Константинович!

Блюхер, ғәҙәттәгесә, тыныс, әммә талапсан тауыш менән ҡыҫҡа ғына итеп хәл-әхүәл һорашҡандан һуң, төп мәсьәләгә күсте. Тикшереү барышы менән ҡыҙыҡһынды. Тикшерелеүселәрҙең ғәйеп булыуҙарын ишеткәс, бер аҙ тынып торҙо. Унан һуң тәүге тонын һис кенә лә үҙгәртмәй:

– Михаил Елизарович, бының ни менән бөтөрөн аңлайһығыҙмы? – тине.

– Аңлайым, Василий Константинович!.. – Добрягин, микрофонды усы менән ҡаплап, майорға сығып торорға ымланы. Майор артынан ишек ябылыу менән, мөмкин тиклем әкренерәк дауам итте. – Командарм иптәш, ғәфү итә күрегеҙ мине, ҡарт тилене. Егеттәрҙе мин үҙем ҡасырҙым...

Блюхер йәнә пауза яһаны.

– Нишләп? Ни маҡсатта?

– Тикшереүселәр уларға, дөрөҫөн генә әйткәндә, үлем язаһына тарттырыусы һығымта сығарғайны.

– Ә һин, Михаил Елизарович, ул егеттәрҙе үлемдән ҡурсалап, үҙеңә үҙең үлем язаһына ҡул ҡуйманыңмы?

– Юҡ, командарм иптәш! Мин уларҙы "дүрт яғығыҙ ҡибла" тип кенә ысҡындырманым. Дошман беҙгә нимә ҡылһа, дошмандың үҙенә лә шуны ҡылырға ебәрҙем. Ниңә әле егеттәрҙе тиккә әрәм итергә? Үҙебеҙҙең егеттәрҙе үҙебеҙ тотоп атырға? Ҡанға – ҡан! Ҡылыҡты ҡылып ҡайтһындар. Бәлки, Тыуған ил ғәфү итер... Ҡайта алһалар... Уйланым-уйланым да шунан башҡа сара тапманым, Василий Константинович.

– Ҡулдарынан килер, тип уйлайһыңмы?

– Ниңә килмәһен, япон менән маньчжур беҙҙекеләрҙән ние менән артыҡ?

Блюхер бер аҙ уйланып алды, көрһөнгәне ишетелде.

– Уныһы шулай ҙа, Миша... Тегендә эште ҡырҙылар ҙа, ти... Ә ҡайтҡас нисек иҫбатларҙар? Улар һүҙенә кем ышанyр? Һүҙгә! Төшөнәһегеҙме? Ун японды бөтөрҙөк, тиерҙәр. Меңде... Нисек ышанырға?

– Улар менән бергә ике НКВД хеҙмәткәре лә китте. Шулар иҫбатлар, тип уйлайым.

– Нисек?! Улары һинең егеттәр менән нисек китәһе булды?

– Ай-вайҙарына ҡуйып торманылар. Ҡулдарын ҡайырып, шаҡрайтып бәйләнеләр ҙә ауыҙҙарына сепрәк тултырып, елтерәтеп...

Командарм ауыр көрһөндө:

– Иштең һин миңә ишәк сумарын, Миша!.. Былай… уйлап ҡарағанда, бик үк насар ҙа түгел кеүек… Тегеләр беләме?

– Юҡ.Тызандашып йөрөйҙәр. Әлегә һеҙҙең менән икәү генә беләбеҙ. Әле егеттәрҙең ҡайтҡанын көтөп йөрөйөм.

– Ярай ҙа, эште бешереп ҡайта алһалар… Ғөмүмән, ҡайта алһалар…

– Мин полковник Сенькинға үҙемә ышанғандай ышанам. Василий Константинович, һеҙҙән аңлау һәм яҡлау өмөт итеп ҡалам.

– Полковник Сенькинды үҙем дә яҡшы беләм. Һиндәгеләр хәҙергә белмәһәләр ҙә, мин был ҡасыуҙы Мәскәүҙән йәшерә алмайым. Юҡһа, теге егеттәр минән алда өлгөрһәләр, әллә нимә килтереп сығарыуҙары бар. Мәскәү хәл-ваҡиға менән өҙлөкһөҙ ҡыҙыҡһынып тора. Хәҙер үк хәбәр итәм. Ниәтегеҙ килеп сыға

ҡалһа, минән – аңлау, Мәскәүҙән рәхим көтөгөҙ. Элемтәгә йышыраҡ сығығыҙ. Хуш!..

Тикшереү тамамланыуы тураһында Добрягинға хәбәр итергә ашыҡманылар. Казарма артында туғандар ҡәбере әҙер булыуға ҡарамаҫтан, мәрхүмдәрҙе ерләү хаҡында ла өндәшкән кеше юҡ. Хәҙергә асыҡланып бөтмәгән ниндәйҙер сәбәптәргә һылтанып, һаман һуҙа бирәләр. Ҡайтыу тураһында ауыҙ ҙа асмайҙар. Кисәге ҡойма ямғырҙан һуң автомашиналарында застава биләмәһенән дә сыға алмаҫтар, батып ултырасаҡтар.

Комдив майорға ҡасҡалаҡтарҙы эҙләп ҡарарға тәҡдим итте. Тегеһе шатланып риза булды.

Добрягин ике яҡ күрше заставалар араауығына бер-бер артлы өсәр һыбайлынан торған разъезд ебәрҙе. Осраған шикле кешеләрҙе тентеү һәм ҡулға алыу хоҡуғы бирелде. Ҡораллы ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе йәки һөжүм итеүселәрҙе урынында юҡ итергә! Урындағы халыҡ менән аралашыуҙы, ниндәй ҙә булһа тикшереүҙәрҙе тыйҙы. Ошо күрһәтмәләрҙән тыш бәләгә тарығандар, йәрәхәтләнгәндәр табылһа, кисекмәҫтән бында оҙатырға әмер бирелде.

* * *

Сенькин төркөмө нисек етте шулай башы һуҡҡан яҡҡа ғына сығып китмәне. Застава разведкаһының да күптән күҙ уңынан ысҡындырмаған ҙур булмаған япон гарнизоны бар ине. Улар шунда китте... Таң атыуҙарға ҡайтырбыҙ, тигәйнеләр ҙә, нишләптер һаман юҡтар. Добрягин тыштан ғына һиҙҙермәне, ә эстән төркөм өсөн ныҡлы хафалана башланы. Нишләп һаман ҡайтмайҙар? Насар хәлгә тарынылармы? Ни булды? Ниҙәр генә тыуып китһә лә, кемдер ҡайтырға тейеш бит...

Сәғәт ун берҙәр етеп барғанда Добрягин, ниһайәт, түҙмәне, биш-алты атлыһын алып, тыныслыҙлығы менән даны сыҡҡан уң дистанцияға, Сенькиндар киткән тарафҡа, сығып китте. Ғүмере өсөн хәүефләнеп, йөрөмәҫкә өгөтләп ҡарағайнылар ҙа, комдив, мин ундайҙы ғына күрмәгәнме ни, тип ҡул ғына һелтәне.

Тауҙар, урмандар, йырындар ҡуйынын оҙаҡ йөрөнөләр ҡыҙырып, тик шикле йә ниндәйҙер өмөт тыуҙырырлыҡ бер нәмәгә лә тап булманылар. Шомло сит ерҙәр хәүефле тынлыҡ менән ҡаршы алды, шул уҡ тынлыҡ менән оҙатып ҡалды.

Төш ауҙарып ҡына кире ҡайтып еткәс, тән яҙҙырып, әҙерәк йәйәүләү ниәтенән, ташландыҡ ауылға керер алдынан Добрягин атынан төштө. Атын етәкләтеп һалдаттарын ары ебәрҙе лә, үҙе ашыҡмай ғына теләһә ниндәй үлән, ваҡ-төйәк ҡыуаҡтар ҡотороп үҫкән ташландыҡ ауыл урамы буйлап атланы. Остан унлап йорт урынын үткәс кенә, яңғыҙ маньчжур ҡарты йәшәгән өй тәңгәлендә тапалған һуҡмаҡҡа сыҡты. Бер генә йән булһа ла, тормош – тормош инде, бүтән ташландыҡ өйҙәрҙән айырыла ҡарттың төбәге. Иң мөһиме – бында һуҡмаҡ бар, кетәгендә бер нисә баш тауығы ҡыҭҡылдай, сәүектәр инде, сәңкелдәп эт йораты тауыш биреп ҡуя. Ҡарттың ишек алды тыныс...

Аяҡ аҫтына ҡарап уйланып барғанында Добрягинға артта кемдәрҙеңдер аңлайышһыҙ, ят телдә өҙөк-өҙөк кенә ҡыҙыу һөйләшкән кеүек тойолдо. Тойолдо ғынамы, әллә ысынлап та шулай инеме? ...Комдивта тыйып торғоһоҙ артына боролоп ҡарау тойғоһо тыуҙы. Тик ҡарт һуғыш бүреһе күңелендә уянған тәүге тойғоно баҫып ҡала алды. Бөксәйә биреп нисек китеп барһа, шулай атлауын дауам иттерҙе. Үҙе, бөтә сослоғон егеп, артына ҡолаҡ һалды, мөмкин тиклем шымыраҡ баҫырға тырышты. Бил тәңгәлендә артҡа ҡаушырылған ҡулдарын уңын янбашындағы буш кобура аша һаҡ ҡына шыуҙырып, галифе кеҫәһенә тыҡты, ҡоралын ҡапшаны... Ҡолаҡтары алдамай ине комдивты: уң тарафта, яңғыҙ ҡарт

ихатаһы тирәһендәлер, ярым бышырлап, шым, киҫәтеүле һәм һаҡлыҡты онотоп ебәргән ярһыу ике тауыштың бәхәс ярпыларын айырым-асыҡ ишетте.

Добрягин туҡтаны. Көслөрәк ишетелә барған кемдеңдер йүгереү ритмына әлһерәгән эт шикелле ҡыҫҡа һәм ауыр һулауы, тын алған һайын үләндәр ҡыштырлауы, еүеш ерҙең еңелсә лысҡылдауы комдивты яҡынайғандан-яҡыная барған билдәһеҙ, хәйерһеҙ нәмәне ҡаршылау өсөн артына боролорға мәжбүр итте. Яңғыҙ ҡарт ҡапҡаһы яғынан уға табан уң ҡулына оҙон, йөҙө тар кәкре бысаҡ тотҡан, үтә барһа ун һигеҙ – егерме йәштәрҙәге маньчжур тубыҡ тиңенән үләндәр өҫтөнән осоп килә ине! Тәү ҡарамаҡта егет ике ҡулын ике яҡҡа ҡанат кеүек йәйеп, өрәк ише, ел ҡыуған болоттай елә. Ҡуйы үләнде йырып түгел, ҡар ҡатламын сәнсә баҫып ярып сапҡан ҡоралайҙай, үлән аша ырғый-һикерә бейеп килә. Бейеп! Күҙҙәре турғай аңдыған бесәйҙекеләй баҙлап яна; ауыҙы ҙур асылған; эре, аҡ тештәре балҡый; етек, ҡара, шырт сәстәре туҙғыған! Ә үҙе ынтыла комдивҡа табан, эй, талпына! Добрягиндың үҙенә табан боролоуын күргәс, егет, аҡылынан шашҡандай, яңы тиҙлек, яңы ҡеүәт менән ары ташланды. Аҡылһыҙ батырлыҡҡа, ҡотолғоһоҙ һәләкәтенә!

Комдив йөҙәр, меңәр тапҡыр һыналған хәрәкәт менән наганын сығарып, йәш маньчжурға төбәне – ярһыу егет комдивҡа ниндәй ҙә булһа иҫкәртеү  яһарлыҡ, туҡтатырлыҡ форсат ҡалдырмағайны.

Йәш маньчжур, бер аҙым ҡала  әсе һөрәнләп, үлемесле хәрәкәт яһау өсөн бысағын йәшендәй ялтлатып өҫкә күтәрҙе. Ҡул һуҙымы ҡалған арала Добрягин наган тәтеһенә баҫты...

Егет комдивтың ҡосағына ауҙы. Добрягин уны, нишләптер, йығылыуҙан тотоп ҡалды. Маньчжур комдив петлицаларындағы эре йондоҙҙарға әллә ысынлап, әллә аңында мәғәнә ҡалмағандан, терәлә яҙып бер ҡараны ла башын өҫкә күтәрҙе. Инде усаллыҡ ҡалмаған күҙҙәре менән шундай әһәмиәтле кешене үлтерә алмағаны өсөн үкенеп һәм ғәфү үтенгәндәй бер тултырып ҡараны ла, күҙҙәрен йомдо, ҡапыл быуынһыҙ ҡалып, комдив ҡосағынан ергә һыпырылып төштө.

Ҡарт ихатаһы буйындағы үләндәр араһынан ун дүрт – ун алты йәштәрҙәге үтә лә сибек кәүҙәле ир бала ҡалҡынды ла үҙәк өҙгөс тауыш менән һөрән һалды. Уның сарбайлауына өйҙән кәлберәп бөткән хужа ҡарт өтәләнеп сыҡты. Алдан юрғалап малай,  артынан ауа-түнә ҡарт фажиғә урынына килеп еттеләр. Үҫмер, ниҙер һамаҡлай-һамаҡлай, иҫерек йәки йоҡлаған кешене уятырға теләгәндәй, егеттең йәнһеҙ кәүҙәһен ойпаларға тотондо. Ҡарт та, устары менән битен ҡаплап, мәйет янына тубыҡланды. Үҫмерҙең йән әсеһе менән өҙлөкһөҙ ҡысҡырыуы комдивтың  унһыҙ  ҙа саҡ торған башына ҡапты, ҡолаҡтары шауларға кереште. Мейеһе ҡайнауҙан ул ҡарттың пеләш башындағы юҡ сәстәрен йолҡорға тырышып, битенә батҡаҡ һылай-һылай ләғнәт уҡыуын да, малайҙың башы өҫтөндә тәүҙә йоҙроҡтарын туҡтауһыҙ уйнатып, унан теге кәкре бысаҡты болғап янауҙарын да  ишетмәне. Ҡарт бәргән батҡаҡ киҫәктәренең бер нисәһе битенә эләккәс кенә бер аҙ һиҫкәнде лә өс-дүрт аҙым артына тайшанды. Бөтмәҫ тә китмәҫ кеүек тойолған был йән яҙаһынан ул, ниһайәт, ситкә боролдо, наганын кире кеҫәһенә һалды. Зыулашҡан төркөмгә һырт биреп, еңелсә сайҡалып әҙме-күпме баҫып торҙо ла, ауыр ҡуҙғалып, ирекһеҙҙән өҙөлгән юлын дауам иттерҙе...

Аңҡы-тиңке булып оло ҡапҡа аша казарма алдына килеп инеүенә тағы ла сүп өҫтөнә сүмәлә өҫтәлде. Хәле бөтөп ике яранының береһе йүгереп килеп етте һәм, ашыға-ашыға, казарма артында мәрхүмдәрҙе ерләп ятыуҙарын хәбәр итте. Комдивтан башҡа ерләүгә тотонмаҫҡа, тип ныҡып ҡараған, тик тикшереү төркөмө башлығы майор уны тыңларға ла теләмәгән.

Казарма артына сыҡҡанда “туғандар ҡәберлеге” өҫтөнә ерҙең һуңғы көрәктәре ырғытыла ине. Ике егет таҡтанан әпән-төпән генә әтмәләнгән обелиск кеүек нәмәне урынлаштырып аҙаплана...

Йөҙө танымаҫлыҡ булып йәмерәйгән Добрягин йүгерә-атлай, эләгә-һөрөнә майор янына китте. Яраны ихлас юрғалап артынан төшөп алғайны, комдивтың бер генә уҫал ҡарашынан быуындары йомшап, баҫҡан урынында тороп ҡалды...

...Ишек бер ҡасан да булмағанса шар асыҡ ине, кабинетта майорҙың телефондан һөйләшкәне ишетелә. Коридорға ингәс тә ошоға иғтибар иткән комдив, күңеле ниҙер һиҙенгәндәй, асыҡ ишеккә әкрен баҫып яҡынлашты. Комдивтың танауына ауыр тәмәке еҫе бәрелде. Ҡыйбатлы папиросын туйғансы төтәткән-төтәткән дә, хәҙер килеп кабинетты елләткән һыны майорҙың. Комдивты шәйләмәне. Был яҡҡа арты менән торған да тәҙрәгә ҡарап аяҡ өҫтө һөйләшә.

– Эйе, эйе, подполковник иптәш... Ҡулымдан килгәндең барыһын да урында башҡарҙым. Ә бына дивизия командиры менән һеҙҙең үҙегеҙгә әңгәмәләшергә кәрәк, хатта урын бар, тип уйлайым... Ә?.. Мин – бәләкәй кеше... Эйе... Билгеле. Армия штабына саҡыртып алһаң, һәр кемдә һөйләшеү һәүәҫлеге арта. Төшөнәһегеҙҙер?.. Эйе. Ярар, хуш булығыҙ!

Өҫтәл яғына әйләнеп трубкаһын телефон өҫтөнә ҡуйғанында асыҡ ишек аша үҙенә ҡарап торған комдивты күргәс, майор бер аҙға юғалып ҡалғандай итте. Хатта хилафлыҡ өҫтөндә тотолған шуҡ малайҙыҡылай йөҙөндә оялыу, үҙен ғәйепле тойоу билдәләре лә күренеп ҡалды. Шулай ҙа үҙен тиҙ ҡулға алды тәфтишсе. Ҡыҙғаныс һәм мәҙәк сырайы тиҙ генә һауалы ҡарау битлеге менән алмашынды, күҙҙәре һөнәри саялыҡ осҡондары менән ялтыраны.

– Мин һеҙҙе саҡырманым.

– Ә мине саҡырыу кәрәкмәй...

Осрашҡас та араларында психологик дуэль башланғанын был икәүҙең һәр береһе яҡшы һиҙә ине. Тәүҙән үк бүтәндәр менән бергә дөрөп алыр ине лә, майор, был боевой генералға ҡарата ҡулы ҡыҫҡа икәнлеген аңлап, һаҡ ҡыланды. Комдив үҙ сиратында, тикшереүсе булғанына күрә, оҡшауы-оҡшамауына ҡарамай, майорҙың ҡылыҡ-ҡыланыштарына юл ҡуйҙы, кәрәккәнгә-кәрәкмәгәнгә тығылманы, тешен ҡыҫып түҙҙе, күргәнен күрмәҫкә, ишеткәнен ишетмәҫкә тырышты. Комдивтың изге ниәтен йомшаҡлыҡҡа һанаптыр, майор ҡыйыуланғандан-ҡыйыулана барҙы, хатта баш-баштаҡлыҡҡа тиклем барып етте. Мәрхүм һалдаттарҙы ғына ҡара... Ни ҡыҫылышы бар ине майорҙың уларҙы ҡасан һәм нисек ерләтергә? Барыһына ла түҙҙе комдив, иллә майорҙың үҙ белдеге менән, комдивҡа әйтеп тә тормай, мәрхүмдәрҙе өтөп-ҡырып ер ҡуйынына оҙатыуын кисерә алманы. Заманында Амурҙан Порт-Артурға тиклем һәм кирегә, бөтә Маньчжурияны бер нисә тапҡыр арҡырыһынан буйына яуҙар менән үткән, меңәрләгән яуҙаштарын йөрәк әрнеүҙәре аша һуңғы юлға оҙатҡан яугирҙың бәғере теленде. Йыназаһыҙ китергә әҙәм балаһы миктәп үлеп ятҡан мал түгел. Бигерәк тә һалдат. Армияла хәҙер мулла ла, поп та юҡ. Ашыҡмай ғына ҡәҙерләп ерләү. Дармандан килгәнсе Ватан исеменән рәхмәт һәм маҡтау һүҙҙәре әйтеү, аҙағынан мәрхүмдәр өсөн һуңғы хәрби хөрмәт – мылтыҡтарҙан атып салют биреү – бына шулар бөгөнгө шәһит киткән һалдат өсөн йыназа. Ә был суҡынсыҡ шуларҙы ла эшләттермәгән. Әйтерһең, урман төпкөлөндә үҙе ҡыйратҡан юлбаҫарҙар төркөмөн йәшерен-батырын ғына күмеп ҡуйған!

Комдив ауыр атлап тупһа аша уҙҙы. Ҡурҡыныс, дәһшәтле ҡараштары менән тишерҙәй итеп текләшеп майорға яҡынлашты. Бер нисә секундта ниҙәр тыуып китеүен башына ла килтермәгән майор, комдивҡа иҫе лә китмәгәнен

күрһәтергә теләгәндәй, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә гильзаһына ҡат-ҡат өрөп папирос тоҡандырҙы, оятһыҙ текләшеп, ҡымшанмай ҙа тора бирҙе.

Терәлә яҙып килеп туҡтағас, Добрягин тештәре аша бер генә һүҙ һығып сығарҙы:

– Имгәк!

Комдив, аҫтан киң киҙәнеп, уҫлаптай йоҙроғо менән майорҙың күкрәк ауыҙына һуҡты. Һулышы киҫелгән майор күҙҙәрен атылып сығырҙай булып таштырып, ауыҙын ҙур асып комдив күкрәгенә ҡапланды.

Тәфтишсенән аңҡыған одеколон еҫенән комдив уҡшый биреп ҡуйҙы, ситкәрәк шылды ла ус ҡыры менән тегенең елкә тамырына бирҙе. Майор, атылған ҡарға ише, ҡул-аяғын тарбаңлатып иҙәнгә леперт ауҙы. Уның сепрәккә әйләнгән кәүҙәһендә тәү ҡарамаҡта йәшәү билдәләре күренмәгән кеүек ине. Тик комдив уға һуйҙайып ятырға форсат бирмәне. Елтерәтеп ултырғысҡа ултыртты ла графиндан битенә таслатып һыу һипте. Сикәләренә еңелсә биргеләгәндән һуң, майор көслөк менән күҙҙәрен асты, бер аҙ сайҡалып ултырғас, көс-хәл менән:

– Һеҙҙе бының өсөн ни көткәнен беләһегеҙме? – тине.

Әйтеп тә бөтөрмәне, комдив бар көсөнә яңаҡтарына уңлы-һуллы ҡундырҙы. Бөтөнләй быуынын юғалтҡан майорҙы битенә һыу һибеп йәнә иҫенә килтерҙе. Икенсе ултырғысты шылдырып, ҡапма-ҡаршы ултырҙы ла:

– Һин мине ишетәһеңме? – тине үтә лә тыныс тауыш менән. Майор өндәшмәне. Комдив тегене яғаһынан тотоп һелкене. – Мине ишетәһеңме, тим! – Майор тертләп, тетрәнеп китте. Һорауға ыңғай яуап итеп баш ҡаҡты. – Һин, майор, минең теңкәмә тейҙең!

Комдив сығыу яғына ыңғайланы, тик ишек төбөнә лә етмәне, телефон шылтырағанға туҡталып ҡалды. Сытырайып булһа ла майор ҙа торҙо ла трубканы алды.

– Алло... Эйе!.. Застава тыңлай, командарм иптәш! Эйе, мин, командарм иптәш! – Һыҙланыуҙарын һыпырып алғандай, майор һынын турайтты. – Комдивмы? Уның менән... Уның менән бик матур әңгәмәләр үткәрәбеҙ, командарм иптәш! Эйе... Ул әле бында, эйе, бында, – майор трубканы комдивҡа һондо.

– Тыңлайым, иптәш Блюхер!

Трубкала ҡарт һарыҡ тәкәһе бүре тырнағына ҡабып бар көсөнә һуңғы тапҡыр ларылдағаны кеүек көслө, тупаҫ тауыш ҡолаҡты ярҙы:

– Апанасенко! Төшөндөңмө?! Башҡаса миңә ул халыҡ дошманының исемен иҫемә төшөрәһе булма! Юҡһа, үҙең дә уның артынан китерһең!

– Тыңлайым, иптәш Апанасенко!

– Бына шулай... Ә хәҙер тыңла... Кисә, етенсе июлдә, Люкочаола, Марко Поло күпере тирәһендә, Япония менән Ҡытай ғәскәрҙәре араһында ҡан ҡойғос оло бәрелеш булған. Япондар киң фронт менән Ҡытай еренә бәреп ингән, инеүҙәрен әле һаман дауам итәләр... Һин мине ишетәһеңме, комдив?!

– Ишетәм, иптәш командарм!

– Бына шулай!.. Армия разведкаһы хәбәр итеүенсә, һин билгән позицияға табан японд арҙан, маньчжурҙарҙан, монголдарҙан торған ҙур хәрби берләшмә хәрәкәт итә. Һиңә дивизияң, ҡулың аҫтындағы барса көстәр менән шуларҙы лайыҡлы ҡаршыларға һәм дә ябырылыуҙы кире ҡағырға приказ бирәм. Төшөндөңмө?

– Есть, иптәш командарм!

– Япония Ҡытайға ырғыған икән, тимәк, был – һуғыш! Тегендәй-былай инцидент ҡына түгел. Оло һуғыш! Төшөндөңмө, комдив?

– Төшөндөм, иптәш командарм!

– Үтәгеҙ!..

– Есть!

Добрягиндың һөмһөрө ҡойолған йөҙөндәге асыу-ярһыу күҙ алдында борсолоу һыҙаттары менән алмашынды. Ул ҡаштарын йыйырып аҫҡа ҡарап, әҙгә генә уйланып алды ла остоҡ та хаслыҡ эҙҙәре ҡалмаған күҙҙәрен майорға төбәне. Саялыҡ, тәүәккәллек билдәләре йөҙөн яҡтыртып ебәрҙе. Инҡар итеүгә, бәхәскә остоҡ та урын ҡалдырмай, бар яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, ҡөҙрәтле абсолют хаҡлыҡ эйәһе хәл иткес ҡарар ҡабул иткәндәгеләй, ҡолас киреп, устары менән шапылдата һуғып өҫтәлгә таянды. Эскадрондарҙың командирҙарын үҙе янына саҡырырға бойорҙо. Майорҙың үҙенә лә ҡалмаҫҡа ҡушты. Майорҙың күҙҙәре шар булды, үҙе өҫтөнән идара итеүгә ҡәнәғәтһеҙлек белдереп ауыҙын ғына асҡайны, комдив наганын сығарҙы:

– Һуғыш хәле исеменән! Барығыҙ ҙа миңә буйһонаһығыҙ!

Майор, приказға күнеп, нисек етте шулай сығып барғанында, Добрягин дөңкөлдәтеп түшәмгә атты.

– Отставить! Кругом! Кире бында кил!

Ҡотҡонаһы ботона киткән майор, устав ҡушыуы буйынса йәлпелдәп боролоп комдив ҡаршыһына тыпылдап килеп баҫты.

– Тыңлайым, комдив иптәш!

– Кр-ругом!.. Бегом м-марш!

Сығып китеүенә бер минут ваҡыт үттеме-юҡмы, майор ҡояштай балҡып кире килеп инде. Башынан ашҡан ниндәйҙер шатлығынан субординация тигән нәмәне уйларлығы ҡалмағайны. Аҡылға бер төрлөрәк бәндәләй өҙлөкһөҙ көлә.

– Эһе-һе-һе!.. Эһе-һе-һе!..

– Ни булды, майор?

– Комдив иптәш... Сенькин ҡайтты... Сенькиндар ҡайтты!

## *Япондарҗа бер ни ҡамасауламай бейергә*

Ҡытайға һуғыш асҡанда Япония армияһын яҡшы өйрәтелгән, һәйбәт ҡоралланған 300 мең һалдат, шулай уҡ япон офицерҙары етәкселек иткән, үҙ һалдаттарынан ҡалышмаған 150 меңлек маньчжур һәм монгол ғәскәрҙәре тәшкил итә. Хәрби хеҙмәткә яраҡлы 2 миллион резервисы була. Хәрби диңгеҙ көстәре иң алдынғы һәм ҡеүәтле илдәр араһында өсөнсө урында тора. Хәрби һауа көстәре, шулай уҡ хәрби диңгеҙ көстәре лә иң алдынғы самолеттар, ҡорамалдар, беренсе класлы осоусылар, хеҙмәтләндереү персоналы менән тәьмин ителгән. Япон индустрияһы үҙ армияһын ҙур һуғыш алып барыу өсөн кәрәккәндең барыһы менән дә тәьмин итерлек хәлдә була.

Ҡытайҙың генерал Чан Кайши Милли хөкүмәт армияһы (НПА) насар өйрәтелгән, насар ҡоралландырылған ике миллионлыҡ ғәскәрҙән тора. Чанға сит ил ябырылыуына ҡаршы 150 меңлек Ҡытай коммунистары армияһы (ККА) ярҙам итә. Ҡытайҙың хәрби диңгеҙ флоты ғәмәлдә юҡ. Артта ҡалған индустрияһы армияны тәьмин итерлек хәлдә түгел.

## *Күршеләрҙә ниҙәр бар?*

1929–1939 йылдарҙа донъя сәнәғәте Беренсе Бөтә донъя һуғышы арҡаһында килеп тыуған “Бөйөк депрессия”ға тарый. Миллионлаған эш кешеләре эшһеҙ ҡала һәм фәҡирлек сигенең аръяғында көн итә.

Ҡағиҙә булараҡ, көрсөктәр дәүерендә илдәрҙә диктатура урынлаштырыла, демократия сикләнә, партиялар тыйыла. Бельгия, Франция, Нидерландтар, Бөйөк Британия, Швеция, Швейцария кеүек алдынғы илдәрҙән айырмалы, Европаның ҡалған илдәрендә диктаторҙар идара итә. Мәҫәлән, Венгрияла, Гембеш диктатураһы, Германияла – Гитлер, Латвияла – Ульманис, Польшала –

Пилсудский, Югославияла – король Александр һ.б., һ. б. 30-сы йылдарҙа Германия, Италия, Япония хәрби көскә таянып, милли һәм раса өҫтөнлөктәренә нигеҙләнгән империялар төҙөргә ынтылалар. Беренсе Бөтә донъя һуғышынан һуң ойошторолған халыҡ-ара мөнәсәбәттәр системаһы, нигеҙҙә, Милләттәр Лигаһы менән Коминтерн эшмәкәрлектәре йомшаҡ йәки һәләтһеҙ булып сыға.

1933 йылдың 27 майында Япония Милләттәр Лигаһынан сыға. Халыҡ-ара кимәлдә йөкләмәләрҙән һәм бурыстарҙан “аяҡ-ҡулы сиселгән” Япония 31 майҙа уҡ Жэхэ (Урта Маньчжурия) провинцияһына бәреп инә. Шул уҡ йылдың 14 октябрендә Милләттәр Лигаһынан Германия сыға.

1936 йылдың 26 ноябрендә Коминтернға ҡаршы Германия – Япония пакты төҙөлә.

1937 йылдың 6 ноябрендә Италия Милләттәр Лигаһынан сығып Германия – Япония (Коминтернға ҡаршы) пактына ҡушыла. 1939 йылдың 29 августа бер-береңә һөжүм итешмәүҙең Совет – Германия пактына протест итеп (халыҡ телендә әйткәндә, – Германияға үсегеп) Япония был пакттан айырыла..

1939 йылдың 14 декабрендә Финляндияға һөжүм иткәне өсөн СССР Милләттәр Лигаһынан сығарыла (1934 йылдың 18 сентябрендә ҡабул ителгән була).

Донъя ҡотолғоһоҙ рәүештә яңынан тағы ла рәхимһеҙерәк, тағы ла дәһшәтлерәк яңы һуғыш упҡынына тәгәрәй. Беренсе Бөтә донъя һуғышынан һуң коллектив хәүефһеҙлек маҡсатында ойошторолған Милләттәр Лигаһы “яңы тәртиптәр” урынлаштырырға ынтылған державалар баҫымы аҫтында емерелә.

1937 йылдың 7 июлендә Япония Ҡытайға ҡаршы агрессив һуғыш аса. Икенсе Бөтә донъя һуғышы Европа ҡитғаһы өсөн 1939 йылдың 1 сентябрендә Германияның Польшаға һөжүменән тоҡанһа, Азия өсөн ул ике йыл алда башланды. Ғөмүмән, ике Бөтә Донъя һуғыштары арауығында Азияның Алыҫ Көнсығышында һуғыш уты һүрелмәне. Ул тәүҙә батша Россияһының, аҙаҡ Советтар Союзының империалистик дәғүәләре, Японияның милитаристик амбициялары, Ҡытайҙағы революция һәм Граждандар һуғышы, бүтән күршеләш илдәрҙәге милли-азатлыҡ хәрәкәттәре, бөтәһе бергә буталып, нәтижәлә берсә ләүкеп, берсә өҙлөкһөҙ дауам итте.

## *Хәтер яңыртыу өсөн мәғлүмәттәр*

**Коминтерн**. *Коммунистик интернационал, икенсе төрлө – Өсөнсө интернационал. Бөтә донъя коммунистар партияларының халыҡ-ара берлеге. Беренсе Бөтә донъя һуғышы барышында ҡайһы бер илдәрҙең коммунистик партиялары үҙҙәренең буржуаз хөкүмәттәре сәйәсәтен яҡлап сыға. Шуның арҡаһында В. И. Ленин Икенсе интернационал составын, эшмәкәрлеген тәнҡитләй һәм 1919 йылда Икенсе интернационалға альтернатива рәүешендә радикаль йүнәлештәге коммунистик партияларҙан Өсөнсө интернационал төҙөй. 30-сы йылдарҙа И.Сталиндың төрлө “таҙартыуҙарына” дусар ителә, 1943 йылда уның тарафынан рәсми рәүештә таратыла.*

**Милләттәр Лигаһы**. *Беренсе Бөтә донъя һуғышынан һуң еңеүсе илдәр тарафынан 1919 йылда Парижда килешеү конференцияһында ойошторолған халыҡ-ара ойошма. Халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте һәм тыныслыҡ һаҡлауҙы маҡсаты итеп ҡуя. Ойоштороу эшенә йәлеп ителмәгәндәре өсөн Америка Ҡушма Штаттары тәүге осоронан уҡ уны тарҡатыу юлына баҫты. Ойошма Италия, Япония, Германияның агрессив пландарына ҡаршы тора алманы. 1937–1939 йылдарҙа Икенсе Бөтә донъя һуғышы башланыу менән эшмәкәрлеген туҡтатты. Һуғыш бөткәс, ойошманың таратылыуы тураһында иғлан ителә, уның урынына 1945 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы төҙөлә.*

## *«... улыбыҙ – һалдат!»*

Арыған-талған, күшеккән, баштан-аяҡ бысранып бөткән, һаҡал-мыйыҡтары етек, мәгәр ҡораллы һәм йөҙҙәрендә саялыҡ, тәүәккәллек, рух ныҡлығы ярылып ятҡан Сенькин һәм уның егеттәре баштарын эйеп туғандар ҡәберлеге янында торалар ине. Һәммәһенең башында буденовка. Уларын, һуңғы ваҡытта фуражкаға һәм кубанкаларға күсеүҙәренә ҡарамаҫтан, кәрәге сыҡһа, япондарҙың ҡотон алыу ғәләмәте итеберәк кейгәндәрҙер.

Тулҡынланыуынан хәле бөтөп йүгерә-атлай килеп еткәс, Добрягин Сенькинды ҡулбаштарынан тотоп үҙенә табан борҙо, борсолоу һәм хәүеф тулы күҙҙәре менән уға төбәлде. Ләм-мим өндәшмәнеләр. Бер-береһенә әҙ генә ҡарашып торғандан һуң, Сенькин, күңел өшөткөс ҡараған күҙҙәрен ыңғай яуап билгеһе итеп ҡат-ҡат йомоп, еңелсә баш ҡаҡты. Добрягин уны ҡыҫып ҡосаҡлап алды. Устары менән дөпөлдәтеп арҡаһынан ҡаҡты. Күҙҙәренә шатлыҡ йәше эркелде, тамағына ғазап төйөрө тығылды.

Әҙгә генә күңел нескәлегенә юл ҡуйған комдив, тиҙерәк ниндәйҙер хилаф эштән ҡотолорға теләгәндәй, Сенькинды ситкә тупаҫ этте. Ҡайҙалыр арттараҡ тапанған тикшереү төркөмө майорына үс итеп, һәләк булған застава командирҙарының Тыуған илгә тоғролоғо һәм дә үҙенең үҙ командирҙарында яңылышмауы тантанаһы аңғыраға ла аңлашылырлыҡ итеп һүҙҙәрҙә яңғыраһын өсөн:

– Доклад яһа, полковник Сенькин! – тип иңрәп ҡысҡырҙы.

Сенькин баш сайҡаны.

– Иптәш комдив, беҙгә ышаныуҙары икеле... Ана тегеләр һөйләһен... – Сенькин бер ситтәрәк торған, ҡасыу төнөндә ауыҙҙарына сепрәк тултырып алып кителгән ике НКВД хеҙмәткәренә ымланы. – Беҙ уларҙы юҡҡа ғына йөрөтмәгәнбеҙ: барыһын да ҡарап торҙолар, бөтәһенә лә шаһит булдылар...

Яуап көткәндәй, Добрягин менән майор тегеләр ҡаршыһына килеп баҫты. Үҙҙәренән нимә талап ителгәнен аңлағас, бөтә донъяға битараф ҡарап һәпәйеп торғаны, иларға йыйынғандай, тәүҙә йөҙөн бәлшәйтте, ҡалтыранырға тотондо; унан, бер ҡулы менән битен ҡаплап, башын ситкә борҙо; кемдәндер, нимәнәндер һаҡланырға теләгәндәй, икенсе ҡулы менән сәбәләнергә кереште.

Беренсеһенән өмөт юҡлығын аңлаған Добрягин икенсеһенә ҡараны. Өҙлөкһөҙ аллы-артлы сайҡалып, маңлайы аҫтынан ҡарап шаңғып торған быныһы, ниһайәт:

– Үлтерҙеләр... – тип мығырланы. – Күп... Кү-үп үлтерҙеләр!

Добрягин асыу менән:

– Анығыраҡ һөйлә! – тип ҡысҡырҙы ла сәсәп китте. – Күпмерәк?.. – Яуап булманы. – Биштеме?.. Ундымы?.. Йөҙҙөмө?..

– Күберәк.

– Ике йөҙҙөмө?.. Өс йөҙҙөмө?..

– Күберәк.

– Дүрт йөҙҙөмө?

– Шул тирә булыр... Тәүҙәрәк һанағайным, аҙаҡ иҫәпте юғалттым.

Комдив, бер кемдән йәшермәй, еңел һуланы. Майорға боролоп ҡараны. Уныһы тиҙерәк ҡараштарын ситкә йәшерҙе.

– Командир иптәштәр! – Добрягин тауышынан кешеләр генә түгел, яҡындағы ағастарға тиклем һиҫкәнгәндәй булды. – Һеҙҙе хәрби бурыс үтәлеүе менән ҡотлайым! Һәр берегеҙгә үҙ исемемдән рәхмәт белдерәм! Ә Мәскәүҙән ярлыҡау көтөгөҙ!.. Барығыҙға ла өс сәғәтлек ял бирәм. Оҙаҡламай беҙҙең дивизия тулы составы менән бында килеп етәсәк. Бөтәгеҙ ҙә элекке дәрәжәләрегеҙҙә хәрби

хеҙмәтегеҙҙе дауам иттерәһегеҙ. Тағы ла белегеҙ: кисә Япония менән Ҡытай араһында һуғыш башланған. Һеҙҙең этлекте иҫәпкә алыптыр, беҙҙең позицияларға япон милитаристарының ҙур хәрби көсө яҡынлаша. Ҡунаҡтарҙы ҡаршы алырға тура килер. Р-разойдис!..

…Майор Сенькин кабинетына ашыҡты. Кәрәккән-кәрәкмәгән ҡағыҙҙары менән портфеле тороп ҡалғайны, шуны алырға. Ауыр уйҙарынан башы эйелеп елеп килеп кереп, сабып ҡына сығып китергә уйлағайны, бүлмәләге һис көтөлмәгән яңы кешеләрҙе күреп юғалып ҡалды. Ике ҡатын-ҡыҙ, мөкиббән китеп, өҫтәлдә байрам табыны әҙерләп йөрөйҙәр ине. Урталыҡта тәмле еҫтәре менән танауҙы ҡытыҡлап ҙур бәлеш тора. Бәлеш тирәләй – күп һандағы, хәҙергә тоҡандырылмаған май шәмдәре.

– Ғәфү, кемдәр булаһығыҙ һеҙ? Нисек бында килеп эләктегеҙ?

Өлкән йәштәрҙәге ыҫпай ҡиәфәтле, мөләйем йөҙлө ҡатын майорға ихлас йылмайҙы.

– Мин, майор иптәш, комдив Михаил Елизаровичтың хәләл ефете булам.

– Ярар, яҡшы, шулай ҙа, ти, ә нишләп бында килдегеҙ?

– Беҙҙең улыбыҙ бында хеҙмәт итә, бөгөн уның тыуған көнө. Шуны билдәләргә килдек. Был һылыу туташ – улыбыҙҙың буласаҡ кәләше.

– Улығыҙ, ғәфү… Кем? Командирмы?

– Ҡайҙан әле уға командир булыу?! Ябай һалдат. Кавалерист. Хеҙмәт итеүенә йыл да тулмай.

Майор бер аҙ уйланып алды, ирекһеҙҙән ыуаланыу хәрәкәттере яһаны.

– Улығыҙҙы әйтәм… Ҡайҙа йәшәй ине?

– Һалдат ҡайҙа йәшәһен? Билгеле, казармала инде.

– Яңылышмайһығыҙмы, бәлки, ул бәләкәй генә булһа ла командирҙыр? Уйлап ҡарағыҙ…

Ҡатын кеше ҡырт киҫте:

– Юҡ, юҡ, юҡ! Беҙҙең улыбыҙ – һалдат! Бәлки, хәҙергәләр… Әйткәндәй, Миша ҡайһы тирәлә йөрөй икән? Күрһәгеҙ, беҙҙең килеү тураһында хәбәр бирә алмаҫһығыҙмы?

Майор, портфелен алып, тиҙерәк сығырға ашыҡты.

– Билгеле, билгеле, ханым! Әйтермен!.. Күрермен!

...Добрягин менән Сенькин һаман туғандар ҡәберлеге янында ине. Ҡобараһы осоп, тыны бөтөп килеп еткән майор хәбәрен ишетеү менән, Добрягин ҡатын-ҡыҙ янына ашыҡты. Кабинетҡа килеп ингәс тә, олпатлыҡ-фәлән һаҡлап тормай, ҡатынын ҡосаҡлап алды. Ҡыҙыҡай мут йылмайып тышҡа сығып китте.

Икеһе лә бер килке өндәшмәй торҙолар. Иренең ҡосаҡлап алыуын үҙенә ҡарата иғтибар билдәһеләй ҡабул иткән ҡатын бәхетле йылмайҙы, ә Добрягиндың күҙҙәренән ике бөртөк кенә йәш тәгәрләп сыҡты.

– ...Ксюша, нисек килеп етәһе иттегеҙ бында?

– Ылауға ултырып. Заставаға аҙыҡ-түлек килтерҙеләр.

– Әйттем бит мин һиңә, йөрөмә, тип!

– Һине тыңлаһаң… Йылға яҡын күргәнем юҡ бәпесемде. Йә, етәр! Нишләп тораһың? Саҡыр Женяны. Өҫтәл әҙер! Ултырайыҡ әле өйҙәгеләй бер гөрләтеп.

– Ксюша, беләһеңме, Женя юҡ…

– Нисек юҡ?

– Женямы? Женя… Улар китте… Эйе… Мин үҙем ебәрҙем…

– Ҡайҙа?

– Һуң, һалдаттың билгеле инде! Походҡа. Походка!.. Тиҙ генә ҡайтмаҫтар.

– Ҡайҙа киттеләр?

– Быныһы – хәрби сер. Ҡыҫҡаһы, алыҫ киттеләр… Бик йыраҡҡа…

– Һинең мәңге шул булыр инде! Ҡартайҙың шул хәрби серҙәрең менән. Ҡатының менән серләшергә генә ваҡыт тапманың.

– Ксюша, ҡәҙерлем, әрепләшер саҡ түгел. Әйҙәгеҙ, кисекмәҫтән кире теге яҡҡа ҡайтып китегеҙ...

– Миша!..

– Бөттө, бөттө, бөттө! Китәһегеҙ!.. Был тирәлә хәлдәр ҡатмарлы.

– Тағы... һуғышмы?

– Юҡ, Ксюша, юҡ... Тик һеҙ ҡайтып китә күрегеҙ, йәме? Хәҙер үк! Мин ылауға ҡуҙғалырға әмер бирермен. Матурым минең! Аҡыллым минең! Берҙән-берем минең!..

...Был көндөң төнө бер ҡасан булмағанса ғәжәп йылы һәм айлы ине. Дуҫтар тынсыу кабинеттан сығып, плащ-палатка йәйеп туғандар ҡәберлеге янына ултырҙы. Добрягин, ғәҙәтенсә, алдарындағы шешәне һыйпап ҡуйҙы.

– Эсә белеп эсһәң, һәйбәт нәмә ул, – тине лә үрелеп ҡәберлек тупрағын һыпырғыларға кереште. – Йоҡлайҙар, тиң... Йоҡлайҙар!.. Ултыр әле яныма, Сережа.

Күсеп ултырыуы менән, Добрягин Сенькиндың иңенә ҡулын һалды, тегеһе быны биленән ҡосаҡланы. Тиҙҙән ике ир, ике мәңгелек яугирҙың үҙҙәре өсөн генә йырлаған йыры башланды...

*Белеют кресты,*
*Это герои спят.*
*Прошлого тени кружат давно,*
*О жертвах боев твердят...*
*Тихо вокруг,*
*Ветер туман унес.*
*На сопках Маньчжурии воины спят,*
*И русских не слышат слез...*

Бер аҙ тынып торған арала Добрягин Сенькин башындағы буденовканың ҡолағынан тартып ҡуйҙы.

– Һал әле шул нәмәңде! Нимәгә тип һаман кейеп ултыраһыңдыр!

– Онотҡанмын, Миша. – Сенькин, башын алға эйә биреп, буденовкаһын һалды. – Валлаһи, ҡайтҡаны бирле онотҡанмын!

Полковник, кеҫәһенә һалып ҡуйыр өсөн, баш кейемен ашыҡмай ғына ыҡсымлап бөкләргә кереште.

Сенькин башынан буденовка һалыныуға Добрягиндың йөрәге жыу итеп ҡалды, айлы яҡты төн тағы ла асылыбыраҡ киткәндәй тойолдо. Кисә генә теге яҡҡа хәрби бурыс үтәргә киткәндәге ҡара сәстәре ап-аҡ ине. Йә, Хоҙа!..

Добрягиндың ниҙәр кисереп ултырғанын Сенькин үҙе күрмәне. Төргәген ҡәҙерләп салбар кеҫәһенә һалды ла тыныс ҡына һорап ҡуйҙы:

– Миша!.. Дуҫым минең!.. Ҡәҙерлем! Һин мине кисерә алаһыңмы?

Добрягин, Сенькиндың аҡ башынан һыйпап, яуап бирергә ашыҡты.

– Әлбиттә, Сережа!

– Юҡ, – тине Сенькин, – һин мине кисермә! Төшөнәһеңме? Юҡһа, мин артабан һуғыша алмам. Ғәфү ителгем килмәй. Миңә шулай еңелерәк булыр...

– Япон һуғышынан башлап, Сережа, был тарафтарҙа бик күп буҡкалар бешерелде. Беҙ ҙә аҙ бешермәнек, улар ҙа... Хәҙер килеп, быуа йырылды, буғай. Күңелем һиҙә: япондың кисә Ҡытайға ырғыуы оло янғындың башы ғыналыр, тим.

– Тағы ниҙәр күрәһе барҙыр, Миша, Хаҡ Тәғәлә үҙе генә белә...

Ҡарт яугирҙарҙың күңелдәре алдамай ине. Кисә, 1937 йылдың 7 июлендә, Азия ҡитғаһында һигеҙ йылдан ашыу ваҡытҡа һуҙылыр, кешелек тарихында иң хәтәр Икенсе Бөтә донъя һуғышы башланғайны. Ошо данлы ла, ҡанлы ла

ваҡиғаларҙы ике тиҫтә йылдан һуң тыныс тормоштоң тыныс кистәренең береһендә беҙгә, бер ус ҡына интернат балаларына, бәйән итер хөрмәтле тәрбиәсебеҙ кавалерист Мөстәҡим ағай Хәлитов, комдив Добрягин менән застава командиры полковник Сенькиндарҙан алыҫ түгел. Бәлки, шулар эргәһендәлер. Был айлы төндә ул тулыһынса хәрби әҙерлек менән палаткала йоҡлағанмы, төнгө утлауҙағы аттарҙы ҡарауыллағанмы, әллә тау-таш араһында дозорҙа ултырғанмы – нисек кенә булмаһын, ул – шул ваҡиғалар шаһиты, шул хәлдәр араһында ҡайнай.

## Ағa һыуҙар...

Алыҫ Көнсығышта хәрби хеҙмәтен тултырып, демобилизация көтөп йөрөгән Мөстәҡим ағайҙарҙың часын илдең көнбайыш сиктәренә күсерәләр. Өйгә ҡайтыу тотҡарлана. Күп тә үтмәй, Германия СССР-ға ябырыла. Ағайыбыҙға, Көнсығыш Пруссияла 1944 йылдың көҙөндә ауыр яраланып, ҡулһыҙ ҡалмайынса, тыуған ауылына әйләнеп ҡайтырға насип булмай.

Ағайыбыҙҙың холҡонда ғәжәп бер сифат бар ине: һуғыш хәтирәләрен һөйләгәндә ваҡиғаларға үҙен бик һирәк ҡушып һөйләр ине. Нигеҙҙә, яуҙаштары йәки дөйөм ваҡиға илдәр, армиялар тураһында һүҙ алып барҙы. Әйтерһең дә, ул үҙе башҡаларға эйәреп, кеше һуғышҡанды ғына күҙәтеп йөрөгән. Ә бит унда хәл-ваҡиғаны, һалдат ҡаһарманлығын дөйөм күрә алыу, масштаблы күҙәтеүсе, һәм, ниһайәт, субъектив һығымта яһау һәләте булған. Һәр хикәйәһендә үҙенә күрә аналитик, хатта ки хәрби эксперт ролендә сығыш яһаған. Былдай һәләт һәр кемгә бирелмәй. Заманында уҡыу эләкһә, унан мотлаҡ һәйбәт командир, ҙур командир сығыр ине.

...Һуңғы тапҡыр Мөстәҡим ағайҙы етмешенсе йылдар башында күргәнмендер. Яҡташтарҙы ара-тирә осратҡанда Юлдаштарҙы ғына түгел, Батырҙарҙы ла олоһонан алып кесеһенә тиклем өй һайын, бөртөкләп һораша торған ғәҙәтем бар. Шундай осрашыуҙарҙың береһендә сираттағы әңгәмәләшем ҡайғылы хәбәр ишеттерҙе. 2002 йылдың көҙөндә Мөстәҡим ағай үҙе, әбейе, өлкән улдары Ришат бергәләшеп үҙҙәренең еңел машиналарында район үҙәгенә барған саҡтарында ҡаршы килгән машинаға бәрелеп фажиғәле һәләк булғандар. Ошонда, хөрмәтле уҡыусым, оҙонғараҡ һуҙылған ҡиссам тамам. Ә һыуҙар ағa тора, әллә ҡайҙарға китә тора...

**Редакциянан:** *Автор материалдар табышыуҙа ярҙамлашҡаны өсөн Федоровка районының Батыр ауылында йәшәүсе Альмира Мырҙағәли ҡыҙы Байдәүләтоваға рәхмәтен белдерә.*

*В. К. Блюхерҙың ҡулға алыныу йылы художество эффекты хаҡына, бер йылға алға күсерелгән.*

***Әҫәрҙәре журналда донъя күргән авторҙарға гонорар түләү өсөн түбәндәге мәғлүмәттәр кәрәк:***

– тулы фамилияһы, исеме, атаһының исеме;
– почта индексы һәм тулы адресы;
– паспорт серияһы, номеры, кем тарафынан һәм ҡасан бирелгән;
– тыуған йылы, айы һәм көнө;
– социаль номеры;
– Дәүләт пенсия фондының страховка таныҡлығы номеры.

*Әгәр ошо мәғлүмәттәр күрһәтелмәһә, авторҙарға гонорар түләнмәй.*



**Рәшит
ШӘКҮР**

# УЙҘАРЫМДА — КӨН СЫУАҒЫ

## *Мин белгәндә*

*Мин белгәндә донъя иркен ине,
Шундай бейек ине һауалар,
Һөйөп, наҙлап, күкрәгенә ҡыҫып,
Күтәреп үк алды далалар.*

*Шуҡ ҡына бер ҡолонсаҡтай инем
Мин бала саҡ тигән илдәрҙә,
Мине ҡыуып тота алмаҫ ине
Сәхрәләрҙә уҫкән елдәр ҙә.*

*Мин белгәндә донъя гүзәл ине,
Йәп-йәш ине апай-ағайҙар
(Алыҫ-алыҫтарҙан улар бөгөн
Шат йылмайып миңә ҡарайҙар).*

*Әсәйҙең мин кинйә улы инем
(Кинйәләр бит була иркәрәк),*

---

*Рәшит Шәкүр (Рәшит Закир улы Шәкүров — 1937) Башҡорт АССР-ының Әлшәй (хәҙер Стәрлетамаҡ) районының Яңы Абдрахман ауылында тыуған. Октябрский нефть техникумын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын, Мәскәүҙә СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтының аспирантураһын тамамлай. Филология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Мифтахетдин Аҡмулла, Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева исемендәге премиялар лауреаты. Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнгән.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 75 йәшлек юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ!*

*Ә шулай ҙа яҙмыш тигән уҙмыш*
*Алып китте ситкә иртәрәк.*

*Мин белгәндә тыуған ауылымдың*
*Теүәл ине әле йорттары,*
*Теҙелешеп ултырырҙар ине*
*Утыҙ-ҡырҡлап ҡына йорт бары.*

*Ауылдарҙы бөтөрөргә тигән*
*Сыҡмағайны әле сәйәсәт,*
*Шишмәләрҙе ҡороторға тигән*
*Ҡупмағайны әле ғәрәсәт.*

*Мин белгәндә донъя барыбер ҙә*
*Булғандыр ул, ахыры, яҡтыраҡ,*
*Бисмиллалы өйҙә бисмилла тип*
*Бешерелгән аштар — татлыраҡ.*

*Мин ана шул үткән замандарҙан*
*Килер көнгә юлдар ярыусы,*
*Тарих тәгәрмәсен бар көсөмә*
*Әйләндереп, алға барыусы.*

## *Йөрәк теле*

*Эсемдәге тағы тышҡа сыкты,*
*Ярһыу аттай йөрәк талпына.*
*Тыя алмай хисте, тойғоларҙы,*
*Ут эсендә ҡалдым, ялҡында.*

*Ә бит күршем бына, күреп торам,*
*Тота белә үҙен, ул түҙем.*
*Мин һөйләйем йөрәк теле менән,*
*Ә ул үлсәп әйтә һәр һүҙен.*

*Ә мин аҙаҡ күпме ғазапланам,*
*Үкенәмен, әммә һуң була.*
*Йөрәк теле менән һөйләйем тип,*
*Төп башына мин бит ултырам.*

*Йөрәк теле һәйбәттер ҙә, бәлки,*
*Һәйбәттер ул әммә шиғырҙа,*
*Сөнки асы тормош ҡануңдары*
*Мин белмәгән телдә яҙылған.*

## Әүлиәләр иле

*Башҡортостан — әүлиәләр иле,*
*Аҫыл заттар иле, нур иле,*
*Мәңгелектән килеп, мәңгелеккә*
*Олғашыусы моңло йыр иле.*

*Был ерҙәргә тәүләп аяҡ баҫҡан*
*Йәнбирҙе лә менән Йәнбикә.*
*Ғүмер иткән улар, донъя көткән*
*Һунарҙарға йөрөп кейеккә.*

*Заманалар башланалыр бында*
*Тәүтормоштан, алыҫ тәү мәлдән.*
*Йәнбирҙе лә менән Йәнбикәнән,*
*Урал батыр менән Шүлгәндән.*

*Ошо ерҙе изге Урал батыр*
*Беҙгә төйәк итеп ҡалдырған,*
*Йәншишмәнең тере һыуын бөркөп,*
*Ырыҫ ямғырҙары яуҙырған.*

*Бында тыуған беҙҙең тәү динебеҙ,*
*Рухыбыҙға терәк — Тәңребеҙ.*
*Бында тыуған беҙҙең тәү телебеҙ,*
*Телебеҙҙә — яҡты көнөбөҙ.*

*Башҡорт тигәнебеҙ — баш ҡәүем ул,*
*Тәүге ҡәүем Урал иләндә.*
*(Баш ҡәүем тип исем алған халыҡ*
*Берәү генә донъя йөҙөндә!)*

*Баш ҡәүемдән бөтөн дүрт тарафҡа*
*Тармаҡ-тармаҡ ырыу таралған.*
*Алыҫ-алыҫтарҙа, сит яҡтарҙа*
*Йәнә күпме ҡәүем яралған?!*

*Бәғзеләре иһә кире ҡайтҡан,*
*Тәүге төйәккәйен һағынып.*
*Ҡоштар ҡайтҡан кеүек йылы яҡтан,*
*Ҡанаттарын ҡағып, талдырып.*

*Тәүтөйәктә шулай үҫә биргән*
*Баш ҡәүемдең нәҫел ағасы,*

*Урал атабыҙҙан тыл, ҡот алып,*
*Мең йыллыҡтар менән ярашып.*

*Ҡемдәр генә бында килмәгән дә*
*Ҡемдәр генә бынан китмәгән.*
*Оло аҡыл эйәләре, юҡ-юҡ,*
*Береһен дә ситкә типмәгән.*

*Урал-Урал, тиеп гөрләп торған*
*Бал ҡортондай бер ҡор, күс булып,*
*Баш ҡәүемдең тирәһендә улар*
*Ойошҡандар дәррәү көс булып.*

*Күңелдәре тулы иман менән*
*Төҙөгәндәр бында баш йортто.*
*Ғәҙеллектең һаҡсылары тиеп*
*Танығандар борон башҡортто.*

*Хоҙай Тәғәләбеҙ Уралҡайҙы*
*Һөйөү нуры менән һуғарған,*
*Илһам алған халҡым, көс-кәр алған*
*Тауҙан, таштан, ерҙән, һыуҙарҙан.*

*Бөйөк һөйөү хисе башҡортомда*
*Серле бер талисман, ҡот булған.*
*Илем тиеп янған йөрәктәрҙә*
*Мәңге һүнмәй торған ут булған.*

*Быуаттарҙан быуаттарға шулай*
*Күтәрелгән башҡорт балаһы.*
*Меңәр саҡрым ерҙе иңләп-буйлап,*
*Йәйрәп ятҡан башҡорт далаһы.*

*Урал батыр рухын һаҡлап торор*
*Аҡылдары булған был илдең,*
*Халҡын яҡлап йәнен фиҙа ҡылыр*
*Батырҙары булған был илдең.*

*Күрше хаҡы — Тәңре хаҡы, тиеп,*
*Бер кемде лә барып баҫмаған.*
*Ҡеше хаҡы үҙ хаҡымдай, тиеп,*
*Сит ерҙәргә яуҙар асмаған.*

*Әммә тыуған тупраҡ башҡорт өсөн*
*Ғәзиздәрҙән-ғәзиз ғүмергә.*
*Иң ҡәҙерле, иң мөҡәддәс тойғо —*
*Тыуған ил һәм тыуған ер генә.*

*Уралҡайҙың ҡыйғыр бөркөтө һин,*
*Бәхет ҡошом — Башҡортостаным!*
*Күрһен әйҙә донъя сал бөркөттөң*
*Бейектәрҙән бейек осҡанын!*

*Башҡортостан — яҡты таңдар иле,*
*Дуҫ халыҡтар иле, йыр иле.*
*Рухыбыҙҙың алтын терәге һин,*
*Илаһиәт иле, моң иле.*

## *Юзгляр**

*Меңәрләгән кеше араһында*
*Ниңә берәү яңғыҙ интегә?*
*Иҫкә төшә бына бер персонаж —*
*Яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән:*

*Юзгляр. Бөйөк Горький әҫәрендә*
*Телһеҙ бер зат, сәйер герой ул.*
*Бер кем белмәй, күк йөҙөнә ҡарап,*
*Низәр һөйләй, низәр көйләй ул...*

*— Күрегеҙсе, унда донъя иркен,*
*Унда тиңлек, унда ғәҙеллек,*
*Золомлоҡтоң юҡтыр остоғо ла,*
*Иман нуры унда ҡәҙерле.*

*Сын донъянан фәһем алығыҙсы,*
*Раббыбыҙға тоғро булығыҙ,*
*Яҡшылыҡты ғына алға ҡуйып,*
*Яуызлыҡтың юлын быуығыҙ!*

*Яуыздар бит өҫкә менеп килә,*
*Яуыздар бит илде абалай.*
*Иманһыҙлыҡ оло бәлә илгә,*
*Иманһыҙлыҡ аңды томалай.*

**Юзгляр – Максим Горькийҙың башҡорттар тураһындағы «Телһеҙ» тигән хикәйәһенең геройы.*

*Әлмисаҡтан бирле ошо ергә*
*Килеп киткән күпме быуындар,*
*Ил иңенә күпме һынау төшкән,*
*Күпме тапҡыр ҡупҡан дауылдар.*

*Әммә Урал батыр ейәндәре*
*Тоғро ҡалған һәр саҡ төп йортҡа,*
*Ҡаялағы артыш һымаҡ, башҡорт*
*Сат йәбешкән тыуған тупраҡҡа.*

*Ошо изге тыуған тупрағын ул*
*Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған,*
*Алҡымынан килеп алһалар ҙа,*
*Ул намыҫын, динен һатмаған.*

*Урал иле — илаһиәт иле,*
*Беҙ рухыбыҙ менән юғары,*
*Юғары аң беҙгә, кешеләрем,*
*Төшөрәлер иман нурҙарын.*

*Ҡәҙерҙәрен шуның беләйексе,*
*Илебеҙгә бәхет юрайыҡ!*
*Был донъяның ҡара көстәренә*
*Ҡалҡан булып ҡаршы торайыҡ!*

*Эй, Юзгляр... Һинең телмәреңде*
*Быуат аша дала елдәре,*
*Үткәндәрҙән бер аманат итеп,*
*Алып килеп миңә елгәрҙе.*

*Яңғыҙ, тинем. Яңылыштым, буғай,*
*Илһөйәрҙәр яңғыҙ булмай ул.*
*Азатлыҡтың яҡты ауаздары*
*Ил өҫтөндә мәңге тынмай ул.*

## *Ҡамауҙағы бүре өйөрө*

Я была тогда с моим народом,
Там, где мой народ, к несчастью, был.

**Анна Ахматова**

*Яраланған бер ҡарт бүре һымаҡ,*
*Мин өңөмә ҡайтып йығылдым,*
*Бысрағына батып, бысрағына*
*Сәйәсмәндәр ҡорған уйындың.*

*Яраларҙы ялап ятҡан булам,*
*Аңлай алмай донъя айышын.*
*Ошо көнгә төштөм, мин халҡымдың*
*Ҡурсалайым, тиеп, яҙмышын.*

*Эй, ҡарт бүре... Күҙ алдыма килә*
*Ҡамауҙағы бүре өйөрө.*
*Мин дә, имеш, ана шул өйөрҙә*
*Ҡамалыуҙа ҡалған бер бүре.*

*Ҡамалыуҙа ҡалған бүреләрҙең*
*Тирә-яғы уның ҡарауыл.*
*Әмер килгән юғарынан, әмер —*
*Бүреләргә шулай таман ул!*

*Тейеш икән улар, теҙелешеп,*
*Бер мөйөшкә барып боҫорға,*
*Ҡушҡан саҡта шып-шым ултырырға,*
*Ҡушҡан саҡта тороп баҫырға.*

*Ә бүреләр — ирек һөйөүселәр,*
*Түгел улар ауыл көтөүе,*
*Ирек һөйөүсене, иреклһеҙләп,*
*Мөмкинме һуң мәжбүр итеүе?*

*О, был беҙҙең изге бер ҡатлылыҡ!*
*Мәңге һүнмәҫ өмөт, ышаныс!*
*Әммә бүре һынлы бүренең дә*
*Булмышы бит, ай-һай, аяныс.*

*Ахыры, хәҙер онотолоп бара*
*Бүрелеге бәғзе бүренең.*
*Ҡайһы берҙә ҡуян йөрәклеләр*
*Кейеп ала төлкө бүреген.*

*Әммә, нисек кенә итһәгеҙ ҙә,*
*Һеҙ бүреләр инде, бүреләр.*
*Туңҡайышып ятһағыҙ ҙа, һеҙҙе*
*Барыбер ҙә бүре тиерҙәр.*

*Ҡамалыуҙа тороп ҡалһалар ҙа,*
*Бүреләрҙә түгел мәсьәлә.*
*Ниңә тормош әйләнә лә китә*
*Ҡурсаҡ театрындағы сәхнәгә?*

*Ояһында эт тә көслө, тиҙәр,*
*Икеләтә көслө бүреләр.*
*Башҡортостан тигән был изге ил*
*Хоҙайҙан бит беҙгә бирелгән.*

*Юҡ, егеттәр, беҙ хоҡуҡлы ерҙә*
*Үҙ юлыбыҙ менән барырға,*
*Үҙебеҙсә хатта тын алырға,*
*Үҙ-үҙебеҙ булып ҡалырға!*

## *Башҡорт булыу өсөн бик күп кәрәк*

Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкмәй...

**Тойғон**

*Юҡ, туғаным, улай түгел дә ул,*
*Башҡорт булыу үтә яуаплы.*
*Башҡорт булыу өсөн бик күп кәрәк,*
*Башҡорт булыуҙары сауаплы.*

*Күпме беҙҙә, башҡорт була тороп,*
*Башҡорт булып етлекмәгәндәр.*
*Башҡортлоҡ тип, аҫыл заттарыбыҙ*
*Күп кисергән, күпте күргәндәр.*

*Башҡорт булыу өсөн бик күп кәрәк,*
*Тәрән аҡыл кәрәк, хис кәрәк,*
*Илде һаҡлар өсөн, яҡлар өсөн*
*Ҡайнар йөрәк кәрәк, көс кәрәк.*

*Башҡорт булыу бик ҙур бурыстыр ул —*
*Яуызлыҡҡа ҡаршы торорлоҡ,*
*Урал батыр һымаҡ, Урал илен*
*Гөл баҡсаһы итеп ҡорорлоҡ.*

## *Бейектән-бейектәргә!*

*Алтын — күңел түрендә,*
*Таба белергә кәрәк,*
*Табып, шиғыр юлына*
*Һала белергә кәрәк.*

*Алтын — хыял күгендә,*
*Күҙ етмәҫ киңлектәрҙә.*
*Ынтыла илаһи зат*
*Бейектән-бейектәргә.*

## *Дүрт юллыҡтар*

*Илде гиҙеп күп йөрөнөм, күпте күрҙем,*
*Илем, тиеп, илде һөйөп ғүмер һөрҙөм.*
*Йөрәгемдә, илем, һинең яҡты йөҙөң —*
*Әйтерһең дә, тотош бер ил мин бер үҙем.*

***

*Бөйөк Хәйәм һымаҡ, мин дә күп уйланым*
*Фанилығы тураһында ғүмерҙең.*
*Ярай әле, үҙып барған йылдарымда*
*Бер аҙ сәсеп, бер аҙ йыйып өлгөрҙөм.*

***

*Ҡеше менән кеше аралары*
*Ҡылдан нәҙек, ептән нескәрәк.*
*Яҡын була кеше бер-беренә,*
*Яҡты уйҙар ятһа эстәрәк.*

***

*Ерҙәребеҙ беҙҙең ҡарап туя алмаҫлыҡ,*
*Ерҙәребеҙ беҙҙең илаһи,*
*Ошо ерҙә тамыр йәйгән халҡым,*
*Ошо ерҙе һөйгән ил даһи.*

***

*Бахырҙарҙың батырҙарҙы еңгән сағы —*
*Илдең-көндөң һәм милләттең бөлгән сағы.*
*Батырҙарҙың толпарҙарҙа елгән сағы —*
*Ил күгенә ҡояш сығып килгән сағы.*

***

*Ғаләм ижадсыһы иң-иң әүәл*
*Бар нәмәгә Һүҙҙе баш иткән.*
*Булған заманалар: бер һүҙ өсөн,*
*Бары бер һүҙ өсөн баш киткән.*

***

*Беҙ, шағирҙар, ысынында мәжүсиҙәр,*
*Һауаларҙа, ерҙә, һыуҙа — күпме серҙәр...*
*Беҙ — илаһи донъяларҙың илселәре,*
*Шиғри һүҙҙең табиптары, имселәре.*

***

*Силәгенә күрә — ҡапҡасы,*
*Ситәненә күрә — ҡапҡаһы,*

*Милләтенә күрә — дәүләте,*
*Дәүләтенә күрә — батшаһы.*

***

*— Нәфсе ҡоло булыуҙан да аламараҡ*
*Ни бар тағы, дуҫым, әйтһәңсе ?*
*— Ни бар тип ни, унан яманыраҡ*
*Булһа булыр бары ғәйбәтсе.*

***

*Эттең дә бар үҙ урыны,*
*Бүренең дә — үҙ фиғеле,*
*Әммә, дуҫтар, һаҡ булығыҙ,*
*Осратһағыҙ эт-бүрене!*

***

*Ер өҫтөндә ҡый-һай, сүп-сар*
*Тау-тау хәҙер, тау хәҙер.*
*Эй, кешелек донъяһы!*
*Үҙ-үҙенә яу хәҙер.*

***

*Аҡыллының бөтө бер тин арабыҙҙа,*
*Алтын аҡыл аҫта ята ҡалабыҙҙа.*
*Ә шулай ҙа һөйөнәмен, алға ҡарап,*
*Алда ҡояш һөйөп баға далабыҙға.*

***

*Эй, Хоҙайым, мәңге рәхмәтлемен*
*Бар иткәнгә яҡты донъяға.*
*Һағынып көтөп алам һәр көнөмдө,*
*Көндәремдән ергә моң аға.*

***

*Көндәр менән төндәр алмаш килә —*
*Хикмәттәре барҙыр быныӊ да.*
*Көндөҙөн дә, ҡара төндәрҙә лә*
*Көн сыуағы булһын уйыңда!*



Рамай
ҠАҺИР

# КӨНДӘРЕМ КИТТЕ АЯҘҒА...

## *Якты эҙҙәр ҡалдырырға ине...*

*Тау артынан ҡояш күтәрелә,*
*Ҡалғаны юҡ уның күтәрелмәй.*
*Ул үҙ эшен белә, уның өсөн —*
*Ниңә икән донъя түңкәрелмәй.*

*Шағир күтәрелә, иңбашына*
*Күтәргән ул йөгөн заманының.*
*Кеше белә: юлы һәр саҡ уңа*
*Ҡыйыу рухлы, зирәк, самалының.*

*Һалҡынлығын тоям аҡылымдың,*
*Хистәремдең тоям — таҙалығын.*
*...Якты эҙҙәр ҡалдырырға ине*
*Бер шағиры булып заманымдың!*

## *Аҡыл*

*Сабыйлыҡтан йөрәк юлға сыҡҡан,*
*Оҙата барһа ине аҡылы.*
*Шул аҡылдан, беләм, яралғандыр*
*Намыҫ, выждан, күңел сафлығы.*

*Рамай Ҡаһир (1962) Учалы районының Өргөн ауылында йәшәй. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ, ижади уңыштар, тән-йән сәләмәтлеге теләйбеҙ.*

*Донъя гиҙеп бер ҡарт ҡайтып килә,*
*Үҙе менән йыйған аҡылы.*
*...Ғүмер буйы кеше аҡыл туплай—*
*Бына шунда тормош асылы!*

## Мәңгелек

*Берәү ҙә түгел мәңгелек,*
*Таштар ҙа емерелә.*
*Кешенең тыуым-үлемен*
*Бары тик Хоҙай белә.*
*Таштар онтала, бер килеп*
*Әйләнә туҙандарға.*
*...Кеше исемдәре йәшәй*
*Замандан-замандарға!*

## Һәр кешегә ярап булмай...

*Һәр кешегә ярап булмай,*
*Теләк тә юҡ ярарға!*
*Кем оҡшатмай — урап үтһен,*
*Килдем шундай уйҙарға!*
*Дошман күргән — йөҙөн борһон*
*Үткәндә йәнәшәмдән.*
*Мин яҡтылыҡ эҙләмәйем*
*Мунсала янған шәмдән.*
*Үҙ донъямды яҡтыртырлыҡ,*
*Шөкөр, бар үҙ ҡояшым.*
*...Һәр кем хәленән килгәнсә*
*Яҡтырта үҙ донъяһын!*

## Тәнҡит

Йәш шағирҙарға

*Тәнҡитләмәйҙәр, беләм мин,*
*Талантһыҙ тыуғандарҙы.*
*Туҡмай-туҡмай тәнҡитләйҙәр*
*Һәләте булғандарҙы!*
*Ҡыуан дуҫым: тәнҡит-утта*
*Дөрләтеп яндырһалар.*
*Уйланырға сәбәбең бар —*
*Онотоп ҡалдырһалар.*
*Тәнҡитләү — тимәк, үҫергә*
*Бар әле ҙур мөмкинлек.*
*...Уйлан, хаталарҙы төҙәт,*
*Юғал күҙҙән, мин-минлек!*

## *Ябайлыҡ*

*Инҡар итеп булмағандай*
*Гөл тулы баҡсаларҙы,*
*Әүлиә итеп күрәмен*
*Үҙемдән башҡаларҙы.*
*Һәйбәт кеше — минең өсөн*
*Әүлиәләр затынан.*
*Йәштәренән дәрт аламын,*
*Үрнәк алам ҡартынан.*
*Урыҫмы ул, чеченмы ул,*
*Барыһы миңә туған.*
*...Уларһыҙ мин Ер йөҙөндә*
*Ни бары бер саң-туҙан.*

## *Мәртәбә*

*Емереп сыға алһам мин*
*Ҡөнсөллөк кәртәләрен,*
*Ҡәләмдәштәрем алдында*
*Артыр мәртәбәләрем.*
*Тойоп-аңлап йәшәй алһам*
*Дуҫлыҡ, донъя йәмдәрен,*
*Беләм, дуҫтарым алдында —*
*Артыр мәртәбәләрем.*
*...Дауам итһәм Вәлидиҙең*
*Яҙған фәлсәфәләрен,*
*Ышанам, халҡым алдында*
*Артыр мәртәбәләрем!*

## *Әсәйемә*

*Ҡояш булып йылытайым*
*Ҡыраулы күҙҙәреңде.*
*Шатлыҡ булып балҡытайым*
*Һағышлы йөҙҙәреңде.*
*Елдәр булып киптерәйем*
*Йәшләнгән күҙҙәреңде.*
*Ҡиләсәккә еткерәйем —*
*Иманлы һүҙҙәреңде.*

***

*Фанилыҡтан, әсәй, китә күрмә,*
*Йонсотһа ла ҡартлыҡ, ауырыуҙар.*
*Ете яҡтан, ете таныш аша*
*Табырмын мин һиңә дарыуҙар.*
*Йонсоуҙарға һин бирешмә, әсәй,*
*Таян беҙгә, таян нығырaҡ!*
*...Күреүҙәрҙән әсә ҡыуанысын*
*Бармы икән бәхет ҙурыраҡ?!*

## *Көндәрем китте аяҙып...*

*Көндәрем китте аяҙып, —*
*Ҡояш тәпәйләгәндер.*
*Айҙан йөклө ҡалған йондоҙ*
*Инде бәпәйләгәндер.*
*Ер шары үҙ күсәрендә —*
*Туҡтамай әйләнгәндер.*
*Эш тип көйгән егәрленең*
*Устары сейләнгәндер.*
*Буйҙаҡ йөрөгән егеттәр —*
*Күптәнән өйләнгәндер.*
*Ҡатын, бәпес мыжыуына*
*Улар ҙа өйрәнгәндер.*
*Кисә маҡталған берәүгә*
*Шул көндән күҙ тейгәндер.*
*«Мине күрмәй йөрөнөгөҙ —*
*Мин — иң шәбе!» — тигәндер.*
*Көндәрем китте аяҙып —*
*Әбейҙәр шәбәйгәндер.*
*Бер-береңә һөйләр һүҙҙәр,*
*Хәбәрҙәр күбәйгәндер!..*

## *Көҙ*

*Көҙ — ҡарт һалдат, иңбашына*
*Һалып һоро шинелен,*
*Ҡайтып килә, бар донъяға*
*Ихлас асып күңелен.*
*Күңеленә һағыш тулған,*
*Һағынғандыр илкәйен,*
*Ҡыуаныстан үбеп ала,*
*Ҡосоп, ғәзиз еркәйен.*
*Шул һағыштан бар тәбиғәт*
*Ингән алтын төҫөнә.*
*Һоҡланам мин көҙ-һалдаттың*
*Йомартлығы, көсөнә.*

*Ел уйната шинеленең*
*Иҫкергән салғыйҙарын.*
*Инде күптән ҙурайтҡандыр*
*Ҡатыны сабыйҙарын.*
*Баллы тәлгәш балан өҙгән*
*Шуларға тип күстәнәс.*
*Тормош ҡәҙерен белә ул,*
*Дары еҫен еҫкәгәс.*
*Көҙ — ҡарт һалдат — ҡайтып килә,*
*Ул — яуҙарҙа еңеүсе.*
*...Елдән алда йүгереп ҡайтып,*
*Алайымсы һөйөнсө!*

## *Ҡыш*

*Ҡыш уртаһы. Ап-аҡ ҡарҙа*
*Иң матур, сағыу төҫтәр.*
*Алһыу миләш тәлгәштәре,*
*Майҙигүс, ҡыҙылтүштәр.*
*Донъя тылсымлы, күрәһең, —*
*Һәр нәмәнең үҙ яйы:*
*Ышыҡта бала сығара*
*Ҡескәй шыршы турғайы.*
*Тәбиғәт йоҡлай сабыйҙай,*
*Күрә ул тәмле төштәр.*
*...Ҡар өҫтөндә ҡыш биҙәге —*
*Майҙигүс, ҡыҙылтүштәр.*

## *Күңелдә яҙ*

*Ай-йондоҙҙар нурлап тора*
*Ҡис-йыһан көмбәҙҙәрен.*
*Иртән-кисен туңдыра ла*
*Иретә көндөҙҙәрен.*
*Күстәремде барлап сыҡтым,*
*Яңырттым кәрәҙҙәрен.*
*Бал ҡорттары һағынғандыр*
*Нектар йыйыр мәлдәрен.*
*Яҙ килә ҡоштар һайратып,*
*Иретә көндөҙҙәрен.*
*...Йыр-моң менән тултырайым*
*Күңелем кәрәҙҙәрен!*

## *Ҡөҙрәт бар*

*Күрәһең, күк көмбәҙендә*
*Ябылмаҫтай тишек бар.*
*Нисәнсе көн туҡтамайса*
*Ергә яуа епшек ҡар.*
*Яуһын, әйҙә, — көрткә күмһен*
*Ерҙе ҡарҙың епшеге.*
*Ҡояш-сабый йоҡлай әле,*
*Күктә — көмөш бишеге.*
*Ул уянып бер йылмайһа,*
*Ереп бөтөр епшек ҡар.*
*...Ҡояш, кеше... Һәр берендә*
*Таш иретер ҡөҙрәт бар!*

***

*Яҙҙар етеп, гөл-сәскәләр*
*Таждарын асһа ине.*
*Йөрәктәге үй-хистәрем,*
*Ярһып, бер ташһа ине.*

*Яҙмышыма юлдаш итеп*
*Яҙҙарҙы һайлар инем.*
*Һандуғаска әүерелеп,*
*Өҙҙөрөп һайрар инем.*

*Йәйҙәр етер, ләйсән ямғыр*
*Шифаһын ҡойһа ине.*
*Күңелкәйем һәр һулышты*
*Ишетһә, тойһа ине.*
*Йәшлегемә юлдаш итеп*
*Йәйҙәрҙе һайлар инем.*
*Татлы һөйөү ялҡынында*
*Тилереп ҡайнар инем.*

*Көҙҙәр етер, киләттәргә*
*Иген ишелһә ине.*
*Йомарт көҙҙөң моңдарына*
*Күңел иҫерһә ине.*
*Күңелемә серҙәш итеп*
*Көҙҙәрҙе һайлар инем.*
*Баллы миләш, балан менән*
*Дуҫтарҙы һыйлар инем.*

*Ҡыштар етеп, ап-аҡ ҡарҙар*
*Ерҙе сафлаһа ине.*
*Хоҙай беҙҙе яуызлыҡтан,*
*Сирҙән һаҡлаһа ине.*
*Аҡ буранлы ҡыштарымды*
*Дуҫ итеп һайлар инем.*
*... Һандуғастар ҡыш һайрамай,*
*Ләкин мин һайрар инем...*

***

*Яуызлыҡ көтә алдына*
*Килеп теҙ сүгеремде.*
*Изгелек, илһам тыуҙырып,*
*Нурлата ғүмеремде.*
*Яуызлыҡ ҡайғы яуҙыртып,*
*Көтә йәш түгеремде.*
*Тыныс ҡына ҡабул итәм*
*Күрәсәк-күреремде.*
*Яуызлыҡ, шаша, ҡотора,*
*Саҡыра үлемемде.*
*Сабырлыҡ өмөт тыуҙыра,*
*Йырлата күңелемде.*



**Марис**
**НӘЗИРОВ**

# ҮРЛӘГӘНДӘ ҒҮМЕР ТҮБӘҺЕНӘ...

## *Ҡар өҫтөндә миләш ҡыҙ йәштәре*

*Ҡар өҫтөндә миләш тәлгәштәрен*
*Тапап һыҡҡан сана табаны.*
*Мамыҡ кеүек аҡта — ҡыҙыл таптар,*
*Тамып ҡалған, гүйә, ат ҡаны.*

*Иҫән микән малҡай?*
*Был ауылда*
*Ат аҙбары, бөләм, юҡ күптән.*
*Ел осора боҙло ҡыл йомғағын*
*Шул урынды йотҡан сүплектән.*

*Беҙ үҫкәндә эйәрле ат ине*
*Күңелдәрҙең түрен биләгән.*
*Мейестәге һалам күк йылытты,*
*Төн һарылғас ситән өйҙәргә.*

*Таң атҡанда әтәс ҡысҡырғаны,*
*Аттар кешнәгәне уятты.*
*Колхозлашыу, һуғыш осоронда*
*Иң ауырын йөктөң ат тартты.*

---

*Марис Нәзиров (1949) — Саҡмағош районы Үрнәк ауылынан. Тиҫтәнән ашыу шиғри йыйынтыҡ авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.*

*Яҡты донъя ҡотло, мул булһынға*
*Унан һуң да ауыл ут йотто.*
*Тотош илде аттар туйындырҙы,*
*Ҡаланы ла улар байытты.*

*Хәйерселек сиктәренә ҡабат*
*Етеп бара нindәй бай ауыл.*
*Ҡалмағанда кеше ҡәҙерҙәре*
*Ҡәҙерләүҙәр атты ҡайҙа ул?!*

*Әллә нисек һытыҡ тәлгәштәрҙе,*
*Сана эҙен тапап атлауы.*
*...Ҡар өҫтөндә — миләш куҙ йәштәре,*
*Әйтерһең дә, һуңғы ат ҡаны.*

***

*Тәрән йылға тып-тын аға,*
*Һыуҙары тормай шаулап.*
*Тулҡындары ярға ҡаҡмай,*
*Дала киңлеген даулап.*

*Тыныс аға тәрән йылға,*
*Боҙ ҡаплай, ҡышҡа кергәс.*
*Тәрән йылға ла тулыша,*
*Яҙ ҡояшы наҙ өргәс.*

*Таша йылға, шаша йылға,*
*Киң йәйеп ҡоластарын.*
*Минең дә бит әле шулай*
*Ярҙан ашҡан саҡтарым.*

***

*Яратығыҙ мине,*
*Йәнем наҙға һыуһаны.*
*Яҙыҡ булмаҫ яңы яҙҙа*
*Һылыу ҡыҙҙар ҡосағы.*

*Ҡаратығыҙ мине,*
*Һанамағыҙ ҡарт тиеп.*
*Сик ҡуймағыҙ күңелемә,*
*Тиңеңде ярат, тиеп.*

*Шаяртығыҙ мине,*
*Йәш егеткә тиңләгеҙ.*

*Йәшлек хисен яңыртырлыҡ*
*Саф мөхәббәт димләгеҙ.*

***

*Февраль ҡары, ынйы бөртөгөләй,*
*Сәйләндәрҙәй ята емелдәп.*
*Ҡыҙылтүштәр, миләштәр ҙә бөткәс,*
*Ихатаға төшкән ем эҙләп.*

*Баландар ҙа шәрә, бер емешһеҙ*
*Яҙға ҡарап ҡояш көлгәндә.*
*Кемдәр генә аңлап бөтһөн инде*
*Ас ҡоштарҙың хәлен был мәлдә?*

*Елдәр селтәрләгән ҡар өҫтәрен*
*Турғайҙар ҙа суҡып һырлаған.*
*Ризыҡ табалмаған был ҡоштарҙың*
*Эҙҙәрендә беҙгә зар ҡалған.*

*Ошо зарҙы таяҡ менән ҡарға*
*Һуҡбайҙар ҙа уйып ҡуйғандар,*
*Һөйәк ботарлаған көсөктәрҙе*
*Сүп-сар өйөмөнән ҡыуғанда.*

*Сүп һауытын аҡтарғанда ҡарттар*
*Ҡаты-ҡото таба әлегә.*
*Үҙ затын да һанлай алмағандар*
*Нисек керһен ҡоштар хәленә?*

*Әрнеүҙәрем баҫып булмаҫмы тип,*
*Йәнем теләм теүәл һүҙ эҙләп.*
*Февраль ҡары ап-аҡ ҡағыҙ кеүек*
*Йөрәгемдә ята емелдәп.*

***

*Бала саҡтан беләм:*
*«Һыйлы көнөң — һыйыр менән»,—*
*Тигән һүҙҙәр дөрөҫ икәнде.*
*Ас итмәне көндө*
*Атай һауған һөтлөкәйҙең*
*Пар бөркөгән ағы иртәнге.*

*Етем өс сабыйҙың,*
*Үгәйһетеп буш табынын,*

*Ҡоро бер йәй китте ҡот өйҙән.*
*Ҡыҫыр ҡалды һыйыр, —*
*Бүреләрме йәнен ҡыйҙы? —*
*Иҫән ҡайтманы ул көтөүҙән.*

*Хоҙай, ярай әле,*
*Яраларҙан араланы,*
*Атай тана алып үҫтерҙе.*
*Быҙау ҡаҡҡас ишек,*
*Һыуыҙ күмәсендә бешеп,*
*Йортобоҙға ҡабат ҡот керҙе.*

*Ҡот йәшәне оҙаҡ,*
*Туҡ үҫкәнгә йөҙөбөҙ аҡ,*
*Ғүмер юлы йырлап һүтелгән.*
*Бала саҡтан беләм:*
*Һыйлы көнөң — һыйыр менән,*
*Ауыл таңы матур һөт менән!*

***

*Ауыл урамынан үҙғанда ла*
*Тыныс түгел хәҙер, ҡурҡыта.*
*Ғүмер ишек бикләмәгән халыҡ*
*Йорт аралаш үҫал эт тота.*

*Ҡурҡҡанға ғына ҡуш күренмәй,*
*Көсөгө лә бүрһыҡ ҙурлығы.*
*Ят ереңә ырғып теш батырһа,*
*Зәғифләнһәң — әҙәм хурлығы!*

*Ауыртыуға әллә сыҙарһың да...*
*Һығылырһың үйҙәр ауырға:*
*Яңғыҙ әбекәйҙәр магазинға*
*Сәй алырға ҡурҡа барырға.*

*Аттан бейек таш ҡоймалар буйлап*
*Бабайҙарға ҡыйын атлауы...*
*Шулар өсөнме ни окоптарҙа*
*Башты иҙҙе туптар шартлауы?!*

*Уйлап баҡһаң, бер ҙә ҡурҡаһы юҡ*
*Ажғырыптар эттәр өргәндән.*
*Ғәмәлдә бит улар шәфҡәтлерәк,*
*Аҡыллыраҡ аҙғын ирҙәрҙән.*

*Иҫәр ҡатындар ҙа, бер туҙынһа,*
*Ҡоторған эт кеүек яуыздар.*
*Йәбешәләр кеше өлөшөнә,*
*Тартып алған кеүек ауыҙҙан.*

*Ихатанан һыуға сыҡҡанда ла*
*Тура килә таяҡ алырға.*
*Ауыртҡаны тәндең йығалмаһа,*
*Һығылаһың уйҙар ауырға.*

*Ғүмер ишек бикләмәгән ауыл*
*Йорт аралаш хәҙер эт тота.*
*Этте тыйып була.*
*Иман юйған*
*Эт бәндәләр нығыраҡ ҡурҡыта.*

***

*Ауырый ауыл,*
*Бахыр алкаш ир кеүек,*
*Махмыр ғазаптарын кисереп.*
*Биш намаҙға күптән ултыраһы*
*Әбейҙәр ҙә, ана, иҫерек.*

*Ауырый ауыл,*
*Билсән баҫҡан ер кеүек,*
*Ашлыҡ тыуҙырырға тилмереп.*
*Ер эшкәртеп орлоҡ күмдерәһе*
*Егеттәр ҙә һалмыш, тик йөрөп.*

*Ауырый ауыл,*
*Ят һүҙ баҫҡан тел кеүек,*
*Йәп-йәш ҡыҙҙар үтә һүгенеп.*
*Башын сөйөп һыра һемергәндә*
*Кендектәре тора күренеп.*

*Ауырый ауыл,*
*Ел туҙғытҡан күл кеүек,*
*Буш нигеҙҙәр тынын күмдереп.*
*Ҡарт ғүмерҙең ҡарттар йорттарында*
*Көнө һүнеренә күндереп.*

*Ауырый ауыл,*
*Айный алмай ил кеүек,*
*Яныр эшләр саҡта иҫерек.*
*Гел емерек ферма аҙбарҙары,*
*Әйләнерме саңға бер сереп?*

***

*Был эҫелек тән көйҙөрә,*
*Нисек түҙергә?*
*Тишеп керә ут лепкәгә,*
*Төшә күҙҙәргә.*

*Йәнде өтә был ҡайнарлыҡ,*
*Бәғергә күсә.*
*Болоттарҙы ҡорғаҡһытып,*
*Сүл еле эҫә.*

*Игендәрҙе ҡоролоҡтоң*
*Ялҡыны үбә.*
*Ҡоҙоҡтарҙа тамсы һыу юҡ,*
*Инештәр кибә.*

*Һорауҙар башты бырaулай,*
*Уйҙарҙы киҫеп:*
*Килер ҡышты ҡаршыларбыҙ,*
*Кисербеҙ нисек?*

*Сыҙарбыҙмы ҙур һынауға,*
*Һынатмабыҙмы?*
*Эҫенән дә яман көстө*
*Уятмабыҙмы?*

*Керә тишеп ут лепкәгә,*
*Төшә күҙҙәргә.*
*Йәнде өтә был ҡайнарлыҡ,*
*Нисек түҙергә?!*

***

*Алдарымда — офоҡтарҙың алы,*
*Артҡы яҡта — үрле үткәнем.*
*Үрләгәндә ғүмер түбәһенә*
*Тойҙом шатлыҡ, ҡайғы үпкәнен.*

*Хыялдарым ҡайтты, ғәмәл булып,*
*Ғаләмдәрҙең ете ҡатынан.*
*Күктән сатҡы йыйып йөрәгемә,*
*Ерҙә йондоҙ булып атылам.*

*Иртә миңә юлым туҡтатырға,*
*Арыманым әле, күп хәлем.*
*Алдарымда — офоҡтарҙың алы,*
*Артҡы яҡта — үрле үткәнем.*

***

*Мин ғүмерҙе хәҙер*
*Тик икегә бүләм:*
*Һиңә тиклем, һинең менән.*
*Иң-иң тәрән эҙҙәр*
*Күңелемдә, беләм,*
*Һинең йырың, һинең һөйләм.*

*Наҙлы ҡарашыңдан*
*Даръяһында йөҙҙөм*
*Һөйөү тигән серле моңдоң.*
*Тик йән аҫырау ғына*
*Моңһоу үткән көҙөм*
*Һәм ҡышым да һинән һуңғы...*

***

*Бөгөн йәнә таңдан зәһәр,*
*Һыҙлай ҡулым, аяҡтарым.*
*Быуындарға төшкән һыуыҡ*
*Көсләп таға таяҡтарын.*

*Ҡайнар һыуҙа бешерәм дә*
*Киҫкән керән япраҡтарын,*
*Ванна керәм... Файҙа күрәм,*
*Тыныс тибә йөрәк тағы...*

*Офоҡ тағы яҡты һымаҡ,*
*Һыҙланыуҙар баҫылғандай.*
*Ҡояш күктә балҡый һымаҡ,*
*Һаулыҡ сере асылғандай:*

*Йәнең тәнде ҡамсыламай,*
*Үҙ-үҙеңде һанлай белһәң.*
*Әжәлде лә алдап була,*
*Тәбиғәтте аңлай белһәң.*

*Һәр ағыуҙың — үҙ дарыуы,*
*Һәр сырхауҙың — үҙ дауаһы.*
*Ә дарыуҙың үҙ ағыуы,*
*Үләне, ләме, һауаһы...*

*Бөгөн тағы зәһәр һыуыҡ,*
*Һыҙлай ҡулым, аяҡтарым.*
*Керән генә ярҙам итмәҫ,*
*Ҡушам ҡайын япраҡтарын.*

# *Сәсмә әҫәрҙәр*



**Спартак**
**ИЛЬЯСОВ**

## САҒЫМДАҒЫ ОЛОУ

**БӘЙӘН**

1

Февраль айының һалҡын айлы аяҙ төнө ине. Көндөҙ әҙ-мәҙ йылытыуҙан өҫтө ҡуржаҡланған ҡар күгелйем аҡ саткылы уҡтар сәсеп йымылдай. Ҡапҡанға эләгеп, алғы һул аяғының урта бармағын өҙҙөрөп, инде төҙәлһә лә аҡһап ҡалған оҙон һыртлы ҙур инә бүре тау үңеренә өйөлгән ҡар һырынтыһының өҫтөндә ултыра. Уға быйыл апрель айының аҙағында өс йәш тула. Ниҙәр генә күрергә, ниҙәр генә кисерергә тура килмәне өс йыл ғүмере осоронда. Ата-инәһенең һунарсылар тарафынан атып үлтерелеүен дә, йәше етеп, үҙенә иш табып, үҙе донъяға килгән өңдән ҡаялыҡ аҫтындағы йыраҡ түгел тәүге көсөктәрен донъяға килтереп, ишен дә, көсөктәрен дә юғалтыу хәсрәтен татырға тура килде уға. Бына ул тағы ла яңғыҙ. Төп оя тирәһенән утыҙ-ҡырҡ саҡрым йыраҡлыҡтарҙа үҙенә тағы ла иш, аҙыҡ эҙләп йөрөй торғас, ҡышҡы буранлы таңда йыраҡтағы ферманан алыҫ түгел, мал ҡәберлеге соҡоро янында ҡапҡанға һуғылып, алғы аяғының урта бармағын юғалтып, тупыс булып ҡалды.

Алда, түбәндә, таллыҡ менән ҡапланған уйһыулыҡтан бәләкәй йылға аға. Уның арьяғында – киң сахралай ялан. Унда түпһәл-түпһәл түбәлектәр, ҙур булмаған ҡайынлыҡтар ҡарайып күренә. Унда ике-өс саҡрымдай ерҙә, йым-йым итеп

---

*Спартак Ильясов (1941) Учалы районының Ҡорама ауылында тыуған. Урта мәктәптән һуң «Поляковка» совхозында, комсомолдың район комитетында эшләй, Совет Армияһында хеҙмәт итә. 1969 йылда К. А. Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһын тамамлағас, партком секретары, колхоз рәйесе, «Поляковка» — «Ирәндек» совхоздарында директор вазифаһын үтәй, бер нисә йыл Силәбе педагогия университеты филиалында дәрестәр бирә.*

*С. Ильясов сәсән, йыраусы ла... «Зарыҡай», «Азамат кантон», «Ирәмәлкәй», «Бутас полковник», «Көйөлдө», «Малбай», «Зиндан», «Кәкүккәй», «Кинйәкәй», «Туғанай» һ.б. халыҡ йырҙарын тергеҙеүсе — республика телевидениеһы, «Юлдаш», «Ашҡаҙар» радиоканалдары аша уларҙы үҙе башҡара. «Барын-Табын хәтере», «Яраһаҙ яралары» исемле китаптар авторы. Йәштән үк хикәйәләр, повестар, бәйәндәр яҙа.*

уттарын ялтыратып, бәләкәй генә ауыл төҫмөрләнә. Ундағы сәүек эттәрҙең ләүкелдәп өрөүҙәре ап-асыҡ ишетелә.

Үткән яҙ, йәй, көҙ, ҡыштың тәүге яртыһы фажиғәле, бик фажиғәле булды тупыс бармаҡ өсөн. Әллә тормоштоң һолон белеп етмәгәнлектән, әллә йәшлеге арҡаһында, ҙур, бик ҙур хаталы аҙымдар яһаны.

Әле ул ултырған ҙур ҡыралыҡтың артында оҙонлоғо егерме – егерме биш саҡрымға һуҙылған, урман менән ҡапланған, текә-текә тарлауыҡлы, ҙур ҡаялы бейек тау армыты ята. Тупыстың тыуған ояһы ла, йәшәү ере лә шул. Көнсығыштан Урал һыртының икенсе теҙмәһе һуҙыла. Оло Ҡомас тиҙәр уны. Ҡомастың көнсығыш битенән дә, көнбайышынан да йә таштар, йә ярты үҙеренә үк килеп менгән һаҙыран таллыҡтар араһынан һығылып сығып, шишмәлек һыуҙары ҡышын да туңмайынса субырлап түбәнгә аға. Ҡапҡанға эләгеү фажиғәһе онотолмаһа ла, ниндәйҙер эске көс, ынтылыш, татлы көтөү ләззәте күңелен ҡытыҡлай Тупыстың. Ул ләззәттең ҡайҙан, ҡасан килеүен белмәһә лә, тиҙ арала көткән теләге бойомға ашыуын һиҙемләй Тупыс. Яҙ етә, яҙ! Хәҙер ҡар өҫтө ҡатты. Урман эсенән башҡа ерҙә ҡар ҡатламы уны күтәрә, тупыс аяғының таяҡ кеүек һуп итеп төшөп киткән соҡорҙары ғына күренеп ҡала. Уныһы ҡурҡыныс түгел. Тиҙҙән шаулап-гөрләп ҡарҙар ағып бөтәсәк. Аҙыҡ эҙләп ҙур аралыҡтарҙы үтеү уға еңелләште. Бына ул үҙ еренә, ата-инәһенең Тупыстың ағай-апайҙарын тыуҙырып, аҫрап үҫтергән һәм уның үҙенә лә төп оя итеп ҡалдырылған ергә оҙон сәфәренән һуң кире килде. Дөрөҫөрәге, уны бында кемдер көткән кеүек һиҙемләүе, эске тойғоһоноң саҡырыуы алып ҡайтты. Урман эсендә ҡар йомшаҡ ине. Ҡайҙа үҙәк ситенән һалынған ҡуян урағы менән, ҡайҙа ҡағылсан ерҙәрҙе һайлай-һайлай, Ҡомас тауының ҡаялыҡтары араһындағы ояһы янына килде. Тирә-йүндә еҫкәп, эҙләнеп килһә лә, иғтибарға лайыҡ һис бер йән эйәһенең эҙе лә, еҫе лә булманы.

Оя ҡаялығының өҫкө яғындағы текәлектә ҡайһы ваҡыт ҡыр кәзәләре ятыштыра торған ине. Ә хәҙер улар юҡ, ҡайҙалыр ҡар йоҡараҡ ерҙәргә тәүләп асыла башлай торған түпһәлдәргә күскән. Уның алдынан, ҡырсынлыҡтар араһынан аҡ ҡуян ҡапыл йомғаҡтай һис тауыш-тынһыҙ, борола-борола таштар араһынан үргә, тауға табан ҡасты. Тупыс уны баҫтырманы. Ала алмаҫтай йәнлекте ҡыумай торған ғәҙәт тә уға боронғо нәҫел-нәсбәтенән мираҫ ине. Тубылғы араһындағы ҡуян ятҡан ерҙе табып еҫкәне, һау аяғы менән ҡаҙып та ҡараны. Ояны барлап, уның тирә-йүнен тикшергәндән һуң, Тупыс, тағы ла ил гиҙеп, ялан яҡҡа юл тотто. Бына шулай ҡыш аҙағында, иртә яҙ башында яңғыҙ бүреләр төп ерен ҡалдырып, оҙон сәфәргә сығыусан. Был ғәмәл Тупыс өлөшөнә лә сыҡты. Ялан яҡта ҡурҡыныс күберәк һағалаһа ла, йөрөүе еңелерәк. Ҡаты ҡарҙа ялан еренең үр ҡуянын, төлкөнө тотоу еңел түгел, сөнки улар бөтөнләйгә батмайҙар, хатта тырнаҡтарының  эҙе лә беленер-беленмәҫ кенә ҡала. Ә бына ҡыр кәзәләрен тотоу ауыр түгел. Сөнки таяҡ аяҡлы ҡыр кәзәләре ҡарҙа ла бата, өҫтәүенә, сапҡан саҡта аяҡтары ҡайырыла, ҡырҡыла. Ҡыр кәзәләрен табып алдың икән, тимәк, улар һинеке.

Һырынты ҡар өҫтөндә ултырған Тупыс өс-дүрт көн элек булып үткән ваҡиғаны һөйөнөп хәтерләне. Оя тауын ҡалдырып ялан яҡҡа сыҡҡас, ул асыҡ урындарҙан йөрөргә тырышманы. Ҡайҙа ҡырсынлыҡ, ҡайҙа сауҡалыҡ, ҙур булмаған түбәлектәрҙе тикшереп, ғәҙәте буйынса, ян-яҡ күренеп торған, тубылғы менән ҡапланған текә түбәлек өҫтөнә елгә ҡаршы яйлап ҡына килеп менде. Шул ваҡыт ҡаршы ел уға беленер-беленмәҫ сөсө генә таныш еҫте килтерҙе. Башын юғары

күтәреп, ләззәтләнеп, һәр бер ел тулҡыны менән килгән был таныш еҫте бик тәмләп еҫкәне. Ә осҡор күҙҙәре, һаҡ ҡолаҡтары алға йүнәлгән. Елдең ярайһы уҡ йүнәлешен үҙгәртеп өрөп ебәреүенә ҡарағанда, кәзәләр алыҫ түгел, алда ике ынтылмалы йыраҡлыҡта ятырға тейеш. Килгән еҫтең ҡуйылығы Тупысҡа был турала асыҡ мәғлүмәт бирә.

Эх, янында ише булһасы Тупыстың! Береһе ҡабырғанан урап сығып, ел башынан кире ҡыуыр ине кәзәләрҙе. Ҡасып ел аҙағына ташланырға мәжбүр булған кәзәләр Тупыстың тештәренә үҙҙәре килеп керер ине лә бит... Ише юҡ, иптәше юҡ шул...

Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, түбәлектең аръяғында, ел башында, ҡапыл трактор моторын тоҡандырып ебәрҙеләр, шул уҡ минутта кеше тауыштары ишетелде. Ындай күршелектән ҡасыр өсөн, тубылғы араһында ятҡан кәзәләр ҡапыл һикерешеп тороп, ҙур тиҙлек менән Тупыс торған ергә йомолдо. Тупыс, торған ерендә сүгә биреп, кәзәләрҙең килеп етеүен көттө. Бына улар алда ғына. Тубылғылар аша текә-текә оҙон һикереп, уға йәнәшәләнә. Шул саҡта Тупыс, барлыҡ ҡеүәтен туплап, аяҡ бармаҡтарының ауыртыуына ла иғтибар итмәй, оҙон-оҙон һикереп, иң яҡында сабып барған кәзәнең сандырынан эләктереп алды ла, шунда уҡ ергә йығып, тамағынан быуып һелкте лә һелкте. Ике-өс минут та үтмәне, кәзә, башлаған баҡырыуын да бөтөрмәй, йән бирҙе. Ҡар өҫтө ҡыҙыл ҡанға буялды. Шул ваҡытта бесән таҡҡан трактор түбә итәге менән ауыл яҡҡа юл тотто. Тик ундағы кешеләр ҡасҡан ике кәзәне лә, Тупысты ла, уның ҡорбанын да шәйләмәнеләр. Бүре ҡорбанын шунда уҡ йыртҡыслап ашай башланы. Эске һиҙемләүе әҙ генә сабыр булырға ҡушты. Ул тракторҙың алыҫлашыуын, күҙ күреме ергә китеүен көттө. Ҡарға ятып әйләнде, ауыҙ-томшоғон ҡарға ышҡып алғас, яйлап ҡына ашарға кереште. Тәмле ине йылы, йомшаҡ ит!

Табышынан йыраҡ та китмәй, уны ҡарауыллап, өс көн ашаны Тупыс. Хәйер, өсөнсө көнгә айырылған тире киҫәктәре, туңған тояҡтар, баш ҡына ҡалғайны. Теләһә ниндәй емтекте лә әллә ҡайҙан һиҙгән ҡоҙғондар, һуңлабыраҡ булһа ла, ҡайҙа тире киҫәге, ҡайҙа сәсрәгән ит валсыҡтарын сүпләп ғарҡылдаштылар. Ит ашалып бөтөп, һуңғы валсыҡтар ҙа ҡорһағына инеп ятып бөткәс, тағы ла бер көн ятты Тупыс юҡ итен ҡарауыллап. Тик бишенсе көндә генә күңеле оя-тауға тартып, юлға сыҡты. Юлда уның барған йүнәлешенә арҡыры, еҫе беленер-беленмәҫ эҙ осраны. Бик диҡҡәтләп еҫкәне был юлды Тупыс. Тик төшөнә алманы. Әммә һиҙемләне: еҫ, һис шикһеҙ, уның, Тупыстың ишенеке! Тик ул ҡайҙа йүнәлгән? Күрәһең, кәзә ҡаны пырлаған ерҙе тапҡан ҡоҙғондарҙың осоу йүнәлешен ҡарап барған. Күберәк һауаны күҙәткән, ергә ҡарамаған. Сөнки Тупыстың биш көн элек үткән юлын арҡыры сыҡҡанда ла туҡтамаған, еҫкәмәгән. Ә Тупыс туҡтаны, юлдар киҫешкән ерҙә урауңғыланы. Артҡы аяҡтарына сүкәйеп ултырып һарыны. Тик был иштең енесен генә айыра алманы – иҫке ине еҫ. Ә үҙенең еҫен, һарыһының бөтмәҫ хушын юлдары киҫешкән урынға ҡалдырҙы.

Таң атыуға байтаҡ ваҡыт бар ине. Тупыс, ләззәтле хәтирәләре эсендә йөҙөп, һаман да шул ҡар һырынтыһының өҫтөндә ултыра бирҙе. Тулған ай, һалҡынса буранһыҙ төн Тупыстың тартым көсөн көсәйтте. Болоттар араһына бер кереп, бер сығып йөҙгән ай тулҡыны һулҡылдап йөрәгенә ҡағылғандай тойолдо. Анау аҡ болоттар бер-береһен ҡыуалап ҡушылғанын да, өҙөлөп киткәндәй йыртылып айырылғанын да шәйләмәне ул. Шул болоттарға ҡарап, нәҙек тауыш менән тулҡынлы-тулҡынлы һарһылтып олой башланы. Иҫ китмәле моңһоулыҡ, һағыш,

көтөү, саҡырыу ине уның ауазы. Бер өйкөм ҡара ҡар болоттары айҙы ҡаплағас, Тупыс туҡтаны. Ултырған фиғелен үҙгәртмәйенсә, ҡолаҡтарын алға, ялан еренә, ҡаршы бороп, бәлки, ел килтерер ауаз тыңланы... Уның был моңһоу, һағышлы тауышы сикһеҙ дала ҡосағына, зәңгәр уйһыулыҡтарға таралып юғала. Әммә ул моң, һағыш ҡына түгел, саҡырыу, көтөү ҙә... Ҡарлы юлда барған ылаусылар, ауылда, ҡапҡа төбөндә бер-береһен оҙатышҡан йәштәр өсөн Тупыстың олоуы – аслыҡтың, өмөтһөҙлөктөң ауазы. Йылы йорттағылар ҙа быны аңламаны. «Ас» бүренең олоуын тыңлап, тәндәре өшөнө. Тәбиғәттең буранлы булыуы, ямғыр-ҡойондары Тупысҡа күп ҡайғы-хәсрәт тә, иш табып ҡауышыу ләззәтен кисереү ҙә, тулған еленәнә тәпәйҙәрен терәп, имсәк һурған көсөктәренең йылыһын һәм ҡәнәғәтен дә килтерҙе.

Һәр миҙгелгә, тормош ағышының талаптарына ярашлы, Тупыстың теләгенә, кәйефенә ҡарап, тауыш биреү тулҡындары ла үҙгәрҙе. Бына ул һаман да шул уҡ һырынты өҫтөндә ултырып, оҙон-оҙонға һуҙып, оҙаҡ олоно. Олой-олой ҙа, ҡолаҡтарын алға тырпайтып, бик иғтибарлап тыңлай. Түбәндә, таллыҡлы йылға аръяғында, төлкө ләүкелдәй, ләкин ул бөгөн төлкө өрөүен тыңламай. Ғөмүмән, йәнлектәрҙең ҡасан, ни өсөн тауыш сығарыуҙарын Тупыс аңлап бөткән. Төлкөләргә лә яҙ килгәнен төшөнә ул. Улар ҙа туйға өймәкләшкәндә бер тауыш сығарһа, аталары, бер-береһенән өҫтөнлөк алыр өсөн, икенсе төрлө ауазлай. Яҙ көсөктәре оянан сығып уйнай башлаһа – бөтән төрлө, ҡурҡыныс килгәндә өсөнсө төрлө тауыш бирә. Ҡыр кәзәһе лә шулай. Август аҙаҡтарында, сентябрь урталарына тиклем табышыу, йәрәшеү алып барғанда улар «һоу-һоу» ауазы эсендә үҙҙәре генә аңлай торған тулҡындар тибрәтә.

Төлкөнөң өрөүенә иғтибар итмәй олоно Тупыс. Уның бөгөнгө ауазы кәйефенең насар билдәһе түгел, киреһенсә, ул күтәренке күңел менән ине.

Бер сәғәткә яҡын олоуы уға һөҙөмтә килтерҙе, буғай. Бына ул саҡырыуының һуңғы тибрәлеүе бөтөр-бөтмәҫтән ҡапыл туҡтап ҡалды. Урынынан тороп ҡына тынысланғас, йыраҡтағы ҡыҫҡа, ҡалын мөңөрәү ҡатыш тауышты ишетеп ҡалды. Йыраҡтағы тауыш туҡтау менән, шунда уҡ Тупыс, тағы ла үҙенең барлығын раҫлап, сәләм ебәрҙе.

Был юлы яуап-сәләм ап-асыҡ ишетелде Тупысҡа. Әҙ генә ваҡытҡа төнгө тынлыҡ урынлашты. Ауылдағы сәүек эттәр өрөүҙән ҡапыл туҡтаны. Тупысҡа ҡалын тауышлы сәләм тағы килде. Уны тыңлап ҡәнәғәтләнеүенән әҙ генә ҡойроғон да болғап ҡуйҙы. Тыңланы. Башҡаса ауаз булмағас, бик асырғаланып, ләззәтләнеп, бер нисә һикәлтәле оҙон, нәҙек тауышын яланға, үҙе ултырған текәле тауға, хатта артта ятҡан ҙур армыт битенә, уның бөтә ектәренә таратты. Әммә йыраҡтан килгән паровоз тауышы «Ҡалын боғаҡ»тың да, Тупыстың да тауышын үҙ эсенә алып йотто. Паровоз түбәлектәр араһында тоноҡ уттары менән йым-йым итеп үтеп китте, бөтөнләйгә төн ҡуйынына кереп юғалып, тауышы ишетелмәҫ булғас, тағы ла бер аҙ ҡараңғылыҡ тып-тын торҙо. Икеһе лә бер-береһенең тауышын көтә ине. Ҡалын боғаҡ түҙмәне. Бөтөнләйгә ап-асыҡ ишетелерлек ерҙә ине ул. Тупыс, уның тауышынан ҡәнәғәтлек кисереп, бер туҡтауһыҙ ҡойроғон болғаны. Бер ултырҙы, бер торҙо. Хатта ултырғанда болғанған ҡойроғо һелте ҡарҙы һепереп, ике яҡҡа ла күҙгә күренер-күренмәҫ һепертмә өйкөм яһаны. Торған көйө ул бик асыҡ тауыш менән тағы ла үҙенең торған ерен билдәләне.

«Сәләм хат» оҙаҡ көттөрмәне. Ҡуйы бас яҡында, күп булһа бер-ике саҡрым ерҙә ине. Тора биргәс, был басҡа яуап итеп, олоу аралаш өрөү кеүегерәк ҡыҫҡа ғына тауыш ебәрҙе Тупыс. Тупыстың инә булыуын «бас» төшөнгәйне инде. Ә

Тупыс «бас»тың ата булыуына шикләнмәне. Көттө ул. Башҡаса тауыш бирмәне. Бер ултырҙы, бер торҙо. Бына түбәндә, таллыҡтарҙан өҫкә һуҙылған үҙәк кеүек ергә теҙелешкән ҡайындар янында, ҡара нөктә күренде. Ул туп-тура килә. Тупыс уны күрҙе, бер ултырҙы, бер торҙо. Ә ҡара нөктә, ҙурайғандан-ҙурая килеп, Тупыстың янына бөтөнләйгә яҡынлашты. Киң түшле, арҡаһын киң, ҡалын ҡара-күк йөн ҡаплаған. Ике яҡ яңағынан тырпайып торған оҙон ҡылсыҡ һаҡаллы, киң маңлайлы, ҙур башлы. Тупыстан ике-өс йәшкә олораҡтыр. Ғәйрәтле. Ата бүре уның янына уҡ килеп етте. Томшоҡҡа томшоҡ терәп еҫкәштеләр. Унан һуң Ҡалын боғаҡ тыпаслап Тупыстың ян-яғына сыҡты, тик Тупыс, уға тештәрен ыржайтып, яҡын килергә әлегә рөхсәт итмәне. Иғтибарға лайыҡһыҙ, тигәндәй, бошмай ғына тауға, ояны, уның тирә-яғын күрһәтергә, таныштырырға теләгәндәй, ҡаялыҡтарға табан атланы. Ғаилә ҡанунының тәүге үрнәктәре шул булды. Бергәләп йөрөгәндә һәр саҡ Тупыс алдан барыр. Был – бер. Икенсенән, ризалыҡһыҙ ризалауға ынтылмаҫҡа. Яңағыңа, елкәңә үткер теш алыуың ихтимал. Ә өсөнсө ҡанун әле хәл ителмәгән. Кемдең илендә, ереңдә йәшәргә? Уныһы инде бик күп шарттарҙан ғибәрәт. Тәүгеһе ояның тыныс ерҙә булыуы, хатта кешеләрҙең осраҡлы рәүештә лә килеп сыға алыуы. Тирә-йүндән аҙыҡ табыу мөмкинлеге, эсер һыуҙың йыраҡ булмауы, сит ғаиләләрҙең иң кәмендә 15–20 саҡрым ерҙә булыуы, ояға барыр өсөн йәшерен юлдар булыуы ла төп шарт. Ҡалын боғаҡ Тупыстың ризалығын тикшереп, тағы ла ике-өс тапҡыр яҡынлашты. Ләкин ҡәтғи «р-р-р-рррр»ҙы алып, башҡаса баҙнат итмәне. Әлегә тәртипле булырға тырышып, арттан эйәрҙе. Ҙур армытта тәрән үҙәк төбөнән аҡҡан кескәй йылға буйлап таллыҡ менән аралаш муйыл, мышар ағастары, ҡуйы ҡурай еләктәре һабаҡтары үҫкән. Йыуан муйыл ағасына ҡаршы түпһәлдә бейек ҡаялыҡ аҫтында ине оя. Ситтән ҡарағанда ул күренмәй ҙә, ағастар ышыҡлай. Өҫтән шырлыҡ, аҫтан батмалы бәләкәй генә һаҙыран, ә һул ҡабырғанан сәнсеп ҡуйылған кеүек вағыраҡ текә таштар йә тәртипһеҙ рәүештә һибелгән эреле-ваҡлы йәймә яҫы таштар. Һыбайлы кеше бында кереүе бик-бик икеле. Ә махсус маҡсат ҡуймаһа, йәйәүлегә һис ҡыҙығырлыҡ урын түгел. Тау үҙәгенең ҡараңғы бер мөйөшө.

Әле ҡар ҡаплаған оя тирәһен, үҙенең иҫке юлдарын еҫкәп, Ҡалын боғаҡты эйәртеп, Тупыс тағы ла йөрөп сыҡты. Ҡайҙандыр ҡар аҫтынан ағарып ҡатып бөткән ҙур ашҡаҡ һөйәген тартып сығарып бер-ике кимерҙе лә, ташлап, урынынан торҙо. Тупыстың һәр хәрәкәтен ҡарап йөрөгән Боғаҡ, батырланып килеп, уны тағы ла еҫкәне, ян-яғына сығып тынысланы. Нәүбәттәге «р-р-ррр»ҙы алғас, алғы аяҡтарына башын һалып, түшенә ятты. Был ваҡытта күптәнән инде таң атып, яҡтырып, ҡояш нурҙары ағас баштарын мансылдырған ине. Ваҡ ҡына аҡ турғайҙар оҙон үләндәрҙең һабағына, йыуанıраҡ ботағына ҡунып, орлоҡ сүпләп туҡлана башланы. Был тирәлә инде күптәнән күренмәгән һаҡ һайыҫҡан да оя өҫтөнән осоп үтте. Ҡая янындағы ялпаҡ таш өҫтөндәге ҡарға, бүреләрҙе күргәс, ҡарҡылдап оса башланы. Ҙур ғына түңәрәк эшләгәндән һуң, ғауғалап, ситтәрәк үҫкән бейек ҡайын өҫтөнә килеп ҡунды ла тағы ла көслөрәк тауыш менән ҡарҡылдарға тотондо. Уға әллә ҡайҙан икенсеһе, өсөнсөһө ҡушылды. Был ғауғаға иң алда артыҡ иғтибар итмәй ятҡан тәжрибәле оло Ҡалын боғаҡ, һайыҫҡандарҙың үҙҙәренә кемдәрҙеңдер иғтибарын йәлеп итеүенән шикләнеберәк, урынынан торҙо. Күрәһең, был тауҙың ек-еге Боғаҡҡа электән дә таныш булған. Ул, һис бер нәмәгә, хатта Тупысҡа ла иғтибар итмәйенсә, тауға, текәлеккә, унда ятҡан өй дәүмәлендәге таштар араһына китте. Тупыс, башын күтәреп, Боғаҡтың артынан ул юғалып киткәнсе ҡарап ятты ла теләр-теләмәҫ кенә уның артынан

эйәрҙе. Һайыҫҡандар шыҡырыҡлашып унын артынан бер ни тиклем эйәреп барҙылар ҙа ҡапыл туҡтанылар. Өҫтән аҫҡа таштар араһынан Тупыстың килгәнен ҡарап торҙо Боғаҡ. Текәлектең икенсе яғында, аҫтағы ҡарағай ултырмаһында, ҡапыл һуйыр шаҡылдағаны ишетелде. Һаҡ ҡолаҡ Тупыс та быны ишетеп ҡапыл һағайҙы. Бер ни тиклем торғас, шаҡылдау тағы ла ишетелде. Фарман биреү менән йүгерешеп киткән һалдаттар кеүек, ҡапыл икеһе бер юлы аҫҡа, инде бейек булып үҫкән ҡарағай үҫентеләре яғына, ҡабалана-ҡабалана сабып төшөп киттеләр.

Ләкин ҡарағай ултыртмалары араһында һис бер йән эйәһе булманы, һиҙелер-һиҙелмәҫ йомшаҡ ел генә уйнай ине. Әммә бында ҡар юҡ кимәлендә. Аяҡ аҫты ҡалын йомшаҡ энәлек менән ҡапланған. Ҡарағайлыҡ эсен ентекләп тикшереп сығып, ботаҡҡа ҡунып, йәшел энәләр менән туҡланған һуйырҙың осоп китеүенә тамам ышанғас та бер аҙ ваҡыт темеҫкенеп йөрөнөләр. Ҡарағайлыҡ эсенә йә ҡуян урағы, йә ҡыр кәзәләренең үтеп киткән эҙҙәре кереп юғала. Бында тулы һиллек. Ахырҙа ситтәрәк үҫкән йыуан-йыуан тәбиғи ҡарағай төбөнә ике яҡлап бөгәрләнеп яттылар, һайыҫҡандар уларҙы бында күреп шау күтәрә алмай. Тыныс. Йылы, елдән дә ышыҡ, кеше-фәлән килеп сығыу мөмкинлеге юҡ кеүек.

Тыныслыҡта, бергәлектә күңелдәре бөтөнәйеп, йылы энәләр өҫтөндә тағы ла ике көн, ике төн үткәрҙеләр. Өсөнсө көнгә киткән төндөң таңында Тупыс инде ергә һеңешеп киткән йомшаҡ, йылы урынынан торҙо. Ситкәрәк китеп, ултырып һарыны.

Боғаҡ та үҙ урынынан тороп, артҡы аяҡтарын һуҙып кирелгәс, Тупыстың һарыһын оҙаҡ еҫкәгәндән һуң, унын өҫтөнә үҙ билгеһен һиптерҙе. Тупыс был ваҡытта ҡарағайлыҡтан сығып, ҡайын урманы эсенән ҡуян урағына төшкән ине.

Шул көндән башлап уларҙың бергәләп оя тирәһенән 25–30 саҡрымдан да күберәк ерҙе тикшереп, урап, инде был юлы иш түгел, ә аҙыҡ эҙләп, бергәләп һунар итеү осоро башланды.

Февраль таңы яҡтырып килә ине. Ҡапыл Тупыстың танауына ҡош тиҙәге һәм ҡаурый еҫе бәрелде. Ул шунда уҡ алға һонолоборaҡ туҡтаны.

Ҡуян урағының ситендә, дүрт-биш һикерем ерҙә ҡар аҫтында ҡарға нимәлер тейеп ышҡылғанын ап-асыҡ ишетте. Унын шикләнеүһеҙ аңлауы буйынса, был ҡар аҫтында төн үткәргән ҡор ине. Шул уҡ мәлдә ул ҡор ултырған ҡар өңөнә өс-дүрт тапҡыр оҙон-оҙон итеп һикерҙе. Әммә ваҡыт мәленең миҡдары уға етмәне. Унын ауыҙы алдынан ғына ҡор осоп сыҡты ла ситкә тайпылды. Тештәрен шаҡ-шоҡ итеп һәрмәһә лә, эләктерә алманы Тупыс ҡорҙо. Шул уҡ мәлдә унын уң яғынан да, һул яғынан да ҡорҙар ҡурҡып, туҙышып, осоп сыға башланылар. Етешер өсөн ҡабаланып сабып килгән Боғаҡҡа Тупыстың тәүге һикергән еренән һулдараҡ осоп сыҡҡан ҙур ҡара ҡор үҙенән-үҙе тигәндәй ауыҙына килеп керҙе. Көтөлмәгән был табышты ауыҙын тултырып тешләп, ҡаурый йөндәрен туҙҙырып, ергә тейҙермәй бер нисә тапҡыр һелкте лә, бөтә кәүҙәһен иҙеп тешләп, йоторға ашыҡты. Шул мәлдә ҡорҙо тота алмай ҡалған Тупыс ҡабаланып, туп-тура сабып килде лә әле Боғаҡ йотоп өлгөрмәгән ҡыр әтәсенең яртыһын унын ауыҙынан йолҡоп алды. Күҙ асып күҙ йомған арала йөн-ҡаурыйҙары менән бергә иҙелгән ит икеһенең дә эсенә һары майҙай булып барып төштө. Әтәс йолҡолоп йотолғас та һәр ҡауырһынды, һәр йөндө оҙаҡ еҫкәнеләр. Рәхәт, бик рәхәт булып ҡалды. Көс керҙе. Ишле булғас, шулай инде, ғүмер кисереүе лә еңелләште Тупысҡа. Бергә йәшәүҙең тәүге ризығы, тәүге еңеллеге ине был табыш, был

уңыш. Ҡар өҫтөнә тамған һәр ҡан бөрсөгөн сүпләп ялап бөткәс, Тупыс алға юлын дауам итте. Ашыҡмай, алда барған Тупыстың тирә-яғын иғтибарлы күҙәтеп, һәлмәкләп Боғаҡ артынан эйәрҙе. Аҙна-ун көн буйы тирә-йүнде ҡыҙырҙы улар икәүләп. Был ваҡыт эсендә Тупыс үҙ биләмәһенең һәр еген күрһәтеп бөттө шикелле.

Бөгөн улар әлегә тиклем тик Тупыс ҡына һунарсылыҡ иткән майҙандың сигенә еттеләр. Бында бейек тауҙар ҙа, ҡалын урман да юҡ. Шуға ла ҡар ҙа һай, өҫтәүенә ҡаты, батып уҡ бармай.

Бишенсе көн инде улар бер нәмә лә табып ашағандары юҡ.

...Ҙур ғына йылғаның ике яғы ла ярайһы уҡ ҡалын шырлыҡ менән ҡапланған. Уның боролмаһы ҙур, дуғалай бөгәжә эшләп, эсенә ваҡ-ваҡ түбәләрҙе урап алған. Элек, әле 10 – 15 көн алда үткәнендә, тибен типкән йылҡы көтөүе бынан биш-алты саҡрым ерҙәге тау битенә күскән. Ә бөгөн, ә бөгөн улар, нәҡ тә ҡутыр башта йөрөгән беттәр кеүек, эреле-ваҡлы түбәлектәр араһына һибелгән, һирәкһаяҡ шалтырап ҡуйған дөңгөр тауышы килтерҙе уларҙы. Шырлыҡ аша сыҡҡас, дөйөм хәлде белергә кәрәклеген һиҙемләп, икеһе лә ҡуйы тубылғы менән ҡапланған бәләкәй генә түбәгә менделәр. Йылҡылар, һис өркөшмәй, тыныс ҡына тибен тибеүҙәрен дауам итте.

Аслыҡ – һис бер йән эйәһенә туған түгел. Һөтимәрҙәр араһында иң зиһенлеһе, шуға ла иң ғәйрәтлеһе кеше өсөн дә, ер тырнап, унан йолҡоп ашаған хайуан өсөн дә «Нәмә генә табып ҡабырға?» ҡағиҙәһенә буйһоноп йәшәгән бүре өсөн дә... һәр йән йәшәргә хоҡуҡлы, йәшәр өсөн ашарға хоҡуҡлы. Ә ашау аҡҡан ғүмер өсөн нисек табылыуы мөһим түгел, һәр йән эйәһе тәбиғәт тарафынан үҙенә тәғәйен ризыҡын үҙ алымы, үҙ ысулы менән таба. Ашамай икән, уға йәшәү юҡ. Бүренән ғәйре йыртҡыс, әхлаҡһыҙ, барлыҡ ғәмәле тик үҙенән аҡылһыҙҙы отоу, алдау, йәберләү, урлау һәм уларҙан башҡа әллә нисә төр тәбиғи енәйәткә сумған кеше өсөн бүренең ашарға теләүе йыртҡыслыҡ тип атала. Әле Тупыстың да, көслө Боғаҡтың да аслыҡтан эстәре йәбешеп китһә лә, иң алда улар көтөүҙе урап ҡарап сығырға булдылар. Был алым да – бүреләр өсөн яҙылмаған ҡағиҙә. Был ҡағиҙәне аңлы рәүештә үтәмәй ул, әммә булмышына шулай һалынған. Күрәһең, улар иң алда малдарҙы һаҡлаусы ҡоралды кеше юҡмы, әгәр ул булмаһа, ауырыу, бәләкәйерәк, бигерәк тә ситтә айырым йөрөгән хайуанды ҡарар өсөн шырлыҡ буйлап бер-береһенән аралыҡ тотоп, тыныс ҡына атлап киттеләр. Ситтә, шырлыҡ буйында уҡ тибенеп йөрөгән ике байтал, бер оло бейә, бүреләрҙе күреп, баштарын күтәреп, уларға бик етди ҡарай башланы. Быны күреп һағайып, Тупыс менән Боғаҡ тып туҡтаны. Бер ни тиклем ваҡыт шулай бер-береһенә ҡарашып торҙолар. Унан оло бейә хорҡолдап, танау тишектәренҡумшырығын киңәйтеп, башын, ҡойроғон күтәреп, алан-йолан ҡарап, көтөү эсенә юртты. Шул уҡ фиғелде ҡабатлап, ике байтал да уға эйәрҙе. Ҡурҡыныс килгән яҡ күҙҙән юғалып, көтөү уртаһына кергәс, ҡола бейә тынысланды. Башын бороп арлы-бирле ҡарап торҙо ла, башҡалар тыныс ҡына ашауҙарын дауам иткәс, ул да тибенергә тотондо. Ә хәҙер инде әҙме-күпме һол йыйя башлаған Тупыс һәм күпте кисергән Боғаҡ, малдарҙың тынысланғанын көтөп, шул урындарында тора бирҙеләр. Йылҡы көтөүҙәренә килеп, ҡайһы саҡта ҡышҡылыҡҡа айырылмай ҡалған ябаға-тайҙарҙы элекке ғаиләһе менән күмәкләп йығып ашап өйрәнгән Боғаҡ һис ашыҡманы. Хатта Тупыс байтаҡ ара ергә, ҡола бейә менән байталдар торған ергә, барып етеп еҫкәнһә лә, урынынан

ҡуҙғалманы. Күрәһең, әле генә киткән хайуандарҙың тәмле тиҙәк еҫе танауын ҡытыҡлап, бөтә зиһенен алған был мәлдә башҡа тауыштар иғтибарына лайыҡ түгел ине. Ә Боғаҡ ишетә. Боғаҡтың ҡолағына алда шул уҡ йылға буйы шырлығы янында һайыҫҡандарҙың шыҡырлауы, ҡоҙғондоң ғарҡылдауы ишетелер-ишетелмәҫ кенә булып килеп һуғылды. Эйе, был ғарҡылдау, һис шикһеҙ, ҡоҙғондоҡо ине. Ә ҡоҙғон барҙа итһеҙ булмай.

Тиккә килмәй ул ҡоҙғон, тиккә йыйылмайҙар. Аҙыҡ буласағына тамам ышанған Боғаҡ башын күтәреп, төбәп ҡарап алға юртты. Икенсе түбәлеккә менеү менән үк күрҙе: алда, өс йөҙ ҡуһай самаһы ерҙә, ҡоштар йыйылған. Улар бер осалар, бер ситкә ҡуналар. Ҡуналар ҙа, ян-яҡтан яйлап ҡына атлап, яңғыҙ торған көрән бейәгә яҡынлайҙар. Ҡоштар, бигерәк тә ҡоҙғондар, уның янына килеп еткәс, көрән бейә ҡапыл ҡолаҡтарын артҡа һалып, йомо-янлап ҡоҙғондарға ташлана. Улар шунда уҡ бер көтөү һайыҫҡандар менән пыр туҙып, зыҡ ҡубып һауаға күтәреләләр ҙә ситкә ҡуналар. Унан һуң ваҡиғалар тағы ҡабатлана. Быларҙы күргәс, Боғаҡтың ҡаны ҡайнаны. Бүреләргә бик хас булған тойғо – ҡыҙғаныу, бигерәк тә ризыҡты ҡыҙғаныу – тиҙерәк барып етеп көрән бейәгә ташланырға йә ҡоҙғондар ябырылырға ниәтләгән аҙыҡты баҫып алыу теләге менән барлыҡ көсөн биреп һонолоп, оҙон-оҙон һикереп алға йомолдо.

Янына баһышҡан ҡоштарҙы ҡыуыу өсөн боролған көрән бейә ҡапыл туптура, йән-фарман үҙенә табан сабып килгән бүрене күреп ҡалды. Бүре менән тәү тапҡыр ғына осрашмай ул. Еҫенән дә, сабып килгән һикереү алымынан да таныны. Ҡурҡыуынан кешнәй-кешнәй үргә, ҡалҡыулыҡҡа, йылҡылар араһына сапты. Боғаға көрән бейәнең юлын киҫеп алдына сығырға һуң ине инде. Өҫтәүенә, ҡапыл бейә торған ергә барлыҡ ҡоштарҙың өйөрөлөп төшөүен күреп, келтә (кинәт, 70 – 75 градусҡа) боролоп, шул ергә йомолдо.

Ваҡиға нисек булғандыр, билгеһеҙ. Көрән бейә бынан бер йәки ике тәүлек алда ҡар өҫтөнә йә ҡолонлаған, йә ҡолон һалған. Ҡолоно етлеккән, бөтә ағзалары теүәл турыҡай. Ҡолон, имергә тора алмай, йә ҡарҙа батып хәлһеҙләнеп туңып үлгән, йә ниндәйҙер эске ағзаһы камил булмай, үле тыуған.

Әммә көрән бейә ғәзиз балаһын ҡоштарҙан соҡоттормай яҡлаған, һаҡлаған. Нисә тәүлек торғандыр, үҙе генә белә, әммә ҡолон шаҡыйып, таш булып ҡатҡайны. Боғаҡтың ҡоштар өйөрөлөшкән ергә сабыуын Тупыс йыраҡтан шәйләгәйне. Шуға ла Тупыс та һайыҫҡандар зыҡ ҡупҡан ергә ашыҡты. Ул килеп еткәндә, Боғаҡ ҡолонҡайҙың алғы ҡулын айырып алып бара ине. Яйлап, туйғансы ашанылар. Ҡалдыҡ аш тағы ла шул баш, муйын һәм тояҡтар булды.

Йылға шырлығы эсендәге ҡамышлыҡҡа кереп яттылар. Әммә уларға ҡоҙғон-һайыҫҡандарҙың тауышы йоҡларға ирек бирмәне. Шаулаштылар ҙа шаулаштылар, зыҡ ҡуптылар. Ята торғас, көн кисләне. Көндөҙ әҙ-мәҙ йылынған ҡар өҫтө һалҡын төшөү менән тағы ла ҡатты. Ҡараңғы төшөүгә улар үҙҙәренең юлы менән тағы ла ҡалдыҡ емтек янына ашыҡты. Алда, түбәлектәр араһында, көтөүсенең ҡысҡырып йылҡыларҙы ҡыуғаны, уның моңһоу ғына йырлағаны яуа башлаған ҡар пәрҙәһе аша бик тоноҡ ҡына ишетелә ине. Емтек янында хәҙер инде ҡоштар юҡ. Ҡараңғы төшә башлау менән үк төн үткәрер өсөн шырлыҡтың ҡуйылығына остолар. Туң һөйәкле башты, тояҡты улар әллә ни ашай алмағандар. Тупыс менән Боғаҡҡа тамаҡ ялғарлыҡ ризыҡ бар ине әле. Шулай һәр эңерҙә йә таң алдынан килеп, тағы ла өс-дүрт көн йә шырлыҡ ҡамышында, йә түбәлек башында ҡырсын араһында ятты улар. Ниһайәт, таңғы һепертмә елдәр ҡарҙағы

һәр ҡан бөрсөгөн йә ябып, йә туҙҙырып бөтөп, һис бер ни ҡалмағас, ғәҙәти аҙып йөрөүҙәрен дауам иттеләр.

Береһе ҡыуып, береһе боҫҡонда ятып, төлкө лә тотоп ашанылар, һалам төптәрендә сысҡан да тоттолар. Ун-ун биш көн үтеүгә, Тупыс үҙ яғына ҡайырыла башланы. Әммә һәр саҡ артта ҡалып, яйлап ҡына килгән Боғаҡ үҙ ерен, үҙе донъяға килгән ҙур һаҙлыҡтың уртаһындағы бәләкәй генә ҡоро утрауҙы һағынған. Шуға ул һәр саҡ Тупыс кеүек тауҙарға түгел, ә урманлы-далалы ергә, үҙ иленә тартты. Артын боролоп ҡарай-ҡарай килгән Тупыс, Боғаҡтың йүнәлешенә тура сығып, юлын дауам итергә мәжбүр булды.

Әсе февраль елдәре һирәгәйеп, көндәр бер аҙ емшей бирҙе. Әллә сит ерҙә үҙен бер ни тиклем һағайыңҡырап тотҡанға, әллә инде тәбиғәт ҡушҡан ғәмәл еткәнгә, Тупыс һуңғы көндәрҙә Боғаҡ янынан һис китмәҫ булды. Хатта ашау теләге лә икенсе төҫкә, ғәмһеҙлеккә инде. Боғаҡ Тупыстан килгән тәмле еҫте һиҙҙе. Шуға күрә лә ул тыуған еренә килеп етеүен дә, ашарға табыуҙы ла, хатта ҡурҡыу-шикләнеүҙе лә һүлпәнәйтте. Юлдарында осраған ҙур булмаған ҡалҡыулыҡҡа кереп ял итергә урын ҡарағас, Тупысҡа бөтөнләйгә яҡын килде. Бер туҡтауһыҙ еҫкәнде, яланды, уның бер алдына, бер артына сығып, ҡойроғон күтәрә биреп тынысланы. Ғәҙәти «р-р-р-ррр»ҙы алмағас, ул тәүәккәлләне. Йәрәштеләр. Яйлап, шикләнмәйенсә. Оҙаҡ ләззәт табып торҙо улар. Был сауҡалыҡта көн, төн үткәрҙеләр. Әллә нисә тапҡыр йәрәштеләр. Ниһайәт, өсөнсө көн кис алдынан бик, бик асығыу хисе тыуҙы. Үткән таңда ҡайҙалыр алыҫта эт өрөүе ишетелеп ҡалғайны. Ул тауыштың ҡайһы яҡтан килеүен икеһе лә төҫмөрләне. Шуға ла аллы-артлы бер йүнәлештә юрттылар. Оҙаҡламай улар машиналар йөрөп торған тап-таҡыр юлға төштө. Ҡараңғы тамам төшкәйне. Арттан да, алдан да яҡтылыҡтарын төшөрөп килгән машиналарҙан юл ситенә, өйөлгән ҡар өйөмө артына төшөп йәшеренеп ятып ҡалдылар. Хәрәкәт туҡтауһыҙ барған был юлдан ситкә сығып, күп йөрөлгән саңғы юлына төштөләр. Алға барған һайын йә эттәрҙең өрөүе, йә аҙбарға әле кермәй ҡалған малдарҙың баҡырған тауыштары асыҡ ишетелә барҙы. Саңғы юлы арттан, ауылдың аҙбар-ҡуралары артынан, үтә ине. Алдан барған Тупыс картуф баҡсаһы кәртәһе аша еңел генә һикереп төшөп, туптура төптәрәк ултырған ике-өс кәбән янына ашыҡты. Кәбән төбөндә бесәндә ятҡан эт, бүре еҫен һиҙеп, ҡобараһы осоп, ҡапҡа эсенә үҙе кереп-сығып йөрөгән тишектән, әсе сыйылдап, саҡ кереп өлгөрҙө. Йортта йәшәгән эттәрҙең дә үҙ-ара һөйләшеү, хәбәрләшеү ауазы була. Күрәһең, яҙғы миҙгел был кәнтәй эткә лә яҙ килтергәндер. Сөнки уның бесән өйөмөнән тағы ла өс эт пыр туҙып, шаулап, һәр ҡайһыһы үҙе генә белгән, үҙе килгән ҡойма, кәртә тишектәре менән төрлө яҡҡа ҡастылар. Тупыс береһененең дә артынан баҫтырманы. Эт ҡасҡан кәбән төбөнә менеп, йәтешләп күкрәгенә ятты. Меңәр йыл ата-бабаларынан ҡалған холоҡ-алымды белә ул. Кәрәк саҡта сабырлыҡ кәрәк. Сабырлыҡтың төбө – һары алтын. Ятты ул, көттө.

Ауылдағы эттәр бөтәһе лә берҙәм булып шау күтәрҙе. Ҡайһыһылыр олой, ҡайһыһылыр өрә, ҡайһыһылыр тыңлай, ҡайһыһылыр ҡурҡыуынан ҡапҡа эсендә өй күтәрмәһенә менгән, солан аҫтына кергән. Ризығын йә бик түҙемле андып ятып, йә урап ҡыуып, йә оҙаҡ ҡыуып алып өйрәнгән Боғаҡ, картуф баҡсаһы кәртәһе аша кермәй, уның тышҡы яғынан үҫкән бейек ҡоро үләндәр ышығына ышыҡланып, күкрәгенә ятты. Ә ауылда шау-шыу: урамдан бер туҡтауһыҙ машиналар үтә, кешеләр ҡысҡырып һөйләшә, ҡайҙалыр музыка уйнай. Әммә ауыл эттәренең генә унда ҡайғыһы юҡ. Уларға шом килгән. Улар бер-береһенең тауыш

шомлоғон аңлай. Ҡапҡа эсенә бур килһә, бер төрлө, ят һыйыр малы керһә, бер төрлө, үҙ аты керһә, бер төрлө өрә. Әммә кешеләр генә быны аңламай. Бөгөн эттәрҙең дөйөм ғауға һалыуының ике сәбәбе бар. Тәүгеһе, иң нәғезе – ҡыуғыны еҫ бирә башлаған инә ҡайҙа? Икенсеһе – ҡапыл килеп сыҡҡан дәһшәтле дошман – бүре. Эттәр өрә лә өрә. Бер-береһен ҡоторта. Әммә бүреләр һис тауыш-тын сығармай сабыр, бик сабыр үҙ өлөшөн, үҙ ризығын көтә.

Шулай байтаҡ ваҡыт үтте. Солан аҫтындағы ҡош-ҡорт, һарайҙағы мал-тыуар һәм әллә ниндәй башҡа еҫтәр менән томаланған эт туйына әҙерләнгән кәнтәй үҙе кергән тишектән артҡа килеп сығыуы булды, кәбән төбөндә ятҡан Тупыс уның елкәһенә баҫты. Кәнтәйҙең тәүге минуттарҙа сайылдауы, әҙ генә һуңғараҡ ғырылдап шыңшыуы уның яҙмышының хәл ителгәнен башҡаларға еткерҙе. Ә Тупыс донъялыҡта үҙенә, үҙ тоҡомона бөлгөнлөк килтереүсене башҡа ҡорбандарына ҡарағанда аяуһыҙыраҡ һелкте лә һелкте. Бүренең эткә аяуһыҙ дошман булғанлығын нимә менән аңлатып була? Ҡыр мөхитенә, ҡыр ҡанундарына хыянат итеп, кешегә килеп һырығып, тәбиғи үҙ ояһын ҡарамай, бүренең иң төп дошманы булған кешенең мәнфәғәтен һаҡлаған өсөнмө? Шулайҙыр. Әммә Тупыс өсөн был кәнтәй эт кәнтәй булғаны, киләсәктә эт тоҡомон арттырыусы булыуы менән тағы ла дошманыраҡ ине. Бик, бик ашағыһы килһә лә, ул кәнтәйҙән ерәнде. Хатта кәнтәй үлеп бөтөп, йәне барлығы билгеһен күрһәтмәһә лә, һелкте. Ташланы, ситкә китте, һарыны. Сабып һикереп килеп тамағынан йә былай ҙа онталып бөткән биленән тешләп, тағы ла һелкте лә һелкте. Төрлө милләт, дәүләт араһында йәшәү өсөн алып барылған һуғыш ине ул ысынбарлыҡта. Күрәһең, ул һуғыштың ер йөҙөндәге һәр йән эйәһе өсөн төҫө, мәғәнәһе бар. Тик сәбәптәре һәм маҡсаттары төрлө-төрлө. Кәнтәйҙең ғырылдап сыйылдағанын Ҡалын Боғаҡ ишетмәнеме ни? Ишетте. Бик иғтибар менән тыңлап ятты ул кәртә буйында. Тупысҡа ярҙамға ашыҡмауында ике сәбәп бар ине. Беренсеһе – Тупысҡа тәрән ышаныу. Арлы-бирле сәүек эттәрҙән генә Тупыс еңелмәҫ. Ул, һис шикһеҙ, үҙ ризығын, үҙ ҡорбанын тапҡандыр. Килгән тауыштар бөтәһе лә шул турала һөйләй. Икенсе сәбәп шул булды. Тупыс, кәбән төбөнә барып, ундағы эттәрҙе пырлатҡас, шау, ғауға аҫтында дәртләнеп, артҡа, кәртә аша ике бик ҙур эт һикереп төштө лә шунда уҡ түгелгән тиҙәк араһында йә өрөп, йә олоп темеҫкенеп йөрөй башланы. Ҡалын Боғаҡ уларҙан һис ҡурҡманы. Киреһенсә, йыртҡыслыҡ хисе, аслыҡ тойғоһо самаһынан ашып, бөтә тәнен ҡалтырата ине. Ҡайһы мәлдә ул, түҙмәйенсә, ташланыр өсөн тора биреп тә ҡуйҙы, әммә ҡорбанын ҡапыл баҫыр өсөн ара әҙ генә йыраҡ ине. Ятҡан еренә кире боҫоп, береһенең яҡыныраҡ килеүен көтә бирҙе. Бына ҙуры, батыры, өрөп ебәрҙе. Һауаны еҫкәйеҫкәй уға яҡынайҙы. Шул саҡта үлән араһынан ҡапыл ташланды уға Боғаҡ. Быны көтмәгән ҙур эт кинәт артҡа ынтылды, ләкин бүре тештәре уға батҡайны инде. Китте алыш, китте талаш. Боғаҡ, ғәҙәте буйынса, иң алда «Ҙур»ҙың елкәһенән алды. Ҡорбанын был алым менән баҫып йыҡҡас, тамағынан алып, быуа торған ине. Ләкин дошман көслө булып сыҡты. Ергә йығылманы. Киреһенсә, башын бороп, аҫтан Боғаҡтың эсен ҙур итеп умырып ҡапты. Хәлдең былай уңайһыҙ килеп сығыуынан һәм ауыртыныуҙан ул «Ҙур»ҙың ҡалын тиреле һәм йөнлө елкәһен ебәрҙе. Шул уҡ мәлдә ысҡыныуын һиҙгән «Ҙур», ҡасып ҡотолор өсөн, килгән юлына кире ташланды. Табышын юғалтмаҫ өсөн, Боғаҡ ике-өс һикереүҙә уны тағы ла тотто. Хәҙер улар ике арт аяҡтарына баҫып, текә тороп талаша. Ҡалын Боғаҡ тамағынан, ә Ҙур эт уның ҡолағынан эләктерер өсөн айҡалашалар ине. Был шау-шыуҙы йыраҡтан ишеткән Тупыс Боғаҡҡа ярҙамға

сабып килә ине инде. Кәртә аша еп-еңел йомолоп килеп төшөү менән, тиҙлеген дә юғалтмай сабып килеп, текә торған «Ҙур»ҙың артҡы бот араһынан алды. Ата һәм инә бүренең икәүләп һунар иткәндәге ғәҙәти алымы был. Йылҡы малына, һыйыр-таналарға, мышыға ташланғанда ата бүре хайуандың елкәһенә, муйынына йәбешә, ә инә һәр саҡ еленде, тоҡсайҙы, ҡыҫҡаһы, йән ерҙе айыра. Инә бүренең үҙ ҡорбанының, бигерәк тә уның инә енесле булғандарының, йән ерен, уның үҙ балаһын ашата торған ағзаһын – имсәкте, еленде – эшләктән сығарыу булмышына һалынған. Нәҫелдәрен ҡоротоу уның ҡанына, эске фиғеленә һеңгән. Әммә кешеләр кеүек үк, уларҙың да төрлөһө була. Эт көсөгөн тешләп урлап имеҙеп аҫрағаны ла, ҡыр кәзәһенең ярҙамһыҙ бәрәсенә теймәй ҡарап ултырып, ситкә юртып киткәне лә... Хатта кеше балаһын да үҙ тоҡомдаштарынан ҡурсалап, үлемдән ҡотҡарғандары тураһында ла риүәйәттәр бар. Әммә бөгөн Боғаҡ менән Тупыс миллион йыллыҡ нәҫел-нисбәттәренең алымын өлгөлө башҡарҙылар. Тупыс килеп етеп, «Ҙур»ҙың бот араһынан алғас, һыҙланыуҙан уға ынтылған арала Боғаҡ эттең тамағынан уҡ эләктереп алды. Һелктеләр ҙә һелктеләр икәүләп. Ауыр кәүҙә һыҙланып сайылдауҙан ғырылдауға күсте. Тауышы тынғандан-тына барҙы. Унан һуң тамам тынды. Әммә Боғаҡ менән Тупыстың ҡан дошмандарына асыу-нәфрәтенең сиге юҡ. Ергә һалып, һөйрәтеп йөрөп һелктеләр. Унан таланыуҙан таушалып бөткән йәнһеҙ кәүҙәне икеһе ике яҡҡа тарта башланы. Тарта торғас, иң алда алғы ҡулын, унан артҡы ботон өҙҙөләр. Өҙҙөләр һәм ситкәрәк, тиҙәк араһына алып китеп, ҡомһоҙланып, туйғансы ашанылар. Ауыл эттәренен яҡындағылары тынды, тик музыка сыҡҡан клуб тирәһендәгеләр йә уртанан сыҡҡан йылға аръяғындағы урамдан сәүектәрҙең ләүкелдәүе ара-тирә ишетелеп ҡала ине.

Ашап туйғас, тиҙәклек йылыһында, ундағы һамтыҡ бесәне өҫтөндә яттылар. Етегән йондоҙ текә тороп, таң яҡынлашҡас ҡына, юлға ҡуҙғалдылар. Бөгөн, барлыҡ ҡанунды боҙоп, Боғаҡ алдан юл алды. Оло һаҙға юл алды ул – үҙ иленә. Үҙе тыуған, алты йыл ғүмерен үткәргән, унда һәр саҡ килеп, үҙ билдәһен ҡалдырып киткән түбәлеккә. Оло һаҙ эсендәге шишмәле, ҡамышлы түбәгә...

Ә уға етер өсөн байтаҡ юл үтәһе бар. Тыныс, аулаҡ ерҙә көн үткәреп, икенсе көнгә оло һаҙға килеп еттеләр. Эскә үттеләр. Оя түбәһенең тирә-яғын ентекләп тикшерҙеләр. Бында оҙаҡ ҡына ваҡыт икенселәр булған. Олонан да, кесенән дә бик күп билдәләрен ҡалдырғандар. Боғаҡ, еҫтәре буйынса, бында килгән өйөрҙә өс ата, бер оло инә һәм әле йәше менән бәлиғ булып өлгөрмәгән йәш кәнтәй булыуын белде. Туй үҙ ҡануны менән барған. Һуғышҡандар, болашҡандар. Икәүһе ҡаты алышҡан саҡта өсөнсөһө үҙ ғәмәлен башҡарған.

Шулай ҙа Боғаҡ үҙен хужа итеп тойҙо. Өс көн түбәлек өҫтөндә ятты улар. Үҙ иректәре, үҙ теләктәре менән йәрәштеләр ҙә йәрәштеләр. «Дуҫтар» килмәне лә килмәне. Асыҡтылар. Икәүләп был ергә хужалыҡтарын белдереп үҙ билгеләрен һалғас, Боғаҡ яйлап ҡына Тупыс артынан алыҫта, бик алыҫта күгәреп ятҡан тауҙарға табан атланы. Тупысҡа был ер, был оя оҡшаманы. Сөнки ояға сит ғаилә килеп йөрөгәс, бигерәк тә үҙ билгеләрен һалғас, оя оя булмай инде. Уртаҡ була. Оя өсөн болашып һуғышыуҙар буласаҡ. Унан һуң көсөктәрҙе быуып ташлап китеү ҡурҡынысы бик ҙур. Бер ояла ике ғаилә һыйышмай ул. Күрәһең, оло кәнтәй Боғаҡтың йә апаһы, йә һеңлеһе. Билдәләренә ҡарағанда, үҙен бик иркен тотҡан.

Тауҙарға барыуҙың икенсе көнөндә ҙур, ҡалын шырлыҡтың бер ситендәге соҡор ҙа саҡыр, ҡуйы тубылғы һәм сәнскеле гөлйемеш араһында Боғаҡ Тупысты

ярға өңөп эшләнгән тағы ла бер ояэргәһенә килтерҙе. Был ояны ҡасандыр Боғаҡтың инәһе төлкө ояһын киңәйтеп эшләп алған ине. Боғаҡ үҫеп ата-инәһенән айырылғас та әле ике йыл бында көсөк үҫтерҙе инәһе. Ата-инәһен һунарсылар ат менеп ҡыуып атып алғас, һуңғы йылдарҙа буш торҙо. Боғаҡтың һеңлеләре лә, сит ғаилә инәләре лә ниңәлер үҙ итмәне был ояны. Тупыс бында ла оҙаҡ еҫкәнде. Өң эсенә ике-өс тапҡыр кереп сыҡты. Аҫта яр, шырлыҡта бәләкәй генә йылға сылтырай. Өҫтә лә яр, әммә ул бик күп йырынтылар, соҡор-саҡыр, өҫтәүенә, сәнскеле ваҡ ағастар менән тығыҙ ҡапланған. Һис йән эйәһе күреп, эҙләнеп йөрөй торған ер түгел. Эҙләһәң дә таба алмаҫың. Бүре еҫен, бүре ояһын һиҙеп, был шырлыҡ тирәһенә инде нисәмә йылдар төлкө килмәҫ тә, йөрөмәҫ тә булды.

Бынан дүрт-биш саҡрым алыҫлыҡта, ялан уртаһындағы ултырауҙай ваҡ түбәлектәрҙең береһендә таш өң аҫтына көсөкләгәйне төлкө. Тик ҡуямы ни инде, түҙәме ни инде күршелекте бүре. Белеп ҡалыу менән, төлкө көсөктәрен таш аҫтынан ҡаҙып алып, сыйылдатып быуып, берәм-берәм ашап бөтөрҙө. Дүрт-биш көн үтеүгә ояға килергә ҡурҡып, уның тирәләй генә уфтанып, ҡауғалап йөрөгән, тәкеһе ҡойолоп бөтмәгән инә төлкөнө лә баҫтырып тотоп ашап ҡуйҙы. Шунан һуң был тирәгә төлкө кермәҫ булды. Иҫке, буш оя алдындағы ҙур шырлыҡ хужаһыҙ – төлкөһөҙ, бүреһеҙ – тороп ҡалды. Унда бер йылда ҡуяндар үрсене, ялан селе үҙ итте. Ә быйыл хатта ҡыр кәзәһе бәрәсләне. Тыныс, бик тыныс ерҙә бәрәстәрен үҫтерҙе, тик ҡар төшкәс, бигерәк тә уның өҫтө ҡатҡас, кәзәләр ҡағылсанға, тау үңерҙәренә күсте.

Боғаҡ менән Тупыс аҙна-ун көн ҡуйы ҙур шырлыҡта аҡ ҡуянға һунарсылыҡ итте. Шырлыҡ эсе тар ғына, оло юл кеүек. Төндө текә яр өҫтөндә, тирә-яҡ апасыҡ күренгән тубылғы-селеклек ситендә ятып үткәрәләр ҙә көндөҙ шырлыҡта ҡуянға һунар итәләр. Ғәҙәттә, береһе – ҡуян урағы ялансыҡҡа сыҡҡан ерҙә, ҡуяндар йыуан ерек, тал, муйыл аша һикереп сыҡҡан ерҙә, ағас төбөндә боҫҡонда ятты. Икенсеһе – шырлыҡты урап, уның эсенә кереп, иртәнгегә, көндөҙгөгә ятҡан ҡуянды эҙләне. Йәйләп, ашыҡмай. Сөнки улар ҡуйы тал араһында ҡуянды ала алмауҙары, бигерәк тә аҡ ҡуянды эләктереүе «ай-һай» булыуын белә. Ә шырлыҡта тик аҡ ҡуян ғына йәшәй.

Күҙҙәре асыҡ көйө йоҡлаған аҡ ҡуян, мейеһе уянмаһа, фиғеле һис уяна алмай ята бирә. Икенсенән, ул дошманының уны күрмәй үтеп китеүенә иҫәп тота. Әммә бүрене еҫ һиҙеү тойғоһо алдамай. Бүре, ун биш метр самаһы ер ҡалғас, ҡуян ятҡан еренән йомғаҡтай атылып, урағына төшә. Арттан бер нисә тапҡыр ғына һикереп тороп ҡалған ҡурҡыныстан күҙе томаланып, ураҡ менән алға елдерә. Шырлыҡ эсендәге яланғаслыҡҡа сығыр алдынан ғына ауған ерек аша һикергәндә боҫҡонда ятҡан Тупысҡа дәл була. Бында инде эште йылғырлыҡ, сапсанлыҡ хәл итә. Шулай тамаҡтарын туйҙырҙылар ара-тирә, әгәр һунарҙары уңышлы булһа... Икәү – икәү инде, яңғыҙ кеүек түгел. Яңғыҙ йәшәгәнендә һәр саҡ ҡалдыҡ-боҫтоҡ, кимерелгән емтек менән генә туҡланып йөрөгән Тупыс өсөн бергә һунар итеү үҙе ҙур тормош дәресе булһа, икенсенән, саф, таҙа ит – тәненә тәбиғи һәм ләззәт ине.

Март айының уртаһы үтеп китте. Көндәр ҡапыл йылытты. Тал, муйыл, ерек ағастарының бөрөләре һут алып, тулышҡандай тойолдо. Тупыстың танауына ул бөрөләр шул тиклем таныш, шул тиклем үҙ, көсөк ваҡытындағы тәмле, серле еҫтәрҙе килтерә. Шуға ла ул ятҡан еренән тороп, ҡаршыһында ултырған муйыл бөрөләрен берәм-берәм сәйнәп йоторға кереште. Ауыҙ эсен ҡурғандай ыуыҙландырып ебәргән был тәм бик тә, бик тә таныш булһа ла, Тупыс өсөн туйымлыҡ

түгел. Әскелтем ойотҡос тәм үңәсен дә, күкрәк эсен дә баҙырата ине. Башҡаса ашай алманы.

Был тәмде ул үткән йылда тәүге ғаиләһе барлыҡҡа килгәс тә, үҙе эҙләп тәмләгән ине. Тулышып килгән ағас бөрөләре генә түгел, еүешләнеп бүртә биргән ҡоро япраҡтар, ҡыяҡ үләндәр тәме лә Тупыс өсөн теләүле. Үткән йыл да ул шулай әле үҙе ашаған бөрө еүешлектә ебегән бер нисә ҡоро япраҡты иҙеп ашап, улар тәменән күңел моңо, ләззәт тойоп, еңеләйеп киткән ине. Үлтерелгән балаларының атаһы менән былтыр ҙа шулай буласаҡ оя тирәһендәге йәнлектәрҙе ҡуҙғымай, уларҙы һаҡлай биреп, йыраҡтараҡ һунар иттеләр. Ояға яҡын йәшәгән ҡош-ҡортҡа ла, аса тояҡҡа ла, шеш ҡолаҡҡа ла теймәнеләр. Яҙ көнө оя тирәһенән 10 –15 саҡрым урынлашҡан мал-тыуар көтөүенә лә зыян килтермәнеләр. Ашаһалар ҙа, көтөүселәрҙең эттәренән ҡалған үләкһәләрҙе генә кимерҙеләр...

Хәҙерге ваҡыттағы һәр кешенеке тигеләй, Тупыстың да, һәр бүренеке кеүек, тормошо ауыр, һәр көн үлем һағалай, тирә-йүндәге барыһы ла уға дошман. Үткән яҙ ул боронғо ата-бабалары үҙ иткән ҙур ҡаялыҡ аҫтында өс көсөк килтергән ине. Әммә тулы ғаилә менән йәшәү бәхете оҙаҡҡа барманы. Тормош иптәше ҙур, ғәйрәтле, күк һыртландай ата бүренең, ни тиклем ентекләп аҙыҡ эҙләһә лә, һунары һуңғы ун көнлөктә уңышлы булманы. Шуға ла көсөкләп ятҡан инәгә йүнле-башлы аҙыҡ килтерә алманы. Үҙе лә ас йөрөнө. Ала ҡар булыуға ҡарамаҫтан, бик иртә сыҡҡан йомранды тотоп йотһа ла, ояға ҡайтҡансы ас ашҡаҙаны уны эшкәртеп бөтә яҙҙы. Көсөк имеҙеп ятҡан ас йәш инәгә, ҡоҫоп, саҡ-саҡ әҙ генә ит киҫәге ашата алды. Ял да итеп тормайынса, тағы ла китте ул. Тағы ла тәүлек ярым үтеүгә ас, ябыҡ, тиреһе һөйәктәренә йәбешеп бөткәндәй күренгән инә бүре, көсөктәрен сыйылдата-сыйылдата ятҡан еренән тороп, ата киткән юлға төштө. Ул ваҡытта әле ул Тупыс түгел ине. Аслыҡ уны туп-тура йыраҡта уҡ ятҡан ҙур ауылдың мал үләкһәләре ташлай торған соҡорлоҡтарға алып китте. Барлыҡ һаҡлыҡ сараларын ҡулланып, кис, арты төн буйы ул юлда булды. Соҡорға еткәс, уға тура кермәй, урап, унан һуң ел аҙағына сығып, бөтә ҡурҡыныс шәүләләрҙе тикшерҙе. Унан һуң ауыл эттәренән ҡалған иреп бөтмәгән туң емтекте, һәр ике-өс минут һайын һағайып, таң беленә башлағанға тиклем кимерҙе лә кимерҙе.

Туйҙы һымаҡ. Әммә үҙе туйһа ла, күҙе, нәфсеһе туйманы. Ҙур ғына киҫәк айырып алып, юлға, тиҙерәк көсөктәре янына ҡайтырға боролғанда ғына алдына ата иптәше килеп сыҡмаһынмы?!. Еҫкәштеләр. Ата бүре, уның моронон, туҡ ҡорһағын еҫкәй-еҫкәй, ҡарһаланып туң түште кимерә башланы. Ҡайҙа йөрөгәндер инде ул эҙләнеп. Тик шуныһы дөрөҫ: ул бынан ике тәүлек элек үткәндә, был үләкһә юҡ ине.

Тағы ла уңышһыҙ һунарҙан һуң өмөт керетте уны бында. Бәхетенә күрә, инә лә бында, ашарға ла бар. Инә бүре, ауыҙына ҡапҡан ҙур ғына ит киҫәген тешләп, тамам яҡтырыуға көсөктәре янына ҡайтып етте. Таң яҡтырып, көн тыуҙы. Көн үтте. Тағы ла төн етте. Туҡ булһа ла, атаны көтөп, унан тағы ла йомшаҡ ит киҫәге алып ашарға өмөт иткән инә көттө... Көттө уны. Һәр ҡоштоң тауышына, елдең һәр боролошона иғтибар итте. Ҡайҙа ҡайһы ағас нисек шығырҙауын тыңлап ятты ул. Ә ата килмәне лә килмәне.

Ә ата, туң итте әйләндерә-тулғандыра ашап туйғас, ауыҙ-томшоғон ҡарға ятып ышҡып таҙартҡас, ғәҙәте буйынса, ояға алып ҡайтыр өсөн, итле генә аяҡ төбө һөйәген тешләп ҡайтырға сыҡты. Аулаҡ ергә күмеп ҡалдырып, икенсе көн

кис йә төнө килеп алаһы ине лә бит... Тыҡ тамаҡ ғәмһеҙлек килтерҙе. Таң атып, ҡояш күтәрелеп килгәндә, ул ҙур тауҙың оя тирәһенән, әммә арт яғында ултыртылған ҡарағайлыҡҡа етеп килә ине. Түбәндә ҙур булмаған ялансыҡ ситенән ауыҙына ниҙер ҡапҡан бүрене өҫтә, ҡарағайҙар йәнәшендәге ҡаялыҡта, ултырған ике һунарсы күреп ҡалды. Тиҙ аңлашты улар. Бүре, һис шикһеҙ, ҡарағайлыҡ эсенән буйлап өҫкә үтәсәк. Болоттар ҡап-ҡара булып йомарланып арттан ҡупты. Был да елдең бүренең артынан өрөүенә килтерҙе. Икеһе ике яҡлап йәшенеп көтөп ултырған кешеләрҙең еҫен тоя алманы ул. Атыу, тағы ла атыу яңғыраны. Ауыҙына ҡапҡан итте ташлап, ҡабырғаһындағы, күкрәк эсендәге түҙгеһеҙ һыҙлауға бирешмәй, алға, өҫтәге ҡаялыҡтарға, сапты. Өҫкә менгәндә ул аңын юғалта башлағайны. Аңының ниндәйҙер бер бик яуаплы нөктәһе уны ояға, тиҙерәк ояға етергә ашыҡтырҙы. Ояға етмәҫ борон уның йылғасығына йәнәш аҡҡан шишмәлек шырлығы үҙе йыйған боҙҙо, ҡар һырынтыһын әле ныҡ тота ине. Ул һырынтының иңкеш еренән менде менеүен, әммә алғы текә яғына тәҡәте бөтөп йығылып төштө. Башҡаса тора алманы...

Ҡар, боҙ араһынан һөҙөлөп сыҡҡан йылғасыҡ уның ҡойороғон оҙаҡ уйнатты.

Ана шулай юғалтты Тупыс былтыр иптәшен. «Күк һыртлан»дың ит тешләп килеүе һунарсыларға бик күп серҙе һөйләне. Ике-өс көн дә үтмәне, ала эттәр эйәрткән өс кеше ояны эҙләп тапты. Тупыс, эттәрҙең «уау-уау» тип өрөп килеүҙәренән шикләнеп, ситкә китеп өлгөрҙө. Бер көсөгөн ул елкәһенән ҡабып үҙе менән алды. Икеһен бергә тешләй алманы. Өлгөрмәне ул, өлгөрмәне. Ике-өс саҡрым ергә булһа ла, аулағыраҡ ергә ҡалдырып, шунда уҡ осор ине ул ҡалған көсөктәрен килтерергә, юҡ, килеп баҫтылар дошмандар. Ҙур ҡолаҡлы, һалбыр иренле өсдүрт ала эт, лауҡылдап бер-береһен ҡотортоп, оя ташына килеп еттеләр ҙә ярҙамсыһыҙ, бер үҙҙәре ҡалған һәм күҙҙәре лә саҡ-саҡ асылған көсөктәрҙе ботарлап ташланылар. Шул арала мылтыҡ тотҡан кешеләр килеп етте лә, үле көсөктәрҙе күреп, эттәренә тағы ла тирә-йүнде эҙләргә ҡуштылар. Ауыҙына көсөгөн ҡапҡан инә бүренең эҙен тиҙ тапты «алалар». Эттәрҙең тауыш биреп өрәөрә сапҡан йүнәлеш менән өс һыбайлы төштө. Ауыҙына көсөгөн ҡабып ҡасып барған инә бүрегә тиҙ етте «алалар». Һәм туранан-тура һуғыш башланды. Ике ҙур ала инәгә ынтылды, береһе ерҙә ятҡан көсөктө таланы. Эттәрен бүре талмаһын тип ҡурсалап, һауаға атып, ҡысҡырып сабып килгән һыбайлылар яҡын ине, бик яҡын. Инә бүре асырғаланып тешләп һелкеп, бер аланың ҙур ҡолағын өҙөп алды. Шулай ике көндә барлыҡ ғаиләһен юғалтты Тупыс үткән йыл.

Йә бөрө иҙеп ашап, йә ҡуян аулай-аулай, мартты үткәреп, апрель айының тәүге ун көнлөгөнә еттеләр. Ҡарҙар иреп, һыуҙар көсләнеп аға башланы. Хәҙер улар был ҡуйы шырлыҡҡа кермәй тиерлек. Унда еүешлек, унда һыу. Арҡалыҡтар, түбәләр асылды. Төндә һауанан бик бейектә ҡанаттарын сый-сый итеп елпеп, үрҙәктәр, ҡаҙҙар ҡайта башланы. Хәҙер уның йыраҡ ергә йөрөгәһө лә килмәй, дөрөҫөрәге, ауырайҙы ул. Ә Ҡалын Боғаҡ Тупысты ҡарауыллап ятманы. Йөрөнө, эҙләнде, һунарсылыҡ итте. Ара-тирә Тупысҡа ит тә килтерә. Ояһына, тауҙағы, ҡаялағы ояһына ҡайтҡыһы килә башланы уның. Шулай бер көнө Ҡалын Боғаҡ һунарға киткәс, яңғыҙы ояһына табан юлланды.

Йыуан муйынлы, ҙур башлы Боғаҡ Тупысты ҡалдырып киткән ҡуйы ҡырсынлыҡҡа икенсе көн генә ҡайтты. Әммә Тупысты был урында тапманы. Ул ҡалдырған һарыу ерен табып, оҙаҡ еҫкәнде. Уға тип ҡоро ҡамышлыҡ ситенән баҫтырып тотоп алған яралы үрҙәкте шул ергә ҡалдырып, Тупыстың киткән юлын табыу ниәте менән тирә-йүнде түңәрәкләп эҙләп килде. Әҙ, бик әҙ генә

сыға Тупыстың киткән юлының еҫе. Шулай ҙа ул көттө. Боронғо ата-бабаларының ояһы түпһәлендә ятып көттө. Тәүлек үтте. Был ояны ла Тупыстың үҙ итмәүен Боғаҡ һиҙемләй. Шуға ла килтерелгән күгәл үрҙәктең йөн-ҡаурыйҙарын ғына ҡалдырып, йыраҡта ҡарайып ятҡан ҙур тауға табан юлланды.

Тупыс бик күп туғандары һәм үҙе тыуған, үҫкән, ғаилә ҡорған, көсөктәрен һәм тәүге иптәшен юғалтҡан был ҡаялыҡ – ояһы янына килгәндә, тирә-яҡта ҡар иреп бөткәйне. Тик оялыҡ янынан тауҙан ағып төшкән йылға шырлығында боҙ әле ҡалын. Тирә-йүнде ентекләп тикшереп сыҡҡас, ул оя ауыҙынан эскә керҙе. Ҡышҡы өйөрмә бурандар ҙа ҡар керетеп һала алмаған. Сөнки оя тишеге ерҙә ятҡан ҙур йәйемпә таштың өҫтөндәге ҡая аҫтында ине. Оя ятҡылығы ҡоро, йомшаҡ япраҡ менән түшәлгән. Күрәһең, ҡыш уның ауыҙындағы ҡар төшмәй торған ергә ҡыр тауыҡтары, әтәстәре күптәнән инде бер осор ҡунаҡлағандар. Улар бүтәгәләренә кәрәкле ҡаты таш эҙләгәндәрҙер. Хәҙер оя алдында тик ҡаты, кипкән һарғылт тиҙәктәре генә өйөлөп ятып ҡалған. Ояның таш яҡтарын еҫкәп, үҙ ояһы булыуына ҡәнәғәтлек тапты. Бында уға һәр таш ҡуптығы, һәр ярсыҡ ҡатлауы һөйөндөргөс үҙ, тынысландырғыс ләззәт бирә ине.

Боғаҡ, Тупыс янына килеп етеп, ғәҙәте буйынса, уға ҡоҫоп ашатырға көсәнеп ҡараһа ла, турғай ҙурлығындай иҙелгән иттән башҡа сығара алманы. Ә Тупыс, ҡойроғон болғап, уның ян-яғына сыҡты, ауыҙын, томшоҡтарын яланы. Тик унан тәмле ит башҡаса сыҡманы.

Хәҙер эҙ ҡалдырыуҙан ҡурҡып оя янында ғына ятыу юҡ. Икәүләп әлегә тирә-йүн ҡуҙғытылмаған яҡын-араны йөрөп сыҡтылар. Ҡуйы, бейек ҡырсынлыҡ араһында ваҡ ботаҡтарға эләгеп, текә генә осоп китә алмаған ҙур ҡара һуйырҙы Боғаҡ икенсе һикереүҙә һауанан уҡ тигәндәй тотоп алды. Тупыс сабып килеп, үҙе тотҡан табышы кеүек, Боғаҡтың ауыҙынан тартып алды ла ҡомһоҙланып ашай башланы. Боғаҡҡа һуйырҙың ҡарағай ботаҡтары тулы эсәктәре, Тупыс һоғоноп өлгөрмәгән кәкре ҙур суҡышлы башы ғына эләкте. Был туйыныуҙан һуң оя янындағы ҡоро энәлек, мүк өҫтөнә бөгәрләнеп, тағы ла ике көн, бер төн үткәрҙеләр. Икенсе көнгә Боғаҡ, Тупысты ҡалдырып, тағы ла һунарға китте. Эйәреп ҡараһа ла, Боғаҡ уны эйәртмәне. Еңелсә генә яңаҡлап баҫтырып кире борҙо. Бик барғыһы килһә лә, Тупыс инде уға эйәреп йөрөрлөк түгел. Күкрәк имсәктәре шешенеп, һөт килер ваҡыт еткәйне. Һөт тамсылай башланымы, күр ҙә тор – ваҡыт еткән... Ҡар иреп бөтөп, ер асылып, көндөҙ йылытһа ла, төндә әле ҡара һыуыҡтар тора. Тағы ла аҙна үтеүгә Тупыс оя янынан бөтөнләйгә китмәҫ булды. Оялағы ҡоро, йомшаҡ япраҡ өҫтөндә үҙе ялҡҡансы ята. Тороп арлы-бирле йөрөштөрөп килә лә тағы ла ята. Ҡалын Боғаҡ менән йәрәшкәндән һуң туғыҙынсы, һуңғы аҙна көндәре сиселә ине. Хәҙер ул элекке кеүек бөгәрләнеп тә ята алмай. Эсендә көсөктәренең тырнашҡанын, бер туҡтамай ҡыбырлағанын һиҙә. Уларҙы күрергә теләгәндәй, ара-тирә арт яғына башын бороп ҡарай. Көтә ул, көтә. Ауыртыу килгән таңда, күк йөҙөн томалап, ҡар аралаш ямғырлы ҡара болоттар ер өҫтөн ҡапланы. Иң алда шаулатып ямғыр яуһа ла, тора-бара ул кәмене. Унан һуң ҡар аралаш ямғыр, ә таң алдынан ябалаҡлап-ябалаҡлап ҡар яуырға тотондо. Таң атып, бөтөнләйгә яҡтырыуға ер өҫтө ап-аҡ тәрән ҡар менән ҡапланды.

Был ваҡытта күҙҙәре йомоҡ, тос, йыуантыҡ кәүҙәле ҡара күгелйем өс көсөк килтергәйне Тупыс. Таҙарынды, томшоғо менән уларҙы төрткөләп әйләндереп, үҙ аҫтына һалды, бөгәрләнеберәк кәүҙәһе менән ҡапланы, алмашлап тәндәрен

яланы ла яланы. Был тәүге яланыу көсөктәре өсөн йәшәү ҡеүәте алыу, хәрәкәтлеккә бәрәкәт ине. Мырҡылдашып әҙләнеп, йылы, йомшаҡ имсәкте табып алдылар ҙа супылдатып имергә керештеләр. Нәҡ шул саҡта тамаҡ төбө менән ғырҡылдау аралаш сыйылдау ауазы биреп, Боғаҡ ояға ҡайтты. Бик тә, бик тә эсе өҙөлөп асыҡһа ла, Тупыс, балаларын ташлап, Боғаҡҡа ҡаршы төшмәне. Төшмәне тип әйтеүем шул: оя ярайһы уҡ өҫтә ине. Боғаҡ уға, бәлки ун, бәлки, егерме саҡрым алыҫлыҡтан үлгән башмаҡтың арткы ботон тешләп килгән. Башмаҡ ботоноң ите тулы булмаһа ла, Тупысҡа был аҙыҡ – ашар өсөн һәм кимерергә аҙналыҡ аҙыҡ. Көсөктәрен ялап ҡоротоп ятты ла ятты.

Күп ерҙәр, күп ҡурҡыныс, хатта үлемесле минуттарҙан ҡотолоп арып килгән Боғаҡ, көсөктәрҙең йомшаҡ, сөсө генә еҫен һиҙеп, ситкәрәк, өҫкәрәк китеп, тубылғы ураткан ҡарт ҡайын янына ятты. Бынан, өҫтән, барлыҡ тирә-йүн асыҡ күренә. Оя утыҙ-ҡырҡ аҙым самаһы түбәндә. Ыҙа сигеп тешләп килтергән туң бот һөйәге лә ситтәрәк ята. Әле уны ҡоҙғон да, һайыҫҡан да шәйләмәй. Ятты ул шулай тәүлек, артыҡ ял итеп. Икенсе көн төндә Тупыстың оянан сығып ит-һөйәк янына килеүен һиҙеп, Боғаҡ яй ғына уның янына төштө.

Ғәҙәти ваҡиғалар ҡабатланды ла ҡабатланды. Аслы-туҡлы аҙналар, ғаиләгә үлем хәүефлеге янаған көндәр үттеләр ҙә үттеләр.

***

Әммә бер ваҡиға Боғаҡтың ғаиләһенең яҙмышы менән бергә аҡты. Боғаҡ, ит тешләп, елкәһе, ауыҙы талғанлыҡтан, уны ергә һала-һала килде. Ул таңда көслө ҡар яуып, уның эҙе көрт булып өлгөргән ҡарҙа тәрән ярылып ята ине. Яҡтырғас, үҙ биләмәһен атын менеп ҡарарға сыҡҡан урман ҡарауылсыһы ап-аҡ ҡарҙа эҙ күрҙе. Бында һыңар эт йөрөмәй. Тимәк, бүре. Ниҙер һөйрәткән, ниҙер тешләп килгән, уның осо ҡарҙы сыйып барған... Йүнәлеше – тауға. Тимәк, был – инә бүре, тип уйланы урмансы. Көсөктәренә аҙыҡ ташый... Шулай, ваҡиға асыҡланып, уның сама менән урыны ла урмансылар хәтирәһендә билдәләнде. Боғаҡтың был тырышлығы уның үҙенең һәм ғаиләһенең яҙмышын хәл итте. Ә был турала Боғаҡ та, Тупыс та тойомло мәғлүмәттә түгел ине.

Йәй уртаһы етеп килә. Хәҙер инде көндәр йылы, хатта эҫе. Оя тирәһендәге үҫемлектәр Тупыс арҡаһы бейеклегенә етте. Түбәндә шырлыҡ эсенән сыҡҡан йылға һайыҡты. Бәләкәй генә булып ҡалды. Һикәлтәле түпһәлдәрендә һыуы әҙлектән, бер сиреклек бейеклектә ҡойолмалары селтерәп кенә аҡты. Тирә-йүндәге бейек үләндәр инде ике ай ярымлыҡ көсөктәргә оя тирәһендә бер-береһен ҡыуып уйнарға мөмкинлек бирә. Ата-инәһе һунарға бергәләп йөрөгәс, аҙыҡ та килеп тора. Ул төрлө: йә ҡоҫолған йәймә йомшаҡ ит, йә үлгән малдың берәй киҫәге. Ә ҡайһы ваҡыт, һирәк-һаяҡ булһа ла, фиғеле теүәл бәрәс, ҡуян, ҡош, хатта тере йомран да килтерҙеләр. Көсөктәр өсөн ярым тере табыш, әлбиттә, башҡаларға ҡарағанда ҡыҙыҡ ине. Талған рәүештә ҡорбанды һелктеләр, болаштылар, үҙ-ара ғауғалашып талаштылар. Көндәр көҙгә тартҡанда көсөктәр бәләкәйерәк бүрегә әүерелде. Ата-инәһе килтергән аҙыҡ етмәй башланы. Кис, ҡараңғы төшкәс йә булмаһа иртә таңда ашарға өйрәнгән көсөктәр, Боғаҡ менән Тупыстың килеүен көтөп, ҡараңғылыҡ эсен тыңлай-тыңлай ҙа, яуап булмағас, өрөү аралаш олорға тотона. Буш ҡул менән ҡайтып килгән ата йә инә ғаиләһе янына килеп тә уларҙың аслығын баҫа алмай. Әҙ-мәҙ аралашҡандан һуң, олоу-һорау тағы ла дауам итә. Тик ул хәҙер буш ҡайтырға мәжбүр булған ата-инәнең бойоҡ йә кисереүҙәрен үтенгән моңһоу, үкенеү йә бөтмәҫ һағыш, хәсрәт, янау,

һорау ауазы... Ул олоуҙы тыңлаған кешенең тәненән ҡырмыҫҡалар йүгерә. Әммә һәр кем ул моңдо, ул ауазды үҙенсә аңлай, үҙенсә кисерә. Ғөмүмән, хәҙерге шау-шыу, машиналар геүләүе, юлаусылар, ул бөйөк ауазды ишетеп, тойғо кисергәндәре бармы икән? Юҡтыр! Ул мондо иғтибарлап тыңлаған, аңлаған кеше лә һирәктер. Уны бүре олоуын ишеткән яңғыҙ төнгө юлаусы йә төнгө көтөүсе генә аңлаһа аңлар. Көсөктәре урта кәүҙәле алабайҙай булғансы, Боғаҡ менән Тупыс оя янындағы хайуандарға теймәй ине. Бының ҡандан-ҡанға биреләп, тормош ҡануны булып китерлек ике сәбәбе бар. Тәүгеһе – әле көсөктәр бәләкәй саҡта аҙыҡ күп үк талап ителмәне. Көсөктәр тыуғас, тәүге айҙа Боғаҡ тик Тупысты ғына ашатты. Көсөктәргә икенсе ай киткәс, һунарға икәүләп йөрөй башланылар. Еңелләшкән кеүек булды балаларын туйҙырыу. Әммә ай үҫәһен аҙна үҫкән көсөктәргә аҙыҡ көндән-көн күберәк талап ителде. Көндәр ҡыҫҡарып, төндәр ҡараңғылана башланы. Ямғыр яуыуы ла үҙгәргәндәй тойолдо. Хәҙер ул йәйге кеүек мөлдөрәмә эре тамсылар менән яумай, ваҡ бөрсөктәр менән ҡойола. Һәр тамсыһы үлән япраҡтарынан тере ынйы булып ҡойолоп төшмәй, бер нисәһе бергә ҡушылып ҙурайғас ҡына, оҙонаяп биреп тупраҡҡа тама.

Боғаҡ менән Тупыс хәҙер ояға таң һайын ҡайтып килә алмайҙар. Шулай ҙа Боғаҡ ҡайтмаһа ла, Тупыс көсөктәре янына тәүлек уҙыуға бер ҡайтырға тырыша. Нимә булһа ла килтерә ул. Йомран, ҡуян, бик булмаһа ваҡ ҡоштарҙың себештәрен килтереп ашата. Бер осорҙа йыраҡ түгел ятҡан ауыл соҡоронан үлгән башмаҡ итен килтереп, ике-өс ашап туйыуға, көсөктәре һимереп, ҙурайып киттеләр. Әммә байрам оҙаҡ булманы. Тағы ла аслыҡ көндәр башланды. Оя тирәләй үҫкән әлморон – эт мороно емеше – бик уңып бешеп килә ине. Өс көсөктөң араһындағы бер уяуы, етеҙе, ҙурырағы, шул емештәрҙе еҫкәй торғас, береһен ҡабып шығырҙатып иҙеп йотто. Унан һуң тағы ла, тағы. Ҡалған ике көсөккә ҡарағанда ҙурыраҡ та, һимеҙерәк тә булған ата көсөк янына ябыҡ, нәҙек, бәләкәй, шуғалыр ҙа ҡолаҡтары ҙур булып күренгән ҡыҙ туғандары килде. Улар ҙа, ағаларынан күреп, әлморон емештәрен берәм-берәм шытырлаттылар. Аҙна үтеүгә оя тирәһендә әлморон еләге юҡ хисабында ине. Көсөктәрҙең ата-инәһе ояға килеп, булған аҙыҡтары менән балаларын туйындырғас, ял итеп, ғәҙәттә ҡояш байыр алдынан тағы ла йыраҡ юлдарына, һунарға киттеләр. Хәҙер уларҙың һунарға китеүенең һәр кисе ырылдау, талаш, баҫтырышһыҙ булмай китте. Сөнки һәр кис йә Боғаҡҡа, йә инәләренә ата көсөк эйәрә ине. Көсөктәрҙе алып киткәс, барыһын да эйәртергә кәрәк. Сөнки был осраҡта һунар юлы оҙонораҡ булып, бында ояға ҡайтып ятыу тамамлана. Уға аҙыҡ аҙна-ун көндән һуң йәки хатта бер айҙан ғына килеп-китеү осоро башлана. Ятыу, йоҡлау, ял итеү урындары һаҙ эсендәге ҡоро түпһәлдәргә, шырлыҡ эстәренә күсә.

Шул осорҙан башлап ояға яҡын мал көтөүҙәренә, яңғыҙ, ҡарауһыҙ хайуандарға, ауыл эттәренә лә төнгө һунар башлана. Әммә Боғаҡ менән Тупысҡа көсөктәрен ситкә алып китергә әҙ генә иртәрәк ине. Ике бәләкәй генә көсөктөң һөт тештәре төшөп, ҡаҙау һәм ҡырҡма тештәре сыҡмағайны әле. Тештәр үҫеп нығыныу өсөн тағы ла ун биш-егерме көн кәрәк. Ул көндәр үтеүгә тағы ла утығырҙар, ҡырҡма тешлегә әйләнерҙәр. Ә арлан көсөктөң тештәре сығып, үткерләнеүенә аҙна-ун көн үтте. Шуға ла ул муйыл, ҡайын ботаҡтарының осон кертләтеп ҡырҡып өҙә. Ҡайһы береһен әсе һуты өсөн ҡырҡып тешләп тә йөрөй. Бөгөн дә ул Тупыс артынан эйәрҙе. Уға арттан сабып барып етешеп, муйынын, аяҡтарын ҡосаҡлап һөйөндө, уның тирәләй урап сабып йөрөп ялағайланды. Ләкин инәһе уға ҡырҡа, ҡәтғи ырылдап, яңаҡлап, кире баҫтырҙы. Арттан

килгән Боғаҡҡа шул уҡ ҡыланыштарҙы ҡабатлағас, атаһынан уға ҡатыраҡ эләкте. Боғаҡ уны елкәһенән алып тешләп ебәрҙе лә ояға тиклем ҡыуып килде. Быны таш өҫтөнә менеп ҡарап торған ике туғаны ла өлөш алған ағалары артынан таш аҫтына кереп боҫтолар.

Ояға ҡайтҡан һайын ҡабатланды был һуғыш. Арттан эйәреү ере лә, яңаҡланып баҫтырылып ҡайтыу юлы ла оҙонайғандан-оҙонайҙы. Көндәр шулай үтә торҙо.

Биш-алты саҡрым ерҙә ҙур хужалыҡтың башмаҡтары йәйләүҙә ята ине. Боғаҡ менән Тупыс әлегә тиклем уларҙы борсоманылар. Бүреләр ҙә туҡ булды, тигәндәй, башмаҡтар ҙа теүәл булды. Шулай ҙа, уңайы сыҡһа, Боғаҡтың был башмаҡ саңлауын тикшереп сығыу теләге бар ине. Төндә башмаҡтар йәйләүе ятҡан ерҙән ике-өс эттең өргән тауышы һәр саҡ ишетелә. Бөгөн кис Тупыс төнгө һунарға иртәрәк китте. Уның киткәнен ҡарап ятҡан Боғаҡ, өҫтөнә менеп арҡаһын, муйынын, ҡойроғон тешкәкләп уйнаған көсөктәргә албырғап, бер ни тиклем һуңлап юлға сыҡты. Оло ул уға тағы ла эйәрһә лә, Боғаҡ уны, ғәҙәттәгесә, яңаҡлап кире ҡыуып ҡайтарҙы. Бөтөнләйгә ҡараңғы төшөп, тирә-яҡ тынысланғас, ата көсөк урынынан тороп, Боғаҡтың юлына төштө. Яйлап ҡына еҫкәй-еҫкәй юртты ул, таныш еҫле юлды ҡыуып. Китте лә китте. Барған һайын эҙҙең еҫе лә көсәйгәндән-көсәйҙе. Бына тау яҡтан аҡҡан йылғасыҡ. Эҙе уның шырлыҡ араһына кергән һуҡмаҡҡа төшөп, һис боролоуһыҙ унан аша йәйләү ҡаршыһына килеп сыҡты. Көсөк үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа күрмәгән ләүләп янған ут күрҙе, һис ишетмәгән ауазда тауыштар былдырҙай. Уның күҙе лә үткер, ҡолағы ла һаҡ. Барыһын да күргәндәй ҙә, ишеткәндәй ҙә була. Ут яҡтылығы яғынан әллә ниндәй тәмле еҫтәр килә. Нимәнән ҡурҡырға икәнен белмәһә лә, ҡурҡа ине. Арҡа йөндәрен торғоҙоп, ҡойроғон һуҙып, ҡолаҡтарын алға ҡарпайтып, ситләп урап китте ул утлы ерҙе. Бында хәҙер атаһының эҙенең еҫе лә юҡ. Башмаҡтар мышылдаған, аттар бышҡырған ерҙе эстә ҡалдырып, урап алға китеүен белде. Бара торғас, соҡорға тап булды. Соҡор эсенән тәмле ит еҫе килә ине. Бер ни тиклем ул соҡор тирәләй әйләнеп, уның сит-ситен бик ентекле еҫкәп, тикшереп сыҡты. Соҡорға төшә торған һөҙәк ерен тапҡас та, тәмле еҫкә төшөргә баҙнат итмәй, уның ситендә тора бирҙе. Аслыҡ асҡа дуҫ түгел шул. Ул үҙ аҙымын яһарға мәжбүр итте арҡаһы күк бүре балаһын. Һәр аҙымын, һәр үләнде еҫкәй-еҫкәй бик һаҡ, ян-яғына ҡарай-ҡарай төштө ул тәмлекәс ит янына. Итте айырып-айырып, әле генә ярайһы уҡ үҫешкән ҡырҡма тештәре менән өҙөп, ҡомһоҙланып ашай башланы. Тартты ла йолҡто. Ҡырҡты ла өҙҙө ул. Эсе кәпәреп бүлтәйгәнсе ашаны. Билдәле, был уның тәүге тапҡан аҙығы ине. Алпан-толпан атлап яр өҫтөнә сыҡты. Елгә ҡаршы тороп, һауалағы әллә ниндәй ят еҫте еҫкәне. Үләнгә ятып ләззәтләнеп тумаланы, ауыҙын ышҡып-ышҡып үләнгә һөрттө.

Шул саҡта уға, өрә-өрә ырылдап, өс эт ташланды. Ятҡан еренән саҡ-саҡ тороп өлгөрһә лә, башҡаса хәтирәгә аңы томаланды. Ике-өс минутта өс ҙур эт өҙҙөләр ҙә йолҡтолар. Йәнен ул, ике минут та үтмәгәндер, фиҙа ҡылған ине инде. Эттәр уны талап арығанда, кәүҙәһе сисеп ергә ташланған иҫке тун кеүек ята ине.

Таң атып яҡтырғас, көтөү сығарғанда көтөүселәр таланып, таушалып бөткән бүре балаһының үле кәүҙәһенә тап булдылар. Кәңәшләштеләр, һөйләштеләр. Уны эттәр тотоп талап үлтергәнен белделәр. Тимәк, яҡын-тирәлә бүре ояһы һәм уның башҡа көсөктәре лә бар, тип фаразланылар. «Көсөктәре тамам ҙурайып алһа, беҙгә тыныслыҡ бөтә. Башмаҡ түләүҙән баш сыҡмаҫ. Анау ҡаялыҡтарҙалыр инде

ул ояһы», – тине береһе. «Эйе, элек Ишмөхәмәт ағай менән Ғәйфулла ағай шунан алалар ине шикелле бүре көсөктәрен, – тине икенсеһе. – Был турала етәкселәргә әйтергә кәрәк, район һунарсылар ойошмаһына еткерһендәр. Юғиһә, хеҙмәт хаҡы алыу урынына, бурысҡа батып, эшендән бушатылыуың ихтимал». Шундай ҡарар сығарҙы мал бағыусылар.

Бүреләр иҫәп-хисапты белмәһәләр ҙә, һәр саҡ шыңшып ҡаршылай, һәр саҡ эйәреп ҡаңғыртҡан теремек, ҙур көсөктәренең юҡлығын иртә таңда ҡайтыу менән белделәр. Ике бәләкәйерәк инә көсөк аталары Боғаҡтың ауыҙындағы йөнлө итте тартҡыслағанда, Тупыс «күк көсөк»төң киске юлына төшөп, байтаҡ ара үткәйне инде. Төшкә ҡайтыуға әле иртә булғанлыҡтан, башмаҡтар йәйләүе буш ине. Тупыс, көсөгөнөң беленер-беленмәҫ еҫле эҙен ҡыуып, униң таушалып, үлеп ятҡан емтеге янына килде. Еҫкәне лә еҫкәне ул көсөгөн. Уны үлтереүселәрҙең еҫтәрен дә аңына һеңдерҙе, һәр хайуан, һәр эт, башҡа төрлө йән эйәләренең дә тик үҙҙәренә генә хас еҫе була. Бер кешенең еҫе менән икенсе кешенең еҫе тура килмәгән кеүек, һәр ҡыр кәзәһенең, һәр бурһыҡтың, мышының үҙ еҫе бар. Тупыс, уның өсөн йәлләттән дә йәлләт был эттәрҙең эҙен еҫкәп, көтөүселәрҙең буш торған таҡта өйөнә барып та етте. Уның аҫтынан бер эт сыйылдай-сыйылдай сығып ҡасты. Кәртәне урап ҡасҡан был енәйәтсене, уға ҡаршы сығып, һә тигәнсе әләктереп тә алды. Тыуһа, бәлки, шунда тәүләп тыуғандыр аяуһыҙ йыртҡыслыҡ хисе Тупыста.

Көсөн йәлләмәй, дошманын аямай таланы Тупыс. Уны быуып үлтергәс, тешләп, һөйрәткән ерҙә һөйрәп, күтәргән ерҙә күтәреп шырлыҡ эсенә керетте лә айырғыслап ашаны.

Был тиклем ҡыҙғаны, был тиклем хисләнгәне юҡ ине Тупыстың. Әлегә тиклем алған барлыҡ йән эйәһен ул нисектер ашарға кәрәк булғаны өсөн асығыуын баҫырға йә булһа көсөктәрен ашатыр өсөн тәбиғи булмыш тип ҡабул итте, буғай.

Ә бөгөн ул тәүләп йыртҡыс булды. Ашау талабы ғына булманы Тупыста – ул дошманын ашағыһы килде! Әйтерһең дә, был яуызды ашаһа, күҙҙәре уйнап торған етеҙ, ҡарпаҡ ҡолаҡлы «күк көсөк» ҡайҙандыр терелеп килеп сыға. Тиҙерәк, тиҙерәк һоғалап, һөйәктәрен дә шатыр-шотор онтап йотоп бөтөргә кәрәк уны! Туйҙы Тупыс, эсе кәпәйгәнсе туйҙы. Ҡалған емтекте тешләне лә тауға, ҡаяларға юртты. Был ваҡытта артта, шырлыҡ аръяғында, ҡыңғырау ҡыңғыраны, эт өрөүе, сыбыртҡы шартлауы ишетелде. Көтөүсенең ситкә тартҡан малға йән асыуы менән насар орош ҡысҡырғаны ишетелә. Төшкө ялға ҡайта ине көтөү.

Икенсе көн шарлыҡ аръяғында малдарҙың өйкөмләшеп үкергән еренә барғас, Ғәбделхәй ҡанлы үләнде, ситтәрәк этенең башын, ҡойроғо ятҡанын күреп бик шомланды:«Тимәк, – тип уйланы ул, – бүреләр бөгөн үк үс ала башланы. Былай булһа, көт тә тор, төндә йоҡо йоҡо булмаясаҡ». Әлегә тиклем ул ҡайһы ваҡыт малдарын яртышар көн ҡалдырып, күрше ауылға барып, йомшарып та килгеләй ине. «Ә хәҙер ун минут та ҡалдырып китеп булмаясаҡ малдарҙы. Ҡыҫҡаһы, хәҙер үк малдарҙы бикләргә лә дүрт мөйөшөнә ҡайҙа фуфайка, ҡайҙа тоҡ, сепрәк элеп, үҙәк утарға сабырға. Бүреләрҙең, кү-ү-ү-п бүреләрҙең көтөүгә һөжүм иткәнен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирергә. Тиҙерәк, тиҙерәк бүреләрҙең ояһына һунарсылар саҡырырға».

Тупыстың тормошонда көтмәгәндә көсөгөн юғалтыу, өҫтәүенә, көпә-көндөҙ кеше йәшәгән өй янында эттәрен тотоп ашау, нисектер, үҙ ағымы менән барған тормошона шөбһә шаңдауы булып килеп керҙе. Ҡалған көсөктәре лә инде ярайһы уҡ ҙурайҙы. Һөт тештәре төшөп, ҡырҡма тештәре лә ап-аҡ булып яртылай ҡалҡып сыҡты. Шуғалыр ҙа инде, тәбиғәтенең эске бер ырымына буйһоноп,

көндәрҙән-бер көн ике көсөгөн эйәртеп, тауҙан ялан яҡҡа сығып, Боғаҡтың элекке ояһы йүнәлешендәге ҙур арыш баҫыуы эсенә килеп керҙе. Таныш ер бит. Йылға ла йыраҡ түгел. Шырлыҡ өҫтөндәге бүре емеше, эт мороно – гөлйемеш – һәм тубылғы менән ҡапланған ярҙа Боғаҡтың бала саҡтағы ояһы ла йыраҡ түгел. Әле баш ҡоҫоп, башаҡтарына һөтлө бөртөктәр тултыра башлаған киң баҫыуҙың иге лә, сиге лә юҡ кеүек. Арыш һабаҡтары оҙон сәнскеле ялпаҡ башаҡтарын елдә еңелсә һелкетеп, бөтә баҫыу өҫтөндә эйелмәле-бөгөлмәле ҙур тулҡын барлыҡҡа килтерә. Бында бигерәк тыныс булмаҡсы, һис бер йән эйәһенең ашлыҡ эсенә кермәйәсәген һиҙемләне Тупыс. Ике көсөгө менән ике көн ятты ул арыш араһында. Көсөктәр яңы тормош шартына өйрәнде. Тышҡа, яланға сығыу йүнәлешен белделәр. Инәләренә эйәреп ағын йылғасыҡҡа барып һыу эстеләр. Ә Тупыс Боғаҡты көттө. Көттө лә көттө ул, ә Боғаҡ юҡ та юҡ. Юҡ та юҡ...

Тупыс көсөктәрен ялан яҡҡа алып киткән көндөң кисенә, һәр бер ташлыҡ өңөн, ҡыуышлыҡтарҙы ҡарай-ҡарай, ҡулына мылтыҡ тотҡан ике кеше оялыҡҡа килде. Арттағыһының ҡулында бауға бәйләнгән һалбыр ҡолаҡлы ҙур ала эт тә бар ине. Таптылар улар Тупыстың ояһын. Уның эсен, тирә-яғын бик ентекләп тикшерҙеләр ҙә, үҙ-ара кәңәшләшеп, таралдылар.

Боғаҡ Тупыс көсөктәрҙе эйәртеп киткән кистә ҡайтманы. Дөрөҫөрәге, һәр тапҡан аҙығын көсөктәренә алып килеп, үҙе ашамай аслы-туҡлы йөрөп, ярайһы уҡ ябыҡҡайны. Әгәр һунар, дөрөҫөрәге, эҙләнеү, уңышлы булып, үлгән мал табып, ояға ҙур киҫәк алып ҡайтҡан хәлдә лә, көсөктәрҙән башҡа уларҙың инәһе лә бар бит әле. Көсөктәрҙән ит артып ҡалһа, уны Тупыс ашай. Был осраҡта ул ситкәрәк китеп ята. Тупыстың ырылдауынан янтая. Үткән төндә ул йыраҡтағы сусҡа фермаһынан алыҫ  түгел соҡорҙа күп ит тапты. Иҫкермәгән, йомшаҡ. Тиҙерәк ҙурыраҡ киҫәкте тешләп ояға юлланыу теләген еңеп, туйғансы ашаны. Һис бер кем ҡамасауламаны. Шуға ла соҡорҙан ике саҡрымдай алыҫлыҡтағы ҡуйы шырлыҡ эсендә көн үткәрҙе. Кис ҡараңғы төшкәс, ул тағы ла килде соҡорға. Тағы ла ашаны. Унан ҙур бер киҫәкте айырып алып, уңайлы итеп тешләне лә, башын юғары күтәреп, ояға, көсөктәренә, юртты. Таң атып яҡтыра башлауға килеп етте ул ҡаялағы ояһына. Төндә еңелсә генә ямғыр яуып үткән. Шикле һис бер сит еҫ беленмәй. Ғәҙәттә, ул ояға килеп етергә утыҙ-ырҡ аҙым ҡалғас, ауыҙындағы табышын ергә һалып, сыйылдау, мырҡылдау кеүегерәк ырылдағандай була. Уның тауышын ишетеп, көсөктәр шунда уҡ кемуҙарҙан болашып уға сабып килеп етәләр. Тимәк, ояла бөтәһе лә тыныс, бөтәһе лә теүәл. Шулай ҙа ул табышты бында бирмәй. Тартҡылашҡан көсөктәргә янап, көслө тауыш менән «р-р-рр»ҙы ишеттерә лә, табышты тешләп, оя янына уҡ килтереп бирә.

Шул алымдары көсөктәренә һабаҡ, үҙ тәбиғәттәренең ҡанун-ғөрөфтәрен өйрәтеү булды. Ашаталар, дөрөҫөрәге, ҡасан, ҡайҙа, нисек туҡланыу ҡағиҙәһен уҡыталар. Тупыс та шул уҡ алым менән ашата көсөктәрен.

Һәр ваҡыттағыса, бөгөн дә ул ояға етер алдынан табышын ергә һалды. Тауыш бирҙе. Әммә уға һис берәү яуап бирмәне, янына ла килмәне. Боғаҡ эске һиҙемләүе менән ниңәлер һағайҙы. Күңеле шулай ҡуша ине. Шулай ҙа түҙмәне, тағы ла тауыш бирҙе, һис бер кем яуапламаны. Хәҙер, хәҙер үк оҙон-оҙон атылып был хәүефле урынды ҡалдырырға боролоуы булды, өҫтән, ҡая араһынан, мылтыҡ гөрһөлдәне. Ҡаршыһындағы муйыллыҡ эсенән дә шартлау булды, һауаға һикергән ваҡытында ҡабырғаһына йәҙрәләр батты. Ергә ул үле төштө. Шулай тамамланды алтыһы үтеп, етегә киткән Боғаҡтың ғүмере. Ә Тупыс уны арыш

араһындағы яңы ятыуында һаман көттө лә көттө. Тағы ла ун көн үтеүгә, кис, ҡараңғы төшкәс, Тупыс көсөктәрен эйәртеп, тәүләп арыш араһын ҡалдырып, ситкә һунарға сыҡтылар. Эйәртеп алып сыҡты, тип әйтеү дөрөҫ тә булмаҫ, сөнки улар хәҙер инәһе ҡыуһа ла ҡайтмайҙар, ҡайтыр өңдәре лә юҡ. Шулай ҙа ситкә, йыраҡҡа китмәйҙәр. Йомран, сысҡан, ҡош балалары менән туҡланалар ҙа яҡтырыуға тағы ла шул арыш араһына кереп яталар. Көндәрҙән бер көн баҫыуҙың ике яғынан ике шаулағыс йөрөй башланы. Башта уларға иғтибар итмәһәләр ҙә, геүелдәгән, шаҡылдаған, дырылдаған тауыш яҡынайғандай булғанға, улар төпкәрәк кереп яттылар. Кискә тиклем туҡтамай шаҡылданылар. Тауыштар хәҙер бик яҡынайҙы. Ҡайҙа туҡтап ятһалар ҙа, тауыш етә килә. Ҡараңғы төшкәс, улар әллә нисә ут яҡтыртып баҫыу тирәләй йөрөүҙәрен дауам итте. Таң булғас, шау туҡтағас, Тупыс түҙмәне: һаҡлыҡ һаҡлап арыш араһынан сығып китте. Кешеләрҙең һөйләшкәне, даңҡ та доңҡ һуғылған металл тауыштары яҡын ғына булғанлыҡтан, көсөктәр был ерҙе бик ныҡ йәшеренә торған ер тип, ситкә сығыуҙан ҡурҡып, инәләренә эйәрмәне. Йәшлек, һолһоҙлоҡ, ауанлыҡ яҙмыштарың хәл итеүен әле белмәйҙәр ине.

Иртәгәһен ҡояш күтәрелеү менән, яҡында ғына дөрөлдәү тағы башланды. Төш етеүгә көсөктәр йәшеренгән ер тар, оҙон таҫмалай ғына булып ҡалды. Ике яҡтан ашлыҡ һуғып килгән ике комбайн, ҡара-ҡаршы килеп, көсөктәрҙе бөтөнләйгә ҡыҫырыҡлап, ус аяһындай ергә уларҙы ҡаманы. Ян-яҡ ап-асыҡ. Ҡайҙа ҡасырға белмәне ауан көсөктәр. Шул саҡта комбайндан: «Бүре! Бүре!» – тип ҡысҡырыша-ҡысҡырыша кешеләр йүгерешеп төштөләр. Һәр береһенең ҡулында йә оҙон тимер, йә һәлмәкле балға ине. Ян-яҡтан ҡамауға алынған көсөктәр, үҙ ғүмерҙәрендә күрмәгән ике аяҡлы бейек йән эйәләренән ҡоттары осоп, бер-береһенә һырыға биреп, ап-аҡ, әле генә үҫешеп килгән тештәрен ыржайтып, йән эйәләренә ырылдауҙан башҡа ҡаршылыҡ күрһәтә алмайҙар ине. Әле улар йүнле-барлы тешләшә лә алмайҙар. Шаулап ҡысҡырып килгән береһе оҙон тимер менән көсөктәрҙең ныҕыраҡ ырылдаған кеүегенең башына һуҡты. Йәш, әле ныҕынып, ҡалынайырға ла өлгөрмәгән бала һөйәк сартлап һынды, хатта көсөктөң һул күҙе килеп сыҡты. Ул шунда уҡ йән бирҙе. Икенсеһенә, бәләкәйерәгенә, ауыр балғалар, бәләкәй ломдар осто. Әммә ул, етди үк булмаған бер һуғылыу алып, ҡамылдар аша һикерә-һикерә, күҙе төкәлгән яҡҡа йәнфарман ҡасты. Бәләкәй генә көсөктөң ҡурҡыуы сиктән ашҡан ине.

Баҫыу яланы киң, оҙон. Уның арьяҡ ситендә, ҡарайып, уға таныш шырлыҡ һуҙылған. Шул йүнәлешкә ҡаса ине көсөк. Уның артынан еңел автомашина төшкән. Еткәндән-етә ул уға. Еткәндән-етә. Ә көсөккә тиҙерәк, тиҙерәк алдағы ҡуйылыҡҡа сумаһы ине. Шырлыҡ ситендә кәбәнен ослап бөтөп барған кеше үҙҙәренә табан елдереп, алғы фараларын бер яҡтыртып, бер һүндереп килгән УАЗ машинаһын күреп, оҙон йыуан ағас ос һәнәген ҡулына алып, шаҡ ҡатты. Етмәһә, бер туҡтауһыҙ тауыш бирә. Ни булды, тип ипләберәк алға ҡараһа, үҙенә туп-тура сабып килгән бәләкәй бүрене күреп ҡалды. Ҡасаҡтың кәбән төбөнән үк сабып үтәһен төҫмөрләп, уның артына йәшеренеп, һуғыр һуйылын әҙерләп көттө. Йәш, хәйләһеҙ көсөккә кәбәнде әҙ генә ситкәрәк ҡалдырып үтәһе ине лә бит. Биш, дүрт, бик тә булмаһа, өс аҙым ситтән үтһәсе! Йәнлек кәбән ашаһынан килеп тә сыҡты, ауыр ҡаҡ һәнәк бил һөйәген өҙә лә һуҡты. Шул арала машина килеп етеп, көсөктө тапап та үтте...

Был тормошта һәр йән эйәһенең шәхси хаҡ яҙмышы бар. Шәхси яҙмыш – ул

ғаилә яҙмышы. Ауыр тормош ағымы бер ғаиләне лә урап үтмәй. Бай, етеш ғаиләләрҙең яҙмышы ғибрәтле һәм фажиғәле була. Ғәйепһеҙҙәр ғәйепле булып, фажиғәле үлемдәре бигерәк аяныслы. Ғәйепһеҙҙәр ниңә һуң ғәйепле был донъяла? Барлыҡ йән эйәләренең үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә бер хәҡиҡәт ҡанун бар: кем көслө, шул хаҡ. Ғәйепһеҙҙе һәм ҡурсаулыҡһыҙҙы үлтерһә, язалаһа, мәхшәр итһә лә, көслө хаҡ. Шуға ла халыҡ «Көслөнөкө – замана» тигән. Көсөктәре эстә ҡалған, ә ян-яғы урылып асыҡланған арыш баҫыуына һәр төн килде Тупыс. Тик эскә, арыш араһына, керә торған йүнәлештә май, ҡыҙған тимер еҫен аңҡытып әллә ниндәй ике-өс ҡараҫҡы тора. Тауыш биреп саҡырып, сыйылдап, һулҡылдап ҡараһа ла, ишетмәне уны балалары. Өҫтәүенә шул яҡта ат бышҡырғаны, кеше һөйләшкәне, эт өргәне ишетелә. Оҙаҡ, оҙаҡ ятты ул иген баҫыуы ситендә. Әммә бер аҙым да кермәне – ҡурҡты. Үҙен һаҡлау һиҙемләүе алға аҙым яһатманы. Урылмай күп тә ҡалмаған арыш баҫыуы эсенә керһә, төн ҡараңғылығында көсөктәрен, һис шикһеҙ, эйәртеп алып сығыр ине лә бит... Юҡ шул. Ғаиләһенең тәҡдире шулайҙыр. Шулай икенсе ғаиләһен дә юғалтты Тупыс.

Комбайндар киткәс, был баҫыуҙың һәр аҙымын тиерлек тикшерҙе, эҙләне Тупыс. Ике көсөгөнөң дә үлтерелгән урынын тапты. Үлән япраҡтарына, ҡыяҡтарға ҡатҡан ҡан еҫтәрен бик оҙаҡ еҫкәне. Унан шул тирәне тағы ла эҙләне. Үле кәүҙәләрен дә таба алманы. Таба ла алманы, ситкә лә китмәне был мәхшәр ерҙе ташлап. Ун – ун биш көн булғандыр, һәр кис, һәр таңда бошоноп һыҡтай-һыҡтай олоно ла олоно Тупыс. Тик уға йыуан Боғаҡ та, көсөктәре лә килмәне. Уның саҡырған тауышына, гүйә, көсөктәре сүкәйә биреп, ҡойроҡтарын болғай-болғай болашмаҡ сабышып килеп, һөт тулған елененә йылы, йомшаҡ томшоҡтарын терәп имергә керешкән кеүек тойолдо. Шуға ла ул ергә ләж ятып та ҡараны. Көттө. Әммә берәү ҙә йомшаҡ тәпәйен күкрәгенә терәмәне.

Егерме көнләп үткәндер. Тупыс һаман шул төбәкте ташлай алманы. Көсөктәрен эҙләне. Әммә тамам төңөлөп, тауҙағы ояһына Боғаҡты эҙләргә китте. Исмаһам, Боғаҡ килеп сыҡһасы. Ғүмер итеү бер ни тиклем еңеләйеп ҡалыр ине лә бит. Һәр ташты, һәр ҡаялыҡты, тирә-йүнде эҙләне. Әммә көсөктәренең дә, Боғаҡтың да еҫе лә, эҙе лә юҡ. Тик ташлыҡ ҡаршыһында туҙып ҡаҡ аҡ һөйәктәр, үҙҙәре ҡалдырған иҫке тиҙәк еҫе генә, ниндәйҙер үҙенеке, ғаиләһенеке булыуын иҫбатлап, йәненә йылы бирә ине. Кис һәм танда ҡаялыҡ түшенә ултырып, һарһылтып-һарһылтып тағы ла олоно ла олоно. Әммә уға һис бер яуап булманы. Шулай тағы ла янғыҙ ҡалды Тупыс. Һуңғы айҙарҙа көсөктәренә албырғап, үҙ ояһынан алыҫҡа китмәүе лә Тупыс өсөн отошло булды. Тупыстың ояһынан 30 – 35 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан нәҫелдәре араһында ҡырғын-мур сыҡты. Береһен дә аяманы. Тирә-яҡта илле, хатта йөҙ саҡрым алыҫлыҡтағылар ҡырылып-үлеп бөттө. Ауырыу төлкөләрҙән башланды. Сөнки һаҡһыҙлығын юғалтҡан ҡоторған төлкөләр һунарҙа йөрөгән бүреләрҙең ауыҙына үҙҙәре керҙе. Барлыҡ тирә-йүнгә дәһшәтле сир таратты.

Тупыс көҙгә тиклем ғүмерен ояһы тирәһендә үткәрҙе. Берәү ҙә уға теймәне, ул да кешеләрҙең бер баш малын да йыҡманы. Ә уңайлы ваҡыттар булды. Байтаҡ булды. Ғәҙәте буйынса, ояға ҡуян, ҡош, йомран, башҡа ит тә килтереп ҡараны, әммә ҡаршы сығып, ауыҙынан тартып алыр көсөктәре булманы. Ахырҙа, үҙ тамағын туйҙырҙы.

Көҙ етте. Көндәр ҡыҫҡарҙы. Төндәр оҙон һәм һалҡынға әйләнде. Көнбайыштан тауҙар ҡыйыға тота алмаған болоттар Тупыстың ояһы урынлашҡан ҙур,

оҙон армытҡа килеп етә лә ултырып яуа ла яуа. Тамағы туҡ булһа, бындай көндәрҙә ул йөрөмәй. Түбәнгә һәленеп ҡыуыш ҡорған шыршы ағасының аҫтына кереп ята. Унда ҡоро, ел дә үтә һалмай. Ер өҫтө туңып, ҡар ятыр алдынан Тупыс, ояһын ҡалдырып, күңеле тартҡан яҡҡа сығып китте. Ояһынан китер алдынан, уның менән хушлашҡандай, тағы ла бер тапҡыр тирә-яғын еҫкәп йөрөп сыҡты. Тейешле урындарға һарып, үҙ билгеһен ҡалдырҙы. Талсыҡты, бик тә талсыҡты ул яңғыҙы.

Әле тәүге ғаиләһе, балалары атаһы менән һунарға таныш түгел ергә барғайны улар. Ул яҡта ла һәр төрлө мал көтөүҙәре күп күренде. Ҡырлас-ҡырлас тауҙар ҙа, тонйорап ятҡан күлдәр ҙә, ҡамышлы һаҙырандар ҙа бар ине. Ике-өс көн яйлап өйрәнеп, кәрәк икән, тыныс урындарҙа ял итеп, шул йүнәлешкә китте ул. Һәр кис һайын йә иртә танда, йә һуҙып моңланып, йә һулҡылдай-һулҡылдай олоно, тик һаман да берәү ҙә яуап бирмәне. Юлға сығыуына аҙна үткәндер. Әле ул алда ҙур, мөһабәт булып күренеп торған ҡырлас тауҙың ҡаршыһындағы сауҡалыҡтар араһында көндәр буйы ҡыр кәзәләрен аңдый. Таяҡ аяҡтарҙы ҡар юҡта ҡыуып тотоп булмай. Шуға ла ул ҡыралыҡтар араһындағы тәрән шахталарҙың араһында ятҡан кәзәләргә ҡапыл ташланыу мөмкинселеген һағалай. Бер үҙе булғас, төнгө һунарға бик үк мәшғүл булып китмәй. Ял итә. Бөгөн көндөҙ ул кеше еҫе сыҡмаған эт эҙен осратты. Унан тик эт еҫе генә килә. Ғәҙәттә, һәр эттән, үҙ еҫенән башҡа, сөсөрәк кеше еҫе лә аңҡып тора торған ине. Ә был эттән кеше еҫе килмәй. Дөрөҫөрәге, эттең эҙенән кеше еҫе килмәй. Таң һайын ул ултырып олой. Әммә һаман да уға яуап биреүсе юҡ. Был ер Тупысҡа оҡшаны. Бөгөн ул ҙур һаҙлыҡтың эсендәге түпһәлдә нәҫелдәштәренең элекке ояһын тапты. Оя тип әйтерлекме әле? Һаҙлыҡтың ҡороҡ бейеклегендәге төрлө фиғелдә ятҡан эреле-ваҡлы таштар, төбө-тамыры менән аҡтарылып арҡыстороҡ ятҡан эре-эре ҡарағай-ҡайындар. Бер нисәүһенең ер менән тамырҙары бергә аҡтарылып, ҡыуышлыҡ-ҡырышлыҡ барлыҡҡа килгән. Шулар аҫтында булған оялары.

Ямғырҙа һәм эҫелә кереп ятыр өсөн шыршылыҡ та етерлек. Көсөктәре тарафынан өҙөп-йолҡолған йә тешкәкләп иҙелеп бөткән тамырҙары ғаилә тормошо тураһында байтаҡ мәғлүмәт бирә. Яңы бер ниндәй ҙә еҫ юҡ. Был ғаилә ауырыуға дусар булып йә оянан ситкә китеп үлгән, йә бөтәһе лә бер юлы һунарсылар табышы булған. Сит оя булһа ла, шунда туҡтар булып китте Тупыс. Ер туңды. Бурап-бурап көслө ел-дауыл менән өс көн ҡар яуҙы. Оҙаҡ яуһа ла, өҙөк-һурыҡ булды ул. Шуға ла тәрән көрт барлыҡҡа килмәне.

Өс көн ятҡандан һуң, дүртенсе көн кис буран туҡтағас, Тупыс һуҙып олоно, һәм ҡапыл ел уға ҡибла яҡтан күптән көткән тауыш еткерҙе. Тыңланы. Тағы ла олоно. Уға яуап бирҙе буласаҡ иптәш. Әммә Тупыс уның тауышында сит ауаздар ишетте. Тауыш уны саҡырамы, әллә тик урынын билдәләйме? Әллә ул Тупыстың кем икәнен һәм ҡайҙалығын белергә итәме? Ниндәйҙер ҙур шик-шөбһә лә апасыҡ уның яуабында. Тауыш бер нисә тапҡыр яуапланы ла тынды. Оҙаҡ көттө Тупыс уның тағы ла тауыш биреүен. Ә ул булманы. Шуға ла тауыш йүнәлешенә үҙе китте. Ҡыралыҡ түбәләре араһындағы соҡор-саҡыр менән бара торғас, кисә кис үткән, кеше еҫе сыҡмаған эт эҙен осратты. Күрәһең, был эт бында ҡайҙа көн һайын, ҡайҙа көн аша һәр ваҡыт килә. Сөнки һуҡмағы ла иҫке, тапалып ҡатып бөткәйне. Шул һуҡмаҡ менән эт еҫен еҫкәй-еҫкәй кире йүнәлештә бара торғас, ҡапыл ҙур соҡор янына килеп сыҡты. Уның тирә-яғы тапалып, эт тарафынан

һарып та, тиҙәкләнеп тә бөткән ине. Тирә-йүнен һәм соҡор эсен ситтән, өҫтән генә еҫкәне лә еҫкәне ул. Оҙаҡ торҙо, арлы-бирле йөрөнө, һәр нәмәне тикшерҙе. Һис бер шикле нәмә беленмәй ине. Эт эҙенән һәм соҡор төбөндә туңып шаҡайып ҡаткан емтек кәүҙәһенән башҡа һис сит еҫ тойолмай. Бүрелә тәүге тапҡанда емтеккә тейеү ғәҙәте булмаһа ла, һис бер шикле билдә булмағас, тәүәккәлләне Тупыс. Ҡаты көрт тулған ярайһы уҡ текәлектән эт кереп-сығып йөрөгән. Тупыс та бик ҙур һаҡлыҡ менән шул текәнән түбәнгә төштө. Геологтарҙың ҡасандыр ҡаҙған тәрән соҡорона төшөп үлгән мышы булып сыҡты. Эт уны байтаҡтан тапҡан булһа кәрәк. Алғы һаны, арҡаһы, муйынының һум иттәре байтаҡ кимерелгән. Әммә көрткә күмелгән арт яғы бөтөн.

Ашыҡмай, яйлап кимерҙе лә кимерҙе Тупыс. Тартҡыслай торғас, ҙур ғына киҫәктәрҙе лә айырып алғылай. Был осраҡта ул ит киҫәген соҡорҙан сығарып ашай. Төн ҡараңғылығы уны ышаныслы йәшерһә лә, тирә-йүнде еҫкәй, ҡарай, тыңлай. Таң беленә башлағас, килгән яғына кире китте. Шулай ике көнгә бер килеп, туйғансы ит ашап, аҙна-ун көн ваҡыт үтеп китте. Соҡорға ул йә кис ҡараңғы төшкәс, йә таң алдынан килер булды. Әммә ҡайһы бер килеүенә ит кимерелгән була, һәм шул уҡ эттең еҫе ҡала торғайны. Хәҙер ул был ит еҫенә күнегеп тә бара шикелле. Әллә нисә йөҙ башҡа еҫтәр араһынан шул кеше еҫе сыҡмаған эттең эҙен айыра алыр ине. Әммә һис осраша алманылар. Күрәһең, эт көндөҙ килә һәм һирәкләп. Аҙнаһына өс, хатта ике тапҡыр ғына. Хәҙер Тупыс таңдарын оломай, берәүҙе лә саҡырмай, ғүмере үҙ үҙәне менән аға. Тамағы туҡ, тирә-йүнде лә өйрәнеп бөттө кеүек. Был яҡта һис машина-трактор кеүек техника йөрөмәй. Тик ҡайҙандыр һәр саҡ ҡар ҡаплап өлгөргән тар ғына ат санаһы юлы йыраҡҡа, Тупыстың килгән яғына, йүнәлә. Ул юл менән дә йөрөп ҡараны Тупыс. Ҡайһы ваҡыт, ат санаһына эйәреп, таныш еҫле шул эт тә киткән була.

Ҡыш уртаһы ла етте. Тупыс әҙер итте ашап һимерҙе. Ыҫпайланды. Көндәрҙән бер көн ул, көндәр оҙонайа башлағас, соҡорға һуңлабыраҡ килде. Ҡатҡан кимерер ит аҫта булғанлыҡтан, оҙаҡ мәшәҡәтләнде соҡорҙа. Бөтөнләйгә яҡтырҙы. Ҡояш та тәүге нурҙары менән түбәлек өҫтөндәге бейек ҡайындарҙың осон ҡыҙыл-көрән буяуға мансылдырҙы. Шатыр ҙа шотор ит кимереп ятҡан Тупыс, арҡаһына кемдеңдер күҙ нур төшөүен һиҙемләп, артына боролоп ҡараны. Өҫтә, соҡор ситендә, ҡолаҡтары һалбыр ҙур һоро эт уға ҡарап тора ине. Сит бауыр килеүен күреп, итен ҡыҙғанып, ғәҙәте буйынса, унан ҡурҡырға тейешле һәр йәнде тотоп быуырға күнеккән Тупыс ҡапыл эткә ташланды. Ә эт ҡурҡманы ла ҡуйҙы. Соҡорҙан сабып килеп сыҡҡан бүрене күкрәге менән һуғып, кире соҡорға осорҙо. Күпте күргән, үҙ ғүмерендә күп йәнлек алған, бермә-бер бүре менән дә айҡашҡан бик ғәйрәтле һунар эте ул. Хужаһы уға Дуҫбай тип исем биргән. Нимә уйлап Дуҫбай тип исем биргәндер, уны әҙ һүҙле, кеше менән аралашып уҡ бармаған Шәйхетдин үҙе генә беләлер. Дуҫбай үҙ ғүмерендә сит нәҫелдәшен, бигерәк тә кәнтәйҙе күргәне булманы. Сөнки ул хужаһы менән тауҙар араһында иң яҡын ауылдан утыҙ саҡрым алыҫлыҡта бына инде етенсе йыл ғүмер кисерә. Ҡасандыр бында ауыл булған. Ә хәҙер тәҙрәләре бәләкәй генә йылғаға ампайып ҡарап ултырған Шәйхетдиндең өйө һәм аҙбар-ҡураһы ғына бар.

Был бүренән, ят булһа ла, бик тәмле, ымһындырғыс еҫ бәрелде Дуҫбайҙың танауына. Ә соҡор эсенә осоп төшкән Тупыс көс, ғәйрәт һиҙҙе был эттә. Шуға ла улар бер береһенә башҡаса ташланманы. Соҡорҙан сығып, Тупыс үҙ юлы менән китте. Әммә йөҙ аҙым да үтмәне, туҡтаны, этте күҙәтте. Дуҫбай ҙа соҡорға төшмәне, кире боролдо. Шулай осрашып таралыштылар улар тәүге тапҡыр.

2

Дуҫбайҙың әйәһе Шәйхетдин һуғыш башланған айҙа уҡ фронтҡа алынды. Бөгөнгө йәшәгән өйө нигеҙендә торған йортта биш һәм ете йәшлек малайҙары менә ҡатыны ҡалды. Оло ҡыҙы, Хәлиҙәһе, атаһына һуғышҡа китергә повестка килгән көн бал ҡорто күсе өҫтөнә ултырып сағылып, кинәт үлде. Ҡотҡара алманылар.

Һуғышҡа алыныу менән бер ни өйрәнеүһеҙ тура яуға керҙе Шәйхетдин. Август айынын эҫе бер көнөндә ауыр бәрелештән һуң ҡаты яраланып, ҡанһырап ятып ҡалды. Немец танкыһы уның башынан каскаһын, ҡарыштауығы менән эләктереп төшөрөп, тапап үтеп китте. Ә башына теймәне. Бер йәки ике сантиметр етмәгәндер. Иҫенә килгәндә уны ике немец һалдаты ике ботонан тотоп һөйрәп алып баралар ине. Үлектәрҙе йыяларҙыр, мин дә үлгәнмен икән, тигән уй үтте шикелле башынан. Эйе, күбәләй-күбәләй итеп үлектәрҙе өйәләр. Саҡ ҡына тереләрҙе күреп ҡалһалар, шмайсер автоматы өйөлөп ятҡан үлектәрҙең тетмәһен тетә. Көс тапты Шәйхетдин, ул «үлде». Ни тиклем һыҙланһа ла, түҙҙе. Немецтар тамаҡ төбө менән киҫкен-киҫкен һөйләшәләр ҙә тағы ла ситкә китәләр. Ята-ята, тауыштары алыҫлашҡандан-алыҫлашып, һуңынан бөтөнләйгә ишетелмәҫ булды. Байтаҡ ятҡас, ыңғырашыусылар, ҡабырғаларына боролоп ятыусылар, хатта тороп ултырыусылар булды. Шәйхетдин дә борола биреп терһәгенә таянды. Ҡулдары һау. Ә салбар төбө, итек ҡунысы тулы ҡан. Күп тә ваҡыт үтмәне, тереләрҙе һәм яралыларҙы сүпләп, автомашинаға утын кеүек итеп бәргеслэп тейәп, ҡайҙалыр алып кителәр. Юлда үлгәндәрҙе ташлап, яралыларҙың яраларын бәйләп, киттеләр ҙә киттеләр. Ҙур лагерға килтереп, дауалау йортона урынлаштырҙылар. Унан тағы ла лагерҙар, һөйләп тә, яҙып та бөтөрөрлөк түгел дүрт йыл күргән михнәттәрен.

1945 йылдың майында лагерҙан уларҙы Америка һалдаттары ҡотҡарҙы. Ҡотҡарҙылар ҙа икенсе лагерға илтеп бикләнеләр, һәр кемгә яңы исем-шәриф биреп, ҙур караптың трюмдарына тейәп, океан аша Көньяҡ Америкаға алып киттеләр ҙә унда фермерҙарға таратып бирҙеләр. Ниндәйҙер бер ғилләә менән, ете йыл фермерҙарға бил бөккәндән һуң, карапҡа тейәлеп илгә ҡайтып төштөләр.

Илгә ҡайтып төштөләр ҙә ул төшөүен... Ләкин тағы ла бөтмәҫ һорау алыуҙар, яҙма күрһәтмәләр яҙа торғас арып, ялҡып бөткән Шәйхетдинде, уның кеүек йөҙәрләгәндәрҙе ҡарауыл аҫтында Ҡарағанданың күмер шахталарына килтереп, эшкә ҡуштылар. Тик 1956 йыл ғына ҡайтты ул тыуған иленә. Уға дан да, шөһрәт тә булманы. «Военнопленный» тигән һүҙ мәңгелеккә яҙмышына мөһөрләнде. Байрамдарҙа һуғыш яугирҙарын саҡырып табын ойошторғанда ла, уны саҡырманылар.

Ул ҡайтыуға ауыл киләсәкһеҙҙәр иҫәбенә кереп, таралып бөткәйне. Тик Шәйхетдиндең генә өйө бер үҙе етемһерәп, тәҙрә, ишек яңаҡтары ҡыйшайып, аҙбарҡураһы емерелеп, тын ғына ултыра ине. Көтөүселәр ҙә унда кереп йөҡламаны. Ен-пәрейҙәр оялаған, тип ҡурҡтылар. Батырланып алған береһе мылтығының көбәген тәҙрә аша эскә тығып атып та ебәрҙе. Ҡаршылағы таҫҡалыҡ өҫтөнә стенаға эленгән быялалы, рамлы ғаилә фоторәсеме салтыр итеп ватылып, иҙәнгә килеп төштө. Буш, һалҡын өйгә ҡайтып кергәс, иң алда ул иҙәндә туҙып ятҡан шул фоторәсемде күрҙе. Ҡулына алып, туҙанын һөртөп, ике сабыйына, ҡатынына ҡарап, күҙҙәренән мөлдөрәп йәше ағып, һулҡылдай-һулҡылдай иланы.

Ғаиләһенең, балаларының яҙмышын ул юлда уҡ ишеткәйне. Ер ҡарҙан әрселгәс,

балаларын нисек тә булһа астан үлтермәç өсөн, 40 – 50 саҡрымға ялан яҡҡа башаҡ сүпләргә барған Йәмиләһе, һалҡын тейҙереп, ҡаты ауырып, үҙ өйөндә ике бәләкәй улдарының күҙ алдында вафат булған. Һигеҙ һәм ун йәшлек ике малай, үкһеҙ етем булып, ҡараңғы һәм һалҡын өйҙә ҡалғандар.

Ул ваҡытта ауылда ҡарт әбейҙәр һәм бер нисә тол һалдат ҡатындары ғына бар ине. Аслыҡҡа сыҙай алмай, тамаҡ аҫрау өсөн балыҡ ҡармаҡларға тип йоҡа боҙ өҫтөнә менгән оло улы Хәким, яҙғы боҙ емерелеп, һыуға батты. Уға ярҙамға килерҙәй кеше булманы. Емерелгән мәкенән боҙ өҫтөнә сыға алмай, бик асырғаланып ҡустыһының исемен «Хәмит!» тип ҡысҡырып, күл төбөнә китте. Унын кәүҙәһен эҙләүсе лә, алып ерләүсе лә булманы. Мәңгелек йоҡлар ере Нарәле күле төбө булды. Ҡараңғы, һалҡын өйҙә Хәмит үкһеҙ етем ҡалды. Үҙҙәре аслыҡтан шешенер хәлгә етешкән кешеләргә артыҡ тамаҡ Хәмит кәрәкмәй ине. Кәрәкмәй тип әйтеүе лә дөрөç булмаç. Ун – ун биш кенә йорттан торған һәр өйҙә үҙҙәренә лә ашарға бер нәмә лә юҡ.

Был ауыл башҡаларға ҡарағанда төптә. 25 – 30 саҡрым алыҫлыҡта тауҙар араһында урынлашҡанлыҡтан, колхоз-фәлән ойошторолманы, халыҡ урман ҡырҡыу, һунар итеү, мал аҫрау, арба-сана һәм башҡа кәрәк-яраҡ әйберҙәр эшләп һатыу менән көн күрҙе. Ир-ат һуғышҡа китеп бөткәс, был шөғөлдәр туҡтаны. Ҡышҡылыҡҡа бесән сабып әҙерләр ҙә кеше булмағас, мал-тыуар ҙа ҡырҡа кәмене. Бик һирәк ғаиләләрҙә генә һауын һыйыр ҡалды. Ана шул һыйырҙарҙан ҡайһы саҡта Хәмиткә лә берәр сынаяҡ һөт эләгә торғайны. Бәхеткә күрә, яҙ иртә килде. Ауылда ҡалған бала-саға тау таш араһында таш йыуаһы – беттекәй сүпләне, әле бармаҡ башындай ғына булып сыға башлаған ҡуян кәбеҫтәһен ашаны.

Хәмиткә инәһе менән ағаһынан мираҫҡа үҙе ҡайтып, үҙе сығып китеп өйрәнгән бер башмаҡ ҡалғайны. Көндәрҙән бер көн ауылдың иң олоһо Хәсбиямал ҡәртинәй биш-алты ҡатынды эйәртеп килеп инделәр. «Бына, улым, – тип һүҙ башланы ул. – Кисә ауылда ҡалған өс һыйырҙың береһен ҡырҙа һуйып алып киткәндәр. Алтынтамаҡ, Мейәс ҡалаларындағы төрмә-лагерҙарҙан ҡасып урмандарҙа, тауҙарҙа бик күп ҡасҡылар йөрөй. Улар йә пленныйҙар, йә хеҙмәт әрмеһенең ҡасаҡтары. Улар ҙа ас. Һуйылған һыйырҙың эсәктәрен булһа ла барып алайыҡ тигән инек, унының кисә төндә бүреләр ашап бөткән. Башмағың күр генә. Инәйең менән ағайың уға ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләгәйнеләр. Ашап торған мал бит... Башмағың барыбер юғаласаҡ. Иҫән сағында бергәләп ауыл менән һуйып ашайыҡ. Исмаһам, һурпа эсеп ҡалырбыҙ. Ә һине ярынғы ҡышта күмәкләп ҡарап сығарырбыҙ...»

Хәсбиямал ҡәртинәйҙең хәбәренең төп мәғәнәһен төшөнмәне Хәмит. «Пленный», «лагерь» тигән һүҙҙәрен дә төшөнмәне. Ә бына ҡасҡыларҙы ул белә. Ҡасҡылар төндә килеп, ауылдан әтәс-тауыҡ булһынмы, һарыҡ-кәзә булһынмы, урлап алып китеп торалар. Кешеләр хатта һыйырҙарын да төнгә өйгә керетеп ҡуя. Сөнки башҡа мал-тыуар ҡалмағайны. Ә бына Хәмиттең ҡыҙыл Тарасына әлегә ниңәлер ҡулдары етмәне. Бер төндә килделәр улар Хәмиттең өйөнә. Иң алда ҡапҡа эсендә лыбыр-лыбыр һөйләшкән ир тауыштары сыҡты. Атаһынан ҡалған ҙур иҫке бишмәтте кейеп, урындыҡ аҫтына боҫто. Ҡапҡа эсендә лаптыр-лоптор йүгерешкән, һүгенгән тауыштар ишетелде. Шаҡ итеп ҡапҡа ябылды. Тауыштар бер көсәйә, бер тына биреп торҙо ла, дөбөр-шатыр ишек асылып, өйгә килеп керҙеләр. Керҙеләр ҙә һәрмәнеп эҙләнергә тотондолар. Ниндәйҙер ят телдә һөйләшәләр. Әллә урыҫса, әллә немецса. Тик Хәмит ҡайһы бер һүҙҙәрҙе генә аңлай: хлеб, картошка, огонь... башҡасаны ул белмәй. Барлыҡ мөйөш-ҡыйышты

һөйләнә-һөйләнә һәрмәп сыҡтылар. Стенаға элеүле шкафтан шалтыр-шолтор итеп тәгәс-сынаяҡтарҙы төшөрөп ваттылар. Мейес эсен асып ҡутарып ҡараһалар ҙа, бер осҡон да таба алманылар. Саҡмалары менән саҡта-саҡ һуҡһалар ҙа, ут сыҡманы ла, янманы ла. Ҡасҡыларға тоттормай сығып ҡасҡан Тарасты тағы ла урамға сығып баҫтырып ҡараһалар ҙа, тота алманылар. Төндә, ҡараңғыла яңғыҙ, һарайһыҙ ҡалған Тарас баҡыра-баҡыра ҡайҙалыр ситкә китте. Һүгенә-һүгенә кереп, тағы ла эҙләнеп, ашарға һис бер нәмә таба алмағас, Хәмиттең өҫтөнә, урындыҡҡа, ятып йоҡланылар. Өшөнө, туңды Хәмит, әммә ҡуҙғалырға ҡурҡты, ҡатты ла ятты. Оҙаҡ ятты ул. Урындыҡ аҫты һалҡын да, ҡайҙандыр ел дә өрә ине. Эсенә ел тулды. Сыҙар әмәл юҡ. Ниһайәт, таң ата башланы. Ҡасҡылар уның өҫтөндә, урындыҡта, тыныс ҡына мыш-мыш йоҡлайҙар. Түҙә алманы Хәмит. Тауышлы, оҙон итеп ел сығарҙы ла ҡуйҙы. Ҡапыл урындыҡ таҡталары шартлап китте. Ҡасҡыларҙың берәүһе һикереп торҙо ла тәҙрәгә ҡапланды. Тауыш биреп, иптәшен дә уятты. Ниҙер ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләштеләр ҙә, яҡтырып килгән тәҙрә янында шәүләләрен ҡалдырып, тышҡа сығып киттеләр. Ишекте лә япманылар. Ҡабаландылар. Тағы ла ята биргәс, ҡалтыранып өшөгән Хәмит урындыҡ аҫтынан сығып, ишекте ике keләһенә лә элеп, мейес башына менеп, уның бер мөйөшөнә супайын ултырып йоҡлап китте. Ул уянғанда өй эсе яҡты, ҡояш сыҡҡан. Был ваҡиғаны шул уҡ көн Хәсбиямал ҡәртинәйгә һөйләне ул. Хәсбиямал Хәмиттең үҙ ҡәртинәһе булмаһа ла, башҡалар «Хәсбиямал ҡәртнәй» тигәс, ул да уға шулай өндәшә.

Шул һөйләшеүҙән бер-ике көн дә үтмәне, һирәкләп булһа ла ҡар аралаш мыжыҡ ямғыр ике көн яуҙы. Сыға башлаған йыуаны, таш араларынан беттекәй, урман ситтәрендә аҡ һәм күк һөттөкәй табып ашап, өшөп, еүешләнеп ҡайтты. Әшәк яғырға уйлап, инәһе менән ағаһы әҙерләп ҡалдырған утынды керетеп, мейесте тултырһа ла, тоҡандырырға ут тапманы. Ғәҙәттә, кешеләр бер-береһенән шабалаға һалып күмер киҫәктәре алып ҡайталар ҙа, өрә-өрә шуны туҙға тоҡандырып, ут яғып ебәрәләр. Хәмит был алымды күреп белһә лә, әле уны эшләй алырмы? Кемдең мөрйәһенән төтөн сыға икән? Күмер һорап килтерергә ине тип, ҡулына шабала алып, тәҙрә аша күҙ һалды. Күҙ һалды ла шаҡ ҡатты. Өй алдынан аҡҡан йылға буйында өс ҙур күк эт Тарасты баҫтыра ине. Тоттолар, өсәүләп йәбештеләр. Аҡырҙы, баҡырҙы Тарас. Әммә тамағынан быуып тауышын бөтөрҙөләр. Хәмит, нимә эшләргә лә белмәй, ҡулындағы шабалаһын тотоп тышҡа йүгереп сыҡты ла ҡысҡыра-ҡысҡыра Тарасҡа ярҙамға ашыҡты. Аяғына кейергә сарығын таба алмай мәшәҡәтләнде. Тапҡас, кейә алмай интекте. Ҡунысын бәйләргә ҡысмауы ла әллә ҡайҙа булған! Ҡуңалсын ғына кейеп, урамға йүгереп сыҡты. Таяҡ эҙләне. Уны ла таба алманы. Үҙе ҡысҡыра, ә тауышы сыҡмай. Үҙе илай. Ниһайәт, башмағы яткан ергә килеп етте.

Был ваҡытта Тарас ҡыбырламай ине. Бүреләр эсен йолҡоп аҫҡандар ҙа, ҡомһоҙланып болаша-болаша, эсәктәрен өҙгөләп ашайҙар. Уларға яҡын уҡ килгәс, иң ҙур күк бүре Хәмиткә бородо ла ап-аҡ тештәрен шаҡылдатты. Ҡото осҡан Хәмит аяғы ергә теймәй кире өйөнә йүгерҙе. Тәҙрә аша бүреләргә, үлеп ятҡан Тарасҡа ҡарап һулҡылдай-һулҡылдай иланы ла иланы.

Бүреләр туйып, ауыҙҙарын үләнгә һөртөп, ашыҡмай ҡаршы ятҡан Нарәле тауына табан китте.

Йүгереп барып был хәлде лә Хәсбиямал ҡәртинәйгә һөйләне. Тиҙ генә йыйылышып ғауғалаштылар, шаулаштылар. Күмәкләп барып, бүреләрҙән ҡалған итте үҙ-ара өләшеп алдылар. Тәмле һурпа эсергә яҙманы бәләкәй генә ауылдың

ҡыҙ-ҡатынына. «Үткәндә Хәмит менән һөйләшкәндән һуң уҡ һуйһаҡ, былдай хәл булмаҫ ине, – тип уфтандылар. Башмаҡты йығып боғаҙлауға ир кеше булманы бит. Бәлки, берәйһе килеп сығыр, тип көткәндәр ине. Булманы. «Аллаһы Тәғәлә беҙгә ризыҡҡа насип итмәгәндер», – тип һөйләнде Хәсбиямал ҡәртинәй. Тарастың фажиғәле үлеменә бөтә ауыл ҡайғырҙы. Ә уның үлемен үҙ күҙе менән ҡарап торған Хәмит, Тарастың аҡырайып һауаға баҡҡан күҙҙәрен хәтерләп, ҡарайып бөткән йоҙроғо менән танауын ышҡып тын ғына иланы. Тарасты йәлләп түгел, ә әле генә һуйылған йәш, таҙа ит һурпаһы эсә алмауҙарына үкенде ас йөрөгән бисә-сәсә. Аҙна-ун көн үтеүгә ауылға ат еккән бер кеше килде. Кейгән гимнастеркаһын ҡайыш менән быуған, һыңар аяғына итек кейгән. Икенсе аяғы ағас ине. Ауылдың барлыҡ әбейҙәрен, бисә-сәсәне, бала-сағаны йыйып һүҙ тотто: «Тиҙҙән һуғыш бөтәсәк. Беҙҙекеләр Берлин өсөн һуғыш алып бара. Һеҙҙең ауылдан яуға киткән 18 ирҙең әле бөгөн... – тине лә туҡтап ҡалды. – Ҡара ҡағыҙ алыусылар нисә булды әле? Ҡул күтәрегеҙ», – тигәс, халыҡ тын ҡалды. Берәү ҙә ҡулын күтәрмәне, һәр кем үҙ кешеһенең үлеменә ышанманы. Көттө улар. Көтәләр. Инәйҙәр – улдарын, ҡатындар – ирҙәрен, етемдәр – аталарын. «Район һеҙгә кеше иҫәбенән бишәр килонан он бүлгән. Кемгә арыш, кемгә һоло оно буласаҡ. Унаһы инде – сельпола нимә бар... Һуғыш бөттө, тип иғлан килһә, колхоз бер башмаҡ һуйып, урамда бешерәсәк. Шулай тип алдан һөйләштек. Колхоз булмаһағыҙ ҙа, һеҙҙе лә саҡырабыҙ сельсовет ауылына, һәр берегеҙ тусҡаҡ тотоп килегеҙ. Унда фронтовик балаларына кәнфит-перәник тә бүләләр», – тип һүҙен бөтөрҙө.

Һуғыш бөтә, атайҙар ҡайта, күп итеп кәнфит-перәник килтерә, тип аңланы Хәмит. Һыңар аяҡлы кеше шул хәбәрҙәрҙе һөйләне лә атына ултырып килгән яғына түгел, кире яҡҡа, тауҙар яғына китте кеүек.

Хәмит ҡасандыр перәник ашағанын хәтерләй. Томан аша ғына булһа ла, атаһын да хәтерләй. Атаһы, инәһе, Хәким ағаһы атта ҡайҙалыр барғанда туйғансы ашағандар ине ағаһы менән. Бер тоҡсай ине перәник. Аҙаҡ һыу эстеләр. Уны-һын да хәтерләй. Ағас аяҡлы ағай ат менән киткән яҡтан арбаһына бер тоҡсай перәник һалып атаһы ла ҡайтып киләләр кеүек тойолдо уға. Көн һайын көттө ул атаһын шул яҡтан. Ә ул һаман да килмәй ҙә килмәй. Хәмиткә атаһы, ниңәлер, ҡалын урманлы ҙур тау артынан ҡояш батыр алдынан ғына килеп сығыр кеүек тойола.

Бөгөн ул килер, һис шикһеҙ килер, тип ҡәтғи ҡарар сығарҙы. Үткән төндә төшөндә лә күрҙе бит ул атаһын. Эйе. Арбала килә ине. Дөрөҫөрәге, ҡояшҡа ҡаршы килә. Ҡояш тау артына төшөп китергә ашыға, ә атаһы уға ҡаршы тауға табан атын ҡыуалай-ҡыуалай юрта.

Шул юл менән ҡаршы барам атайыма тип, ҡояш байыр алдынан ул тауҙарға, ҙур урманлы тауҙарға табан йүгерҙе. Шәп, бик шәп итеп атаһына ҡаршы йүгергән кеүек уға. Әммә аслыҡтан тәне, шешенгән аяҡтары уға йүгерергә ирек бирмәй. Ауыҙына бер нәмә лә ҡапмағанына аҙна үткәйне. Йүрмәләне лә йүрмәләне ул һуҡмаҡ менән тауға ҡаршы. Бына ул тауға менеп етмәҫ борон ҡояш уның артына төшөп китер ҙә, атаһы бире сыға алмай ҡалыр, ҡараңғы төшөр, тип уйланы. Күпме барғандыр, әммә һуҡмаҡ бөттө. Тирә-яҡта бейек, бик бейек ағастар, үләндәр ҙә Хәмиттең буйы тиклем. Ҡапыл ҡараңғы төштө. Ҡайҙа барырға белмәне ул, ҡысҡырып кешеләрҙе саҡырырға, үкһеп-үкһеп иларға кереште. Үҙе ҡайҙалыр атлай, үҙе илай. Туҡтай, тыңлай. Әммә ағастар башы сайҡалып шаулауынан башҡа һис бер тауыш ишетмәне.

Зым-зыя юғалды Хәмит. Ауылда төрлө хәбәрҙәр йөрөнө. Имеш, уны ауыл

Советы рәйесе килеп алып киткән дә балалар йортона урынлаштырған. Имеш, уны больницаға һалғандар... һәм башҡа хәбәрҙәр бер-бер артлы алмашынып торҙо. Хәмиттең юғалыуына ун биш – егерме көн үтеүгә, ауылда ҡалған һуңғы ике һыйырҙы иртә таң менән үрешкә ҡыуғанда, ауыл осонда ятҡан ҙур таш өҫтөндә Хәмиттең үле кәүҙәһен таптылар. Уң ҡулының ҡатҡан, инде серей башлаған бармаҡтары перәниккә оҡшаған ҡайын ороһон ҡаты итеп ҡыҫҡайны. Түш тирәһенән яҙыу алдылар: «Нашли мертвым отсюда далеко. Предайте земле. Вспомните и нас».

Ҡатын-ҡыҙҙар һай ғына итеп ҡәбер ҡаҙып, уның кәүҙәһен ергә бирҙеләр. Билгелеккә таш та ҡуйҙылар. Хәмит түшендәге сәйер яҙыуҙың мәғәнәһен һуңынан ғына төшөндөләр, буғай. Уның үле кәүҙәһен ҡасҡылар табып алып, ауыл янына килтереп, таш өҫтөнә һалып киткәндәр. Эйе, эйе. Был тик шул ҡасҡылар эше. Был тирәлә башҡа һис бер кеше йөрөмәй, йөрөргә кеше юҡ. Барыһы ла һуғышта. Ауылдан киткән 18 һалдаттың икәүһе хәбәрһеҙ юғалған. Ун бише һәләк булған, тик береһе генә тере буғай, әле ул да ҡайтмаған.

Хәбәрһеҙ юғалғандарҙың береһе – Шәйхетдин ине. Аяныслы күп фажиғәләрҙе күргән йортона, ауылдан ҡалған берҙән-бер өйөнә тимер юлы вокзалынан 60 саҡрым ерҙе йәйәүләп үтеп килеп керҙе...

Йортоноң барлыҡ мөйөш-ҡыйышын ентекләп ҡарап сыҡты. Ун ике йыл элек ҡалдырып киткән өйөндә таныш, бөтмәҫ-төкәнмәҫ үҙ, тыуған әйберҙәре балаларының, ҡатынының ҡайһы бер кейем-һалымын алып ҡосаҡланы, еҫкәне, ултырып тағы ла иланы.

«Мин һуғышта ауыр яраланып, әсирлектә, ҡоллоҡта, көн яҡтылығынан да мәхрүм булып тәүлектәр буйы шахтала бил бөгөп тә үлмәнем. Ә һеҙ... Ә һеҙ мине япа-яңғыҙ ҡалдырып киткәнһегеҙ, – тип ҡатынына үпкәләп иланы. – Ниңә инде үҙеңде әҙерәк һаҡламаның... Балалар ҙа иҫән булыр ине», – тип һулҡылданы.

Аҙна-ун көн эсендә ул йортоноң эсен, һарай-ҡураһын төҙәтештерҙе. Үҙе менән килтергән ҡатҡан икмәк, өс күмек шәкәр, консерва банкалары ла бөттө. Хәрби һәм әсирлек ҡануңдарына буйһоноп өйрәнеп бөткән Шәйхетдин, буш әйбер тоғон ҡулбашына элеп, 30 саҡрымда ятҡан ауыл Советы ауылына китте. Уны танымаманылар. Әйтеп аңлатып биргәс, бер ҡатын ҡағыҙҙар араһында оҙаҡ ҡаҙынды ла: «Һин бит, Шәйхетдин, үлгәнһең, һуғыштың башында уҡ... Бына рәсми ҡағыҙ. Хәрби комиссариатта ла шулай теркәлгән. Юҡ, беҙ һине учетҡа ала алмайбыҙ. Бына, ышанмаһаң, журналды ҡарайыҡ. Унда тереләр араһында ла, һуғышта үлгәндәр араһында ла һинең фамилияң да, үҙең дә юҡ. Кем булған һуң һинең фамилияң? – тип бармағы менән журналға яҙылған исем-шәрифтәр буйлап китте. Үҙенең үлеме, тереме булғанын дөрөҫләүсе нәҡ тә шул журнал булғанына аптыраған Шәйхетдин, ҡатын янына уҡ эйелеп, ҡағыҙ битенән үҙ исемен, фамилияһын эҙләне. Ә ул юҡ! Ҡоросбулатов Шәйхетдин!

– Ана, күрҙеңме? Һин бит юҡ. Һин бит үлгәнһең что ли? Хатта журналда ла юҡ. Ниңә беҙгә килеп «мин бар, тере» тип доказать итеп йөрөйһөң, тигән ғәйепләү ишетеп, әллә үле, әллә тере торҙо Шәйхетдин өҫтәл янында.

Уның, Шәйхетдиндең, был ғәйепләнеүҙән һуң томаланған аңында: «Әллә мин үлгәнмен микән? Әллә был йөрөп ятҡан шәүлә минең рухым ғына микән?» – тигән уй ҡапыл ҡурҡыуға һалды.

Тағы ла эйелеп журналды ҡараны.

Шул ваҡыт теге ҡатын: «Булатов Шәйхетдин,– тип уҡып исем-шәрифтәрҙең теҙмәһе дауамынан табып алды. – Пропал без вести. Погиб, – тип уҡыны ла: – Бына

бында үлгәнеңде дөрөçләгәндәр. Ә фамилияң бит башҡа. Юҡ. Үлгән кешене мин терелтә алмайым. Ул – уголовное дело... Тем более һин йәшәйем тигән ауыл да рәсми рәүештә юҡ, – тине. «Һеҙ үлгәнһегеҙ икән, комиссариатҡа барығыҙ. Унда һеҙҙең тере булыуығыҙ тураһында, бәлки, ҡағыҙ бирерҙәр, – тине икенсеһе. Унан һуң таныш булмаған тәүге бисә: « Ә һинең ниндәй документың бар һуң?» – тип һораны.

Шәйхетдин Ҡарағанда төрмәһенән азат ителгәне тураһындағы ҡағыҙҙы күрһәткәс, ике ҡатын бер юлы: «А-а-а, уголовник. Заключенный», – тип уның менән һөйләшеүҙән баш тарттылар. Шул саҡта ишектән ауыл Советы рәйесе үҙе килеп керҙе. Бер-береһенә ҡарашып торҙолар. Шунан рәйес: «Шәйхетдин, һинме был?» – тип һораны. «Мин, мин, Ярулла», – тине ул. Ике фронтовик ҡосаҡлашып күрештеләр. Тик икеһе лә ғәрип. Береһенең аяғы юҡ. Икенсеһе тотошлай зәғиф, бөтә күңеле, эс-бауыры... Йөрәге яраһы бик тәрән, унан бер туҡтауһыҙ йәш аралаш ҡан һарҡый. Оҙаҡ һөйләштеләр, аңлаштылар. Һүҙҙең аҙағында Ярулла: «Ярай, Шәйхетдин. Мин хәрби комиссарға ла, район Советына ла яҙма аңлатырмын. Ғаиләңдең хәлен һөйләгәндәрҙер. Хәҙер сельпо рәйесенә шылтыратам. Аҙыҡ-түлек менән ярҙам итерҙәр. Үҙеңде теркәрбеҙ, – тине. – Ә ҡайҙа, ҡайһы ауылға теркәрбеҙ?»,– тине. «Үҙ ауылыма. Ҡатыным, улдарым шул ерҙә ята бит. Мин уларҙы ташлап ситкә китмәйәсәкмен. Мин уларҙан башҡа бер кемем дә юҡ...» – тип яуап бирҙе Шәйхетдин.

Рәсми ойошмалар Шәйхетдиндең тере булыуы, донъяла йәшәүе тураһында теркәһәләр ҙә, уның ҡайһы ауылға яҙылыуы әлегә хәл ителмәне.

Ә Шәйхетдин башҡа ауыл кешеһе булып яҙылырға ҡырҡа баш тартты. Паспорты ла юҡ ине. Шуға ла ауыл Советы рәйесе уға: «Әйҙә, үҙ йортоңда йәшә. Дөйөм китапҡа теркәп ҡуйырбыҙ», – тине. Аяҡҡа баçып киткәнсе аҙыҡ-түлек, өç-баш кейеме менән ярҙам иттеләр. Үткән фажиғәле йылдар бик күп ғәйрәтен алһа ла, ул һаман да ҡарыулы ир ине. «Заготконтора» тигән ойошмаға эшкә ялланды. Шәйхетдиндең элекке ауылы тирәһендә эреле-ваҡлы күлдәр, борондан ҡалған алтын йыуынтыһы – быуа-тобалар бихисап ине. Заготконтора уға ау, кәмә кеүек ҡорамалдар бирҙе. Балыҡ тотоп тапшырҙы ул, ҡара тал ҡайырын һыҙырҙы, дарыу үләндәре йыйҙы. Әммә төп шөғөлө һунарсылыҡ булып китте. Шәшке, аç, тейен, һыуһар, төлкө тотто. Бүрегә ҡапҡан ҡуйҙы. Уңайы сыҡһа, ҡыр кәзәһенән, мышынан да баш тартманы. Эшләгән аҡсаһына бейә алып ебәрҙе. Уға арба-сана йүнәтте. Оçта балыҡсы ла ине ул. Эсе бошоп киткән саҡтарында зыяратҡа, ҡатыны һәм улы Хәмит ҡәберлегенә, бара. Ҡәбер таштары янында оҙаҡ ултыра. Улар менән һөйләшә. Уларға һүҙ ҡуша. Ниҙер һорай. Яуап бирә. Унан оло улы Хәким батҡан Нарәле ярына килә. Күлдең ташлы бейек ярында ла оҙаҡ ултыра ул, ҡайһы саҡта: «Хәким!» – тип ҡысҡыра. Уның тауышы күл аша-һындағы ярға, ағастарға бәрелеп кире ҡайтып тирбәлеп: «Хәким, Хәким, Хәким»,– тип ҡабатланғас та ултыра әле. Унан күҙ йәштәрен һөртөп, яй ғына тороп, өйөнә табан атлай. Нарәле күленең балығын ул үҙе ашаманы, заготконторағa ла тотоп бирмәне. Өйрәктәрен дә атманы. Улымдың тәне тарҡалған һыу бит, мин нишләп уның балығын тоторға тейеш, тип эстән ҡәтғи ҡарар сығарғайны.

Ғаиләһенең ҡәберлектәрен ташлап китмәй, яңы ғаилә лә ҡормай, үҙ йортонда үҙенсә көн күрҙе. Ә йылдар һиҙелмәй ҙә үттеләр ҙә үттеләр. Йәй көндәре Шәйхетдиндең йорто тирәһенә һәр төрлө тәбиғәт ҡосағында ял итергә теләүселәр килә. Шуларҙың береһе уның йорто янына, аҙаштырып, бер көсөк ҡалдырып

киткән. Ҡолаҡтары һалбырыраҡ, ҙур башлы, киң күкрәкле, күп булһа бер айлыҡ һоро арлан көсөк. Шәйхетдин уны шунда уҡ бик теләгән, күптән көткән дуҫы кеүек ҡабул итте. Көсөккә төндә һалҡын булмаһын йә бүре алып китмәһен тип, өйө эсендә бер мөйөшкә һике эшләп, ятыр урынына алам-һалам әйберҙең өҫтөнә иҫке һарыҡ тиреһен йәйеп бирҙе. Ҡайҙа барһа ла, ҡалдырманы, арбаға ла, санаға ғына ултыртып йөрөттө, һунарға йөрөргә көсөк бик әүҙем булып сыҡты. Үҙе зирәк, аҡыллы. Бейәһе Йондоҙға ла шул тиклем эйәләште. Өсәүләп берәй ергә барып ҡайтһалар, Шәйхетдин уны ҡараңғы төшкәнгә ҡәҙәрле тышап ебәрә. Ә Дуҫбай уның янынан ун аҙым да ҡалмай.

Йондоҙҙоң герш-герш итеп йәшел үләнде ашағанын тыңлап ята, тирә-яҡты күҙәтә. Сит мал-тыуарҙы, сит бауырҙы Йондоҙ янына һис ебәрмәй. Хәйер, ундай осраҡтар бик һирәк була, сөнки был тирәлә сит бауыр ҙа, сит мал-тыуар ҙа юҡ кимәлендә. Шәйхетдин берәй ауылға барһа, ул йомоштарын йомошлағансы, һәр саҡ арба-сананың өҫтөндә ятып ҡарауыллай. Һис бер йән эйәһе арба янына килә алмай. Йондоҙҙо ул яҡланы ла, һаҡланы ла. Ә ҡыш көндәре ул хужаһы менән өйҙә йоҡлаһа ла, сама менән һәр ике сәғәт һайын Шәйхетдинде уятмай үҙе сығып, үҙе ишекте ябып, Йондоҙҙо ҡарап керә. Тирә-йүнде тикшереп, еҫкәп сыға. Әммә ауыл эттәре кеүек һис бер ҡасан өрмәй. Күрәһең, өрөп, тауыш сығарып, бүреләрҙе йәлеп итеүен уйлай белдеме икән? Уға, Дуҫбайға, ишекте асып-ябып йөрөр өсөн ишек тотҡаһына ике яҡтан да ҡалын ҡайыш бәйләнгән. Өйҙән сыҡҡанда алғы аяҡтары менән аса, тыштан шулай уҡ алғы аяҡтары менән этеп яба. Ә кергән ваҡытта тотҡаға бәйләнгән ҡайышты сәйнәп тартып аса. Өйгә кергәс, эске тотҡаға бәйләнгән ҡайыштан тартып ишекте яба. Шундай аңлы ине Дуҫбай. Йондоҙҙо ғына һаҡламаны ул, хужаһын да бик көнсөл яҡланы. Ул әҙ генә кем менәндер күтәренке тауыш менән һөйләшә башлаһа, ул шунда ук һағая. Ергә күкрәге менән ятып, ике алғы аяғына башын һала ла, күҙҙәрен уйнатып, бәхәсле кешене бик ентекле күҙәтә. Шәйхетдингә ҡул күтәрелһә, Дуҫбай уға шунда уҡ ташлана. Бындай ваҡиғалар уларҙың тормошонда бер генә тапҡыр булманы. Күлдән хужаһы атҡан үрҙәктәрҙе сығара, сөнки белә: кис икәүләп ҡош һурпаһы эсәләр. Ҡыш көндәре Шәйхетдиндең бура келәте эсендә туң балыҡ, ыҫланған, ыҫланмаған ит һаҡлана. Был әҙер аҙыҡҡа йә сысҡандар аулап, йә еҫ алып күл ҡамышлығынан ҡыҙыл шәшке, урман-ялансыҡтар яғынан һаҫыҡ ала көҙән килә. Дуҫбай төндәрен шуларҙы һағалай. Ҡайһы ваҡытта тотоп, ишек төбөнә һалып та ҡуя. Дуҫбай хужаһының мылтыҡ алғанын түҙемһеҙлек менән көтә. Ҡыуанысынан күҙе ялтырап, арлы-бирле саба. Туҡтамай ҡойроҡ болғай. Өйҙән алыҫлашыу менән, эҙләнергә тотона. Белеп бөткән ул Шәйхетдиндең ҡайҙа мылтыҡ тотоп уның ҡыуып килтергән йәнлеген һағалап ултырғанын. Йәнлектәрҙең дә ҡаса торған йүнәлеше була. Шул йүнәлешкә бора ла инде ул йәнлекте. Үҙе һәр саҡ артыҡ шауламай ғына, тоноҡ ҡына тауыш биреп өрөп килә. Был тауыш һунарсы өсөн бик файҙалы. Беренсенән, ҡасҡан йәнлек алға бик үк иғтибар итмәй, күберәк арттан килгән эттең тауышын тыңлай. Икенсенән, алда һағауылда торған мылтыҡлы һунарсы йәнлектең һәм эттең ҡайһы йүнәлештә икәнлеген һәм уларҙың йыраҡлығын билдәләй: Дуҫбай төрлө йәнлекте төрлө тауыш биреп ҡыуа. Быны ла аңлап бөткән Шәйхетдин. Бик уңышлы һунар итте улар икеһе. Йомшаҡ ҡар яуып, хужаһы берәй сәбәп менән һунарға сыға алмаһа, Дуҫбай үҙе сыға. Әгәр бер үҙе йөрөһә, ул ғауғаламай, өрөп ҡыумай. Юртып ҡына эҙ ҡыуа, йәнлеккә яҡынлаша, унан бик көслө ынтылыш менән ҡорбанын эләктереп ала. Бындай осраҡта уның табышы йә ҡуян, йә ҡыр кәзәһе була.

Быйылғы ҡыш Шәйхетдин ҡапыл ауырып китте. Йүтәлләне лә йүтәлләне. Тәне ут кеүек янды. Көндән-көн хәленең насарая барғанын һиҙеп, бейәһен менеп ятыр больница булған йыраҡ ҡасабаға китте. Китер алдынан, бик ҡыйын булһа ла, өйөн яғып йылытты, ҡапҡаны, бура-келәтте ныҡ итеп бикләне, бесәнлек ҡапҡаһын асты.

Больницала уны шунда уҡ һалырға ҡарар иттеләр. Таныш кешеләренә эйәртөпсөнөн ҡалдырып, Йондоҙҙоң йүгәнен һыпырып, ҡайтыу йүнәлешенә ҡыуҙы. Дуҫбай ҙа уға эйәрҙе. Шулай итеп, Шәйхетдиндең донъяла иң яҡын йән эйәләре өйөнә ҡайтып киттеләр. Күңелен буш, үҙен тағы ла бик яңғыҙ тойоп, Йондоҙ менән Дуҫбай түбә артына төшөп киткәнсе ҡуҙғалмай ҡарап торҙо.

Шул уҡ көндө кис, ҡараңғы төшкәс, ҡараңғы йортҡа ҡайтып керҙеләр. Йондоҙ асыҡ ҡапҡанан бесәнлектәге кәбәндәр янына керҙе лә уттай йәшел үләнде йомарлап ғыршылдатып ашарға тотондо. Ғәҙәтенсә өйгә кереп өйрәнгән Дуҫбай өйгә керә алманы. Ишек тотҡаһында ҡайыш та юҡ, ә күгәнендә ҙур йоҙаҡ тора. Күтәрмә өҫтөнә ҡуйылған ҙур алдырҙан икмәк, ит киҫәктәре, бер аҙ балыҡ ашаны. Йорт-ҡура тирәләй үҙе һалып ҡатырып бөткән һуҡмаҡ менән йөрөп өйөрөлөп сыҡты ла Йондоҙ янына, кәбән төбөнә, урын ҡаҙып ятты. Көндәр, төндәр үттеләр ҙә үттеләр. Ә хужалары һаман килмәй ҙә килмәй. Ҙур ғына алдырға Дуҫбайға һалып ҡалдырылған аҙыҡ та күптәнән бөттө. Ул хәҙер бына аҙна тирәһе бер нәмә лә ашағаны юҡ. Ябығып, һурыла төштө. Ә Йондоҙ кәбәнде ян-яҡтан өңөп ашап, бәшмәк һынына килтерҙе. Туйғансы ашай ҙа ҡар-боҙ кимерә. Хәрәкәтһеҙ торғас, тағы ла йомроланып китте. Үткән кис Дуҫбай менән Йондоҙҙоң йорто артынан тауҙарҙан яланға тартып өс мышы үткән ине. Ел уларҙың еҫен кәбән төбөндә ятҡан Дуҫбайға ла килтерҙе. Таныш еҫте аңдып алған Дуҫбай тороп ултырҙы. Еҫ килгән яҡты ентекләп, оҙаҡ ҡына еҫкәгәндән һуң, түҙмәне, шул йүнәлештә ашыҡмай ғына юртып алға китте. Мышыларҙың ҙур урман, бейек тауҙар яғын ҡалдырып, вағыраҡ тауҙар, ҙур булмаған урманлыҡ аралаш яланлыҡ яҡҡа күсеүенең сәбәбе бар. Тауҙарҙа ҡар ҡалынайҙы. Ҙур урмандағы ҡатылығы әҙ булған оҙон йомшаҡ үлән дә көйшәүһеҙ, иҙелеп тарҡала ла ҡуя. Ә туҡлығы юҡ. Өҫтәүенә, ҡарағайҙар бейек, уларҙың сәнскеле йәшел ботаҡтарын хәҙер үрелеп алып булмай. Ә бында, яланыраҡ ерҙә, ҡарағай ботаҡтарын берәү ҙә ашамай. Өҫтәүенә, үлән дә ҡаты, көйшәүле.

Оҙаҡ та барманы Дуҫбай. Еҫ көсәйгәндән-көсәйеп, танауын ҡытыҡлап, түҙеп торғоһоҙ ашау хисе уятты. Алда, ҡарағай үҫентеләре араһында, өҫ мышы: тора ҙур мөгөҙлө үгеҙ һәм әле йәше тулмаған башмағы менән һыйыр үрелеп ботаҡ ашайҙар ине. Әгәр мышы башмағы Дуҫбайға яҡын булһа, ул һис шикләнеүһеҙ уға аҫылыныр ине. Әммә башмаҡ йыраҒыраҡ торған булып сыҡты. Көтмәгәндә алдарына килеп сыҡҡан был дошмандан ҡурҡып, мышылар йән-фарман ҡасып киттеләр. Алда һыйыр мышы, уртала башмаҡ, ә иң арттан, Дуҫбайҙы ҡарай-ҡарай, сатамаҡай мөгөҙлө ҙур башын бора-бора, үгеҙ бара. Мышылар, күлде ситләтеп үтеп, унын арьяғындағы уңғыл да суңғыл булып ятҡан ваҡ талдар, түбәлектәр араһына йүнәлделәр. Шул ваҡыт Дуҫбай, ҙур үгеҙгә ташланырға батырсылыҡ итмәгәнлектән, үгеҙҙе йәнәшләп үтеп, башмаҡҡа ташланмаҡ булды. Уны, йәнәшәләп үтеп барған этте, күреп, ул уға ташланды. Дуҫбайҙы үгеҙҙең ҡаты тояҡтарынан үгеҙ аунап ятҡан иҫке серек ағас ҡотҡарҙы. Икеһе лә шуға һөрөнөп, эт йығылып, ә үгеҙ алғы аяҡтарын бөкләп, башы менән ергә төкәлде. Тороп тағы ла ынтылды ул эткә. Әммә Дуҫбайға алғы тояҡтары менән тағы ла һуға алманы.

Был ике арала башмаҡ менән һыйыр алыҫлашып уҡ өлгөрҙө. Ваҡ ҡайындар менән ҡапланған был түбәсектәр араһында бынан илле, ә, бәлки, йөҙ йыл элек мәғдән эҙләгәндә ҡаҙылған бик тәрән, тар, оҙон соҡорҙар бар ине. Үлән менән ҡапланған был соҡор-саҡырҙы бурһыҡтар үҙ итеп, унда ер аҫты ҡаласығы яһап бөткәндәр. Ҡалын ҡар менән ҡапланған был соҡорҙар күренмәй ҙә. Әле таң да атып бөтмәгән, күҙ төртөлөп туҡтарлыҡ есем юҡ, тирә-йүн дөйөм тоноҡ яҡтылыҡҡа ғына сорналған.

Үгеҙ һыйыр менән быҙауына тура сығырға шул соҡорҙар аша һикерҙе. Ләкин береһенән аша сыға алманы. Алғы аяҡтары соҡор ярында булһа ла, артҡы аяҡтары тәрән соҡор төбөнә төшөп буйламаны. Артҡы аяғына тибенге булмағас, яйлап ҡына тар, тәрән соҡорға шыуып төштө. Ике аяғында текә тороп, һис борола алмай нисә көн тороп йән биргәндер инде үгеҙ. Быны берәү ҙә белмәй. Тик Дуҫбайҙың соҡор тирәләй йөрөп ҡатырған һуҡмағы ғына ваҡиғаның әле генә булмағанлығын раҫлай. Тәңре бойормаһа, алда яткан ризыҡты ла ашап булмай икән. Бына ғәжәп. Аслыҡтан эсе ҡабырғаһына йәбешеп бөткән Дуҫбай тәрән соҡорға төшә алмай бер ҡайтып, бер килеп, соҡор тирәләй йөрөнө лә йөрөнө. Бер кистә буран сыҡты. Төнө буйы ҡоторҙо ул. Һепертмә ел ҡарҙы ҡойма буйҙарына, үҙәк-соҡорҙарға тултырҙы. Буран тынып, соҡор эсе ҡар тулып ҡатҡас, тағы ла килде Дуҫбай. Мышының башы, муйыны, өҫкә һуҙылып ҡаткан аяҡтары, мундаһы ҡар өҫтөндә булып, артҡы өлөшө ҡар аҫтында ҡаплаулы ине. Дуҫбай ҡаты ҡар өҫтөнән һаҡ ҡына төшөп, туң итте ҡомһоҙланып кимерә башланы.

Хәҙер был соҡорға көн һайын, ә ҡайһы ваҡыт көн аша килә Дуҫбай. Туйғансы ит ашай. Ҡайтып, йомшаҡ бесәндә йоҡлай. Йондоҙ ашаған кәбән-бәшмәктең һабы хәҙер нәҙегәйҙе, аҫты ян-яҡтан тәрән өңөк булып ҡалды. Дуҫбай шул өңәккә керә лә йоҡлай. Ышыҡ. Ел дә ҡаҡмай. Хәҙер ул һимерҙе, тулыланды. Ҡышҡылыҡҡа үҫкән оҙон йөндәре ялтырап, тулҡын-тулҡын кеүегерәк булып ятты. Йөн аҫтындағы тән мамығы ла ҡуйырҙы. Ғәйрәтле, күңеле көр саҡта осратты ул ит соҡоро янында кәнтәй бүрене. Тәүге осрашҡандан һуң тағы ла бер нисә тапҡыр бер-береһенә осраһалар ҙа, яҡын килмәнеләр. Йыраҡтан ғына еҫ алыштылар, иткә лә болашманылар. Береһенең ашап туйып китеүен икенсеһе алыҫтараҡ көтөп ятты.

Көндәр, төндәр яйлап үтә торҙо. Тупыс хәҙер кистәрен дә, таңда ла оломай. Саҡырыр тоҡомдаштарының был тирәлә булмауына ул төшөнгән. Берҙән-бер күҙ текәгәне, уйына кергәне – кеше еҫе килмәгән шул һоро эт.

Көндәр оҙонайа башланы. Ҡар ҙа ҡалынайҙы, һалҡын көндәр башланһа ла, ит ашап туйып, һимереп алған Тупыс та, һоро Дуҫбай ҙа ул һалҡынлыҡты әллә ни һиҙмәне. Ел хәҙер нисектер һыҙма һәм әсе булып китте. Февраль айының тәүге ун көнлөгө аға ине. Тупыс менән Дуҫбай хәҙер бер-береһенә өйрәнеп алдылар. Әммә яҡын килергә, еҫкәшергә тартындылар. Тупыс һороноң ғәйрәтле, ҡырҡа холоҡло икәнен үҙенең зирәк бүре аҡылы менән һиҙенә. Хатта уны татығаны ла булды. Батырайып килеп йәбешергә самалаған Тупысты бер һуғыуҙа соҡор төбөнә осорҙо бит. Әммә ул был һоро эттән нимә көткәнен үҙе лә аңламаны, ниңәлер ҡурҡа биреп тә ҡуя. Элек ауыл алабайҙарын аңдып ятып тота ла быуып үлтереп, тартҡылап өҙөп ашай ҙа ҡуя ине. Ә хәҙер – юҡ. Был һоро үҙенде йығып быуырҙай, ҡымшана ла алмаҫһың. Көндәрҙең бер көнө Тупыс эңерҙә килде соҡор янына. Соҡор төбөнә төшөргә тип уның иң текә ауыҙына килеп тә етте, уға ҡаршы һис көтмәгәндә Һоро килеп сыҡты. Тупыс, ҡапыл ҡаушап ҡалған оялсан ҡатындай, артка сикте, Һоро уға туп-тура килә башлағас, дуҫлыҡ, ризалыҡ

билгеһе биргәндәй, ҡойроғон болғаны, Һоро уға ҡаршы килеп туҡтаны. Үҙе лә, дуҫ булайыҡ тигәндәй, ҡойроғон шәп-шәп болғап, ынтыла биреп, Тупыстың танауын еҫкәне. Күптән эҙләгән һәм теләгән тәмле еҫ танау ҡумшырығына килеп тулғас, бөтөнләйгә дәртләнде. Күҙе ялтлап, ҡолаҡтарын торғоҙоп, ҡойроғон бик шәп итеп болғап, Тупыстың янында тапыслап-тыпысланы. Хәҙер Тупыс баяғы кеүек әүҙемлек күрһәтмәне. Бик асыҡҡайны ул, әммә урынынан ҡуҙғалманы. Ҡойроғон ике бот араһына ҡыҫып, Һороға ғырылдау менән ырылдау араһындағы тауыш сығарҙы ла соҡорға төшөп китте.

Һоро уны ҡатҡан көрт өҫтөндә ятып көттө. Оҙаҡ кимерҙе Тупыс, бик оҙаҡ кимерҙе. Хәҙер ҡаты көрт баҫҡан итле артҡы һан аҫта, тәрәндә, ҡалды. Ә мышының асыҡ торған алғы һаны ашалып бөткән. Өҫтә кимерелеп ҡаҡланған ҙур-ҙур һөйәктәре генә һерәйешеп тора.

Ҡараңғы төшкәс кенә сыҡты Тупыс соҡорҙан, Һоро уны тағы еҫкәне. Туйып алғас, ятып йоҡларға кәрәк ине, әммә Тупыс нәҫеле кис, төнөн, таңда йоҡларға күнекмәгән. Бүреләргә хас ғәҙәт, төнө буйы эҙләнеп йөрөп үткәреү холҡо, уны Һороноң емтеккә йөрөгән һуҡмағы менән китергә мәжбүр итте. Һоро уның артынан эйәрҙе. Ярайһы уҡ юл үткәс, алда ҡараңғылыҡҡа сумып ултырған өй күренде. Тупыс ҡапыл туҡтаны. Өй яғынан йылҡы тире һәм йәшел бесән еҫе килә. Һоро Тупысты йәнәшләп сыҡты ла ышанысլы юртып алға китте. Тора биргәс, Тупыс Һороноң артынан эйәреп өйгә табан китте. Ҡараңғыла ҡарға күмелеп, һис бер йән эйәһе билгеһе булмаған был өй Тупыс өсөн таныш ине. Элек, Һоро менән дуҫлашмаған ваҡытта уҡ, төндәрен килеп, еҫкәнә-еҫкәнә өй тирәһен урап сыға торған ине. Артта, бесәнлектә, кәбәндәр ултырғанын да, унда ат торғанын да белә ул. Өйҙә ут та юҡ, кеше еҫе лә таралып, бик шыйыҡ булып ҡалған. Инде айҙан артыҡ кешеһеҙ, төтөнһөҙ ултырған был өй Тупыс өсөн ҡурҡыныс тыуҙырмай. Яйлап ҡына юртып, Һороноң һуҡмағы менән бесәнлек яғына сығыуы булды, бүре еҫен алған Йондоҙ, ҡуршылдап, башын, ҡойроғон текә сәнсеп, көртә эсенең арғы мөйөшөнә сапты. Йондоҙҙо тынысландырырға теләгәндәй, Дуҫбай өрә-өрә уның артынан китте. Был ғауғанан шикләнеп, Тупыс башҡаса алға барманы. Туҡтаған урынында тороп Һороно көттө. Бүре тормошоноң ҡағиҙәһе буйынса, ниндәйҙер бер сәбәп буйынса ситкә киткән иптәше һис шикһеҙ кире, бер-береһенең янына килергә тейеш ине. Ә Һоро килмәне. Йондоҙҙоң янынан китмәне. Хатта уның янына ятып алды. Ахырҙа Тупыс ситкәрәк китеп, ҡуйы үлән менән ҡапланған түпһәл өҫтөнә бөгәрләнеп ятты. Тамағы туҡ, бошонорға ла, тиктән-тик эҙләнеп йөрөргә лә сәбәп юҡ. Тик таң атып яҡтыра башлағас ҡына, ҡуйы шырлыҡ эсендәге ятағына китте.

Көндө боронғо оя янында үткәреп, кис ул, ниңәлер, тағы ла өй янына килде. Әммә Һоро унда беленмәне. Ситтән, ҡайынлыҡ араһынан, күҙәтте Һороно. Ахырҙа уның тапалып ҡатып бөткән һуҡмағына төшөп, соҡорға табан китте. Соҡорға етмәҫ борон боролмала ҡапыл уға ҡаршы туйып, эҫе кәпәйеп алған Һоро килеп сыҡты. Уны күргәс, Тупыс туҡтаны, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ҡойроғон болғаны. Ә Һоро туҡтаманы, һауаны еҫкәп, туп-тура Тупысҡа килде. Бөгөн Һороно ымһындырғыс еҫ Тупыстан бөркөлөп тора. Тәбиғәт ҡанундары үҙенсә. Ул хатта дошманың менән яраштыра ла, дуҫлаштыра ла, берләштерә лә, йәрәштерә лә, ҡауыштыра ла...

Икеһе лә, бик күптәнге иптәштәр кеүек, бер-береһенең морононан еҫкәштеләр. Унан һуң дәртләнгән Һоро Тупыстың бар ерен тикшереп сыҡты. Икеһендә лә тәбиғи маҡсат тыуҙырҙы...

Ни тиһәң дә, ағымдағы ҡыштың тағы ла февраль уртаһы. Тиҙҙән яҙ, яҙ киләсәк! Ләкин Тупыстың бик ашағыһы килә ине. Шуға ла ул, Һороға әллә ни иҫе китмәгән булып, соҡорға төштө. Дуҫбай уны элекке урынында ятып көттө. Соҡорҙан сыҡҡас, Тупыс, үҙ ҡағиҙәләре буйынса, был аш минеке, был ер ҙә минеке, тигән шыйыҡ ҡына ҡан ҡатыш һарылар ҡалдырҙы. Шул тирәлә темеҫкенеп, юҡ йәнлекте эҙләп оҙаҡ йөрөнө ул. Ә Һоро уның артынан бер тотам да ҡалманы. Өй тирәһенә лә килеп, иҫке ауыл нигеҙен еҫкәп, тикшереп йөрөнөләр. Йондоҙ ҡуршылданы ла ҡуршылданы. Яҡтырғас ҡына Тупыс шырлыҡҡа ыңғайланы. Ә Һоро унан ҡалманы. Тамам бергәләшеп алдылар. Шырлыҡҡа кергәс, ятыр алдынан Һоро Тупыстың ай-вайына ҡуйманы. Тупыс үҙе лә ҡаршы килмәне, ваҡыты еткәйне...

Йәрәштеләр, ләззәтләнеп оҙаҡ торҙолар. Был ләззәтте татымаған Һоро, нәфсеһең тыя алмай, кискә тиклем әллә нисә тапҡыр һикерҙе. Һәр йәрәшкәндән һуң Тупыстың да эс-бауыры өҙөлөүе туҡтап, күңел китеге лә бөтәшә барҙы. Өс көн барманы улар ашарға. Ашағылары ла килмәне. Ахырҙа дүртенсе көн, Тупыстың теләге баҫылғас, икәүләп соҡорға юлландылар... Тағы ла бер-ике көн эйәреп йөрөнө Һоро Тупысҡа. Унан аңҡыған тәмле еҫ тамам туҡтағас, һәр ҡайһыһы айырым үҙ тормошо менән йәшәй башланы.

3

...Ябығып, йөҙө ағарып киткән Шәйхетдин өйөнә ҡайтып төштө. Йорт-ҡураларын тикшерҙе, өйөн яғып йылытты. Дуҫбайҙың һимергәненә, ә өй-ҡура тирәләй бүре эҙҙәренең бик күп булыуына аптыраны. Хужаһын, йүгән-ҡамытты онотоп, ҡыйығайып киткән Йондоҙо хатта һимереп, бүртеп киткән. Аптыраны ла, ҡыуанды ла Шәйхетдин донъяһының имен-аман тороуына. Бура келәтен дә ҡутармағандар, уңдағы иттәр, балыҡтар ҙа теп-теүәл. Аҙна-ун көн ял итте ул, өй һурпаһы, балыҡ, тәмле ит ашаны. Дуҫбайының ике-өс көнгә бер юғалып тороуына ла аптыраны, әммә әлегә был серҙе аса алманы.

Көндәрҙән бер көн яҡтырып килгәндә, тышҡа сығып, артҡы кәртә тышында Дуҫбайының икенсе эт менән йә ҡосаҡлашып, йә ҡойроҡ һөйрәтеп баҫтырышып йөрөгәнен күрҙе. Ҡайҙан килеп сыҡҡан икән был эт, тип ғәжәпләнде. Танымаhы, сөнки таң яҡты уҡ түгел ине. Ипләберәк ҡарағас, шаҡ ҡатты. Бүре менән уйнай ҙа баһа Дуҫбайы! Бына ғәжәп! Түҙмәне Шәйхетдин, өйөнә мылтығына йүгереп инде. Тейешле йәҙрәләр менән ҡороп мылтығын тотоп сыҡҡанда, Дуҫбай менән бүре йыраҡтараҡ, ағас ситендә, инеләр. Шыма мылтыҡ менән атып алырлыҡ түгел. Аптырағас, кәртәгә һөйәлеп, эте менән бүрене күҙәтте. Ҡосаҡлашалар, унан бер-береһен баҫтырып уйнайҙар. Ҡапыл Шәйхетдиндең башына таяҡ менән һуҡҡандай уй килде. Кешеләр ҙә бит үҙ милләтенән генә кәләш алмай. Бына Германияла әсирлектә булғанда немец бюргерының ҡатыны испанка ине. Шул ҡатын, бәлки, үлемдән ҡотҡарғандыр. Ул йәйҙә, һуғыштың һуңғы йылында, ҡайһы бер әсирҙәрҙе – ауыл хужалығын белгәндәрҙе ваҡытлыса бюргерҙарға бирҙеләр. Испан ҡатыны уны иренән йәшерен генә ашатты. Уның ҡунып йөрөгән һарай бүлмәһенә һәр саҡ аҙыҡ-түлек ҡалдыра, һәр төрлө яҙыулы дарыуҙар ҙа бирә. Аслыҡтан тамам хәлһеҙләнгән Шәйхетдин терелеп, тоҡ күтәрерлек булып китте. Йәки Ҡарағанда лагерында ла хәрби юристың ҡатыны төрөк ҡыҙы ине бит. Ниңә һуң Дуҫбайы кәнтәй бүре менән уйнарға тейеш түгел

һуң? Әгәр бүре менән дуҫ булмаһа, уны күптән бүреләр тотоп ашар ине бит, тип уйланы. Бүре менән дуҫ булғаны өсөн бер ҡарауһыҙ торған Йондоҙона ла теймәгәндәр. Бына бит ул донъяның ғилләһе нисек! Һәр нәмә, һәр ваҡиға үҙ-ара бәйле һәм улар тормош барһын, дауам итһен тип башҡарыла, тигән уй килде. Мылтығынан шунда уҡ яһауҙарын алып, өйгә инде. Бик тә, бик тә уңайлы ла һуң был, тип фекер йөрөттө. Быға тиклем дә теймәгәс, бынан һуң да теймәҫтәр Йондоҙона, тигән ҡәтғи ҡарарға килде. Төн үтеп, икенсе көн иртә менән тәҙрәнән ҡараһа, шул ыҫпай инә бүре менән Дуҫбай йылға ситендә боҙҙа ултыралар ине.

Бындай ваҡиғалар көн һайын тиерлек ҡабатланды.

Күрше ятҡан күлгә балыҡ ҡармаҡларға тип юлға сыҡҡан Шәйхетдин Дуҫбайҙың тапалып ҡатып бөткән һуҡмағы менән китте, һуҡмаҡ уны таныш соҡорҙарға килтерҙе. Шәйхетдиндең өйө яғынан – Дуҫбай, ә һаҙлыҡ яғынан бүре һуҡмағы ошонда килеп тоташа. Бына ҡайҙа осрашып танышҡандар икән. Соҡор төбөндәге мышы һөлдәһен дә күрҙе. Нисек, нишләп килеп төштө икән соҡорға был мәхлүк, тип аптыраны. Нисек булһа ла булғандыр, әммә эттең бүре менән осрашып дуҫлашып китеүенең серенә төшөндө.

Дауаханала ятҡанда Шәйхетдингә бер кеше бер имеш-мимеш һөйләгәйне. Радионан етемдәр һәм етем балалар йорто тураһында тапшырыу булды. Шунда һүҙгә һүҙ ялғанып, Шәйхетдиндең кем икәнен белмәйенсә, ул кешенең Шәйхетдин тураһында һөйләгәнен ишетте, һөйләгән хәбәре нигеҙҙә дөрөҫ булһа ла, күп ваҡиғалары ғәйбәт кимәлендәге уйҙырма ине. Тыныс ҡына тыңланы уны Шәйхетдин. Бүлмәне лә, туҡтатманы ла, үҙе менән таныштырманы ла. Әммә һөйләгән хәбәренең бер ваҡиғаһы уның күңелендә ҡапыл ҙур өмөт саҡҡыһы уятты.

Имеш, уның оло улы Хәким, боҙ емерелеп, бер ҙә күл төбөнә китмәгән, ә ауылдан-ауылға хәйер һорап йөрөй торғас, күрше сит өлкәгә барып сығып, унда уны балалар йортона ебәргәндәр. Булырҙай был хәл, булырҙай. Хәкимдең күл төбөнә китеүен берәү ҙә күрмәгән бит... Тик һуңынан ғына уны юғалтҡан ауыл бисәләре эҙенән барып, күл өҫтөндәге уйылған, әммә яңы туңған мәкене, ҡармаҡ һабын ғына табып алғас, уның батып үлеүе тураһында фараз ҡылғандар. Хатта юлдан, сельсовет ауылынан ҡайтып килгән береһе уның: «Хәмит!» – тип ҡысҡырғанын да ишеткән, имеш. Ҙур, бик ҙур бәхеткә эйә булыр ине Шәйхетдин, әгәр бисәләрҙең фаразы дөрөҫ булмайынса, теге кешенең хәбәре раҫ булһа. Башы күккә тейер ине. Шул көндән һуң ул тыныслығын юғалтты. Өйөнә ҡайтып ял итеп, тәнен туйындырып, бейәһенең, этенең хәлен белгәс, район үҙәгенә нөсхәле-мөһөрлө ҡағыҙҙарын тикшерергә килде. Хәкимгә ул осорҙа ун бер-ун ике йәш булған, тимәк, фамилияһын алмаштырып яҙһалар ҙа, исемен ул белә бит... «Хәким Шәйхетдин улы» тип яҙырға тейештәр. Күрше райондағы балалар йортона барып та архивтарын ҡараны, ул осорҙа эшләгән тәрбиәселәрҙе табып һөйләште. Әммә Хәкимдең эҙе беленмәне. Аптырағас, өйөнә ҡайтып бер-ике көн торҙо ла күрше өлкәгә юл тотто. Район үҙәктәренең һәм балалар йорттарының архивтарын тикшерҙе. Юҡ, Хәким Ҡоросбулатов, ҡыҫҡаса Булатов тигән бала бер рәсми ҡағыҙға ла теркәлмәгән. Әгәр ул тере булһа, уға хәҙер 22-23 йәш булыр ине. Өйөнә лә килер ине, ҡустыһын, атаһын белешер ине, тинеләр. Балалар йортоноң тәрбиәселәренең был фекере Шәйхетдинде өмөтһөҙлөккә, ҡараңғылыҡҡа ташланы ла ҡуйҙы. Әйтерһең дә, барлыҡ нәмә лә шиңде. Барлыҡ нәмә лә түгел, ә Шәйхетдин үҙе шиңде, алға әйҙәгән кескәй генә ут яҡтыһы һүнде лә ҡуйҙы.

– Ана бит, – тип береһе һүҙен дауам итте. – Тыуған өйөн, ҡустыһын, атаһын түгел, бер кемдәре лә булмаған, хәҙер инде үҫкән, һөнәргә эйә булғандар ҙа шул балалар йортон үҙ итеп, беҙгә һаман да киләләр. Юҡ, әгәр ул тере булһа, һис шикһеҙ, беҙгә килер ине... Юҡ-юҡ, ундай бала беҙҙә булманы, – тип Хәкимдең яҙмышына нөктә ҡуйҙылар.

Ниңәлер Шәйхетдиндең башына тормошҡа ашмаҫлыҡ бер ахмаҡ уй килде. Хәкимде бик яҡшы хәтерләйем... Уға хәҙер 23-сө йәш булһа, уның балаһы булып, шул балалар йортонда тәрбиәләнергә тейеш, тигән уй йүгерҙе. Ә ниңә Хәкимдең балаһы ла балалар йортонда тәрбиәләнергә тейеш, тигән һорау ҡуя алманы үҙ-үҙенә, таныр инем, таныр инем, әгәр күрһәм Хәкимдең улын, тип фаразланы.

– Пожалуйста, покажите мне ребятишек, – тип үтенде ул.

Әллә Шәйхетдиндең йәшен, әллә үтенеп һорауына ҡаршы килә алмай, уны балалар йортоноң осрашыу бүлмәһенә индерҙеләр. Бөгөн был бүлмәлә, ысынлап та, осрашыу бара ине. Кемдең ҡәртинәһе, кемдең алыҫ туғаны килгән. Әммә ситтәрәк өйөлөп торған балаларға бер кем дә килмәгән. Улар ҡыҙыҡһыныу, күңел әсенеүе һәм бошоноу менән, эстәре ҡыҙып, бәхетлеләрҙе, яҡындары янДарына килгәндәрҙе күҙәтәләр. Кемгә күлдәк, кемгә печенье, кемгә башҡа бүләктәр килтергәндәр. Тик быларға, етемһерәп, өймәкләшеп торғандарға, бер нәмә лә юҡ. Уларға килмәгәндәр ҙә, бүләк килтереүселәр ҙә юҡ. Үҙе лә ни өсөн икәнен аңламай, Шәйхетдин шул етемһерәп торған балаларға табан бер нисә аҙым атлауы булды, ҡара күҙле, ҡара сәсле, ҙур башлы биш йәштәр самаһындағы бер малай; «Ҡартай, ҡартай, әнә, миңә ҡарттайым килгән», – тип йүгереп килеп, Шәйхетдиндең ботонан ҡосаҡлап алды. Көтмәгән ине был хәлде Шәйхетдин. Кескәй генә сабый бармаҡтарының аяғын ҡыҫып тотоп алыуына Шәйхетдин малайҙың күптәнән, бик күптәнән һағынып көткән кешеһе килгәнлеген белде. Күтәреп алды ул сабыйҙы. Малай шунда ук ике ҡуллап уның муйынынан ҡосаҡланы. «Ниңә оҙаҡ килмәнең, ҡарттай? Мин һине көттөм, көттөм дә көттөм? – тине. – Ә инәйем ҡәберҙән ҡайттымы, ниңә ул унан оҙаҡ ҡайтмай?» – тип һорау артынан һорау яуҙырҙы. Ахырҙа ул, был көтөлмәгән осрашыуҙан күңеле тулып, ҡарап торған тәрбиәселәргә күҙ йәшен күрһәтмәҫ өсөн, баланы алдына алып, арты менән ултырғысҡа ултыра.

– Шулай шул, улым, һинең бында икәнлегеңде белмәнем бит, – тип күҙенән аҡҡан йәшен дә һөртмәй, битен малайҙың башына терәне. Баланың йомшаҡ ҡулы, татлы еҫе уны иҫерткес, ләззәтле хискә сорнаны, һуңғы ваҡытта ҡайсы, сәс алғыс теймәгән ҡуйы сәстәрен еҫкәне, арҡаһынан һыйпап һөйҙө.

– Ә атайым, атайым армиянан ниңә ҡайтмай? Ул унда героймы? Инәйем шулай тигәйне бит, -– тип Шәйхетдинде ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡланы.

Сабый – ҡайҙа ла сабый, һәм кем балаһы булыуына ҡарамаҫтан... Кешенекеме, йәнлектекеме! Ул Шәйхетдиндең уға бер кем дә булмауын төшөнмәй. Тик ҡайҙалыр алыҫта, томан эсендә генә күптәнән булған ваҡиғаларҙы үҙенсә тергеҙә, хыялы аша терелтә лә күптән инде вафат булған ҡартатаһының алдына менеп ултырған.

Бик айырылғыһы килмәй ине Шәйхетдиндең бала ҡосағынан. Бындай наҙҙы, иркәләүҙе һәм иркәләнеүҙе 16-17 йыл татығаны булманы. Йомшаҡ, сөсө бала еҫе уны бөтөнләйгә иҫертте.

– Исемең, исемең кем, улым? – тип һораны Шәйхетдин.

Бала, аптыраулы ҡарашын бер Шәйхетдингә, бер ситкә йүнәлтеп:

– Инәйем Ҡеүәт тей, ә бында Колька тип өндәшәләр. Ә Колька кем ул, ҡарттай? – тип үҙе Шәйхетдингә һорау бирҙе.

Бала аңы ата-инә биргән исемде онотоп, сит бауыр атамаһын әле ҡабул итмәгәйне...

Белмәне ул быдай хәлдәр булырын, белгән булһа, бүләктәр алып килер ине. Балаға бер нәмә бирә алмауына өҙгөләнде. Шул ваҡытта ҡыңғырау шылтырап, дежур тәрбиәсе барлыҡ балаларҙы ла ашханаға саҡырҙы. Әллә ҡатыраҡ ҡуллы тәрбиәселәрҙең әмеренән ҡурҡып, әллә һалдат кеүек «распорядок дня» тип аталған тәртипкә тамам өйрәнгән бала шунда уҡ Шәйхетдиндең алдынан һикереп төштө лә: «Ҡарттай, тағы ла, тағы ла кил, мин һине көтәм. Инәйем ҡәберҙән ҡайтһа, икәүләп килегеҙ, йәме?» – тип шул тиклем ихтирам, ололау, яратыу һәм һағыш тулы ҙур ҡара күҙҙәре менән Шәйхетдингә мөлдөрәтеп ҡараны. Һорау ҙа, үтенеү ҙә көслө ине был күҙ ҡарашында.

Көтөлмәгән был ваҡиғанан һуң башы ҡаңғырып китте Шәйхетдиндең. Был ҙур башлы малайҙы үҙ ейәне итте лә ҡуйҙы. Әллә һорап алайыммы, тип балалар йортоноң мөдиренә барып керҙе лә теләген ярып һалды. Мөдир бик ентекләп уға нисә йәш булыуын, ҡайҙа йәшәүен, ҡатынының кем булып эшләүен, үҙенең кем булып эшләүен, башҡа балалары, уларҙың йәше тураһында һорашты. Шәйхетдиндең өйөнөң ҙурлығы, йәшәү шарты, ул йәшәгән ауылда мәктәптең нисәнсе класҡа тиклем булыуын, һаулыҡҡа ярҙам алыу мөмкинлеген дә белеште. Унан һуң Ҡеүәттең уға кем булыуын да асыҡланы. Унан һуң етди тауыш менән: «Белмәйем, Шәйхетдин ағай. Бер шартығыҙ ҙа бала алып тәрбиәләрлек түгел. Комиссия һеҙгә Ҡеүәтте уллыҡҡа йәки аҫыраулыҡҡа алыуға ҡарар ҡабул итмәҫ. Тем более комиссияға һеҙ Ҡеүәттең һеҙгә ул йә ейән булыуын дәлилләр нигеҙегеҙ юҡ»,– тине. Бик бошоноп, хәле бөтөп, үҙ файҙаһына бер һүҙ ҙә әйтә алмай урынынан торҙо Шәйхетдин. Сығыр саҡта ашхана ишеген ҡыҫып, бик күп балалар араһынан Ҡеүәттең ҙур, ҡап-ҡара башын эҙләп тапты. Ул ҡабалана-ҡабалана ниҙер ашай, эсә ине. Балалар йортонан сыҡҡас, Шәйхетдин тура магазинға китте. Күп итеп печенье, кәнфит, Ҡеүәткә ярарлыҡ йылы күлдәк, ботинка алды. Кире балалар йортона килгәндә бөтә балаларға ла тыныс сәғәт иғлан ителгән. Күбеһе йоҡлай, тик ҡайһы береһе генә йә арлы-бирле тулғана йә, ҡулдарын һуҙып, күршелә ятҡан тиҫтерен бармаҡтары менән ҡытыҡлай. Тик Ҡеүәт кенә ятмай. Аяҡ бармаҡтарының осо менән генә ишеккә барып, тишегенән ҡарай ҙа кире карауатына килә. Ишек ярығынан уға тағы ла килгән «ҡарттаһы» менән йөҙгә-йөҙ осрашты. Тәрбиәсе оҙатыуында осрашыу бүлмәһендә күстәнәстәрен Ҡеүәттең ҡулына бирҙе. Бер ҡосаҡ булды. Ҡумталар, тоҡсайҙар, бөрмәләр...

Иҫ алғас, тәүге алған бүләге булды шикелле Ҡеүәттең. Ҡыуаныуының иге лә, сиге лә юҡ. Бер тоҡсайҙарға, бер ҡартатаһына күҙен мөлдөрәтеп ҡарай.

Тәрбиәселәр Шәйхетдингә балалар йоҡларға тейешлеген әйттеләр. Ҡеүәтте бүләктәре менән бергә күтәреп ҡыҫты ла, күңеле тулып, ишеккә атланы. Сығыр ваҡытта боролоп ҡарағанда иҙән уртаһында бүләктәргә түгел, ә ҡартатаһына һағыш та, һорау ҙа аралаш ҡарап ҡалған Ҡеүәттең ҙур ҡара күҙҙәрен күрҙе. Эй, бала! Был ҡараш, балаҡайҙың күҙ нурының түгелеүе – Шәйхетдиндең күңеленә мәңгелеккә уйылып ҡалды.

***

Көндәр йылынып, өй алдындағы йылғасыҡтың боҙо өҫтөнән ҡар һыуҙары аға башланы. Дуҫбай менән сабып, баҫтырышып уйнаған ыҫпай инә бүре, аҙналар үтеү менән, йыуанайғандан-йыуанайҙы. Хәҙер ул Дуҫбайҙы баҫтырып сапмай. Ҡойроғон болғап, уға тыныс ҡына ҡарап ултыра. Шәйхетдингә лә, үҙе кеүек йыуанайып килгән бейәгә лә өйрәнде, буғай, ыҫпай бүре. Ҡапыл йылытып ебәргән көндәрҙә ҡайын бөрөләре бүртеп, еүешләнеп киткән һымаҡ булһа ла, һалҡын төн килһә, таң атып, ҡып-ҡыҙыл ҡояш нурҙары төшкәндә ап-аҡ ҡуржаҡ менән ҡапланған ботаҡтары мең саҡҡыларын емелдәтә.

Талғын елдә саҡ-саҡ бәүелеүгә лә ҡойолоп-ҡойолоп ҡар өҫтөнә төшәләр. Тупыс үҙе килеп тапҡан түпһәлдәге тамыр аҫты ҡыуышлығына бер керҙе, бер сыҡты. Алдында ятҡан ҡарҙы ла аяҡтары менән артҡа тибеп таҙартты. Ғәҙәттә, бүре тормошондағы ҡағиҙә буйынса, инә бүре бик ауырайһа, көсөкләй торған ояһын ташлап ситкә китмәй. Ата бүре уға йә килтереп, йә ҡоҫоп ашата. Көндәр, төндәр буйы ята ул оя тирәһендә. Бик асыҡһа ғына соҡорға йүнәлә. Ләкин хәҙер соҡорҙа ла ит бик әҙ. Булһа ла, төптә, ҡар аҫтында, һәм ул ергә ҡуша туңған. Соҡор төбө бик тәрәнәйгән. Хәҙер унда кереп-сығып йөрөүе – уға үҙе бер ғазап. Беренсенән, сығыр ере текә, икенсенән, тайғаҡ, боҙлауыҡ. Һороно ул ояһы янында һәр саҡ көтә. Килер, ҡоҫоп ашатыр, бәлки, ҙурыраҡ киҫәк айырып алһа, алып килер, тигән өмөтө бар. Ләкин меңәрләгән йылдар буйы кеше ҡулында әҙер аҙыҡ ашап өйрәнгән эт ғаилә ашатыу тигән тойғоһон күптәнән юғалтҡан. Бигерәк тә арландары. Көсөктәрен ҡарынында йөрөткән Тупысты ашатыу йә башҡа ҡурҡыныстан ҡурсалау тигән сифат Һорола юҡ. Ҡыҫҡаһы, Һороға ышанһа, Тупыс астан үләсәк. Көндәр кинәт йылынды. Дүрт-биш көн эсендә ер өҫтөнән шаулап-гөрләп һыуҙар аҡты. Ҡыш буйына тамаҡ туйҙырған соҡорға һыу тулды. Хәҙер унын төбөнә берәү ҙә төшә алмай. Тупыс та, Һоро ла. Бик ауырайғанында ла, көсөк күргәс тә Тупысҡа үҙ йүнен үҙенә күрергә тура килде. Аслыҡтан интекте. Өҫтәүенә, көсөктәре көнө-төнө күкрәген һура. Ҡыш буйына соҡорҙағы итте ашап, ул нисектер табып ашау бурысына етди ҡарауын йомшартып өлгөргән, һыу тулы соҡор янына килә лә кире китә. Әммә ҡыш буйына үҙҙәре ҡалдырған тиҙәктән башҡа еҫкәрлек нәмә таба алманы, һирәк-һаяҡ унын ояһы янына Һоро килә. Тамыр аҫты ояға кереп көсөктәрҙе еҫкәр итһә, Тупыс уны яҡын ебәрмәне. Урынынан тороп, яңаҡлап ситкә ҡыуҙы. Тупыстың көсөктәре өҫәү ине. Имергә һөт, ашарға ит булмағанлыҡтан, көсөктәр ябыҡ, икеһе бигерәк әжәмек булды. Тыуғанда ҙур, һимеҙ булып тыуҙы улар. Тик инәләре ас, ябыҡ булғанлыҡтан, уларға һөт етмәне. Өҫтәүенә ҙурырағы, көслөрәге ике бәләкәйҙең ауыҙынан һәр саҡ имсәкте болашып, үҙе ҡабыр булды. Тупыс Һороноң өйө янында ла урачҡыраны. Шәйхетдин уны күреп иҫе китте, һыуҙар аҡҡан осорҙа ғына һимеҙ, ыҫпай ине был инә бүре. Бүрене күреү менән унын хәлен аңланы. Тимәк, көсөкләгән. Соҡорҙағы ит һыу аҫтында ҡалған. Ата бүре беленмәй, юғиһә ул Дуҫбай менән уйнамаҫ ине. Бүре унын өйөнә көн һайын килә, көн һайын Шәйхетдинде, Һороно күҙәтә. Аслыҡ туған да, кейәү ҙә түгел. Әллә Дуҫбайҙы тотоп ашар итәме икән, тип тә уйланы. Әммә ҙур, һимеҙ Дуҫбай ҡаҡ һөйәккә ҡалған инә бүрегә бирешерлек түгел. Нисек булһа ла, ашатырға теләне ул ас бүрене. Бик ас булһа, юғиһә, бейәгә йәбешеүе ихтимал, тип уйланы. Кисә лә, бөгөн дә танауын күтәреп Йондоҙ торған кәбән яғын еҫкәне лә еҫкәне. Ни тиһәң дә, бүре бит.

Шәйхетдин арба-ҡура тирәһендә булғанда өй янына һис килмәй. Йәҙрә менән генә атмаһаң, картечь алыр алыҫлыҡта ла йөрөмәй. Йөҙ аҙымдан да яҡын ебәрмәй Шәйхетдинде. Ә Дуҫбай янына барһа, ауыҙын еҫкәй, уны уңайы сыҡҡан һайын ялап ала. Шәйхетдин был ас бүрене ашатыр өсөн таҫҡа ит, балыҡ, икмәк киҫәктәре һалып, ул йөрөгән ергә ултыртты ла үҙе күҙәтеп торҙо. Әммә ул таҫҡа яҡын да килмәне. Ундағы аҙыҡты һайыҫҡандар, ҡоҙғондар һәм Дуҫбай ашап бөттө. Шулай ҙа Шәйхетдин зиһенле кеше. Икенсе көн аҙыҡ-түлекте ул ҡар өҫтөнә ҡараңғы төшкәс таратып һалды, ә Дуҫбайҙы бәйләп ҡуйҙы. Төндә Дуҫбай шау ҡуптарҙы. Тимәк, ас инә бүре аҙыҡты ашаған, тип уйлап ятты Шәйхетдин. Таң атып, яҡтырғас, ем һалған ергә барҙы. Бер киҫәк ит тә, һөйәк тә ҡалмаған. Әммә икмәк киҫәктәрен ашамаған. Уларҙы ас ҡоҙғондар ташый башлаған. Яйлап балыҡ ташлап та өйрәтеп алды уны ашатырға. Тик ул был балыҡтарға Дуҫбай ашағанын күргәс кенә тейҙе. Тамыр аҫты оянан ун-ун биш аҙым ғына ерҙә һыу эсә торған соҡор бар ине. Ҡоролоҡ осорҙа ла уға ҡайҙандыр һарҡып һыу төшә. Тупыстың ырыуҙаштары уны ынтылып ятып эскәндер. Әммә ул быйыл яҙғы һыуҙан туп-тулы булды. Инде ике айлыҡ булған көсөктәр, инәләре өйҙә юҡ ваҡытта, арлы-бирле йөрөйҙәр. Аслыҡтан сыйылдайҙар, ят таш, тамыр йә тере фиғелле һәр нәмәне күреп ырылдайҙар, хатта олоу ауазын да сығарған кеүектәр.

Көсөктәрҙең береһе шул тулы һыулы соҡорға барып ҡараны ла ундағы ҡыбырлап торған йәнгә атланы... Соҡорҙоң текә ярынан шыуып һыуға төшөп, сәсәй-сәсәй батты. Һыу йотоп эсе кәпәйгән үле кәүҙәһе генә өҫтә йөҙөп йөрөр булды. Күрәһең, аҙыҡ эҙләп был китеүендә Тупыс оҙон сәфәргә сыҡҡандыр. Хәҙер көсөктәргә саф ит килтереү генә түгел, уларға тере йән эйәһен күрһәтеү ваҡыты ла еткән. Яңғыҙ ҡалып бала аҫрау... ай-һай. Уны тик бик уңған инәйҙәр генә тормошҡа ашыра алалыр. Улар һәйкәлгә лайыҡ! Хатта бүре булһалар ҙа!

Ҡарауһыҙ, инде өсөнсө көн ас булған ике көсөктөң береһе, шыңшый-шыңшый, ҡуйылыҡ араһында аҙашты. Үҫкән үлән, ҡуйы тал ботаҡтары араһынан йөрөй торғас, ҡапыл ул ялансыҡҡа килеп сыҡты. Һары Түр армыты ҡаяһына оя ҡорған бөркөт юғарыла, бик бейектә, йөҙә ине. Уның үткер күҙҙәре һәр дүңгәкте, һәр тумарҙы яҡшы айыра. Бына ул үҙенән бейек үлән араһынан ары ла, бире лә борғаланып йүрмәләгән йәнлекте күреп ҡалды. Уны күҙҙән ысҡындырмай төшә биреп, бер өйөрөлөп сыҡты ла, ҡанаттарын ҡыҫып, ергә йомолдо.

Бер һелтәүҙә үк эләктереп алды көсөктө. Үткер тырнаҡтары менән йомшаҡ көсөк тәнен үтәнән-түтә тишеп тотоп, талғын ғына ояһы яғына, себештәрен ашатырға осто. Аслыҡтан йөндәре ҡороп, тырпайып бөткән йоҡосо ҙур көсөк тамыр ҡыуышта һис бер нәмә белмәй йоҡлай ине. Үҙе йоҡлай, үҙе һиҙемләй. Тәне өҫтөнән кемдер, йылы тынауын ебәреп, уны еҫкәй. Ят еҫ. Тәбиғәт ҡушыуы буйынса һәр ят шәүләнән, еҫтән ҡурҡырға тейеш булған был көсөк күҙен асҡанда, алдында ҙур булып йөнлө йән эйәһе тора ине. Ҡурҡып, төпкәрәк һырыҡты. Ҙур йән эйәһе уны ботонан тешләп һөйрәтеп сығарҙы ла, әйҙә, уйнайыҡ, тигәндәй, алғы аяҡтары менән һаҡ ҡына көсөккә һуҡҡыланы. Тапалаҡ уйнағандағы кеүек һәр мөйөшкә һырығып ҡасып, һөйрәтелеп сығып уйнай торғас, ярты көн үтте. Күрәһең, ялҡты ҙур нәмә. Көсөктө ташлап, оя янынан ғәйеп булды. Тағы ла төн, көн үткәндер. Кис ҙур һоро нәмә көсөк янына тағы ла килде. Хәҙер инде көсөк унан ҡурҡманы. Ашарға булған теләге ҡурҡыу тойғоһонан көслө ине.

Һороно күреү менән, ул уның күкрәк аҫтына кереп, имеҙлек эҙләне. Бәләкәй генә ике аяғын уның йөнө араһына төкәп, Һороноң ятыуын талап иткәндәй. Ә Һоро уны аңламай, ботон күтәреп көсөктө аша атлап сыға ла китә.

Һороноң оя янына һәр килеүе һайын ҡабатланды был ғәмәл. Таң ата ла кис була, таң ата ла кис була. Ә көсөктөң инәһе һаман килмәй ҙә килмәй. Тупыс юҡ булғас, Һороноң дүртенсе килеүенән һуң көсөк унан ҡалманы. Уның етем ҡалыуын әллә белеп, әллә махсус рәүештә эйәртте. Аслыҡ тойғоһо, йәшәү өсөн көрәш ғәмәле көсөктө Дуҫбайҙан айырманы. Быны Тәңре ҡануны бойорҙомо әллә етемгә? Эйе, һәр йән эйәһенең был донъяла йәшәргә хоҡуғы бар. Һәр йән эйәһенең! Аллаһы Тәғәлә уны тормошҡа йәшәр өсөн тыуҙырған икән, тимәк бушҡа түгел. Әммә һәр йән эйәһенең үҙ яҙмышы, үҙ юлы. Тәҡдир ниндәй юл, ниндәй яҙмышҡа  дусар итә бит. Быны Тәңре үҙе генә белә. Дуҫбайҙың бүре көсөгөн эйәртеп, артына ҡарай-ҡарай килгәнен Шәйхетдин баҡса кәртәһе аша күрҙе. Күрҙе лә тағы ла шаҡ ҡатты. Ғәләмәт! Был ниндәй эт булды? Йә бүренең үҙе менән йөрөй, йә көсөгөн эйәртеп ҡайта. Бына шайтан!

Ваҡиғаның нишләп былай килеп сығыуын ул башта төшөнмәне. Шул арала Дуҫбай Шәйхетдингә килеп, ярамһаҡланған кеүек ҡойроғон болғай-болғай, иркәләнергә, уның ҡулдарын яларға тотондо. Үҙ ғүмерендә ике аяҡлы йән эйәһен тәүләп күргән көсөк Шәйхетдингә илле-алтмыш аҙым етмәй туҡтап ҡалды. Шәйхетдин уға яҡынлашҡас, үҙенсә мырҡылдап тағы ла ситкә китте. Ә Дуҫбай, етем көсөк менән хужаһын яраштырыға теләгәндәй, бер көсөккә, бер Шәйхетдин янына килде. Шәйхетдин бүре көсөгөн яҡындан күреп иҫе китте. Шул тиклемябыҡ ине ул. Тире лә һөйәк кенәһе мәхлүктең. Шунда төшөндө ул хәлдең асылын. Етем ҡалған бит ул! Ул бүре балаһын бик ҡыҙғанды, йәлләү хисе уянды. Уны ашатырға шунда уҡ келәтенә кереп, ит киҫәге сығарып, көсөк йөрөгән ергә һалды. Әммә уның итте ергә һалып китеүе була, Дуҫбай ашай ҙа ҡуя, ырылдап, көсөктө янына ла ебәрмәй, аҙыҡ менән бүлешмәй. Ас көсөккә тәмле ит еҫе сыҡҡан ҡанлы үләнде генә еҫкәргә ҡала. Ахырҙа Шәйхетдин Дуҫбайҙы көсөк йөрөгән ергә бәйләп, уның буйы етмәҫлек ергә ит һалды ла ситтән күҙәтеп торҙо. Эҙләнеп тапты көсөк аҙыҡты. Уның ҡомһоҙланып, һоғалап-һоғалап ашауы бик ас булыуы тураһында һөйләй ине. Шулай ҡабатланды көн һайын. Һуңғы көндәрҙә ул Шәйхетдингә бер аҙ өйрәнгән кеүек тә булды. Ул килә бирһә, ситкәрәк китә лә бик ентекләп уға ҡарап тора.

Аштың да төрлөһө була. Һәр ваҡыт ит булмай. Балыҡ, һурпа, икмәк кеүек шыйығыраҡ ашты бәләкәй тасҡа һалып ултыртты. Тимерҙән ҡурҡыу уға булмышынан һалынған. Тасҡа килмәне көсөк. Урап тик йөрөнө. Бәйле Дуҫбай уға өрҙө лә өрҙө.

Ике-өс көн ултырҙы һалған аш. Ҡыр йәнлегенең дә булмышына һалынған һаҡлығынан тыш уның, көсөктөң, миҫал, һол алыуын да аңлай Шәйхетдин. Шуға ла Дуҫбайҙы ысҡындырҙы. Уның тастан һайыҫҡандар менән болаша-болаша ашауын ситтәнерәк күҙәтте көсөк. Әммә тасҡа аҙаҡ та яҡын килмәне. Ҡыр йәнлектәренең тормошон яҡшы белгән Шәйхетдин, иҫке ауһаҡ (уҫаҡ) түмәрен соҡоп, кәмәүһауыт эшләне. Иң алда кәмәгә ит киҫәктәре, балыҡ һалып ултыртып ҡуйҙы. Ағас туҫтаҡҡа еҫе һеңә бирһен, тип уйланы. Икенсе көнө түмәр улаҡты сығарып, ҡайынлыҡ ситенә ҡуйҙы. Ағас туҫтаҡтан йыраҡ та түгел таш артына ултырып күҙәтә башланы. Оҙаҡ ҡына көттө. Ахырҙа арҡаһын нимәлер зымбырҙатҡандай булғанға боролһа, янында уҡ уға ҡарап бүре көсөгө тора. Биш аҙым ерҙән күҙгә-күҙ ҡарашып торҙо улар. Шәйхетдиндең тәне

сымырҙап китте, тубыҡ быуындары ҡалтыранды. Күҙҙәре, күҙ ҡараштары хәс тә етемдәрҙеке, бәхетһеҙҙәрҙеке. Ул нәҡ тә балалар йортондағы сабый Ҡеүәттеке кеүек. Бүре көсөгөнөң ҡарашында бер ниндәй ҙә сатҡы, ут күренмәй. Гүйә, өмөтһөҙлөк томаны солғап алған. Ялбарыу ҙа, таяныс та, яҡлау ҙа һорай... Өс айлыҡ бүре көсөгө лә, дүрт-биш йәшлек кеше сабыйы ла – икеһе лә хәйләһеҙ, эскерһеҙ. Донъяла уларҙың һис бер кем алдында ла ғәйептәре юҡ. Тәбиғәт уларға нимә ашап тереклек итергә яратҡан, улар теп-теүәл шуны үтәй. Тик айырма шунда: береһе йәшәр өсөн үләнде лә, ҡоланды ла, һыуҙағы балыҡты ла ашай. Миллионлаған тонна тәбиғәт емешен ашай, ҡыра, үҙенә йәшәү майҙанын киңәйтеү өсөн бер-береһен миллионлап үлтерә, яндыра, астарҙы, етемдәрҙе ҡалдыра. Вәхшәтлектең вәхшәтен эшләй, үҙ йыртҡыслығын йыртҡыслыҡ тип иҫәпләмәй. Тәбиғәт ҡануны буйынса, астан үлмәҫ өсөн онотҡанда бер йәнлек тотоп ашаусы бүре – уның өсөн иң йыртҡысы. Иң хас һәм килешә алмаҫлыҡ дошман.

Әммә сабыйҙар берәүгә лә дошман түгел. Бүре көсөгөнөң күҙ ҡарашын күҙе мөлдөрәп йәше ағып, упайып ҡарап торған Ҡеүәт улының күҙҙәренә оҡшатты. Ул ҡараштар төшөндә лә, өнөндә лә уның күҙ алдынан китмәне. Ауыл Советына ла барып, баланы һорап алып ул итеү мәсьәләһен кәңәш итте. Уға ҡырҡа кире яуап алғас, үҙ-үҙен яйлап тынысландыра башлағайны... Иҫенә төшөрҙө бит яра һыҙлауын был етем... Эйе, көсөк, һис шикһеҙ, етем, сөнки ун-ун биш көн элек ҡара тал ҡайырыһы һыҙырып йөрөгәндә көтөүселәр килеп сығып, һүҙгә-һүҙ ялғанып, инә бүре атып алыуҙары, ҡайҙалыр шул тирәлә ояһы һәм көсөктәре барҙыр, тигән фараз йөрөтәләр ине. Көсөк, бәлки, түмәр туҫтаҡҡа килер, тигән өмөттә ул өйөнә ҡайтып китте.

Яйлап бер-береһенә эйәләштеләр, хатта ышаныу хистәре барлыҡҡа килде. Көҙгә ул буйға ҙур бүре үк кеүек булмаһа ла, ысын бүрегә әйләнде. Шәйхетдингә шул тиклем өйрәнде һәм бик иркә булып сыҡты. Йә еңелсә генә тешкәкләп, йә сабышып уйнарға Дуҫбайҙы ла, Шәйхетдинде лә ҡаңғыртып бөтөрә, һунарға уны көндәр көҙгә ауыша башлағас уҡ өйрәтә башланы Шәйхетдин. Сусҡаға йә ҡыр кәзәһенә һунарсылыҡ итте улар. Бүре көсөгөнә «Етем» тип исем дә ҡушып ҡуйҙы. Ашаған һайын, өндәшкән һайын исемен ҡушып саҡырғас, уға тиҙ өйрәнде. Дуҫбай менән Етемде эҙләнергә, ҡыуып килтерергә ебәрә лә үҙе һәр саҡ һағауылда тора. Күп осраҡта һунарҙары уңыш менән тамамланып, үҙҙәрен байтаҡ ваҡытҡа ит, аш менән тәьмин итәләр. Мылтыҡ атылыуына ла өйрәнде Етем. Әгәр ул яҡында булһа, мылтыҡ атылыу менән һикереп-һикереп эҙләнергә тотона. «Эттәр» янында булғанда, Шәйхетдин берәү менән да осрашырға теләмәне. Сөнки уны, бейәһе Йондоҙҙо ҡыҙғанып, улар икәүләп теләһә кемдең боғаҙына йәбешергә торалар. Хужаларының янына һис бер кемде лә яҡын ебәрмәйҙәр.

Япраҡтар ҡойолоп, ер туңды. Тиҙҙән ҡар ятасаҡ. Шәйхетдиндең әлегә ике эше бар. Йондоҙға ҡышҡылыҡҡа етһен өсөн ҡырҙа ҡалған бесәнде ташып ҡуйыу. Икенсеһе – өсәүһенә етерлек ит әҙерләү. Балыҡ тотоп туңдырыу. Үҙ яйына ғына ҡуҙғалып, дүртәүләп ҡырҙа ҡалған ике кәбәнде ташынылар. Ҡырпаҡ ҡар яуғас, быҙау күрмәй йөрөгән бик һимеҙ мышыны атып алдылар. Итен ыҫланы, киҫәк-киҫәк итеп турап туңдырҙы. Эс-ҡарынын да ҡалдырмай ҡышҡылыҡҡа йыйҙы. Бынан башҡа ике сусҡаға хужа булдылар. Дуҫбайҙан айырмалы рәүештә, Етемдең бер ҡылығы бар. Хужаһы яралаған йәнлек йығылмаһа, Етем уны ҡыуып етеп бер тешләһә, ебәрмәй, һөйрәлеп йөрөй, әммә ысҡындырмай. Уның

был ҡылығы Шәйхетдингә бик оҡшай. Хәҙер, бигерәк тә быйыл, Шәйхетдиндең ҡарыуы ҡайтты. Элекке кеүек өс ботҡа яҡын итте арҡаһына элеп, унар саҡрым аша үтә алмай. Һул яҡтан ҡултыҡ аҫтындағы ағза сәнсә, эйелеп-бөгөлөп, сүгәләп китә. Бигерәк тә ауыр күтәрһә. Был сәнсеү бигерәк тә быйыл утын әҙерләгәндә үҙен нык һиҙҙерҙе. Тәне ойоп, күҙ алдары ҡараңғыланып, ергә ятырға мәжбүр булды. Шул ергә ятыуы ҡотҡарҙы шикелле уны. Яйлап тән ойоуы бөттө, күҙ алды ла асылды.

Шәйхетдин менән Дуҫбай өйҙә йоҡлайҙар. Һәр кемдең үҙ һикеһе бар. Һәр саҡ бер ерҙә бөгәрләнеп ятҡанға, Дуҫбайҙың ятыр ере соҡорайып бөткән. Стенаға арҡыс-торҡос итеп киң ҡайышлы ике мылтыҡ эленгән. Ит тә, балыҡ та бешерә торған ҙур соңҡа таба ла, ҡоромға буялып бөткән биҙрә лә һис буш булмай. Һәр саҡ шыжлап йә балыҡ бешә, йә боҫ сығарып бутырҙап һурпа ҡайнай. Суйын плита булмағанлыҡтан, уны ҡыяҡ ҡара таштарҙан көмбәҙ итеп яһалған тишек алмаштыра. Сәй эсеүҙе лә онотто Шәйхетдин. Ул тик сейә япрағы, гөлйемеш тамыры, меңъяпраҡ, еләк, бөрлөгән һабағы, һуҡыр кесерткән, мышар, балан, һары һәм көрән мәтрүшкә һабаҡтары ҡайнатмаһын эсә. Өйҙә шәкәр кеүек нәмә юҡ. Уларҙы кипкән еләктәр, умарта балы алмаштыра. Быйыл уның биш баш умартаһы ҡышҡа керәсәк.

Ҡар ҡалын булып яуыуға ул бөтә ҙур эштәрен бөтөрөп, тормошон үҙ ағымына ҡуйғаны. Хәҙер ул боҙ өҫтөнә балыҡ ҡармаҡларға бара. Шәшкегә, һыуһарға ҡапҡандар ҡора. Көндө томалап, ябалаҡлап-ябалаҡлап ҡар яуырға тотондо. Бындай көндә балыҡ ҡаба торған, тип уйлап, әйберҙәрен бәләкәй санаға һалып, яҡындағы күлгә китте. Ҡуйған ауҙарын да ҡараясаҡ. Биш-алты суртан барыбер эләккән, тип фаразланы ул. Әммә күлгә саҡ-саҡ етә алманы. Һул ҡул аҫты әсетеп сәнсеп, сүгәләп ултырырға мәжбүр итте. Ҡуй, етер, башҡаса барма, юғиһә, туҡтайым, тип әйткән кеүек уға йөрәге. Һуғыш, ҡаты яра, концлагерь, Америкала плантацияла бил бөгөү, кораблгә ауыр тоҡтар ташыу, Ҡарағанда шахталарындағы ауыр эш, ғаилә фажиғәһе... Бөтә һыҙланыуҙар ҙа шул йөрәге аша үтте түгелме? Бик яйлап, саҡ-саҡ ҡайтып етеп, үҙ һикеһенә йығылды. Йығылды һәм мәңгелеккә, күҙе асыҡ көйө, һуңғы көнө байыны.

Көндәр үттеләр ҙә үттеләр. Өй һыуыны. Дуҫбай ишектән бер кереп, бер сығып йөрөһә лә, ҡайһы ваҡыт япмай. Ә Етем бер ваҡытта ла өйгә кермәне. Япма аҫтында хужаһы эшләп биргән ерҙе үҙ итте. Йәш бүре менән эт хужаларын юғалтып, етемһерәп ҡалдылар. Уларҙы ашатыусы ла, иркәләүсе лә юҡ хәҙер. Тик Йондоҙо ғына интекмәй. Хужаһы менән ҡышҡылыҡҡа етерлек бесәнде герш-герш ашай. Һыуһынын ҡар менән баҫа.

Дуҫбай менән Етем генә аслыҡтан интекте. Икәүләп һунарға сығып, бер нисә тапҡыр кәзә лә тотоп ашанылар. Бүлеп, самалап, һаҡлап ашамағас, ит тиҙ генә бөтә лә ҡуя. Бына һуңғы ун көнлөктә улар ауыҙҙарына һис бер нәмә ҡапҡандары юҡ. Дуҫбай өйгә керә лә ике алғы аяғын Шәйхетдин ятҡан һикегә ҡуйып өрә лә өрә. Ситкә аҫылынып төшкән ҡулы еңенән тешләп еңелсә генә тартҡылай. Тор, тор, беҙгә һинһеҙ күңелһеҙ ҙә, ауыр ҙа, ти ул, гүйә. Тик уның үҙе кисергән тойғоһон, уйын әйтеп бирергә теле юҡ. Ахырҙа, һике өҫтөнә һикереп менеп, Шәйхетдиндең туңып, ҡатып бөткән асыҡ ҡулын, битен ялай. Һуңғы аҙнала Дуҫбайҙың хужаһы янына һикегә менеп өрөүе, ҡулын, битен ялап уятырға теләүе йышыраҡ ҡабатлана. Уның эстә өрөүенә аптырап, күтәрмәгә бер ваҡытта ла аяҡ баҫмаған Етем, асыҡ ишектән башын тығып, Дуҫбайға ҡарап тора. Айлы

оҙон һалҡын төндә улар икәүләп һуҙып-һуҙып, хужаларын юҡһынып олойҙар. Юҡһынып олоу көндөҙ ҙә һәр саҡ ишетелде. Бер көндө урман ҡараусылар көн һайын бер урында бүреләр олоғанын ишетеп, урынды самалап, Шәйхетдиндең өйөнә килделәр. Атлы кешеләрҙе күргән Етем урман араһына ҡасты. «Бүре! Бүре!» тип ҡысҡырып артынан мылтыҡ менән аттылар. Кешеһеҙ, хужаһыҙ зарынтизар булған Дуҫбай артыҡ ҡырыҫланманы.

Шәйхетдиндең туңып ҡатып бөткән кәүҙәһен санаға һалдылар. Дуҫбайҙың көн һайын ялауынан Шәйхетдиндең туң бите соҡорайып бөткәйне. Йондоҙҙо ла тотоп, аттарының йәнәшәһенә бәйләнеләр ҙә ауыл Советы булған ауылға табан киттеләр. Санала хужаһы, йәнәшәлә Йондоҙ бәйле булғас, Дуҫбай ҙа уларға ҡаршылыҡһыҙ эйәрҙе.

Етем, Шәйхетдиндең мылтыҡ атыуынан ҡурҡмаһа ла, был ят кешеләрҙең уға күҙәп атыуы насар ниәттә икәнен һиҙемләй. Ҡасты ул, ваҡытында ҡасты. Ҡасты ла, өйҙәренән алыҫ булмаған текә түбәгә менеп, санаға егелгән атлы кешеләрҙе, Йондоҙҙо, улар артынан теләр-теләмәҫ кенә булып барған Дуҫбайҙы күҙҙән юғалғансы ҡарап ҡалды.

Тағы ла яҙмыш ҡосағында бер үҙе ҡалды Етем. Ысынбарлыҡта, уны ҡарап үҫтергән хужаһы Шәйхетдин дә үҙ илендә етем булды, һис бер кем уның иле, ере өсөн күргән михнәттәрен иҫләмәне лә, баһа ла бирмәне. Ниндәй енәйәт ҡылды һуң ул? Пленға ул үҙе теләп бирелеп, ҡул күтәрмәне. Ауыр, бик ауыр яралы килеш аңын юғалтып эләкте. Концлагерь тамуҡтарын үтте. Ҡоллоҡта бил бөктө. Үҙ илендә уголовникка әйләндерҙеләр. Был турала ул күп уйланды. Әммә намыҫы таҙа булғас, тынысланды. Ике ғаилә ҡорҙо. Береһе үҙ ғаиләһе. Ҡатыны, мәрхүм ҡыҙы, ике улы. Икенсе ғаилә лә үҙенеке, әммә һәр береһе – айырым тармаҡ тереклеге. Кеше, ат, эт һәм бүре. Өсөһө лә уға бик яҡын ғаилә ағзалары. Бер-береһенә улар тормошта ярҙам иттеләр. Кеше уларҙы ашатты, эсерҙе, ә ҡалғандары эшләште, табышты, һаҡланы, яҡланы. Икеһенең дә яҙмышы, уның теләгенән башҡа, тәҡдир ҡушыуына дусар булды. Әммә ул ғүмере буйы яҡшылыҡ өсөн көрәште. Йән эйәләренә изгелек ҡылыу һәр саҡ ниәтендә булды.

Етемдең дә барлыҡ бүре зат-зәүере ғүмере буйы эҙәрлекләнә, төрлө ысул менән үлтерелә, атыла. Әммә улар ҙа ғүмер буйы иң ҙур ике изге эш башҡара. Тоҡомдо дауам итеү һәм үҙ ояһын, үҙе йәшәгән ер төбәген башҡаларҙан, башҡа баҫҡынсыларҙан һаҡлау. Хәйер, етемдәр һәр саҡ етем! Бүре көсөгө Етемдең дә яҙмышы аянысло булырмы? Таянырға, тормош миҫалын, тәбиғәт ҡанунын булмышына ярашлы тулыһынса өйрәнер өсөн ата-инәһе, туғандары ла юҡ. Кеше янында үткәргән сағыштырмаса еңел тормош уны көнө-төнө эҙләнеп, тик үҙ табышына ғына таянып йәшәү ҡанунынан бер аҙ ситләштерҙе. Яңы тормош ҡағиҙәләрен өйрәнә алырмы, әллә аслыҡтан һәләк булырмы?

Аяуһыҙ ауыр көндәрҙең әле алда икәнен меҫкен аңламай. Эсе бошоп, юҡһынып, шул бейек түбә өҫтөндә һәр таңда, һәр эңерҙә олой ҙа олой. Уның моңһоу тауышы, тыуған иле, ҡуйы шырлығы, армыт-армыт бейек тауҙар, ҡалын урмандар өҫтөнән һикәлтәле-һикәлтәле булып ҡағылып, үҙенә кире ҡайта. Тик уны берәү ҙә ишетмәй. Тоҡомдаштары ла...

# *Дуҫлыҡ күперҙәре*



**Имдат**
**АВШАР**

## ЙӘН ӨШӨТКӨС ТӨШ

**хикәйә**

Ҡараңғылыҡ…

Төндө тетрәндергән, ҡара бушлыҡтың дегет төҫөндәге пәрҙәләренә бәрелеп, шаңдау булып әйләнеп ҡайтҡан шаҡшы ҡыңғырау тауышы… Тәүге кистән ҡанатланып осҡан төньяҡ-көнсығыш еле ҡыңғырау тауышын, гүйә, тыңлап тора ла, кәйелеп оса-оса, бер мәлгә ҡатып ҡала…

Пансион бинаһының бетон диуарынан ташып сыҡҡан был тауыш яҡында ғына аҡҡан Джинджават шауын баҫа һәм ҡоторонған был йылғаның боҙ ҡатыш һыуына ҡушылып һөйрәлә, ҡара йылан кеүек төн эсенә ағып китә. Ҡыңғырау тауышынан һуң коридорҙа йүгереш башлана. Аҫҡы ҡаттан бетон иҙәнде туҡмаған ағас табанлы сандалиҙарҙың ҡабалан шаҡылдауы, яланғас аяҡ шапылдауы, балаларҙың шыбырлауын йотоп көсәйгән шкаф ишектәренең шығырлауы ишетелә.

Ваҡытты өлөштәргә бүлгән был тауыш көндөҙ ун минутлыҡ тәнәфестең йәки ҡырҡ минутлыҡ дәрестең башланыуын белдерһә, кистәрен иһә тауышланмаҫҡа

---

*Имдат Авшар Төркиәнең Ҡыршехир педагогия колледжында, Инонө университеты магистратураһында уҡый. 1999 йылдан Ығдыр өлкәһендә башланыс мәктәптәр инспекторы.*

*Шиғыр һәм хикәйәләре “Санджактар”, “Күк байраҡ”, “Бизим Көллийе”, “Берджесте”, “Шехрияр”, “Кәрҙәшлек” (Керкук), “Байраҡ” (Бағдат), “Улдуз” (Әзербайжан), “Ҡырғыҙ әҙәбиәте” (Ҡырғыҙстан), “Жулдыз” (Ҡаҙағстан) кеүек журналдарҙа донъя күргән.*

*Имдат Авшар – Евразия Яҙыусылар союзы һәм Донъя йәш төрки яҙыусылар союзы, төрки донъяһының уртаҡ журналы булған “Кәрҙәш ҡәләмдәр”ҙә мөхәррирҙәр ҡоро ағзаһы. Әлеге хикәйәһе “Юныс Әмрә “Мөхәббәт” исемле хикәйәләр конкурсында беренсе урынға лайыҡ була.*

*Тәржемәсе Фәйрүзә Ғарипова – Илеш ҡыҙы, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институтында социолингвистика бүлеге мөдире вазифаһын башҡара. “Опыт языкового строительства в Республике Башкортостан” һәм “Языковая политика и общественная мысль” исемле китаптар авторы.*

*Башҡортсанан, руссанан төрөксәгә тәржемә емештәре төрөк матбуғатында баҫылып тора.*

ҡуша, бүлмәләргә инергә саҡыра... Был тауышҡа бөтә балалар буйһона. Ҡыңғырау тауышы һәр кемгә таныш, уның мәғәнәһен һәр кем белә.

Бер аҙҙан карауаттарҙың һыуыҡ, һоро тимерҙәренә тотоноп, улар урындарына менәсәктәр. Бөтә бүлмәләрҙә ҡәбер тынлығы урынлашасаҡ. Әсә йылылығынан мәхрүм, һағыш баҫҡан йөҙәрләгән бала, юрғандарына төрөнөп, йоҡоға таласаҡ.

Һуңынан ҡош мәхшәре башланыр. Тынғыһыҙ ҡоштар өйөрөләр һауала. Күк күгәрсендәр, урман күгәрсендәре, йәшел башлы өйрәктәр, тәгәрлектәр, әберсендәр...

Ҡошҡа әйләнгән ҡатындар, ҡанат ҡағып, алыҫтағы, тауҙар араһындағы ауылдарҙан киләсәк. Башта пансион бинаһының ҡыйыҡына ҡунасаҡтар, һуңынан – тәҙрә кәрниздәренә... Ҡараңғыла ҡоштар тәҙрәләргә туҡылдаясаҡ. Берәүҙәре балаларҙың төшөнә инәсәк, икенселәре иртәнгә тиклем һауала өйөрөләсәк.

Был тауыш таң атҡанда тағы ла ҡыңғырау тауышына уянып, урындарынан һикереп торған балаларҙы һәм бөтә ҡоштарҙы ҡурҡытасаҡ. Ҡоштар ҡарлы тауҙарға табан осоп китәсәк.

Крандарҙан берәм-берәм һыу тамсылауы туҡтай. Ярым ҡараңғы коридорҙар һыу тауышын йота. Бүлмәләрҙән коридорға төшкән тоноҡ ут яҡтыһы ла аяҙ төндөң ҡосағында иреп юғала. Пансион бинаһы ҡараңғы; коридорҙар буш, һаңғырау, телһеҙ; стеналар шәрә, стеналар һыуыҡ...

Тәрбиәсе бүлмәһендә – мин...

Яңғыҙлыҡ...

Ел асыуланып тәҙрәләргә ҡағылып үтә...

***

Кешене ҡорошторол ҡыҫҡан был һыуыҡ, буш, мәйет төҫлө стеналар араһында, һәр дежур булып ҡалғанымда һуңғы ҡыңғырау тауышы менән бергә, ут һүнер-һүнмәҫтән оло йәштәге бер ҡатын ҡулымдан тота. Йә әсәйем, йә өләсәйем – таный алмайым. Ел ул ҡатындың итәген күтәрә, итәге битенә ҡаплана. Бер ҡулым уның ҡулында. Ҡулымды ташламай. Артынан йүгерәм.

Атлайбыҙ, ҡараңғылыҡты яра-яра атлайбыҙ. Ул ҡатын мине үткәндәргә, стеналары ағартылған биш балалы кирбес өйгә килтерә. Был кирбес өйҙөң иң өлкән улы миңә шиғырҙар уҡый, әкиәттәр һөйләй. Күҙҙәремде йомоп тыңлайым һәм бынан утыҙ йыл элек яңғыраған тауыштарҙы ишетәм. Тәүҙә күҙ алдыма ярым-ярты күренештәр килеп баҫа: кешнәгән ҡара аттар, сыбыртҡы шартлауы, бормалы-бормалы оҙон юлдар, шул юлдар алып барған емерек юлаусылар йорто һәм шул йорттоң стеналары, ел ҡаршыһында ҡоро япраҡ кеүек һелкенгән бер кеше...

...Һуңынан, йылдар төпкөлөнән, дөм-ҡараңғылыҡ эсенән күҙ алдыма әкиәт геройҙары килеп баҫа. Бөтәһен дә күрәм, ҡулымды һуҙһам, ҡағыла алам. Ете ҡат ер аҫтындағы дейеүҙәр, илаҡ бәрей, бәхетһеҙ принц, мөһабәт ағастар, тиле һыуҙар, төпһөҙ ҡойолар, күркәм һарайҙар, ҡанаттары күкте ҡаплаған феникс...

Үҙемде ҡайҙа тип тә әйтә алмайым. Утыҙ ҡояш йылы оҙонлоғондағы бер ептең осона бәйләнәм. Шул ептең икенсе осо буй етмәҫ, тауыш ишетелмәҫ бер ергә бәйле. Йылдар төпкөлөн айҡаған, оло бушлыҡта туҡтауһыҙ һелкенгән бер маятник мин...

Кинәт төндәрен шул кирбес өйҙөң бүлмәләрендә тыныслыҡ урынлаштырған шиғырҙар, әкиәттәр алыҫая, юҡҡа сыға. Шул өйҙөң бәләкәй бүлмәһендә мин япа-яңғыҙ тороп ҡалам. Һуңынан таң ата. Иртән иртүк, атайымдың ҡулынан тотоп, ағайым китә. Китә. Мин, ҡулымды һис ебәрмәгән ҡарсыҡтан ысҡынып, уларҙың артынан йүгерәм. Зәңгәр, емерек автобус туҙан эсенә сума.

– Ағайым китте! Ағайым китте! – тип ергә ятып илайым.

Теге ҡарсыҡ:

– Ҡайтыр, илама! – тип мине йыуатырға тырыша. Ышанмайым.

Әсәйемдең атайыма әйткән үпкәле һүҙҙәре ҡолағымда сыңлай:

– Бот буйы баланы сит яҡтарҙа ҡалдырып ҡайттың.

Атайым яуап бирмәй. Бирмәй.

– Ағайым ниңә ҡайтмай? – тип һәр кис һайын һорайым. Ҡарсыҡ гел бер үк яуапты бирә:

– Интернат-мәктәпкә китте, уҡып бөткәс, ҡайтыр. Һин ят, йоҡла!

…Газ шәмдәле һүнә. Ҡарсыҡ, өрәк ише, күҙҙән юғала. Кирбес өй бүлмәләрендә ҡараңғылыҡ хөкөм һөрә. Тиле төньяҡ-көнсығыш еле өҙләкһеҙ олой, тәҙрәләрҙе һелкетә. Урыныма ҡурҡа-ҡурҡа инеп ятам да юрғаным менән башымды ҡаплайым. Ағастарҙы тамыры менән йолҡоп сығарған теге дейеү тештәрен ыржайтып килә, бер аҙҙан өҫтөмә эйелеп, быялаларҙы зыңғырлатыр тауыш менән һорай:

– Кем йоҡлай, кем уяу?

Йоҡлаһам, тауыш бирмәһәм, мине ашаясаҡ таһа дейеү! Һуңынан бейек бер ағасты тамыры менән йолҡоп алып, тештәрен ҡайраясаҡ. Дейеүҙең тештәре араһынан берәм-һәрәм ҡанлы ҡулдарым, аяҡтарым ҡойоласаҡ.

Дейеү тештәрен бер-беренә ышҡый. Әйтерһең, күк күкрәй. Ул тағы ла һорай:

– Кем йоҡлай, кем уяу?

Ҡалтырай-ҡалтырай, ҡурҡа-ҡурҡа яуап бирәм:

– Бөтәһе лә йоҡлай, тик мин генә уяу…

Мығырланып ары олаға дейеү.

Юрған аҫтынан башымды сығарып, күҙҙәремде түшәмгә төбәйем. Бүлмәләге әйберҙәр ҙурая, формаһын үҙгәртә. Көтмәгәндә түшәмдә аҫылынып торған ағас һәнәк дейеүҙең тештәренә әйләнә. Мейестә быҫҡыған һуңғы ҡуҙҙар, бәй, дейеүҙең ҡанлы ауыҙы, имеш.

– Ит еҫе килә-ә! Кеше ите еҫе килә-ә-ә! – тип өҫтөмә килә дейеүҙең балалары.

Ағайымды эҙләйем. Яткан урынымдың уң яғында бушлыҡ… Ҡулым менән мендәрҙе тотоп ҡарайым, йөрәгемде тетрәндергән яңғыҙлыҡ килеп эләгә ҡулыма. Ҡараңғы төндәрҙә мине ҡурҡыуҙарҙан азат иткән тауыш юҡ. Ҡулдарымды теге ерән сәсле ҡарсыҡтың бармаҡтарынан ысҡындырып, яйлап тәрбиәсе бүлмәһенә юлланам. Тирә-яҡ ҡапыл интернат-мәктәпкә әйләнә. Томандар эсендә, алыҫта ҡалған бөтә яңғыҙлыҡтар, ҡурҡыуҙар, хәсрәттәр бүлмәмде солғап ала.

Илайым…

Ҡараңғылыҡты телеп үткән ҡыңғырау тауышы һаман ҡолаҡтарымда сыңлай. Бүлмәләге уттар һүнгәс, өҫтәл өҫтөнә һалған китабым шул килеш ята. Китапҡа күңелһеҙ генә һирпелеп, ҡарашымды тәҙрәгә, алыҫтағы ҡараңғылыҡҡа, төбәйем. Теге ҡарсыҡ та, кирбес өй ҙә, интернат-мәктәпкә киткән ағайым да, туҙанлы юлдарында мин илай-илай ҡалған ауыл… береһе лә юҡ. Бөтәһе лә ҡуйы ҡараңғылыҡҡа, үткәндәргә инеп юғалған. Бүлмәләрҙәге балаларҙың туғандары тураһында уйлайым. Шул саҡта йәнем телгеләнә, һәм уйҙарымда алыҫтағы тау араһындағы ауылдарға барып әйләнәм.

Күктә болот тынысһыҙлана, ерҙә ағастар иңкәйә… Һыуыҡ ел иҫә. Болотло төндә еңелсә яҡтыртҡан тулған ай йөҙә. Болоттар араһынан килеп сыҡҡанда Тәкәлте түбәһендә, текә ҡаяларҙа көмөш таж кеүек ялтырай. Көндөҙ туй күлдәгенекеләй ҡарлы итәктәрен үҙәнгә йәйгән Тәкәлте битен ҡара яулыҡ кеүек ҡаплай болоттар. Пансион бинаһының быялаларына тиклем төшөп торған акацияның нәҙек ботаҡтарын берәм-һәрәм ергә эйгән ел, һыҡтаған тар[1] кеүек, тәҙрәләр буйлап көйләп үтә. Өшөйөммө, ҡурҡаммы – әйтә алмайым. Тәнем буйлап боҙҙай һалҡын ҡул йөрөй. Тешем тешкә теймәй, ҡалтырайым. Акацияның

[1]Ҡыллы музыка ҡоралы.

ботаҡтары янында үҫкән тал йәнәшәһендәге ағасҡа табан һынырҙай булып эйелә, уға ҡағыла һәм ҡабат турая. Тиле ел ҡасан иҫеүенә ҡарамаҫтан, был акация гел ошо тал ағасы менән хәсрәттәрен уртаҡлаша. Бәлки, ашыға-ашыға йүгергән һәм олоп ағастарҙың нәҙек ботаҡтарын ергә йығып һалған елгә зарланалыр. Кем белә…

Бүлмә буйлап йөрөйөм. Бер нисә аҙымда бөтә бүлмә. Бер өҫтәл, бер карауат, дүрт тарафта бетон… Төн секундлап оҙая һәм уға иптәш булған һағыш та арта. Яйлап солғай мине яңғыҙлыҡ. Өҫтәл янына киләм дә яңынан китапты аҡтара башлайым.

Атаһын һағынған бер бала… Бүлмәләрҙәге балаларға оҡшаған. Тырышып-тырышып ауыл эргәһендәге бейек тауға үрмәләй. Ул тау түбәһе ҡарлы, көмөш тажлы Тәкәтле булырға тейеш. Шул тауға мең төрлө өмөт менән үрмәләгән балаға ҡушылам. Уның менән бергә үләнгә тотоноп, ҡара тиргә батып тау башына менергә, ҡулымды ҡаш өҫтөнә ҡуйып алыҫтағы офоҡҡа, томан эсендәге күлгә, шул күлдә йөҙгән аҡ көймәгә ҡарарға, атайыма ҡул болғарға теләйем…

Юҡ, булмай. Бүлмәләрҙәге балалар үҙҙәренә тарта. Уларҙың ниндәй тауҙарға үрмәләгәнен, ниндәй йәйләүҙәрҙә йөрөгәнен кем белә. Тороп ултырам. Тышта олоған ел боҙҙай теле менән йәнемде ялап үтә. Йәнем һыҙлай. Ҡапыл аяҡтарымдың көсө бөтә. Тау башына менә алмайым. Ул баланы китап биттәрендә ҡалдырып, әйләнеп ҡайтам. Стеналағы сәғәткә ҡарайым. Төн уртаһы… Минуттар, ауырлыҡ менән, алдағы көндө яҡынайта.

– Уҡыусыларымды тағы бер ҡабат тикшереп килергә кәрәк, – тип һөйләнә-һөйләнә, ауыр, арыған аҙымдар менән бүлмәләргә йүнәләм.

Өҫкө ҡаттан, ҡыҙҙар бүлмәһенән, сәрелдек ҡатын тауышы ҡолаҡҡа салына…

Коридорҙар әсә тауышына һис оҡшамаған тауышҡа уяна, ҡалтыранып ҡуя кеүек. Хазан ханымдың тештәрен шығырлатыуы ишетелә хатта. Дейеү кеүек мығырлай. Асыу тәүҙә бер баланың һыртына килеп бәрелә, аҙаҡ буш коридорҙарҙа яңғырай:

– Шым! Мыжып торма! Ете төн уртаһында ҡайҙан табайым һинең әсәйеңде! Хәҙер үк ят урыныңа! Атла! Күҙемә күренмә ҡабат! Һарыҡ, тиреҫ еҫе генә етмәй ине бында! Йоҡлай алмайһың, әлбиттә!

***

Бала нимәлер аңлатырға тырыша, ахыры. Хазан ханым, бер нисә секунд тын торғандан һуң, ҡабат аҡыра:

– Етәр! Бүлмәңә ыҫҡын! Тиҙ бул!

Ниңәлер мине гел Хазан ханым менән бер көндө дежурға ҡуялар. Ул – ҡыҙҙар ҡатында, мин – малайҙарҙыҡында. Ниңәлер, әйтә алмайым, балалар баштарын мендәргә терәр-терәмәҫтән Хазан ханым үҙе лә ята һәм уттар һүнер-һүнмәҫ йоҡоға тала. Тимәк, әле генә бер сабыйҙың илауы уның йоҡоһон бүлгән. Асыулы, ярһыулы… Шарлап аҡҡан йылға кеүек гөрләй, күперә. Балалар, был ташҡындың ҡаршыһына сыҡмаҫҡа кәрәк икәнде аңлағанға тиклем, бер нисә тапҡыр уның көсөн үҙендә татый.

Хазан ханым, әйтерһең, миңә лә ҡысҡыра: бер аҙға ҡатып ҡалам. Тауыштар тынғас, юлымды дауам итәм. Буш, тын коридорҙа яңғыраған аяҡ тауыштарым шәм яҡтыһындағы әйберҙәрҙең күләгәһе кеүек оҙоная, ҙурая. Ҡурҡа башлайым: әйтерһең, артымдан дейеүҙәр баҫтыра. Ҡапыл артыма әйләнеп ҡарайым. Бер кем юҡ. Шөбһәләрем тарала, уйҙарым үҙгәрә һәм тағы ла эрерәк, тағы ла ышаныслыраҡ аҙымдар менән атлауымды дауам итәм. Әйтерһең, төрмәләмен, әйтерһең, үҙем – төрмә һаҡсыһы…

Был мәктәп, был пансион, был шәрә, һалҡын стеналар, ҡараңғы сырайлы һаҡсылар… Кем белә, бәлки, бында үҙенә күрә төрмәләр, ә балалар – тотҡон…

Иртә менән ҡолаҡтарҙа бысҡы кеүек зыңлаған ҡыңғырау тауышы менән бүленгән йоҡо һәм ҡыңғырау тауышы менән башланған тотҡон тормошо…

Ҡыңғырау тауышы…

Йәһәт тор урыныңдан! Йүгер! Ҡул-битеңде йыу, өҫтөңә кей, сафҡа теҙел, ашханаға бар!

Серегән зәйтүн, әсегән сыр, тимер стаканда һыуыған сәй, кисәгенән ҡалған ҡороған икмәк киҫәктәре…

Тағы ла ҡыңғырау тауышы…

Китабыңды, дәфтәреңде ал да сафҡа теҙел! Бына ике йыл инде төҙөлөп бөтә алмаған күпергә ҡарап, ҡурҡа-ҡурҡа, серек таҡталар түшәлгән аҫылма күпер аша биш йөҙ метр алыҫлыҡтағы мәктәпкә табан сафты боҙмайынса атла!

Ҡыңғырау тауышы…

Ҡырҡ минут ситлек эсендә: өсмөйөш, квадрат, тура дүртмөйөш, майҙан, түңәрәк, бейеклек… Яҙмышты бүл, һағышты ҡабатла, һағыныуҙы ҡуш, сит яҡтарҙы ал…

Ҡыңғырау тауышы…

Биш минутлыҡ хөрриәт. Тик һәр урында: коридорҙарҙа, баҫҡыстарҙа, баҡсала был хөрриәтте боҙған, ҡулына таяҡ тотҡан һаҡсыларҙың тауышы:

– Бында торма!

– Йүгермә!

– Һөйләшмә!

– Аҫҡа төш!

Аҫҡа төшөр-төшмәҫтән – тағы ҡыңғырау тауышы һәм баҡса һаҡсылары:

– Ҡыңғырау шалтыраны!

– Онотма!

– Һелкенмә!

– Һөйләшмә!

– Өҫкә мен!

– Синыфҡа ин!

Һәм биш көнлөк уҡыуҙарҙан һуң күрешеү көндәре… Көтөп алған көндәр!

***

Иртә менән пансион баҡсаһында ирҙәр, ҡатындар һәм алыҫ ауылдарҙан килгәндәрҙе күҙәтеүсе моңһоу улдар, ҡыҙҙар… Юлдары өҙөлгән ауылдарҙан күрешергә килә алмаған ата-әсәләрҙең ҡойма буйында баштарын эйеп торған балалары…

Атлайым. Хазан ханым таратҡан уйҙарымды бер нисек тә йыя алмайым. Нисек булһа ла, уйҙарым бик алыҫтарға әйҙәне.

Бәлки, бер аҙҙан был коридорҙарҙа тотҡондар күҙәтеү тәҙрәһенән ҡулдарын, баштарын һуҙыр. Күҙәтеү тәҙрәләрен рәшәткәгә бәрә-бәрә ҡысҡырырҙар, баш күтәрерҙәр һәм тауыштар береһен-береһе бүлер:

– Әсәйем килһен!

– Бында уҡырға теләмәйем!

***

101-се бүлмәнең ишеге төбөндә туҡтайым. Бөтә уттар һүнгән. Оҙон коридорҙың уртаһында берҙән-бер лампочка баҙлай. Коридорҙы яҡшылап яҡтырта алмаған лампочканың көсһөҙ яҡтыһында бүлмәгә инәм. Ишек ҡаршыһындағы карауаттың береһе буш! Күҙҙәрем шар асыла, меңәрләгән уй мейемде телеп үтә. Был һыуыҡта? Ҡасҡанмы? Булмаҫ, әлегә бәләкәй. Әммә…

Етеҙ ҡулдарым менән карауаттарҙа ятҡан бала тотҡондарҙы берәм-берәм барлайым. Ҡулым алдағы карауатта бер мендәрҙәге ике башҡа тейә. Сабый үҙенән ике йәшкә өлкән баланың ҡуйынына һыйынып йоҡлай. Көлөмһөрәйем. Секунд эсендә бөтә ҡурҡыуҙарҙы елгә осорам, йөрәкте ашаған ҡурҡыуҙы таратып

ебәрәм. Карауатынан ҡасҡан был бала бер ҡулы менән теге баланың йоҙроғон ҡармаған. Ут һүнгәс ҡурҡа, беләм. Карауатта бөршәйеп кенә икенсе балаға һыйыныуы уның мәктәпкә яңы ғына килеүе тураһында һөйләй.

– Ярай, йоҡлаһын, – тим үҙем үҙемә. – Бәлки, ағаһын һағынғандыр…

Икенсе бүлмә…

Тәҙрәләрҙә ел олой…

Ҡанат тауыштары…

Борсоулы ҡоштар тәҙрәләр янына яҡыная. Мин ингәс, өркөп остолар, буғай.

Был бүлмәлә карауаттың икенсе ҡатынан осоп төшөрҙәй булып бер бала ята… Уны танйыйм. Ошо мәлдә был бала йәм-йәшел, күк сәскәле яланда йүгереп йөрөй. Һәр тарафта үлән, сәскәләр… Йөҙөндә – йылмайыу. Ара-тирә артына ҡарай-ҡарай йүгерә. Артынан йүгергән балалар ҡыуып етә алмай үҙен, билдәле… Йөҙө кинәт үҙгәрә, аһ, артынан ҡыуған балалар уны тота бит! Ул хәҙер шарлап аҡҡан йылғаның ҡаршы яғына сығасаҡ. Көлә, тағы ла шәберәк йүгерә башлай. Ятҡан урынында борғолана, хәҙер һикерәсәк…

Күҙҙәремде йомоп, был баланың төшөнә инәм. Йылға ярына йүгереп барып етәм дә ул булып ҡаршы яҡҡа ырғылам. Еңел тәнем ҡош кеүек оса, аяҡтарым – бушлыҡта. Бейеклектән башым әйләнә, ергә төшөргә теләйем, тик төшә алмайым. Эргәмдә ҡоштар, күбәләктәр… Ҡапыл бөтә тәнем менән ергә лыпын ҡолайым. Ҡолаған урыным ярҙағы йәм-йәшел үлән өҫтө түгел. Ҡаты, һыуыҡ ергә барып төшәм. Шул мәлдә төштәрем бүленә. Йоҡо баҫҡан күҙҙәремде асам. Һары, ҡыҙыл сәскәләр, йәшел игендәр, күк сөмбөлдәр, ҡарлуғастар, күбәләктәр юҡ. Әле генә күктә балҡыған ҡояш та… Йылы ҡан тама яңағымдан. Ҡулымды маңлайыма ҡуям – ҡулым ҡанға буяла.

Икенсе ҡаттағы карауаттан төшкән кеүек ауырта яңағым, һыҙлай… Баланың карауаттан аҫылынып төшкән башын яйлап мендәренә йәтешләйем.

Коридорҙың уң яғындағы һуңғы бүлмә…

Ҡысҡырып илаған бала тауышы:

– Әсәй! Әсә-ә-әй!

Ишек яңағына һөйәләм, көтәм. Елдең ҡурҡыныс олоуынан, ара-тирә бүлмәнән һарҡылған был тауыштан башҡа бер ниндәй ҙә тауыш-тын юҡ коридорҙа. Бала йәнә шыңшый:

– Әсә-ә-әй! Әсә-ә-әй!

Акацияның ярым шәрә ботаҡтарының күләгәһе ҡаршы яҡтағы стенаға төшә. Стеналағы күләгәләр ҡапыл бер ҡатын шәүләһенә әйләнә. Ҡатындың артында бер бала тоҫмаллана. Ҡатын бер ҡулы менән иңбашына һалған салғыны тотҡан, икенсе ҡулында – тоҡ. Акация эйелгән һайын күләгәләр стенала һелкенә. Атлай ҡатын, артына ла әйләнеп ҡарамайынса атлай. Был ҡатын – бүлмәлә илаған баланың әсәһе. Бала уның артынан илай-илай йүгерә. Ишетмәй әсәһе. Акациялар ҡалтыранған һайын ҡатын алыҫая бара, бәләкәй тауҙар аша үткәндәге ише бер юғала, бер ҡалҡып сыға. Бәләкәй ботаҡ ел олоған һайын эйелә, бала абынып йығыла, әсәһенең артынан ҡабат тороп йүгерә. Бәләкәй аҙымдары менән ҡыуып етә алмай. Әсәһенең артынан илап ҡысҡыра:

– Әсә-ә-әй! Әсә-ә-әй!

Бәлки, баланың төшө стенала сағылалыр?

Аяҡ остарына баҫып эскә үтәм, тауыш килгән яҡҡа барам. Бала мендәренә ҡапланған. Иңбашынан тотоп әйләндерәм. Һағайып тороп ултыра, йоҡламай икән. Ҡысҡырып илап ебәрә. Шым ғына һорайым:

– Ниңә йоҡламайһың, балам?

Һыҡтауҙан туҡтамай яуап бирә теге:

– Әсә-ә-әй! Ә-сә-ә-әй! Әсәйемде…

– Ярай, ярай, илама! Иптәштәрең уяныр. Йоҡламайһың икән, тор әйҙә, халатыңды кей ҙә атла минең арттан!

Башҡа бүлмәләрҙе ошо бала менән тикшереп сығабыҙ, һуңынан – мин алда, ул арттан – тәрбиәсе бүлмәһенә юлланабыҙ. Бүлмәгә ингәс, уттан күҙҙәре ҡамаша, йөҙөмә ҡарай алмай, бер туҡтауһыҙ илай. Һүҙҙәрен аңлауы ауыр:

– Илама, зинһар! Илама, тыныслан, исемең нисек һуң һинең?

Тотлоға-тотлоға яуаплай:

– Ыыһ, ыһ… Мирсәйет.

– Ҡайһы ауылдан килдең, Мирсәйет?

– Түбәнге Дживанлынан.

– Нисәнсе синыфта уҡыйһың?

– Өсөнсө.

– Хазан ханым синыфындамы?

– Эйе.

– Бында ҡасан килдең?

– Дү-дү-дүрт көн булды.

– Ниңә, башҡа иптәштәрең кеүек, уҡыу йылы башында килмәнең, Мирсәйет?

– Мин ауылда уҡый инем.

– Ауылыбыҙҙа мәктәп бар ине, тиһең, бында ни өсөн килдең, Мирсәйет?

– Мәктәп бар ине, ыыһ, ыһ, ыыһ…

Илауҙан һөйләшә алмай. Тынысландырып, һораштыра бирәм:

– Илама, Мирсәйет! Илама! Уҡытыусығыҙ юҡмы? Башҡа ергә ебәрелеп, ул киткәс, һеҙ уҡытыусыһыҙ ҡалғанһығыҙ, тимәк.

– Юҡ, уҡытыусыбыҙ ҙа бар ине. Бар ине, ы-ыһ, ыһ, ы-ыһ…

Тотлоға, күҙ йәштәренә быуыла, һөйләшә алмай. Ауыр тын ала, бер стакан һыу һонам. Сәсәй-сәсәй эсә Мирсәйет.

– Илама, Мирсәйет! Ҡарале, беренсе синыфта уҡыған балалар ҙа иламай хатта. Илама! Йә, һөйлә әле. Ниңә ауылығыҙҙа уҡыманың?

– Мә-мә-мәктәпте яндырҙылар! Уҡытыусыбыҙ үлде! Атайым да, ыыһ, ыһ, ыыһ…

– Кем яндырҙы, Мирсәйет? Кем үлтер…

– Атайымды… Атайымды…

– Ярай, Мирсәйет, етәр, илама!

***

Бүлмәгә үҙәккә үтеп инерҙәй һыуыҡ килеп тулды. Тәнем ҡоро ботаҡ ише ҡалтырай. Ҡолаҡ төбөмдә ел бөтә көсөнә олой, буран сыға. Ағас япраҡтары өйөрөлә, шул мәлдә тауҙарҙа таштар аҡтарыла. Бейек тауҙар, киң яландар секунд эсендә күҙ алдынан елберләп үтә. Бөтә йылғалар күңелемә ҡан булып аға. Мирсәйеткә боролам:

– Мирсәйет, илама, етәр! Һин хәҙер тыныслан, ятып йоҡла! Иртәнсәк һөйләшербеҙ, яраймы?

– Юҡ, мин бында йоҡламайым, мин был мәктәптә уҡымаясаҡмын, ауылға ҡайтам...

– Теләһәң, бында, минең карауатымда, йоҡла. Утты ла һүндермәм, яраймы?

– Юҡ, мин бында йоҡламайым, ауылыбыҙға ҡайтам.

– Хәҙер төн, ҡайтып булмай. Юл да юҡ, юлдар асылғас ҡайтарып ебәрермен.

– Юҡ, иртән таң менән ҡайтам.

Еңел генә күндереп, йоҡларға һалып булмаҫтыр Мирсәйетте. Ҡулдары ҙур, аяҡтары көслө күренә… Тау балаһы бит, уны йоҡлатыр өсөн бил бирмәҫ тауҙарға алып барырға, һары, күк сәскәле яландарҙа гиҙҙерергә, текә ҡаялар, шарлап аҡҡан йылғалар аша сығып, кирбес өйлө емерек ауылдарҙа йөрөтөргә, ныҡ ҡына арытырға кәрәк…

– Мирсәйет, ауылығыҙ бынан күренәме?

– Юҡ, күренмәй, бик алыҫта ул.

– Ауылығыҙҙың тауҙары ла күренмәйме, Мирсәйет?
– Улар күренә.
– Йә, әйҙә әле, һинең менән өҫкө ҡатҡа менеп, тәҙрәнән ҡарайыҡ. Ауылығыҙҙың ҡайһы яҡта икәнен күрһәтерһең.
– Ярай.
Дүртенсе ҡатҡа күтәреләбеҙ. Һул яҡта кәүҙәһе ҡуйы ҡараңғылыҡ эсенә инеп юғалған, ҡарлы түбәһе ай яҡтыһында ялтыраған, ҡараңғыла ҙур боҙ киҫәген хәтерләткән Ағры тауҙары… Ағрының бер яғында аҡ сәстәрен күккә һуҙған Зор түбәләре… Тауҙар ҡуйынында унда-бында уттар яна. Яҡындағы ауылдарҙа эт өрөүҙәре ел олоуына ҡушыла. Джинжават йылғаһы бөтә тауыштарҙы күбекле һыуҙарында болғатып, алыҫтарға алып китә. Бөтә кәүҙәһе менән төндө ярып күккә баҡҡан Мирсәйеттән күҙемде ала алмайым. Ул миңә өндәшә:
– Ул яҡта түгел беҙҙең ауыл, был яҡта!
– Ә-ә, шулаймы ни?
Башымды бороп, Мирсәйет тыуған, тәпәй баҫҡан тауҙарға ҡарайым. Ул ҡулы менән уң яҡтағы тауҙарға ишаралай:
– Беҙҙең ауыл, ана-а, тегендә-ә, ағай. Тәкәлтенең артында. Ҡышын берәү ҙә бармай беҙҙең ауылға, машиналар үтә алмай. Түбәнән ҡыҫҡа юл бар, тик унан ат менән генә үтергә мөмкин. Атайым булһа, шул юлдан килер ине. Йәй еткәс, мин дә шул юлдан ҡайтасаҡмын. Мин һис кенә лә ҡурҡмайым, юлды ла беләм.
– Көйөнмә, Мирсәйет, яҙ еткәс, ҡайтырһың. Ҡара әле, һеҙҙең ауылығыҙға бара торған автобустар ошонда туҡтай, һине ултыртып ебәрербеҙ.
– Беҙҙең ауылға автобус бармай бит. Бөтәһе лә унда-бында күсенеп бөттө, бер нисә йорт ҡына ҡалды.
– Булһын, һеҙҙең ауылығыҙға яҡынераҡ ауылға бара торған берәй автобусҡа ултырырһың.
– Мин Ғәзиләргә тиклем автобус менән барһам, артабан ауылыма ҡайта алам, яҡын ҡала.
– Тик әле түгел, Мирсәйет, яҙ еткәс…
– Яҙға тиклем оҙа-а-аҡ бит.
– Булһын, һин  мәктәпкә күнегеп киттениһәң, тиҙ килеп етер.
– Юҡ, етмәҫ.
– Етер, етер, ошо ҡарҙар иреһен дә, яҙ миҙгеле килеп тә етер.
– Атайым булһа, ҡышын да ат менән килә алыр ине. Атайым үлмәһә икән… – Йотлоғоп дауам итә малай, саҡ тамамлай һүҙен. – Миңә велосипед алыр ине…
Яуап бирә алмайым. Һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа борам.
– Мирсәйет, йәйен бик матур булалыр һеҙҙең ауылығыҙ?
– Эйе, әммә ҡышын да бик йәмле. Беҙҙең ауылға юл төшһә, беҙгә килерһең, харап матур ул.
Әле үк яландың ҡарын, һыуығын, ҡышын, йәйен, ҡош-ҡортон, сәскәләрен, бөжәктәрен, үләндәрен, дегәнәктәрен һағынған Мирсәйет. Лютиктар, күк ирис, мәк сәскәһе… Йылға буйҙарында, тауҙарҙа, яландарҙа күкрәп сәскә ата улар. Үгәй инә япрағы, ҡанүлән, әрем, көтөүсе муҡсаһы… Бөтә үләндәр менән бергә ерҙе ярып сыға. Астрагал, һабын үләне, дегәнәк, шайтан таяғы… Бер ниндәй ҙә энә ҡаҙалмай аяғына, ауылға тиклем атлай, йүгерә туҙанлы юлдарҙан… Һәм ҡоштар. Тау, ялан ҡоштары. Йәшел башлы өйрәктәр, буҙ торналар менән Мирсәйет һыу инә лә сыбар ағуналарға эйәреп осоп китә. Тауҙарҙан…
Илауҙан туҡтаһа ла, күҙҙәре һаман йәшле Мирсәйеттең. Хәҙер йоҡларға риза булыр, тип уйлайым да:
– Әйҙә, Мирсәйет, бүлмәңә барайыҡ. Әҙерәк унда һөйләрһең… – тим.
– Әйҙә, тик йәйен беҙҙең ауылға барасаҡһың!
– Ярай, барырмын.
Баҫҡыстан тиҙ-тиҙ генә төшәм. Артымдан аяҡ кейеме менән шаптыр-шоптор

килеп Мирсәйет эйәрә. Балалар тәрән йоҡоға талған. Бүлмәгә инәбеҙ. Мирсәйет һоро тимерҙәргә тотоноп түшәгенә менә, юрған аҫтына инеп ята. Тағы ла бер нисә һорау бирһәм, йоҡлап китәсәк.

– Тимәк, ағуна ифрат күп була һеҙҙең тауҙарҙа?

– Эйе, ҡар яуғас, атайым ағуналарҙы тере килеш тота торғайны.

– Шулаймы?

– Әлбиттә.

– Нисек? Ағуналар осмаймы ни?

– Ҡар күп булғас, оса алмайҙар.

– Йә әйт әле, атайың ағуналарҙы нисек тота ине?

– Ҡар яуғас, ағуналар ем таба алмай. Ем таба алмағас, ауылға киләләр. Ҡанаттары ла ҡарҙа еүешләнә. Ҡанаттары еүешләнгәс, оса алмайҙар. Атайым ағуналарҙы ҡыуып йөрөтә лә, улар арығас, эләктереп ала. Атайым булһа, миңә велосипед әпирер ине…

…Йәйен ауылдарына барһам, мине атаһының атында йөрөтәсәк Мирсәйет. Һүҙ бирә. Атаһының һәйбәт аты бар икән. Мин һыбай йән-фарман сабасаҡмын, ул иһә велосипедына атланасаҡ – ел уйнатып, ярышып елдерәсәкбеҙ.

Таң ата, шикелле. Кисәнән бирле ҡурҡыу, шик-шөбһә телендә һөйләшкән ел тынырға әҙерләнә. Һүҙҙәре һирәгәйә, күҙ ҡабаҡтары ауырлаша Мирсәйеттең. Ҡанаттары талған. Тәне һыуыҡ карауатында ятһа, күңеле тау итәгенә һыйынған ауылға юллана. Ап-аҡ ҡарға ағуна кеүек бата Мирсәйет. Тәҙрә кәрнизендә һикергеләп йөрөгән күгәрсен бүлмәгә инһә, Мирсәйеттең карауатына ҡуныр төҫлө.

Ишекте асыҡ ҡалдырып, аҡрын ғына сығып китәм.

Мирсәйеттең күҙҙәре оҙаҡ ҡына күҙ алдымдан китмәй. Әйтерһең, ул һаман ҡаршымда тора… Бүлмәмә табан атлағанда Мирсәйет менән һөйләшәм:

– Күнегәсәкһең, Мирсәйет! Тәүҙә һыуыҡ урыныңа ятып, әсәйһеҙ йоҡоға талаҫаҡһың да ҡурҡыныс төштәр күрәсәкһең. Ҡайһы ваҡыт аҫтыңа бес итәсәкһең эске кейемеңде тәнеңдең йылыһы менән киптерәсәкһең. Дәрестә тәнеңдән һаҫыҡ еҫ аңҡыр... Хазан ханым һине дәрестән ҡыуып сығарасаҡ һәм бүлмәңә ҡайтырға ҡушасаҡ. Үҙең йыуасаҡһың керҙәреңде, дөрөҫөрәге, һыуға батырып алып борасаҡһың да карауатыңдың башына йә иһә батареяларға эләсәкһең. Ҡайһы ваҡыт һин яратҡан берәй ризыҡ бирәсәктәр, мәгәр туймаясаҡһың. Тағы ла әҙерәк һораһаң, бирмәйәсәктәр, бөттө, тип әйтәсәктәр. Ҡайһы ваҡыт биргән ашамлыҡтар боғаҙыңдан үтмәйәсәк. Ашхананан бер телем икмәкте йәшереп алып сығырһың. Ауырыясаҡһың. Табипһыҙ, шәфҡәт туташһыҙ, ишегенә «Санитар пункты» тип яҙылған бүлмәлә аунаясаҡһың. Дарыуҙарҙы ҡасан, нисек эсергә белмәйенсә йоторһоң. Үпкәләрең ҡабарасаҡ, йүтәлләйәсәкһең. Ҡыңғырау тауышына йоҡоң бүленер, ҡараңғыла ҡурҡып уянырһың. Борсолоп сәбәләнәсәкһең. Ҡар ҡаплар юлдарҙы, әсәкәйең ял көндәрендә күрешергә килә алмаҫ… Ҡойма буйында башыңды эйеп торасаҡһың. Атайың булһа, килер ине. Атайың бөтөнләй килмәҫ шул, Мирсәйет. Етемлеккә өйрәнәсәкһең. – Онотасаҡһың, Мирсәйет! Ҡолаҡ төбөнән шыжлап үткән пуля тауышын, мәктәбегеҙҙең стеналарына сәсрәгән ҡанды, һине төйәгеңдән айырып, ошо һалҡын стеналар эсенә ябып ҡуйған уҫал сырайлы кешеләрҙе онотасаҡһың. Бәлки, уҡытыусыңдың йөҙөн дә... Тик хәтереңдән күк тауҙар, сәскәле яландар, атайыңдың йөҙө юйылмаясаҡ. Яҙ һайын, байрам һайын күтәрһөң уны. Бәлки, Мирсәйет, атайың һиңә велосипед алып килер!

Ҡар яуа, ел тынған. Карауатҡа һуҙылып ятам. Тынлыҡ. Секунд һайын саң ҡаҡҡан һымаҡ: тек-тек, тек-тек… Тороп стеналағы сәғәттең батареяһын алып ҡуям. Сәғәт тына. Урынымда борғоланам. Йоҡо ҡасты. Йонсоғанмын, арығанмын. Күҙҙәремде йомам. Теге ҡарсыҡтың ҡулдары, теге кирбес өй, Түбәнге Дживанлы ауылы, Мирсәйеттең атаһы, атып үлтерелгән уҡытыусы, стеналарына ҡан сәсрәгән мәктәп, шул мәктәптән һөргөнгә ебәрелгән балалар һәм Мирсәйет…

Ошо кистән бирле Мирсәйетте таныйым. Мин дежурҙа булған саҡта, сәбәп табып, бүлмәмә инә. Һөйләшәбеҙ. Теге тура юлдан ауылға ашығабыҙ. Бәрәстәрҙе, эттәрҙе яратабыҙ, аттарҙы, ҡарға батҡан ағуналарҙы ҡыуалайбыҙ, сәскә йыйып, ҡоштарҙы күҙәтәбеҙ. Һуңынан ул велосипедҡа атлана, мин иһә – атаһының атына… Ул педаль әйләндерә, мин атты ҡыуалайым. Түбәнге Дживанлыла йылға буйына тартылған юл бар, шул туҙанлы юлда ярышабыҙ.

***

Март баштары. Тышта йылы. Йома көн. Мин дежурҙа. Яландағы миндаль, персик ағастары сәскә атҡан. Иҫкән елдән яҙ еҫе аңҡый. Ямғырҙың йүнәлеше үҙгәргән, хәҙер тал ботаҡтары акацияға табан эйелә.

Киске аштан бер аҙ ваҡыт үткәс, бүлмәләренә йүнәлә балалар. Килер тип көтәм, тик ул кисте килмәне Мирсәйет. Ул да ятаҡҡа күнекте, тип йылмаям.

Шәмбе көн иртүк торҙом. Пансион баҡсаһы һәр саҡтағынан да ныҒыраҡ кеше менән тулған. Ун минут һайын пансион бинаһының баҡса ҡапҡаһы эргәһенә ауылдан килгән берәй автобус килеп туҡтай. Автобустан төшкәндәр, йөҙәрләгән бала-саға араһынан үҙ ғәзизен эҙләп, баҡсаға атлай, автобустан төшкәндәрҙе таныған балалар иһә ҡапҡаға ҡарай шатлана-шатлана йүгерә. Һәр әсәгә, һәр атаға унлап бала төшә.

– Тауҙарҙа ҡар баҫылған, юл асылған, – тигән уй үтә мейемдән.

Пансион янындағы верандала ултырған уҡытыусыларҙың балалары ла баҡсала. Хазан ханымдың улы Тунч велосипедта йөрөй, уның артынан һигеҙ – ун бала йүгерә. Күҙҙәрем Мирсәйетте эҙләй. Ул үҙен күрергә килмәҫтәрен белә. Ҡойма буйына сүкәйеп ултырған, ҡулдары менән яңаҡтарына таянған, керпек тә ҡаҡмайынса, велосипедта йөрөүселәрҙе күҙәтә.

Пансиондағы балаларҙың бер төркөмөнә рөхсәт бирәм: ата-әсәләре менән бергә, иреккә сығарылған тотҡон кеүек, ҡыуана-ҡыуана китәләр. Ҡалған балалар баҡсала урала. Тунч, велосипедын ташлап, башҡа балалар менән уйнарға керешә. Мирсәйет, ултырған урынынан тороп, велосипед эргәһенә бара ла уның янына сүкәйеп ултыра. Велосипедты ҡапшай, рулен тота, ҡулы менән педален әйләндерә, һыйпай, ярата. Бер аҙҙан веранда тәҙрәһенән ҡарап торған Хазан ханымдың асыулы әмере ишетелә:

– Эй-йй! Кит унан, йүләр! Теймә велосипедҡа! Ту-унч, Ту-унч! Велосипедыңды ал да өйгә ҡайт, тиҙ бул! Тағы ла күрәйем әле һине шул балалар янында!

Мирсәйет бая ултырған урынына йүнәлә. Тунч ҡарыша, китергә теләмәй, тик әсәһенең әрләүенә түҙә алмай: велосипедына атланып, верандаға табан йүнәлә. Мирсәйет, ҡойма эргәһенә ултырып, оҙаҡ ҡына Тунч киткән яҡҡа ҡарап тора. Шәмбе көндө дежурлыҡҡа тәғәйен уҡытыусылар йыйыла. Рәткә теҙеп, балаларҙы һанайым, рөхсәт ҡағыҙҙарын барлайым… Бөтәһе лә урынында, балаларҙы алмаш дежурға тапшырам.

Дүшәмбе иртәһе…

Уҡытыусылар бүлмәһендә ығы-зығы. Ҡыҙыу, хафалы гәпләшеүҙе аңларға тырышам.

– Ишеттегеҙме?

– Нимәне?

– Йәкшәмбе көндө пансиондан бер уҡыусы ҡасҡан.

– Ул баланы таба алмағандар…

– Жандармдар ауылдары эргәһенә тиклем барған, ҡарамаған ер ҡалмаған – эҙе лә юҡ, ти, хатта.

– Табылыр тип, ғаиләһенә лә хәбәр иткәндәр.

– Ул баланы беләм, уны күрергә бер кем дә килмәй торғайны.

Был һүҙҙәрҙән һуң мине ҡурҡыу солғап ала. Тәҙрәнән Тәкәлте һырттары яғына ҡарайым да борсоулы тауыш менән:

– Кем ҡасҡан? – тип һорайым.
– Хазан ханым синыфынан…
– Кем?
– Ауылға ҡайтырға теләгәндер. Исеме?..
– Мирсәйетме?

Тәҙрә ҡаршыһында ҡатып ҡалам. Тотлоғам, һөйләшә алмайым. Ишеткәндәрем ялған булырға тейеш йә иһә өшөткөс төш.

Бөтәһе лә нимәлер һөйләй, тик ишетмәйем. Мәктәп баҡсаһындағы йөҙәрләгән баланы күҙҙән үткәрәм. Береһе лә Мирсәйеткә оҡшамаған. Ышанмайым. Уҡыусылар араһынан килеп сығыр, синыфта исемен әйткәс, мин бында, тип өндәшер кеүек.

Мәктәп директоры инә. Йөҙөндә ҡайғы…

– Мирсәйетте тапҡандар, – тине. – Туңған.

***

Мин дә шул саҡ туңам. Бер ниндәй ҙә яҙ иретә алмаҫлыҡ боҙға әйләнәм. Уҡытыусылар бүлмәһендә моңһоу кеше бар төҫлө. Һүҙҙәр бутала. Ҡасырға теләйем бынан, ҡасырға… Синыфтың стеналары өҫтөмә ишелә кеүек. Бүлмәлә ҡара таҡта ла, аҡбур ҙа, китаптар ҙа, ҡәләмдәр ҙә, уҡыусылар ҙа юҡ… Бары тик мин һәм Мирсәйеттең шәүләһе. Тәҙрәгә текләйем, ҡараштарымды Тәкәлтегә йүнәлтеп, өмөтһөҙ генә ҡарайым. Тауҙарға…

Тәкәлтенең аҡ һыртындағы бер ҡара төрткө күҙемә салынды. Мирсәйет! Тура юлдан тауға үрмәләй. Ҡояш болоттар араһынан сығып көләмһерәй һәм ҡабат юҡҡа сыға. Тауға менгән һайын, ауылына яҡынлашҡан һайын ҡанатлана Мирсәйет. Аҙымдарын йышайта, тағы ла шәберәк атлай башлай.

Аҡтупраҡ, Быуым йылғаһы, Яңғыҙтал… Артабан атлай Мирсәйет. Һыуыҡбулаҡты үтһә, ауылы күренәсәк. Һыуыҡбулаҡта Ҡыҙҙар ҡаяһына менеп ҡысҡырһа, ауылда ишетәсәктәр.

Ҡараңғы төшә, ел олой башлай, ҡапыл ҡар яуа. Мирсәйет, бер алдындағы тауға, бер артына әйләнеп ҡарай. Ҡала ла, мәктәп тә, бүлмәләр ҙә күренмәй… Бармаҡтарын өрөп йылытырға тырыша, тик тыны ла өшөй Мирсәйеттең. Битенә туҡтау белмәҫ ҡар бөртөктәре ҡуна, яңаҡтары әсетә.

Ҡыҙҙар ҡаяһына барып етергә бер нисә йөҙ метр ғына ҡалған. Ҡарға батасума атлай, шул саҡ аяҡтарының хәле бөтә. Теҙҙәренә ғәләмәт ауыр йөк таҡтылармы ни! Малай көс-хәл менән Ҡыҙҙар ҡаяһына барып етә һәм уның таштарына һыйына. Ҡулдарын, аяҡтарын ҡапшай башлай. Тик ҡайҙа улар? Тирәяҡты ҡараңғылыҡ солғап ала. Эргәһендәге ҡаяларҙы, ағастарҙы айыра алмай Мирсәйет. Алыҫтан эт һауылдауы ишетелә. Малай ҡурҡып илай башлай, һуңғы көсөн туплап:

– Әсә-ә-әй! Әсә-ә-әй! – тип ҡысҡыра.

Олоған ел Мирсәйеттең тауышҡынаһын йота. Мирсәйеттең ҡарлыҡҡан тауышы, буранға ҡушылып, юҡ була. Ҡурҡа-ҡурҡа таштар араһынан сыға. Ауылға ҡайтыр өсөн тағы ла көрткә ташлана. Ҡапыл аяғы бата һәм күкрәгенә тиклем ҡарға сума. Ҡанаттары еүешләнгән ағуна кеүек сәбәләнә. Аяҡ бармаҡтары, ҡулдары йылы һыуға тыҡҡан кеүек йылына башлай. Шул йылылыҡ бөтә тәне буйлап тарала – имеш, ул өшөүҙән туҡтай. Яҙҙың бер көнөндә йылға буйлап ялан аяҡ йүгерә һәм арып йәм-йәшел сирәм өҫтөнә һуҙылып ята. Күҙҙәрен йоҡо баҫа. Ҡапыл алыҫта атаһын күрә. Атаһы, велосипед этәреп, уға табан килә.

Мирсәйет урынынан ҡалҡына ла атаһына табан йүгерә…

# Шишмәләр



Земфира
АҠБУТИНА

## Башҡортостан

*Башҡортостан – башҡорт ире кеүек*
*Бер бәһлеүән инде торғаны.*
*Үҙ баһаһын белә, ихлас, йомарт, –*
*Йомош - юлға әҙер йорғаһы.*

*Башҡортостан, һиндә тамырҙарым,*
*Мин ғашиҡмын һиңә, илемә!*
*Үҙемдеке итеп кинәнәм мин,*
*Кинәнгәндәй ғәзиз иремә!*

*Үҙемдеке итеп кинәнгәндә*
*Мәрйә бисәң һиңә һырына.*
*Татар бисәң, йылмайыуы менән*
*Арбап, ҡуйыныңа һыйына!*

*Ә эргәңдә кәнизәктәр бейей –*
*Ҡуҙҙар өтәме ни табанды!*
*Ә мин – көндәш, яҙмышыма күнеп,*
*Бауырыма баҫам баламды.*

*Бисәләргә кәрәк ярарға ла,*
*Хәстәрләргә ашар аштарын.*

---

*Земфира Аҡбутина Ейәнсура районы Ибрай ауылында йәшәй. Мәктәптә эшләй. Башҡорт теле, әҙәбиәтенән уҡыта. «Ағиҙел»дә таратыу, пропагандалау буйынса ҙур эш башҡара.*

Башҡортостан, ғәзиз ирем кеүек,
Һау ғына, тим, булһын баштарың.

Ил инәһе булып инселәйем
Изге генә теләк илемә.
...Башҡортостан, һине оҡшатамын
Күп бисәле башҡорт иренә.

## Кемдә йәшәй Салауат?

Ирек даулап яуға сапҡанында
Нәфрәт менән ҡаны ҡайнаған.
Йәберләнгән, кәмһетелгән халҡын
Азат итеү уйы аймаған.
Һай, Салауат!

Түҙеү, түҙеү, унан баш ҡалҡытыу
Төшкән, халҡым, һинең өлөшкә.
Ирек һөйгән рухың тере булған
Яуҙа үлгән-көйгән килеш тә.
Эй, ғәзиз халҡым!

Ошо хаҡта беҙгә һөйләйҙер ҙә
Иҙел башындағы ярһыу ат.
Халҡы өсөн янып-көйгәндәрҙең
Йөрәгендә ятыр Салауат.
Эйе, Салауат!

Тере йөрәк халҡым өсөн байраҡ –
Иҙел башындағы ярһыу ат.
Кемдә халҡым рухы дөрләп яна –
Шул кешелә йәшәр Салауат!
Халҡым йөрәгендә – Салауат!

## Өфөмә

Бала саҡтан – хыялымда,
Йәшлек эҙем ҡалған һиндә.
Йырланып та йырланмаған
Бөтмәç йыр һин, Өфөм, миңә.

Ниндәйҙер бер тылсым көсө
Тарта мине һиңә, ҡалам!
Һинән ситтә йәшәһәм дә,
Төштәремдә һиндә ҡалам.



Мөнир
ИҠСАНОВ

# ТИБӘ ЙӨРӘК

* * *

*Күҙ мәлендә килеп инә муллыҡ, һиллек.*
*Сағыу йәмдең, гүзәллектең булмай сиге.*
*Тик күңелде биләп ала сәйер һағыш.*
*Әйтерһең, күҙ – ул ни бары алтын ситлек.*

* * *

*Стенаға эленгән йыртмалы календарь.*
*Минең дә ғүмерем календарь хәлендә.*
*Ни ерҙә тормайым, ни күктә осмайым.*
*Таң атып өлгөрмәй, йыртыла аҡ көндәр.*

* * *

*Ят йолалар бутап бөттө аңыбыҙҙы,*
*Киләсәктә низәр көтә тағы беҙҙе?*
*Беҙҙең өсөн ул киләсәк етер микән,*
*Әгәр бөгөн бутап бөтһәк ҡаныбыҙҙы?*

* * *

*Был донъяла иң ауыры – көтөүҙер ул,*
*Көтөп йәшәр көнөң килеп етеүҙер ул.*

---

*Мөнир Иксанов (1984) Учалы районы Илсеғол ауылында тыуған. Миндәк урта мәктәбен тамамлағас, БДУ-ның Учалы филиалында белем ала. Бәләбәйҙә үткән «Илһам шишмәләре» шиғриәт фестивале еңеүсеһе. «Киске Өфө» гәзитендә хәбәрсе булып эшләй.*

*Ғүмер буйы көткән көнөң килһә, уны*
*Күрмәйенсә был донъянан китеүҙер ул.*

* * *

*Күпме үҙ-үҙемә әйттем: абынмайым*
*Һәм бер кемгә бер ҡасан да табынмайым.*
*Тик был ерҙә алға атлап буламы һуң*
*Абынмайса, табынмайса аҙым һайын?!*

* * *

*Был тормоштан ниҙер көтһәк, ваҡыт үтмәй,*
*Тормош юлдарынан үтһәк, ваҡыт көтмәй.*
*Үҙебеҙгә шул ваҡытты кәрәк саҡта*
*Үткәрергә, көттөрөргә аҡыл етмәй.*

## *Тибә йөрәк*

*Туп-туп килә йөрәк тын бүлмәлә.*
*Ә балалар тышта туп тибә.*
*Туптай йөрәгемде бирер инем*
*Берәүһенә,*
*Әйтеп:*
*– Тот, һиңә!*

*Туп-туп килә йөрәк, туп-туп тибә.*
*Һәм тибелә көн дә туп һымаҡ.*
*Был өлкәндәр уйнай йөрәк менән.*
*Ауырыраҡ яза юҡ һымаҡ.*

*Туп-туп тибә йөрәк, әллә ҡаға*
*Хыял аттарымдың тояғы?*
*Минең йөрәк туп-туп килеп әле*
*Мөхәббәттең тәмен тойманы.*

*Туп-туп килә йөрәк.*
*Яуап бирә*
*Уға сәғәт кенә, тыҡылдап.*
*Туп-туп килә йөрәк.*
*Бер кил дә һин,*
*Ишегемде шулай туҡылдат.*

## *Атлант һәм Геракл*

*Уралтауҙан алыҫ түгел, тиҙәр,*
*Атлант тотоп тора Һауаны.*
*Тик ниңәлер дер һелкенә Һауа,*
*Ана сак-сак Ергә ауманы.*

*Ер шарының был яҡ тарафтарын*
*Иңләп йөрөй, ахры, Геракл.*
*Ул эҙләгән алтын алмаларҙан*
*Һәләк булмаҫ, тимә, Ер ҡапыл.*

*Гераклдың иңдәренә тағы*
*Күк көмбәҙе әллә күсәме?*
*Ялҡын бәреп яҡыная кеүек*
*Асмандағы утлы есеме.*

*Өҫкө ҡаттар елкә алыштыра,*
*Ә тетрәнә ҡабат Уралым.*
*Алтын алмаларҙы Атлант ала.*
*Бөртөкләпме алтын урланды?!*

*Атлант!*
*Атлант!*
*Һинең һындарыңда*
*Ата-бабаларҙы таныным.*
*Халҡым атланттары һаман һона*
*Гераклға алтын алмаһын.*

## *Өмөтлө ҡәләм*



**Ләйсән**
**МАРАҠАНОВА**

# КҮК СӘСКӘЛӘР

### хикәйә

«Ярамай». Ошо һүҙ менән кисен йоҡоға ятып, таң беленеү менән уянып китә Лирка. «Ярамай...» Ҡураныс, шау һөйәк ҡыҙыҡай эргәһендә ҡолас ташлап иҙрәгән һөйәренә шыпыртын ғына күҙ атты ла, төҫө ҡоҫҡан йоҡа зәңгәрһыу халатын эләктереп, урынынан ҡалҡынды. «Ярамай». Мең төрлө уйҙарҙың бөгөн дә ябырылыуынан тәҡәте ҡороған Лирка, бүлмә ишеген шым ябырға тырышып, кухняға үтте.

Ҡәҙимгесә. Барыһы ла көндәгесә. Ҡыҙ өйрәнелгән хәрәкәттәр менән плитә өҫтөндә ултырған алюмин кәстрүлде аймап, һыу тултырырға керешеп китте лә, йән асыуынан ситкә быраҡтырып ҡуйыуынан ҡурҡҡандай, елтерәтеп кире плитәгә ултыртты, шабырлап аҡҡан кранды борҙо, ултырғысҡа ҡунаҡланы. «Тек, тек, тек!» Еткереп ябылмаған крандан һыу тамсылап аға. Тамсыламай, ҡамсылай, имеш. Ҡыҙ урынынан ҡалҡынды, йыуыныу бүлмәһенә инеп битен сайҙы, таҫтамалға үрелде лә, аңғармаҫтан көҙгөгә күҙ һалып, артына ҡолап китә яҙҙы. Күҙ төптәре ҡараһыу-зәңгәр, төпкә батҡан күҙҙәр, ас яңаҡтар. «Ярамай».

Ҡыҙ кухняға бер инде, бер сыҡты. Барыһы ла ҡәҙимгесә, барыһы ла көндәгесә лә бит... Утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ, эй ураланды, эй үрһәләнде. «Ярамай бит, ярамай».

Тиҙҙән Рәфил уянасаҡ. Уянмаған булһа... Ошо уйҙан тертләп, Лирка ипләп кенә бүлмә ишеген асып ҡараны. Рәфил күптән уянған, ахыры: ноутбугын ҡабыҙған, ниҙер яҙыпмы, ҡарапмы маташа. Ҡараштар осрашты.

– Сәләм! – Ошо һүҙҙе ырғытҡас, Рәфил ноутбугына текәлергә итте лә, Лирканың күҙҙәрендә ниндәйҙер яңылыҡ һиҙеп, ҡарашын ҡабаттан күтәрҙе. Барыһы ла көндәгесә, ғәҙәттәгесә... түгелме шул? Рәфилдең йөҙөнә һалҡынлыҡ йүгерҙе,

---

*Ләйсән Мараканова – Сибай ҡыҙы. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Филология фәндәре кандидаты. Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙғарылған проза семинарында (2002 йыл) иң йәш автор булараҡ ҡатнашты. «Ағиҙел»дә беренсе сығыш яһай.*

ослайыбыраҡ торған танауы тағы ла кесерәйеп, ҡош суҡышына оҡшап ҡалды.

– Ну что?

Ҡамсы һуғыуынан тартылып киткәндәй, Лирка ирекһеҙҙән терт итеп ҡалды ла күндәм ҡиәфәт менән йоҡо урынын йыйыштырырға кереште. «Ярамай». Был һүҙҙәр ҡыҙҙың күңеленән бая үрһәләнеп әйтелһә, хәҙер үкһеүгә оҡшаш ине. «Нишләп һин мине яратмайһың, ә минең менән йәшәйһең, нишләп көн һайын һалҡынлығың, битарафлығың, тәкәбберлегең менән быуаһың, нишләп нахаҡ һүҙҙәреңә түҙәм, бер ҡасан да ҡаршы өндәшмәйем, һинән үҙем китеү тураһында уйлай ҙа алмайым, һин мине ташлап өйҙән сығып киткәндә артыңдан илап тороп ҡалам, кире ҡайтһаң, ҡабул итәм... Нишләп?!.»

– Плитәнде ҡара...

Рәфил күҙен мониторҙан алмай ғына өндәште лә кире тыҡылдатып яҙыша башланы.

«Ярамай», – тип хәлһеҙ генә ҡабатланы Лирка һәм йәнә кухняға сыҡты. Йоҡонан яңы тороуға ҡарамаҫтан, ныҡ арығайны ул. Бәлки, организмы көсһөҙләнгәндер? Күпме ашаһа ла, семтем дә ит ҡунмай бит әле кәүҙәһенә. Әсәһе былтыр, ауылға бер ҡайтып әйләнгәндә: «Үҙ-үҙеңде эстән ашағас...» – тип әйткәйне, асыуланып...

Артабан аш-һыу тәрбиәләне, Рәфилде ашатты, кер йыуҙы, өй йыйыштырҙы һәм, нәҙек, төҫһөҙ сәстәрен тарар-тарамаҫтан, эшкә сығып йүгерҙе.

***

Барыһы ла көндәгесә, ғәҙәттәгесә... Кисен эштән ҡайтып, тауыш-тынһыҙ ғына ашап ултыралар ине. Түшәмдән яңғыҙ лампа һүрән генә яҡтылыҡ һирпә. Һемәгенән боҫ борҡотоп, эмаль сәйнүк ҡайнап сыҡты. Лирка ултырған еренән плитәне һүндерергә ынтылғайны ғына, Рәфил тауыш бирҙе:

– Лирка, мин китәм, – ҡарашын күтәрмәй генә, Лирка бешергән картуфты сәйнәй-сәйнәй әйтте быны егет. – Бөтөнләйгә...

Күптән хәл ителгән, битараф, маһайыулы ине уның тауышы. Лирка илаһа, ҡапыл ҡысҡырып ебәрһә, гүйә, тауышы тағы ла ҡатҡылланырға, үҙәкте өҙөрлөк һалҡынлығы менән ҡыҙҙы ултырған еренә һеңдерә һуғырға әҙер ине.

Тынлыҡ урынлашты.

Сәйнәп ултырған ашамлығы менән бергә әсе күҙ йәштәрен дә йотоп ебәрҙе ҡыҙ. Тәүгә түгел Рәфилдең быҙдай ҡыланышы. Йөҙ тапҡыр булмаһа ла... бер ун тапҡыр ғына ҡабатланғандыр. Һәр ваҡыт шулай: Рәфил, тыныс ҡына йәшәп ятҡан еренән, китере тураһында хәбәр итә; үҙен йәлләтергә тырышып, Лирка сеңләп илай, ҡулдарына, күлдәк еңенә йәбешә, юлына арҡыры төшә, егеттең тултыра башлаған сумкаһынан кейемдәрен сығарып, киренән шкафҡа бырақтыра. Тартҡылашыуҙан һуң Рәфил барыбер сығып китә, Лирка иҙәндә аунап илап ҡала. Һуңынан, бер-ике айҙан, Лирканың иларға түгел, әҙәмсә йоҡларға, ашарға хәле ҡалмай, ҡоро һөлдәгә әйләнгәс, Рәфил кире ҡайта. Ҡайта ла, ҡыҙҙың шешмәк төҫһөҙ күҙҙәренә текләп, ҡыуаныс саҡҡыларының саҡматаштай уйнағанын күҙәтә. Ҡабат бергә йәшәй башлайҙар, барыһы ла көндәгесә, ғәҙимгесә булып китә...

Ләкин был юлы Лирканың тартҡылашырға ла, ҡабат иларға ла, үтенергә лә хәле юҡ ине. «Ярамай»,– тип эстән генә ҡабатланы Лирка.

– Һин ишеттеңме? Мин китәм. Был юлы бөтөнләйгә. Мин һине яратмайым.

Был һүҙҙәрҙе тыныс ҡына тыңлап сәй һемереп ултырған ҡыҙ уҡшығандай итте лә ҡапыл Рәфилдең йөҙөнә тултырып ҡараны.

– Кит һуң.

Рәфил ҡыҙға күҙҙәрен селт-селт йомоп ҡарап ултырҙы ла, мыҫҡыллы көләмһөрәп, ултырғысынан ҡалҡынды, бүлмәгә үтеп, кейемдәрен йыя башланы. Юрый шарт-шорт баҫып йөрөнө, бүлмә ишектәрен шаҡ-шоҡ итте, ләкин Лирка кухнянан сыҡманы, ҡабаланмай ғына сәйен эсте, ҡашығаяғын сайҙы. Рәфилгә былдай тынлыҡта сығып китеүе уңайһыҙ ине, түҙеп йөрөнө-йөрөнө лә, Лирканың зитына тейергә теләгәндәй, һауалы, маһайыулы тауышы менән уны битәрләргә тотондо:

– Мин һине бер ҡасан да яратманым... Һәр саҡ йәлләнем генә, һинең янында уңайлы, бына шулай... Нишләп мин – шундай кәүҙәм, аҡылым менән – һинең кеүек бер ҡараҫҡы янында торорға тейеш әле? Теләһәм, бынамын тигән ҡыҙҙар минеке буласаҡ, эйе... Ҡыҙҙар былай ҙа бер көтөү... Һин – ҡаҡ һөйәк, миңә тауышың, атлап йөрөшөң, бешергән ашың оҡшамай, һин...

Лирка өндәшмәне. «Һинең миңә «яратам» тигәнең дә булманы, – тип эстән генә, күнегелгәнсә яуап бирҙе Лирка. – Ә мин һине үҙемдән дә нығыраҡ яраттым. Шуға ла, яратмауыңды белә тороп, никахһыҙ йәшәүебеҙгә күндем. Ә улай ярамай ине, ярамай...»

Уның йәнһеҙ, дөмһәйгән сырайына күҙ һала-һала, Рәфилгә бер ҡулына ноутбугын, бер ҡулына кейем тулы сумкаһын тотоп ғауғаһыҙ сығып китергә тура килде.

...Һуңынан ғына, Рәфил киткәс, тәҙрә аша буранлап торған ҡараңғы төнгә текәлеп, өнһөҙ, күҙ йәштәрһеҙ генә үкһене Лирка. Карауатына өр-яңы мендәр, юрған тышы алып, урын һалды, оҙаҡ итеп йыуынды, радио тыңланы. Был төндө иҫһеҙ кеше һымаҡ, бер ни белмәй йоҡланы ул.

***

Тормош һәүетемсә дауам итте. Лирка эшкә барҙы, эштән ҡайтты, ашарға бешерҙе, кер йыуҙы, телевизор ҡараны, һирәк-һаяҡ әхирәттәре менән тышта йөрөп әйләнгеләне. Ташлап сығып киткәнен ишеткән дуҫ ҡыҙҙары күмәкләп Рәфилде әрләне, Лирканың артынан ҡыҙҙың үҙен йәлләнеләр: «Йә инде, яңғыҙ ҡалды... Рәфил ҡайтмаһа, кем яратыр уны, кем уның менән йәшәр?»

Рәфил киткәндән һуң тыуған ҡоро бушлыҡ тәүҙә тыныслыҡ, артабан үҙ-үҙенә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо менән тулды. «Карасы, Рәфилһеҙ ҙә йәшәп була икән», – тип аптыраны Лирка. Унһыҙ йоҡларға ятырға, унһыҙ ғына ашарға, ял көндәрен үткәрергә... Апаруҡ тынысланған, ауыр уйҙарҙан, үҙ-үҙен битәрләүҙән, Рәфилдән бер туҡтауһыҙ ниндәйҙер йылылыҡ, һөйөү көтөп йөрөүҙән арыған Лирканың кәүҙәһенә ит ҡунды, бит остары алһыуланды. Эштән һуң магазиндарға һуғылып, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына матур күлдәктәр барланы, хатта бер-икәүһен һатып алырға ла батырсылыҡ итте.

Магазиндарҙың береһендә ебәк алһыу күлдәкте кейеп, ҙур көҙгөнән ҡарап торғанда, ҡапыл үҙенең ун һигеҙҙәге сағын иҫләне. Ниндәй матур, көләкәс ине ул. Һуңынан Рәфилде осратты, уның өсөн, уның хаҡына йәшәй башланы, үҙе тураһында бөтөнләй онотто. «Минең төп хатам – үҙем өсөн түгел, кеше өсөн йәшәүем булғандыр, – тип фекер йөрөттө ҡыҙ. – Нисәмә йылдар буйына кеше ғүмере менән йәшәгәнмен».

...Бер көндө эштән һуң сығып, туҡталҡала автобус көтөп торғанда, машиналар ағымы гөжләп торған юлдың аръяғында Рәфилде танып ҡалды. Үҙенән,

йәғни Лирканан, күпкә йәш матур бер ҡыҙҙы ҡултыҡлап алған да, ҡәнәғәт атлап баралар. Йөҙҙәре шат, Рәфил икенсе ҡулына аҙыҡ тулы сумка күтәреп алған.

Ҡапыл ҡолаҡтары сыңлап китеүҙән шаңҡыған ҡыҙҙың күҙҙәре ҡараңғыланып китте, тир бәрҙе, ауып барған еренән кемдер беләгенән тотоп өлгөрҙө, туҡталҡа эсендәге ултырғысҡа әйҙәне.

Рәфил быға тиклем дә Лирканан киткәне булды, икенсе ҡыҙҙар менән дә аҙ күрмәне уны, ә был юлы барыһы ла етди, ахыры. Шул тиклем бәхетле, шат ине Рәфил... «Бәй, бәхетһеҙ булған икән ул минең менән. Китеп, мине лә, үҙен дә күңел ҡапҡанынан ҡотҡарған».

...Ауа-түнә, хәле бөтөп ҡайтып инде Лирка фатирына. Инде лә, тунын да һалмай, карауатына ауҙы. Әллә иланы, әллә олоно, ә күҙ йәштәре барыбер аҡманы. Ҡараңғы фатирында көсөк ише шыңшып ятҡан Лирка өләсәһе мәрхүмдең һүҙҙәрен иҫләне: «Кеше хәсрәтен өс нәмә баҫа: эш, йөрәккә үтерлек моңло йыр, теште ҡамаштырғыс һалҡын һыу».

Ҡыҙ яй ғына урынынан ҡалҡынды, кейемен һалды, кухняға сығып һалҡын һыу эсте, радиоһын ҡабыҙҙы, гөлдәргә һыу һипте, ашарына бешерҙе...

***

«Лирка!» Баҫлығып, тертләп уянып китте ҡыҙ. Тауыш... Кем саҡыра һуң? Төшөндә Рәфил уны саҡыра, буғай. Ҡулдарын һуҙып, Лиркаға табан атлай, ә алдында – упҡын. Әллә иланы, әллә көлдө шунда Лирка. Хәҙер инде иҫләмәй.

«Тек-тек-тек...» Кухня кранынан һыу тамсылай. Лирка урынынан торҙо, кухняға инеп, сәйнүккә һыу тултырҙы, плитәгә ултыртты, шырпы сыйып, ут ҡабыҙҙы. «Лирка...»

Рәфил уны һәр ваҡыт «Лира» тип түгел, ә «Лирка» тип йөрөттө. Шул саҡ һуҡраныр ине әсәһе: «Бынамын тигән матур исемдән көлөп... Һин уға урамда йөрөгән бер балалыр шул!»

«Их, әсәй... – тине уға Лира бөгөн, моңһоу ғына йылмайып. – Шул урам балаһына ҡарата булған мөнәсәбәттә булмаһа, ихтирам итһә, күптән өйләнгән булыр ине. Ай һайын көс-хәл менән саҡ түләп торған кеше тупһаһына мөгөҙһөҙ һыйыр ише килеп инмәҫ, берәй йүнен күреп, өй һалыр, туғандары менән таныштырыр ине».

Асыулана башлағанын тойған Лирка тәрән тын алды ла тәҙрә янына килде, ишелеп-ишелеп яуған ҡар бөртөктәрен күҙәтте. «Тиҙҙән Яңы йыл...» Үҙ алдына йылмайып, ҡыҙ шкаф башынан саң баҫҡан гирлянда-фәләндәрҙе үрелеп алды. Ҡапыл былтырғы Яңы йыл ҡаршылау кисе, Рәфил иҫкә төштө. «Ярамай!» Ошо һүҙҙе нисәнсегә ҡабатлап, ҡабалана-ҡабалана эҫе сәй һемерҙе, ҡашығаяҡ йыуҙы, гирляндаларҙы элде.

***

Лира йәнә эшкә барҙы, эштән ҡайтты, ҡайтышлай магазиндарға һуғылды. Ҡала урамдары, майҙандары ҡупшы шыршылар менән биҙәлде.

Бер көн подъезд ишегендә уны Рәфил ҡаршы алды. Аҫҡа ҡараған, өшөгән, күрәһең: бите, танауы ҡып-ҡыҙыл. Бынауындай һыуыҡ көндә асыҡ күк төҫтәге үҙе матур, үҙе арзан сәскәләр шәлкеме тотоп алған. Радионан әйләндергеләгән әрһеҙ йырҙың һүҙҙәре ҡолағына салынғандай булды: «Күк сәскәләр – һағыныу билдәһе...» Ҡыҙ ҙа, егет тә, һүҙ башларға ҡыймай, бер урында тапандылар. Кем дә кем тәүләп һүҙ ҡуша – шул ғәфү үтенер, хатаһын таныр кеүек. Һәр хәлдә Рәфил шулай уйлай ине. Лира һаман өндәшмәгәс, түҙмәне:

– Һағындым...

Рәфилгә Лиркаһы ғәҙәттәгесә ҡосағына ташланыр, илап ебәрер, кәмендә «Ниңә килдең?» тип һорар, күҙҙәрендә элеккесә ҡыуаныс сатҡыларын уйнатыр кеүек ине. Ҡапыл уның ҡыҙға йәне көйҙө, Лира уның алдында юрамал маһая, ташлап киткәне өсөн хәҙер уны түбәнһетә кеүек тойолдо, ләкин, Лиркаһын бик яҡшы белгәнлектән, ул быға тулыһынса ышанып та бөтә алманы. Һөйгәне маһая ла, түбәнһетә лә, юрамал ҡылана ла белмәй...

– Мин һине һағындым.

Был юлы Рәфил талапсанырaҡ әйтергә тырышты, ә Лира, уның тауышындағы таныш ҡатылыҡ сыңдарын ишетеп, йәнә тертләне, уны күреүҙән йөрәгендә тыуған кескәй генә өркәк ҡыуаныс һүрелде лә былт итеп юҡҡа сыҡты. Рәфилдән ҡасыу, уны әрләү, битәрләү файҙаһыҙ ине. Ҡасһа, ул уны иртәгә барыбер бында тағы ла ҡарауыллаясаҡ, бер битәренә мең һүҙ табасаҡ. «Ярамай». Был һүҙ йәнә ҡыҙҙың мейеһен, гүйә, ауыр сүкеш менән ярып үтте, һеңгәҙәтте, аҡылын юйҙырҙы. Бер секундҡа ғына ҡыҙ Рәфил кире ҡайтһа нимә буласағын күҙҙән үткәрҙе. Шул уҡ йоҡоһоҙ төндәр, Лира биргән һорауҙарҙы ишетмәмешкә һалышыу, уның ҡыланыштарына, яңылышлыҡтарына ауыҙ ҡыйшайтып йылмайыу, мөһим булмаған кескәй мәсьәләләрҙә лә үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтергә маташыу, төндәр буйы Интернет аша йәп-йәш ҡыҙҙар менән хатлашыу, шыпыртын ғына «свиданка»ларға барып килеү, ахыры сиктә йәнә өйҙән сығып китеү, йәнә ҡайтыу... Лира Рәфилдең сығып киткәнендә уға ырғытҡан һуңғы һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө: «Мин һине яратмайым, яратманым да... Һинең менән уңайлы...» Ҡыҙ иртә ҡыштың еленә ҡалтыранып торған егеткә күҙ ташланы.

– Ҡалай йоҡа кейенгәнһең...

Ҡыҙ егеттең шарфын төҙәткеләне, бирсәткәһен сисеп, нескә сибек бармаҡтары менән яурынындағы ҡарҙы һыпырып төшөрҙө. «Миңә лә, бәлки, һинең менән уңайлы булғандыр. Өшәнес, ҡотһоҙ яңғыҙлыҡтан ҡурҡып, һиңә һыйынғанмын, арҡаланғанмын, ахыры... Яратмауыңда һин генә түгел, мин дә ғәйепле: күп нәмәгә күҙ йомдом, өндәшмәнем, үҙ-үҙемде яҡлай белмәнем». Еңел тын алған Рәфил йылмайғандай итте, ҡалтырауҙан туҡтаны, ҡыҙҙы ҡосаҡларға ынтылып, ҡулдарын йәйҙе. Лира ҡулдарҙы еңелсә генә ситкә этте.

– Бар, ҡайт. Башҡа килмә. Ярамай!

Рәфилдең күҙҙәре шар асылды.

– Лирка!

Лирка тыныс ҡына боролоп, подъезд ишеген асты.

– Лирка!

– Ярамай!

Ҡыҙҙың артынан ташланған егет инеп өлгөрмәне, подъезд ишектәре гөрһөлдәп ябылды. «Ярамай...» – Был һүҙҙәрҙе инде Лира түгел, Рәфил үҙе ҡабатлай ине. Ярһып та, аптырап та, үкһеберәк тә...

...Подъезд төбөндә эйәһеҙ ҡалған күкһел сәскәләр таңғаса ята бирҙе. «Күк сәскәләр – һағыныу билдәһе...» Төндә башланған буран гөлләмәне өйрөлтөп-сөйрөлттө лә, күтәреп ырғыта алмағас, ахыр сиктә ҡарға күмеп ҡуйҙы...

## *БАШҠОРТТОҢ БАЛЛЫ ҺҮҘЕ*

*(Зәйнәб Биишева әҫәрҙәрендә тел байлығы)*

Яҙма әҙәби тел барлыҡҡа килгәнсе үк әле, төрки телдә һөйләшкән бик боронғо ҡәүемдәр «тел ярышы» мәжлесе үткәрә торған булғандар. Әйтәйек, бер тәүзуғ (тема) буйынса күптәр һөйләй. Телмәр матур ҙа, мәғәнәле лә, сәнғәтле лә булһын. Кешенең аң-аҡыл алтыны, хис-тойғо көмөшө, эске донъяһы, фекер йөрөтөү ҡеүәте, рухи йөҙө, йөрәк ялҡыны көсө, күңел шәфәкәтлелеге шунда асыҡлана. Әлбиттә, әҙәм балаһын ваҡыт-ваҡыт һандуғас итә торған моң да ҡатнаша. Тамырҙаш, ҡәрҙәш, фекерҙәш, арҡадаш булмаған телдәрҙә лә моң уртаҡлығы бар. Был хосусиәт күрше булып йәшәгән боронғо чиндар (хәҙерге ҡытайлылар) менән төрки телдә һөйләшкән һундарҙа күҙәтелә. Уларға корея халҡы моңо ла килеп ҡушыла. Бер ни ҡәҙәр япондыҡы ла.

Башҡорттоң баллы һүҙе солоҡ менән бәйлелер. Был бәйлелек ап-аҡ һөт төҫлө Ағиҙел һыуы, иркә ҡыҙҙай йылмайып аҡҡан Дим йылғаһы, ярһыу йөрәкле егеттәй шашып йүгергән Сулмандай, мәғрур Урал тауҙары, сәскәле болондар, сихырлы, серле урмандар, бай, матур, гүзәл, нәфис тәбиғәтле бөтә Башҡортостан тәбиғәте моңо менән нағышлылыр. Шулай булмаһа, Зәйнәб Биишева «Башҡорт теле» тигән шундай илаһи шиғыр яҙа алмаҫ ине, моғайын:

*Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,*
*Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,*
*Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин, –*
*Эй илһамлы, эй хөрмәтле башҡорт теле.*

*Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,*
*Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,*
*Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин, –*
*Эй һөйөклө, эй ҡәҙерле башҡорт теле.*

*Океандарға тиңләмәйем – тәрәнһең һин,*
*Айға-көнгә тиңләмәйем – гүзәлһең һин,*
*Ҡаяларға тиңләмәйем – ғорурһың һин, –*
*Эй хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.*

*Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,*
*Күп быуаттар һин йырланың көрәш юлын,*
*Инде азат, йырлайһың һин еңеү йырын, –*
*Эй бәхетле, эй ҡәҙерле башҡорт теле.*

*Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,*
*Минең өсөн һин бит йәшәү – бәхет үҙең,*
*Мәңге йәшә, эй һөйөклө башҡорт теле, –*
*Атам теле, әсәм теле – минең телем!*

Бындағы нәфис һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғо булып ҡалырҙай тел берәмектәре халыҡтың әлеге «тел ярышы», «тел мәжлесе», «тел йыйыны», «тел туйы»нда әйткән алтындай ҡиммәтле һүҙҙәре, үҙҙәренең шиғыр ҡалыбына һалған:

*«Тел тигән тәрән даръя бар;*
*Теләгәндәр һурып алыр,–*
*Теләмәгән ҡоро ҡалыр», –*

тигән ижади илаһиәте менән бәйле. Күп йылға, күл, даръяларҙың һайыҡҡанлығы, бәғзеләренең ҡороғанлығы – күҙ алдыбыҙҙа. Шуға күрәлер, бәлки, Зәйнәб Биишева телдең океандан да тәрәнерәк булыуы тураһында әйтәлер, һүҙҙәрҙең алтыны, ынйыһы, мәрйене даръяла ғына түгел, океан төбөндә. Аяуһыҙ ҡоролоҡта йәшеллектең көйгәне һымаҡ, тел океаны төбөндәге һүҙ гәүһәре харап булмай. Һүҙ хазинаһынан мәхрүм ҡалмаҫ өсөн, иренмәҫкә, ялҡау булмаҫҡа, океан төбөнә даими сумып торорға кәрәк. Унда ҡоролоҡ булмаһа ла, һүҙҙәрҙе ҡаплай торған ләпәшкә, ҡом-таш бар. ЮНЕСКО, ана, донъялағы күп телдәрҙең бөтөргә йөҙ тотоуы тураһында әйтә. Тимәк, ил өсөн ҡанлы көрәш даими булып торған кеүек, тел заңында ла айбарлы ижтиһадлылыҡ мотлаҡ.

Башҡорт теленең байлығын, нәфислеген, моңон, шәүҡәтлелеген, илаһилығын аңлап яҙҙы Зәйнәб Биишева (йәне ожмахта булһын)! «Тел – күңел көҙгөһө», «Тел – милләт көҙгөһө», «Тел – ил көҙгөһө» тип һөйләшәбеҙ. Теле барҙың – иле бар. Теле юҡтың – иле юҡ. Зәйнәб Биишеваның тел бөйөклөгөн танып-белеүгә мул ярҙам итеүсе сағыштырыуҙар (моң шишмәһе һандуғастай, һығылма бил тал сыбыҡтай, аллы-гөллө гөл-сәскәләй, күгәреп ятҡан Уралдай, серле ҡамыш ҡурайҙай, күпте күргән сәсәндәй), тел-биҙәк сараһы булған эпитеттар (нәфис, наҙлы, бай, йомарт, серле, олпат, йыр, зирәк, һөйөклө, ҡәҙерле, гүзәл, ғорур, хикмәтле, мәрхәмәтле) менән ҙурлауы Ватанын йөрәк ҡайнарлығы, күңел ялҡыны, эсәк-бауыр, аң-аҡыл, хис-тойғо менән яратыусы илһөйәр (патриот), эстетик идеаллы тәрбиәсе, педагог-психолог икәнлеген күрһәтте. Шағирә өсөн тел гәүһәре – аралашыу, фекер алышыу ҡоралы ғына түгел, йәшәү бәхете лә.

Зәйнәб Биишевалағы бай, матур, гүзәл телдең мәңгелек булыуы – Ноғман Мусиндағы бай, матур, гүзәл урмандың мәңгелек булыуы менән ҡәрҙәш. Патриотизмдың эстетик тойғолар һауаһы менән шифаланыуы һәр беребеҙгә мәғлүм. «Патриотик тәрбиә», «эстетик тәрбиә», «хеҙмәт тәрбиәһе», «тел тәрбиәһе» айырым-айырым ҡаралһа ла, кешелеклелек, дөйөм кешелеклелек тойғолары уларҙы бер аң-аҡыл ҡыҫаһына кәрәҙләп бәлзәмләй. «Башҡорт теле» шиғырында ла шулай бит. Милләт яҙмышы өсөн көрәш (патриотизм), матурлыҡ, нәфислек, гүзәллек (эстетика), һүҙ алтынын тел даръяһы, тел диңгеҙе, тел асҡысы төбөнән эҙләү (хеҙмәт), һүҙҙең йөрәк тулҡындарын ҡайнатыуы (тел тәрбиәһе) – шағирәнең илаһи идеалы синтезы. Ахыр siktә ул айырым кеше бәхете, милләт бәхете, ил бәхете, донъя, ғаләм бәхете менән мөһөрләнә.

Бындай үҙенсәлек күптән үткән заман заңында ла, хәҙерге йәшәйеш

тулҡындарында ла бар. Тормош тулҡынында оҫта йөҙөү өсөн, уның ниндәйерәк йылғаларҙан хасил булғанлығын аңлау мотлаҡ. Шуларҙан сығып, аҡыллы баш киләсәктә бәхет ҡояшының ни дәрәжәлерәк ҡыҙҙырасағын самалай ала. Әүлиәлекме был? Бар ул нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы Зәйнәб Биишевала. Бындай үҙенсәлек унда лексик-семантик нигеҙле (исем, сифат, һан, рәүеш, ҡылым) һүҙҙәрҙең тура һәм күсерелмә (метафорик) мәғәнәлә ҡулланыу хосусиәтендә барлыҡҡа килә. Һүҙҙәрҙең эске алтынын, тышҡы көмөшөн аңлап яҙа ҡәләм оҫтаһы. Заманалар сатыры грамматика фәнендә лә өйрәнелә (үткән заман, хәҙерге заман, киләсәк заман). Уларҙың һәр береһен тамғалай торған грамматик ынйылар (саралар) ҙа бар. Яҙыусы өсөн быларҙы ла яҡшы белеү шарт.  Хәҙер сәсмә әҫәрҙәр теленә лә иғтибар итәйек.

Әҙибәнең хикәйә, повесть, романдарында ла туған тел хазинаһындағы һүрәтләү-тасуирлау саралары тышҡы биҙәк, матурлыҡ, нәфислек өсөн генә түгел (былары ла кәрәк), аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыу, образлылыҡ, идеялылыҡ, эмоционаллек, әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһен асыҡлау, уларҙы заман рухына бәйләп ҡарау, персонаж-ҡаһармандарҙың ҡылыҡ-фиғелен билдәләү, эске донъяһына үтеп инеү йәһәтенән ҡулланыла.

Һуңғы ваҡытта шәжәрәгә иғтибар нығ артты. Нәҫелеңдең ете ҡат быуынын белергә тырышыу ғәҙәте беҙҙең халыҡта әүәл-әүәлдән килә. Уның шулай икәнлеген Зәйнәб Биишева «Боронғолар» һүҙен ҡулланып та аңлата:  «...Ә үҙе харап матур ҡыҙ булмаҡсы был Гөлйемеш... Ул бөгөлөп торған оҙон ҡара керпектәр тиһеңме, түп-түңәрәк һөрмәле ҡара күҙҙәр тиһеңме, мәрйен кеүек теҙелеп киткән ваҡ ҡына тештәр тиһеңме...» Һирәк тешле кешенең ауыҙында һүҙ ятмай. Тығыҙ тешленең ауыҙынан һүҙ сыҡмай» тип боронғолар белеп әйткәндәр шул. Уның, Гөлйемеште әйтәм, донъяһының әсе-сөсөһөнә бирешмәй, өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡаршы тора торған кеше балаһы икәнлеге әле үк күренеп тора. Ул инде, Хоҙай ҡушып, үҫеп алһа, һөйләп тормаҫ, эшләр... Собханалла, килмәгән бер ере юҡ балаҡайҙың!.. Хоҙай биргәс бирә икән бәндәһенә».

Аҙ һүҙ менән ҙур фекер әйтә алыу. Был хаҡта нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы Зәйнәб апай үҙе лә әйтә торғайны: «Мин хәл-ваҡиға тураһында яҙам, әммә фекерҙәремде ярып һалмайым, улар һүҙҙәр эсенә йәшеренгән, зирәк уҡыусы үҙе тапмайынса ҡалмай уны», – тигәйне бер һөйләшкәндә. Тимәк, китап уҡыусы өсөн эстетик ҡиммәт кенә түгел, уҡытыусы-педагог та, тәрбиәсе лә. «Һөйләп тормаҫ, эшләр» тип әйтеү әүлиәлек түгелме ни? Кешеләргә ҙур ышаныс белдереү – яҙыусының йөрәк емеше. Үҙенең ысынлап та халыҡ яҙыусыһы икәнлеген иҫбат итеү. Оло йөрәклелек бар ине инде ул Зәйнәб апайҙа! Оло йөрәктән башҡорттоң баллы һүҙен сығара белде ул.

Һүҙ биҙәгес йәки эпитеттар ярҙамында әҙибә ил бауыры ныҡлығын аңлата: «Ҡайһылай нығынып, элеккесә баһадир кәүҙәле булып киткән әле Хаммат ағай», «һин хәҙер был илдең иң көслө, батыр егете». Ҙур, тәрән аҡыллы әҙибә эпитеттары бөтә донъя даирәһендә булған хәл-ваҡиғаларға ентекле баһа бирә: «Донъяла иң оло, иң хөрмәтле һәм мәңге йәш һөнәр – игенсе». Өс йәшлек сағында Зәйнәбтең әсәһе, ун бер йәшендә атаһы гүр эйәһе була. Йәшәү дилбегәһен уға сабый саҡта уҡ нығ тоторға тура килә. Дүрт йыллыҡ уҡыуҙы бер йылда тамамлап, бөтә уҡытыусыларҙы, ауыл халҡын,

йәмәғәтселектә шаҡ ҡатыра әүлиә ҡыҙ. Әйтерһең, уның ҡолағына үҙе кеүек үк матур, батыр, иманлы йөрәкле фәрештә дүрт йыллыҡ белемде әйткән дә торған. Мөғжизә был!

Инглиз телендәге эпитеттарҙың стилистик үҙенсәлеге тураһында бер ханым кандидатлыҡ диссертацияһы яҙғайны. Рус филологтары эпитеттарҙың һүҙлеген төҙөп баҫтырҙы. Китап – кирбес ҡалынлығы. Башҡорт теле эпитеттарға айырыуса бай. Был байлыҡ Зәйнәб апай әҫәрҙәре туҡымаһына мөбәрәк тәсбих төймәләре булып кәрәҙләнгән.

Гете фаразлауынса, яҙыусы биш-алты сит тел белергә тейеш. Шулай булмаһа, ул үҙ теленең байлығын аңлай алмай. Башҡорт теле – бай тел. Уның байлығын башҡа телдәргә сағыштырып белгәнме Зәйнәб апай?

Әллә уға әлеге әүлиәлек бәхете ярҙам иткәнме? Әгәр шулай икән, ғәзиз Аллабыҙға барыбыҙ ҙа рәхмәтле булайыҡ!

Башҡортостандың бай, матур, гүзәл тәбиғәте, унда йәшәгән киң күңелле, батыр йөрәкле, иманлы кешеләрҙең рухиәте, эске һәм тышҡы сифатын һаман беҙ аңлап бөтөрмәгән әйбер-есем-предметтар көтөлмәгән сағыштырыуҙар яһауға ҙур ярҙам итә. Уның шулай икәнлеген Зәйнәб апай әҫәрҙәре буйынса ла беләбеҙ. «Сабыр» тигән һүҙ менән, мәҫәлән, башҡорттарҙа «Сабыр иткән – мораҙына ирешкән», «Сабыр төбө – һары алтын», «Сабырһыҙ кеше – самаһыҙ кеше» тигән ғибәрәләр яһалған. Ул бик боронғонан килә. «Ҡиссаи-Йософ»тан (VIII быуат) бер миҫал:

*Сабыр берлә эшләтел ошбу эши,*
*Сабыр берла эшләнер эшләр башы;*
*Морадына тиҙ йитәр сабырлы кеше,*
*Бу эш эчра күрекле сабыр ҡылғыл имди.*

Зәйнәб Биишевала: «Минең көрән бейә үҙемә оҡшаған, түҙем, сабыр». «Хужаһына оҡшамаһа, мал харам булыр». Ғөмүмән, ысынлап та, хужа холҡо малға күсмәйенсә ҡалмай бит ул. Йәки киреһенсә: мал холҡондағы ҡылыҡ-фиғелде үҙенә ала хужа кеше. Йәшәйештең үҙенсә бер мөғжизәле сере был. Ошо серҙе ябай ғына һүҙҙәр менән әйтә лә бирә әҙибә. Был ябайлыҡта ҙур мөхәббәт заңы бар. «Тап теге элекке еҫле һабын ҡағыҙындағы «Гөлйыһан» кеүек һылыу» тигән сағыштырыу ҙа халыҡта юҡ. Шундай һабын барлыҡты ишеткән бар ине. Шулай ҙа йәш сағымда, унан һуң да күргәнем булманы. Һәр хәлдә, был да яҙыусының көтөлмәгән сағыштырыуы. «Һай-й, яңы һауған һөт һымаҡ бит үҙебеҙҙең Оло Эйек һыуы» тигән сағыштырыуҙа ла кеше менән тәбиғәт араһында булған оло мөхәббәт хис-тойғоһо сағылдырыла. Кешеләрҙе бер-береһе менән сағыштырып танып-белеүҙә милли ғорурлыҡ та көсәйә: «Һин, апай, төҫөң менән бөрйән башҡортона – атайыма оҡшағанһың, матур булғанһың. Ул да бит шулай ҡырлы танаулы, аҡ йөҙлө, һөрмәле сөм-ҡара күҙле, оҙон керпекле ине!..»

Өйҙөң йәмен дә сағыштырыу ярҙамында күрһәтә әҙибә: «Ҡәҙерен белһәң, өйҙөң йәме бит ул Ғәлимәләй теремек әбейҙәр». Урал былбылы, сағыштырыу объекты булараҡ, киң донъяла йәшәү йәме балҡыта. Башҡорттоң батыр ирҙәрен сағыштырыу һөҙөмтәһендә әҫәрҙәрҙәге айбарлылыҡ илаһиәте көсәйә: «Эйе, Муса Мортазинды әйтәләр, бәһлеүән кеүек ҙур кәүҙәле, ҡарлығас күҙле,

йәп-йәш матур егет икән. Икенсе Салауат батыр булған да ҡуйған, ти. Ҡурҡыу, сигенеүҙе белмәй, ти ул. Салауат шикелле йырсы ла, ҡурайсы ла, етмәһә, ти. Һуғышҡа ла иң алдан инә, ти...»

Бер төркөм халыҡты картиналағылай күрһәтеү өсөн күп һүрәтләү-тасуирлау саралары ҡулланырға кәрәк. Телгә оҫта әҙибә был осраҡта ла аҙ һүҙ менән күп мәғәнә биреү маһирлығына ирешә. Был ауырлыҡты еңеү өсөн әҙибә күсерелмәлелектең иң аҫыл төрө булған метафораларға иғтибар итә. Бер миҫал: «Дуҫтарымдың күҙе йондоҙ, биттәрендә көн уйнай». Ҡыҫҡалыҡта – оҫталыҡ, тип тә әйтәбеҙ. Был метафорик ҡыҫҡалыҡта – классик өлгө. Башҡорт ҡыҙҙарының күҙҙәре ысынлап та яҡты йондоҙ балҡыуын хәтерләтә. «Биттәрендә көн уйнай» тип әйтеүҙә уларҙың асыҡ йөҙлө, шаян тәбиғәтле, күркәм сифатлы булыуҙары ғына түгел, шәфҡәтле, шәфәғәтле, мөрәүәтле, ғиззәтле икәнлелектәре лә сағыла. Метафора сағыштырыу ҡатнашлығында ҡулланылһа, был үҙенсәлектең өслүби (стилистик) ҡеүәте тағы ла юғарыраҡ дәрәжәлә була: «Һин мөғжизә булдың: томһа күкте ярып үткән йәшен шикелле, балҡып уҙҙың», һүҙ-һүрәт (образлылыҡ), һүҙ-фекер (идеялылыҡ), һүҙ-тойғо (эмоциялылыҡ) халыҡта күпертелеп тә әйтелеүсән. Фәндә ул гипербола тип атала. Был ысулға ла етди иғтибар итә Зәйнәб Биишева: «Айһылыу еңгә шәфҡәт фәрештәһе лә баһа!», «Ҡайһылай һәйбәт итеп ситләтеп тә бөттөң», «Эй Алла, һинең ҡулдарың ҡул түгелдер, фәрештә ҡанаттарылыр улар... Юҡһа бөтә эш ҡулыңда был тиклем янып тормаҫ ине...»

Әҫәргә йән, йәм, образлылыҡ, нәфислек, матурлыҡ, ғиззәтлелек биреүсе һүрәтләү-тасуирлау сараларына, төрлө биҙәктәргә килгәндә, Зәйнәб апай әҫәрҙәрендә улар шул килеш тә (халыҡтағыса), үҙгәртелеп тә ҡулланыла. Автор үҙе лә яңынан-яңыларын ижад итә. «Шәфҡәт фәрештәһе» тигәне халыҡта бар, әлбиттә. Ул башҡорттарҙа күптән әйтелә инде. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, унан һуң да ныҡ активлашып китте. Сөнки айбарлы ҡыҙҙарыбыҙ ут эсендә батырлыҡ күрһәтеп кенә ҡалманы, яугир күңелендә ялҡын яҡтылығы ҡабыҙыусы изге йән (шәфҡәт фәрештәһе) булып та балҡыны. Зәйнәб апайҙың ҡулды фәрештә ҡанатына әүерелдереүе, ул ҡулда эштең янып тороуы, ысынбарлыҡты шулай гипербола ярҙамында мәңгеләштерергә тырышыуы – нәфис һүҙ сәнғәте өлкәһендәге ижади ҡөҙрәте.

Аҡ менән ҡараның шашып көрәшкән осоронда йәшәйбеҙ. Ә Ер йөҙө ҡара пәрәнжә менән һаман төрөнә бара. Аҡ иман йыртып ырғытырға тейеш ул ҡара пәрҙәне. Илдәр ярышы иҡтисад, сәйәсәт, патриотлыҡ, эстетика, хеҙмәт, мәҙәниәт, тел илаһиәте ялҡыны яҡтылығында барһын ине. Был ярышта Зәйнәб Биишеваның тел байлығы ла бик әүҙем ҡатнашасаҡ.

**Суфиян ПОВАРИСОВ,**
**Башҡорт дәүләт университеты профессоры.**

**Р а у и л**
**Б И К Б А Е В**

## ШАҒИР ЯҘМЫШЫ

*(Хәсән Назарға 70 йәш)*

Ғүмер уҙған һайын ижад донъяһына килгән саҡтарыбыҙ, бигерәк тә алтмышынсы йылдар хәҙер йышыраҡ хәтергә килә, һағындырып иҫкә төшә. Башҡорт әҙәбиәтенең гөрләп үҫкән алтын дәүерҙәре! Ошо осорҙа Баязит Бикбайҙар, Сәләх Кулибайҙар, уларҙан да олораҡ шағирҙарыбыҙ үҙҙәренең яңы сифаттары менән асылды, аҡһаҡалдар йәшәрҙе. Яугир шағирҙар ырамлы эшләне. Мостай Кәрим ижады тотош Союз күләмендә, хатта сит илдәрҙә лә ныҡыраҡ таныла барҙы. Рәми Ғариповтар, Рафаэль Сафиндар быуыны донъяны шаулатты, дәррәү алҡыштар яуланы. Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романы донъя күргәндән һуң әҙип һүҙенә талап артты, прозабыҙ яңы үҫеш кимәленә күтәрелде. Балалар әҙәбиәтенең айырым үрнәктәре бик күп телдәргә тәржемә ителде. Башҡорт драматургтарының әҫәрҙәре республиканан ситтә лә йышыраҡ ҡуйыла башланы. Башҡорт әҙәбиәт ғилеме милли һүҙ сәнғәтенең ҡатмарлы тарихын, уның хәҙерге эҙләнеүҙәрен һәм асыштарын киң ҡараш, төплө фекер, ысын эстетик зауыҡ менән байҡарлыҡ юғарылыҡҡа күтәрелде, тулы мәғәнәһендә фән булып өлгөрҙө.

Урыҫ әҙәбиәтенең, бигерәк тә шиғриәтенең төрлө дәүерҙәрен алтын быуат, көмөш быуат тип нарыҡлау бар. Юғары ҡаҙаныштарына, образлы һүҙ оҫталығына, эстетик сифат яңырышына нигеҙләнеп, башҡорт әҙәбиәтенең алтмышынсы – етмешенсе йылдарҙағы үҫеш юлын алтын ун йыллыҡтар тип раҫларға мөмкин, тип уйлайым.

Нәҡ ошо осорҙа көслө тулҡын булып башҡорт әҙәбиәтенә, айырыуса шиғриәтенә яңы көстәр килде. Һүҙ оҫталығына яңы юғары талаптар ҡуйған ошондай күтәрелеш заманында һәр ижадсыға, бигерәк тә йәштәргә үҙ һүҙен уҡыусылар иғтибар итерлек, яңы күренеш булып баһаланырлыҡ дәрәжәлә әйтеүе еңел түгел ине, әлбиттә. Яңы шағирҙарҙың байтағы матбуғатта сыҡҡан тәүге әҫәрҙәре, беренсе китаптары менән үк үҙҙәренең һәләттәрен аса алды һәм алтмышынсы – етмешенсе йылдарҙа был быуын башҡорт әҙәбиәтенең киләсәген билдәләрлек ышаныслы алмаш булып өлгөрҙө.

Хәсән Назар башҡорт шиғриәтендәге ошо ижади яңырыуҙың үҙәгендә булды.

Унының “Бөркөттәр төйәге” тигән тәүге йыйынтығы 1971 йылда баҫылып сыҡты һәм юғары баһаланды. Бер рецензиянан өҙөк килтерәм: “Һүҙемде йомғаҡлап, шуны ғына әйткем килә: Хәсән Назаровтың был моң-хискә бай, бик тә кешелекле һәм талантлы йыйынтығы үҙ-үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан йәш шағирға ҡарата ҙур өмөттәр уята. Ә шағир юлы, уйлаһаң, башлана ғына әле”. Тәүге китабы сыҡҡас та талантлы тигән һүҙҙе ишетеү бәхете бик һирәктәрҙең генә өлөшөнә төшә. Ә инде талантлы тип һәр саҡ принципиаль ҡарашлы Рәми Ғарипов үҙе яҙған икән, тимәк, Хәсән Назар беренсе китабында уҡ ҡабатланмаҫ моңон, тапҡыр һүҙен тапҡан. Ижадының юл башында ошондай юғары баһаны ишеткән йәш шағир артабанғы ижади яҙмышында остазының өмөт-ышаныстарын лайыҡлы аҡланы. Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: был мәҡәләһенә тиклем үк Рәми Ғарипов  китаптарын бүләк иткәндә автографтарында Хәсән Назарға бик йылы һүҙҙәр арнаған, береһенә “Хәсәнемә оло ышаныс, үҙенә ошо ышаныстан да олораҡ мөхәббәт менән – Рәми ағайың. 09.01.70” тип яҙып ҡуйған. Рәми ағайҙың көндәлектәрендәге: “Ә минең, исмаһам, Рауилдарым, Тимерҙәрем, Мөхәммәтем, Хәсәндәрем, тағы әллә күпме бөрөләрем бар…(Рәшит кенә ауырыу, зато – гений.) Юҡ, минең 18 йылым, бәлки, ул тиклем бушҡа ла үтмәгәндер” тигән юлдар 1968 йылдың 14 июнендә – Хәсәндең тәүге китабы сыҡҡансы уҡ теркәлгән.

Был йылдар күптән инде тарихта ҡалды. Яҙмыш йомғағын һүтә-һүтә, Хәсән Назар  быуа етмешенсе артылышына артылды. Мин был мәҡәләмдә Хәсән Назар ижадын бәйнә-бәйнә байҡауҙы маҡсат итеп ҡуйманым. Унының әҫәрҙәре хаҡында оло һүҙ оҫталарыбыҙ яҙҙы. Туҡһанынсы йылдар башында мин дә үҙ һүҙемде әйткәйнем. Ул саҡтағы күҙәтеү-уйланыуҙарыма был яҙмаларымда әйләнеп ҡайтырмын. Бынан һуң ҡәләмдәшемдең шиғырҙарын һәм “Яҙмышты яҙам”, “Шәмсыраҡ”, “Асманға ашыу”, “Хакимлыҡта” тигән поэмаларын уҡығанда күңелемдә күпме тәьҫораттар тыуҙы, байтаҡ уй-кисерештәр тупланды. Тик быларҙы яҙып сығырға нисектер форсат булманы. Хәсән Назарҙың етмеш йәше алдынан шуларҙы әле уҡыусыларыбыҙға еткермәксемен. Шағирыбыҙҙың аҡыллы һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ, әйтер һүҙҙе әйтеп ҡалайыҡ.

Мәҡәләмде башҡорт әҙәбиәтенең алтмышынсы – етмешенсе йылдарҙағы ижади күтәрелешенән башлауымдың үҙ сәбәптәре бар. Беҙҙең тиҫтерҙәр ҙә, беҙҙән алдараҡ, беҙҙән һуңыраҡ тыуған милләттәштәрем дә туған телдә мәктәп дәреслектәрендә ниндәй шиғырҙар һәм поэмалар уҡып үҫкәнебеҙҙе хәтерләй торғандыр. Бала саҡта уҡығандарың хәтерҙә айырыуса ныҡ ҡалыусан бит. Беҙҙең быуын уҡыусылары “Урал батыр”һыҙ, Аҡмуллаһыҙ, Бабичһыҙ үҫте. Ул замандарҙа Мостай Кәрим әҫәрҙәре лә мәктәп дәреслектәренә ныҡлап инмәгәйне. Ғ.Сәләм, М.Хәй шиғырҙарын, Р.Ниғмәти, Б.Бикбай поэмаларын ихлас ятланыҡ. “Республика иртәһе” уҡыусыларҙың теленән төшмәне. Йыуаныс-ҡыуаныстарыбыҙ шулар менән сикләнде тиерлек. Һуғыштан һуңғы осорҙа башҡорт шиғриәтендә риторика, ялған пафос өҫтөнлөк итте. Кисерештәр менән тулы лирика, тормоштағы ҡаршылыҡтар, йәшәүҙең асылы хаҡында уйланыусы фәлсәфә, һөйөүҙән тыуған ҡайнар һүҙҙәр бөтөнләй тиерлек булманы. Рухи өҙгөләнеү, шикшөбһәләр, күңел ҡыйралыштары совет кешеләре өсөн ят сифаттар һаналды. Уларҙы шиғриәт урап үтергә, һис бер икеләнеүһеҙ оптимизм менән һуғарылырға тейеш ине.

Мәктәптәрҙә рус шиғриәтенең XIX быуаттағы классиктары өйрәнелһә лә, Блок, Есенин һ.б. шағирҙарға юл бикле булды. Унының ҡарауы, мәктәптәрҙә сығарылыш имтихандары йыл һайын тиерлек Маяковскийһыҙ үтмәй торғайны.

Әҙәби зауыҡтары ошо шарттарҙа нығынған, арлы-бирле рифмаланған шалтырауыҡ һөрәндәр өҫтөнлөк иткән йылдарҙа ҡулына ҡәләм алған йәш шағирҙарға, был шаблондарҙан ҡотолоп, шиғриәттең образлы асылына етеү өсөн ҡатмарлы эҙләнеүҙәр юлын үтергә тура килде. Егерменсе съездан һуңғы “йылыныу” миҙгеле, рухи тормоштағы байтаҡ сикләүҙәрҙең алып ташланыуы, шиғриәттә тәбиғилектең, уй-кисерештәр төрлөлөгөнөң артыуы, образлылыҡҡа, һүҙ оҫталығына иғтибарҙың көсәйеүе алтмышынсы йылдарҙағы йәш шағирҙарҙың үҫеүенә һәйбәт мөмкинлектәр бирҙе. Бәғзеләр ошо шарттарҙа ла үҙ һүҙен таба алмай, элекке ҡалыптарҙан, ҡабатлауҙарҙан ҡотола алмай бер урында тапанғанда, йәштәрҙең иң зирәктәре һәм талантлылары тәүге баҫмаларында уҡ үҙҙәрен өлгөргән шағир итеп танытты.

Хәсән Назарҙың өйрәнсек миҙгелен мин хәтерләмәйем. Гәрсә һәр ижадсы тәүге тәжрибәләр һәм кемдәргәлер эйәреүҙәр, башҡаларҙы ҡабатлауҙар юлын үтһә лә, таланттар, зирәктәр был юлда оҙаҡ тотҡарланмай. Өҫтәүенә уларҙың һүҙгә талапсанлығы, ижадсы бурысы һәм намыҫы әле өлгөрөп етмәгән әҫәрҙе уҡыусыға тәҡдим итергә юл ҡуймай.

Хәсән Назар беренсе китаптан уҡ шиғриәттә үҙ урынын алды.

Уның тәүге йыйынтығынан һуң икенсеһен оҙаҡ көттөм. Был тойғоно бер мин генә түгел, ҡәләмдәштәрем дә, иң мөһиме, уҡыусыларыбыҙ ҙа кисергәндер. “Яңы йыйынтығыңды ҡасан уҡытаһың?” тип нисәмә тапҡырҙар һораштым икән? Бына- бына әҙерләп бөтөрәм, бер ҡабат ҡарап сығаһы ғына ҡалды, тип яуаплай, ә ҡульяҙма һаман юҡ та юҡ. Осрашҡан һайын әйтеп-әйтеп тә, аҙаҡ әйтмәй башланым. Ижад эшендә һәр кемде былай ҙа бит әллә күпме һорауҙар йөҙәтә, уны ҡат-ҡат борсоу, бәлки, килешеп тә бөтмәйҙер.

Шулай ҙа был китаптың берәй көн донъя күрerенә, бик күптәр һымаҡ, мин дә нығ ышана инем. Ышанысым бушҡа булманы. 1992 йылда Хәсән Назарҙың “Шоңҡар сөйәм” тигән йыйынтығын ҡулға алып ҡыуандыҡ.

Ғүмерен һүҙ сәнғәтенә арнаған һәр кем өсөн һәр китап – уҡыусылар алдында оло һынау үтеү ул. Тәүге йыйынтығыңды күреү – автор өсөн ҙур шатлыҡ. Был шатлыҡ уҡыусыларҙың да ҡыуанысына әйләнһә, яуаплылыҡ нығыраҡ арта. Сөнки үҙенең һәләтен күрһәтә алған яңы исемгә халыҡ ҙур өмөттәр бағлай: киләһе әҫәрҙәрендә ул үҙен нисек күрһәтер, өмөттәребеҙҙе аҡлармы? Нимә генә тиһәң дә, беренсе йыйынтыҡҡа яҙғандарыңдың барыһын да тиерлек барлағандан-һайлағандан һуң иң лайыҡлылары инеп бөтә. Шуға ла икенсе китап – айырыуса ҙур һынау. Хәсән Назарҙың оҙаҡ йылдар буйына икенсе йыйынтығын сығармай тороуы, бәлки, шул яуаплылыҡты үтә нығ тойоуҙан да киләлер. Ысынлап та, “Шоңҡар сөйәм” китабына ингән шиғырҙар шағирҙың күңелендә һәм зиһенендә ныҡлы һынау һәм һайлау үткән, шуға улар тос һәм камил.

Ни тиклем ҡатмарлы был яҙмыш тигәндәре, бигерәк тә шағир яҙмышы… Беҙ ижад донъяһына килгән алтмышынсы йылдарҙа шиғриәт күгендә балҡып күренгән күпме исемдәр, ваҡыт үтеү менән, болот ҡаплаған кеүек, ҡайҙалыр ғәйеп булды. Мөхәммәт Илбаевтың матбуғатта күренгән тәүге шиғри шәлкемдәре әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн ниндәй ҡыуаныс килтергәйне! Уның беренсе китабы ижад донъяһында оло ваҡиғаға әйләнде, тәүге йыйынтығы менән үк шағир үҙҙен раҫлай алды. Бынан һуң күп йылдар үтте, ләкин уҡыусылар көткән икенсе китап һаман да күренмәне. Нур Хәбиров, Шакир Ғәлин һымаҡ бик үҙенсәлекле, һәләтле шағирҙар ҙа тәүге китаптарын сығарғандан һуң оҙаҡҡа юғалды. Халыҡ ижадының аҡылын, моңон, туған телдең аһәңен, тылсымын зиһененең һәр күҙәнәгенә тиклем һеңдергән, ғәжәп үҙенсә фекерләүсән Рәшит Әхтәровтың да тәүге китабы әллә ҡасан донъя күрә алыр ине.

Был шағирҙар тураһында “әллә ҡайҙа оҙаҡҡа юғалдылар” тигәнемдә шулай ҙа асыҡлабыраҡ китергә кәрәк. Улар бөтөнләй юғалманы, һирәкләп булһа ла һәйбәт-һәйбәт шиғырҙары күренгеләп торҙо. Ләкин күңелдә үкенеү, аптырау тойғоһо бөтмәне.

“Эш китапта ғынамы ни?” – тип һорауҙары ла бар. Йыш ҡына: “Эш китапта түгел”, – тип яуап бирәләр. Бының менән тулыһынса килешеүе ҡыйын. Эш барыбер китапта ла. Тәбиғәт тарафынан бирелгән талант ижадсының бәхете генә түгел, ул халыҡ яҙмышына яңы бәхет өҫтәр өсөн дә, уны яңы уй-кисерештәр менән байытыу өсөн дә бирелгән. Тимәк, талант – ул ғәйәт ҙур яуаплылыҡ. Уның ваҡытты әрәм итергә хаҡы юҡ. Һәләтһеҙҙәр тырышып-тырмашып сейле-бешле китаптарын бер-бер артлы сығарып ятҡан ваҡытта талантлы шағирҙарҙың йылдар буйына күренмәүҙәренә нисек күңелең һыҙланмаһын! Был һүҙҙәрҙе күберәк яҙырға саҡырыуҙан түгел, ҡайһы бер таланттарҙы үтә һирәк ишеткәнгә йән әсеүенән әйтәм. Изге урын буш тормай. Ул урынға яҡшыһы бик ашығып бармай икән, яманы уҙа.

Илдә үҙгәртеп ҡороу шау-шыуы менән башланған ҡыйралыштар ҡоторғанда, элек ҡыйыу әҫәрҙәремде баҫтырырға торғонлоҡ ирек бирмәне, беҙҙең быуындың юлын быуҙы, тип зарланыусылар күбәйҙе. Яҙылып та, ниндәй шиғыр йәки поэмалары үткер фекерҙәре өсөн баҫылмай ҡалған да әле килеп кенә донъяға сыҡҡан? Быларын төпсөнә башлаһаң, зарланыуҙарының нигеҙһеҙлеген күрәһең. Рәми Ғарипов, Рәшит Назаров, ниһайәт, бөгөнгө уҡыусыға тулыраҡ етә алған икән, уларға оҡшарға тырышып, үҙеңдән ҡорбан яһарға, булмағанды булды тиергә ярамай бит.

Хәсән Назарҙың “тыйҙылар” тип зарланғанын, кемделер ғәйепләргә тырышҡанын ишеткәнем юҡ. Тормошо һәм ижади яҙмышы нисек кенә булмаһын, ул һәр саҡ шиғриәткә тоғро ҡалды, иң мөһиме, шағирлығын юғалтманы. Хәйер, шағирлыҡ юғалта йәки таба торған сифаттарҙан түгелдер, Алла биргән бәхет йәки яҙалыр ул, күрәһең.

Шағирлыҡтың Алла биргән сифат икәнлегенә Хәсән Назарҙың “Шоңҡар сөйәм” исемле яңы китабын уҡып сыҡҡандан һуң уҡыусылар тағы ла нығыраҡ инанғайны. Ошо йыйынтыҡтан һуң быуа йырылып киткәндәй булды. Шағирҙың “Заман заңы”, “Асманға ашыу”, “Ғүмер һәм дәүер” исемле йыйынтыҡтары донъя күрҙе. Был баҫмаларға тупланған шиғырҙарҙың һәм поэмаларҙың иң матур яғы – уларҙағы уй-кисерештәрҙең тәбиғилеге, ябайлығы, кешесә булыуҙары. Хәсән телдең бәҫен зирәк тоя, шуға ла һүҙгә талапсан. Шиғриәттә генә түгел, мәҡәләләрендә лә шулай булды һәм булып ҡала. Ләкин айырып әйтке килә: һүҙгә генә түгел, Хәсән Назар үҙенең фекерҙәренә, тойғоларына ла талапсан, шиғырҙарына уларҙы һайлап индерә. Шағир өсөн иң ҡурҡыныс бәләләрҙең береһе булған яһалмалылыҡ уға ят.

“Бөркөттәр төйәге”, “Шоңҡар сөйәм”, “Заман заңы”, “Асманға ашыу”, “Ғүмер һәм дәүер” – китаптарҙың исемдәре бер ни тиклем ғорур һәм тантаналы, тиер инем. Ләкин ҡайһы саҡта бындай исемдәрҙең нисек тә милли һыҙат тыуҙырырға тейешле тышҡы ялтырауыҡ ҡына булып ҡалғанлығын, исемдең есемгә бер ҙә тап килмәгәнлеген аҙ күрҙекме ни? Хәсән Назар тышҡы биҙәктәр менән мауыҡмай, халыҡ рухы, тыуған ер моңо, кеше күңеле уның шиғырҙарында уй-кисерештәренең үҙ заманына, үҙ ерлегенә тамырланыуынан, ил яҙмышын, уның шатлыҡ-хафаларын тәрәндән тойоуынан, йөрәктән кисереп йәшәүенән тыуа.

Китаптарының исемдәре бик күтәренке һәм дәртле рухта булһа ла, ҡайһы бер юлдарында яңғырауыҡлы һүҙҙәргә бирелеп китһә лә, Хәсәндең шиғырҙары

һөрән һалып тормай, уларҙың күбеһе уйсан, йыш ҡына һағышлы. Шағирҙың “сүкетеп, ер һиңкетеп” менгегә тайҙар өйрәткән, үрәпсеп торған ҡырлас яллы саптарында тау юлдарынан үткән саҡтары ла бар. Тик ул ярһып-тулап бармай, тормоштоң асылы тураһында сабыр уйлана.

Уның шиғриәтендә буяуҙар күҙҙең яуын алырлыҡ сағыу түгел, әммә һәр береһе үҙ урынында, һәр береһе йәнле. Шуға күренеш, хәрәкәт, тере кисерештәр,– ҡыҫҡаһы, тормош үҙе күҙ алдына баҫа. Хәсән тормоштағы иң ғәҙәти хәлдәрҙең, беҙ көн дә күреп күнегеп бөткән ваҡиғаларҙың шиғрилеген күрә белә, күберәк нәҡ шулар хаҡында һөйләй-тасуирлай.

Миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Береһенә генә туҡталам:

*Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын*
*Һары селтәр ер өҫтө.*
*Ҡояш-өләсәй ҡунаҡтан*
*Әле ҡайтмаған төҫлө.*

*Иҫтәлектәргә бирелеп,*
*Йылға әкрен, тын аға.*
*Ул йоҡа боҙ-күҙлек аша*
*Ҡарай хәҙер донъяға.*

*...Һыуыҡ тип бошонмай донъя,*
*Ул уға иҫке таныш:*
*Яңғырап ҡуя ауылда*
*Һөйләшкән, көлгән тауыш.*

*Япраҡтар йыя бер сабый*
*Әллә ни ҙур эш итеп.*
*Аңлап уны, һөйөп үтәм,*
*Ҡәҙерле моңдаш итеп.*

Тәү ҡараштa тәбиғәттең ҡара көҙҙән ҡышҡа күсә башлаған күңелһеҙ бер мәле тураһында һүҙ барған һымаҡ. Ләкин бындағы һәр күренештән күпме ысын тормош һулышы бөркөлөп тора! Һары селтәрле ер өҫтө, һалҡын болоттар, боҙ-күҙлек аша донъяға ҡарап тын ғына аҡҡан йылға, ауылда яңғырап киткән һөйләшкән, көлгән тауыштар, япраҡтар йыйып йөрөүсе бер сабый – улар айырым-айырым йәшәмәй, күҙгә күренмәгән тылсымлы бәйләнештәр аша улар барыһы бергә тоташҡан, һәр ҡайһыһы бер-береһенең ҡәҙерле моңдашына әйләнгән.

“Усаҡ яна... Яҫҡып төтөн үрләй, шартлап ҡуя уттың быуыны”, “Шул саҡ ҡапыл йәшен ялтлап, уйҙарҙы һүтеп китә, талда элеүле салғымды сыңлатып сүкеп китә”, “Ҡанаттарын яҙып, ҡаҙҙар талпынып ынйы ҡоя”, “Икәү үткән һуҡмаҡтарға ауа ысыҡлы үлән”, “Таңдарҙы һин йоҡлап ҡаршылама, таңдар ҙа бит беҙҙән ҡаласаҡ”– Хәсән Назарҙың төрлө шиғырҙарынан алынған был юлдар үҙҙәренең шаҡ ҡатырғыс образ-сығыштырыуҙары менән түгел, ниндәйҙер әйтеп-аңлатып булмай торған моң-ауаздары, тормошсан һәм шиғри булыуҙары менән хәтергә уйыла. Шағир хәбәр һөйләүгә йәки артыҡ битараф тасуирҙарға бирелеп китһә, уны прозаизмда ғәйепләү бар. Ә бына Хәсән Назар нәҡ шул тормош прозаһының шиғриәтен аса, бик һаҡ, һаран буяуҙар, ғәҙәти деталдәр аша йәшәүҙең матурлығын, кешенең кешелеклеген күрһәтә. “Сыбыртҡы”, “Бәке”, “Шырпы”, “Сәңгелдәк”, “Яңы күлдәк”, “Мейес”, “Таҡта сәй”, “Муйыл”, “Бойҙай”, “Усаҡ”,

“Сабынлыҡта”, “Тубырсыҡтар”, “Ҡурыс һыҙырам”, “Ҡоҙоҡ ҡаҙам” һымаҡ шиғырҙарҙың исемдәре көнкүрештәге һәр кемгә таныш әйберҙәрҙе иҫкә төшөрә. Уларҙың барыһы ла кеше яҙмышында уның бәләкәс саҡтарынан уҡ әллә күпме эҙ ҡалдырған бит. Хәсән Назар быларҙың әлегәсә күрелмәгән матурлыҡтарын, кеше яҙмышына бәйле борондан килгән тәрән мәғәнәләрен тапҡан. Әсәһе хаҡында: “Икмәк еҫе һеңгән ҡулдарына, таң нурҙары ҡунған төҫөнә”, – ти шағир.

*Юҡ, туҡтатма, әсәй, улыңды,*
*Минең өсөн кем һуң юл ярһын?*
*Өмөттәрем еккән аттарҙы*
*Бәхеттәрем генә туъарһын,–*

тип өндәшә ул әсәһенә. Ошо юлдарҙа әсәләрҙең ни тиклем яғымлы, сабыр һәм көслө йөҙ-һыны күҙ алдына баҫа, яңы юлға, яңы тормошҡа талпыныу уҡыусы күңелендә лә теләктәшлек, ауаздашлыҡ уята. Тыуған ере тураһында шағир: “Ҡаһармандар ята ҡуйынында, һыуытмаҫҡа тиеп был ерҙе”, “Һин ҡарайһың кеүек күҙҙәремә, ҡулым һуҙған һайын икмәккә”,– тип ябай һәм мәғәнәле һүҙҙәр әйтә.

Ябайлыҡҡа һәм тормошсанлыҡҡа һәр шағир ынтыла. Хәсән Назар күпселек шиғырҙарында шул сифаттарға ынтылып ҡына ҡалмай, маҡсатына ирешә. Ябайлыҡ аша камиллыҡты ижад итә. “Шоңҡар сөйәм” әҫәрендә шағир үҙ күңелен генә түгел, ә, ғөмүмән, милли рух осошон сығылдыра:

*Сыуаҡ дала – хозур төйәк*
*Офоҡтан офоҡҡаса.*
*Шоңҡарымдан алда бында*
*Йөрәгем, гүйә, оса.*
*Саңҡып ҡуя сая рухым,*
*Күктәргә тейә түбәм.*
*Шоңҡар сөйәм! Ҡош сөйөрҙәй*
*Иркен иректе һөйәм.*

Затына ҡарап – зауҡы. Әммә Хәсән – иң элек ер улы. Күңеле донъяуи уй-кисерештәр һәм тормош ғәмдәре менән тулы. Шағирҙың йәшәү рәүеше бына нисек:

*Ҡоҙоҡ ҡаҙһам да мин,*
*Бура бураһам да,*
*Ағас ултыртһам да,*
*уйым –*
*Кеше тураһында.*

“Уйым – кеше тураһында” – был һүҙҙәр ҡоро декларация ғына булып ҡалырға ла мөмкин. Хәсән Назар иһә был һүҙҙәрҙе кеше яҙмыштары хаҡындағы тормошсан шиғырҙары менән раҫлай. Тыуған ауылы Таулыҡайға: “Һин миңә – Ватан тупрағы төйнәлгән ҡулъяулыҡтай”, – ти шағир. Шәхес яҙмышындағы ғәйәт ҙур һәм яуаплы төшөнсәне – Ватан төшөнсәһен – тупраҡ төйнәлгән ҡулъяулыҡ ни тиклем терелтеп ебәрә, уны кешенең уй-өмөттәре менән айырылғыһыҙ итеп бәйләй.

Хәсән Назар шиғриәте – яҡты шиғриәт. Унда хәҙер байтаҡ кешеләрҙең ауырыуына әйләнгән бит йыртыуҙың, үсләшеүҙең, кәһәрләүҙең булмауы ҡыуаныслы. Һоҡланыу ҙа, һағыш та бар, әммә кенә ҡыуыу, асыу һаҡлау юҡ. Уның шиғырҙарын уҡығанда ниндәйҙер рухи тыныслыҡ кисерәһең. Юҡ, вайымһыҙлыҡҡа бирелеү түгел, яҡтылыҡҡа сарсап күңелдең яңы көс туплауылыр, моғайын, ул кисерештәр. Бына оҙаҡ йылдар буйына уртаҡ фатирҙа күршеләр менән торған ауыр шарттарҙа тыуған “Йәшәп ятам…” тигән шиғыр. Күршеләре

хаяһыҙ, ҡотһоҙ, киҫекһеҙ. Улар хаҡында шағир: “Кемдән генә төшкән ҡарғыштыр”, – ти. Ләкин нисек кенә булмаһын, улар ҙа бит әҙәм балалары, кешелектәрен бөтөнләй юғалтмағандар. Шағир үҙе лә аптырап ҡарай: “Йәнем биҙрәп бөткән шул күршеләр гөл үҫтерә тәҙрә төбөндә”. Тимәк, улар ҙа күңелдәрендә матурлыҡ тойғоһон һаҡлаған, ошо шарттарҙа ла тормоштан нисек тә йәм табырға тырыша. “Әҙәмдән дә ерҙә түбән зат юҡ, һәм юҡ ерҙә унан бөйөк зат” – был хәл бөгөн генә тыумаған, борон-борондан шулай килгән. Хәҙерге талаш-йыртыш заманында түбәнлектәр бөйөклөктө баҫып бара. Быға ҡарап ҡына шиғриәт үҙенең кешелеклеген, миһырбанлыҡ сифаттарын юғалтырға тейеш түгел. Хәсән Назар ҡыйын саҡтар килгәндә лә, ҡыуаныстарҙан иҫергәндә лә үҙе өсөн иң ҡәҙерле, яҡты күңелле заттарға һыйына. Асыуын тыйып, донъялар йәмһеҙләнеп киткәндә лә уның матурлығын тойоп, кешеләр ҡарашындағы өмөт саҡтыларын күңеленә йыйып, “күләүектә түгел, күктәрҙә лә йондоҙҙар юҡ, булһаң асыулы” тигән фекер менән йәшәй. Шағирҙарҙың яныуҙары ла донъяны йылытыр, яҡтыртыр өсөн. Хәсән Назарҙың ҡәҙерле кешеһенә әйткән: “Тамуҡтарҙа булһам, мин янырмын йылы биреп һинең өйөңә”,– тигән һүҙҙәре шағир яҙмышының нәҡ шул сифатын раҫлай.

Тормош ҡатмарлы. Берәүҙәр талпынып күккә оса, икенселәренең өмөттәрен ҡырау һуға. Быға ҡарап ҡына кеше яҙмышты ҡәһәрләмәй, тергеҙеү, төҙөү, юҡты бар итеү юлдарын эҙләй. Кемгә кемгә, шағирға был сифаттар айырыуса хас, уның бар булмышы тетрәнеүҙәр аша камиллыҡҡа, рух азатлығына ынтылып йәшәүҙә.

Лирик тәбиғәтле Хәсән Назар кәрәк сағында әсе телле лә була. Уның тапҡыр пародиялары, “Ҡунаҡта”, “Утлы ҡамғаҡ” һ.б. шиғырҙары сатирик һәләтен дә аса биреп ҡуя. “Утлы ҡамғаҡ” ошондай юлдар менән тамамлана:

*“Мә” тигәндә – ике халыҡ улы булмаҡ,*
*“Бир” тигәндә – икеһен дә яманламаҡ.*
*Ике милләт араһында шундай әҙәм*
*Йөрөп ята – әйтерһең дә, утлы ҡамъаҡ.*

Был шиғыр – кешеләрҙең милли хисендә уйнап, башҡорт халҡына яла яғыуҙар, бысраҡ ялғандар юлы менән аңды томаларға тырышып, нисек тә ыҙғыш тыуҙырырға хыялланыусы түбән бәндәләр хаҡындағы иң уҫал әҫәрҙәрҙең береһе. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Хәсән Назарҙың сатирик әҫәрҙәре бик һирәк күренә. Ижадының был йүнәлешен дауам итмәүе үкенесле.

Тормош юлдарында Хәсән Назарға ауыр ваҡыттарҙы байтаҡ кисерергә тура килде. “Устарыма алып һыу уртлайым, һалҡындарын бер ҙә тоймайым. Йәш эркелә күҙгә, кире йотам – япраҡ көйрәр, ергә ҡоймайым” кеүек юлдар бына шундай кисереештәрҙән тыуа. “Төн эсендә сәсе ағарһа ла, ир-егет ул ҡалмаҫ баҫылып” тигән иң ауыр саҡтарында шиғриәттә ышаныслы таяныс һәм йыуаныс таба.

Ғүмеренең яңы үренә еткәндә шағир ошолай тигәйне:

*Инде килеп бына, шөкөр,*
*Артыламын алтмышҡа.*
*Яҙмышты яҙҙым. Ризамын,*
*Үтмәне ғүмер бушҡа.*

Ғүмер үткән һайын был донъяла йәшәүҙәр ҡәҙерлерәк, әммә Ваҡыт та аяуһыҙыраҡ. Шағир яҙмышының яңы биттәре яҙыла. Шиғырҙарҙа моң-һағыш та, уйсанлыҡ та арта, әммә сабырлыҡ ҡаҡшамай, ныҒына ғына бара. Тормош хәҡиҡәтенә тәрәнерәк үтеп инген, яҡшыһын да, яманын да етерлек күргән-

кисергән шәхес ҡатмарлы яҙмыштар тураһында хәҙер тураһын ярып һалып һөйләшә. Һүҙҙәре ҡырыҫыраҡ, әммә улар мәңгелек хәҡиҡәттәрҙең асылын ныҡыраҡ аса. Нимә генә тиһәң дә, “Сәңгелдәк менән табуттың арауығы был донъя”. Әммә ошо арауыҡты намыҫыңды һаҡлап, иманыңды юғалтмайынса, һине түбәнһетергә тырышҡандарында ла кеше булып ҡалып үтеүе ни тиклем ҡатмарлы! “Гонаһҡа батҡан был ерҙә гонаһһыҙ булып ҡара”, “Бәхетһеҙҙәр араһында бәхетле булып булмай”, “Һин шундай ҡош инде ерҙә, бәхет, ҡанаттарын бар ҙа , ояң юҡ” – тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татыған, күпме бәрелеш- ҡыйралыштарын йөрәге тетрәнеп үткәргән шағирҙың уй-кисерештәре ҡырҡыу, фекере тығыҙ, һүҙҙәре тапҡыр. Бормалы ғүмер юлдарында баштан үткәндәр кешене “Күпте белеү түгел, күпте аңлау кәрәк икән” тигән һығымталарға килтерә. Әммә аңлау өсөн дә күпте күрергә, күпте белергә кәрәк шул. Ысынлап та, “Белмәгәндең беләге тыныс” тип халыҡ бик аҡыллы әйткән. Тик бөгөнгө Интернет дәүерендә, яңынан-яңы мәғлүмәт технологиялары үҫкән заманда белгәндәр күп тә бит, тик аңлағандар ғына үтә һирәк.

Шағир ғүмере буйы тыуған еренә, туған теленә, ғәзиз халҡына, олатайҙарҙан килгән изге аманаттарға табынып йәшәй. Ләкин унын инаныуҙары үҙгәрешһеҙ түгел, йылдар үтеү менән бәйләнештәре тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә. “Барыһы ла ҡабатланыр, ҡабатланмам мин генә” тигәйне Хәсән Назар. Ғүмерҙәр ҡабатланмаһа ла, ҡайһы бер фекерҙәргә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырға тура килә. Хәсәндең шиғырҙарында, поэмаларында әҙәбиәт, сәнғәт, шиғриәт тураһындағы уйланыуҙар ғына түгел, көнсөлдәргә, кәсепселәргә, ваҡ йәнле бәндәләргә, мөтәшағирҙарға ҡарата әсенеп, ҡайһы саҡта хатта нәфрәтләнеп әйтелгән һүҙҙәр ҙә ҡабатлана. Ләкин был бәләләр кәмемәй, арта ғына бара. Был хәлдәрҙе күреп, асырғанып әйткән һүҙҙәрендә ирекһеҙҙән ҡабатларһың. Ләкин шағирҙың кешеләргә һоҡланып, донъяны яратып ҡараған саҡтары күберәк.

“Иманға инаныу” тигән мәҙхиәһендә Хәсән Назар донъяны бына ниндәй аҡ теләктәр, яҡты уйҙар менән байҡай:

*Сәхәрҙәрҙә – таңда күккә баҡһам,*
*Мең-мең йондоҙ – тәсбих төймәләре.*
*Ай күрҙем мин аман, йәндә иман,*
*Тәҡдиремә тәҡәттәр бир, Тәңре!*

*…Фатихалар – Ҡөрьән һүҙе менән,*
*Бәхиллектәр – Ҡөрьән һүҙе менән.*
*Иманымды һатмай, һатылмайса,*
*Мин көн итәм ерҙә түҙем менән.*

Беҙҙең рухыбыҙҙа халҡыбыҙҙың бик боронғо мәжүсилек ҡараштары ла, Тәңрегә табынған замандарҙан килгән ырым-йолалар ҙа, мосолман ҡануниәтенең, ислам тәғлиматенең ҡәтғи ҡағиҙәләре лә айырылмаҫлыҡ булып бергә үрелгән. Һуңғы йылдарҙа тарихи тамырҙарыбыҙҙы барларға, изге шәжәрәләребеҙҙе тулыраҡ тергеҙергә тырышыу тормошобоҙҙағы матур бер күренешкә әйләнде.

Халыҡсанлыҡ һәм ябай камиллыҡ, милләтебеҙҙең йәшәү һәм фекерләү рәүеше менән тәбиғи бәйләнеш Хәсән Назарҙың тәүге китабындағы шиғырҙарынан уҡ килә. Бөгөн ил ағаһы дәрәжәһендәге шағир ижадында был сифаттар эҙмә-эҙлекле үҫтерелә. Хәсән Назар үҙенең моңдаш, рухташ уҡытыусыларын йәштән үк һәм ғүмерлеккә билдәләгән. Уның заңы ла, сазы ла остаздарының ижади

тәбиғәте менән ауаздаш. Шағир классик традицияларға тоғро ҡала. Илһам шишмәһенең башы башҡорт халыҡ ижадының хазиналарына барып тоташа. Образлы шиғри һүҙгә ирешеү юлында ул башҡа милләттәрҙең бөйөк шағирҙарының ижади мәктәптәренән дә өйрәнә. Башҡортостан яҙыусыларының XV съезы алдынан Хәсән Назарҙың "Башҡортостан" гәзитендә сыҡҡан шиғри шәлкемендә ошондай юлдар бар:

*Французлдарҙың белеү-белмәүенә*
*Ниңә минең иҫ китергә тейеш?*
*Халҡым рәхмәтенә барып етеү –*
*Өлөшөмә төшһөн тик шул көмөш.*

Халҡың ихтирамын яулау, уның рәхмәтен ишетеү – ижадсы өсөн иң оло бәхет. Быныһы бәхәсһеҙ. Ләкин, сит илдәрҙең беҙҙе белеү-белмәүҙәренә һис кенә лә иҫебеҙ китмәй, тип йәшәп булмай. Аллаға шөкөр, беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ сикләмәйбеҙ, донъя менән киңерәк бәйләнештәргә инергә тырышабыҙ. "Урал батыр" эпосын донъя уҡыусылары хәҙер урыҫ, инглиз, немец, төрөк һ.б. телдәрҙә уҡый ала. Ҡурай моңо, башҡорт бейеүе донъяны урай. Әҫәрҙәребеҙ башҡа телдәргә тәржемә ителә. Бындай бәйләнештәрҙә халҡыбыҙ өсөн донъя алдында яуаплылығыбыҙ арта. Башҡа милли әҙәбиәт үрнәктәрен туған телебеҙгә тәржемә итеп, беҙ башҡорт һүҙ сәнғәтен байытабыҙ, беҙҙең алда донъя киңерәк асыла. Бик кәрәкле тәржемә эшенә Хәсән Назар ҙа үҙенең тос өлөшөн индерә.

Күренекле шағир, публицистик фекерле Хәсән Назарҙың ижады Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. Уның ижтимағи эшмәкәрлеге, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһында, шиғриәт секцияһында яңы ҡулъяҙмалар хаҡындағы фекер алышыуҙарҙа, үҙәктә булыуы, йәш көстәр менән һәр саҡ аралашып йәшәүе, беҙҙең съездарҙа һөйләгән докладтары шулай уҡ юғары баһаға лайыҡ. Байтаҡ ҡәләмдәштәребеҙ тик үҙ хәстәрҙәре менән булып, өйҙәренән сыҡмай йәшәгәндә, уҡыусыларыбыҙ менән даими аралашҡан, һәр саҡ юлға әҙер шағирҙарыбыҙ һәм әҙиптәребеҙ күберәк булһын ине. Хәсән Назар бына шундайҙарҙан. Хәҙер китап һатыу мөмкинлектәре бик ныҡ сикләнгән, тираждар ҡырҡа кәмегән саҡта һүҙ оҫталарының халыҡ менән туранан-тура осрашыуы, төрлө уҡыу йорттарында, китапханаларҙа, клубтарҙа сығыш яһауҙары әҙәбиәттең тормош менән бәйләнешен нығытыуҙа бик кәрәкле сара ул.

Үҙенең тәбиғәте буйынса Хәсән трибун түгел, әммә тапҡыр теле, үҙенсәлекле фекерле әңгәмәләре менән тыңлаусыларҙың күңеленә үтеп инә. Республиканың ҡала һәм райондарына ғына түгел, милләттәштәребеҙ йәшәгән күрше өлкәләргә лә юлы төшөп тора. Һуңғы ваҡыттарҙа Башҡортостан һүҙен Мәскәүҙәге, Татарстандағы, Дағстандағы оло-оло әҙәби тантаналарҙа олпат һәм үтемле итеп еткерҙе.

Кешенең алдағы яҙмышын төрлөсә юрарға мөмкин, ләкин киләсәктә ниҙәр булырын Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белә. Бигерәк тә шағирҙарҙың яҙмыштары ҡатмарлы. Ләкин Хәсән Назар иртәгә лә бөгөнгө һымаҡ, кисәге һымаҡ шиғриәткә тоғро ҡаласаҡ, телдең тәмен, һүҙҙең бәҫен белгән ҡәләмдәшебеҙ әҙәбиәт, рухиәт тигән хәстәр менән йәшәйәсәк. Яҙмышы, булмышы шул. Үҙе лә, ижады ла оҙон ғүмерле булһын!

**1993; 10-11.09.2011**

## БАЛҠЫШТАРҒА БАЙ ҒҮМЕР

*(Роберт Байымовтың тыуыуына 75 йыл)*



Башҡорт әҙәбиәте ғилеме формалашыуға тос өлөш индергән арҙаҡлы ғалимдарҙың береһе, күренекле прозаик һәм йәмәғәт эшмәкәре, талантлы педагог Роберт Байымовтың тыуыуына 75 йыл тулды... Бынан бер йыл да һигеҙ ай ярым элек уның йөрәге тибеүҙән туҡтаны.

Р. Н. Байымов Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. Тыуған ауылында алтынсы класты тамамлағас, Бөйөк Ватан һуғышында танк ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт итеп, ҙур тәжрибә туплаған механизатор атаһының Ҡарлыман МТС-ына эшкә күсерелеүе сәбәпле, Бишауыл-Уңғар башҡорт мәктәбен дүрт йыл йәйәү йөрөп тамамлай. Урта белемле егет үҙ районындағы Иҫке Ҡыйышҡы, Биштәкә ауылдарында өс йыл физиканан, математиканан һабаҡ бирә, шул арала Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтының физика-математика факультетында ситтән тороп бер курсын уңышлы тамамлай. Һалдат хеҙмәтенә ул алыҫҡа, Япон диңгеҙенең ярындағы атаҡлы Находка порты тирәһенә, ебәрелә, урта техник белемле һәм институт студенттарынан төҙөлгән артиллерия полкына эләгә, орудиеларҙың утын махсус приборҙар ярҙамында координациялаусы взводка тәғәйенләнә. Ҡушылмаһа ла, һалдат тормошо хаҡында хәрби округ гәзитенә хәбәрнамәләр яҙа башлай, боевой листоктар, стендтар эшләүҙә әүҙемлек күрһәтә. Хеҙмәтен тултырғас, артабанғы ғүмер юлын филология менән бәйләргә ныҡлы ҡарар итеп, 1959 йылдың йәйендә, атай йортона ла ҡайтып тормаҫтан, имтихандар биреү өсөн Башҡорт дәүләт университеты тупһаһына аяҡ баҫа һәм вафатына тиклем ошонда эшләне.

1964 йылда тарих-филология факультетын «ҡыҙыл диплом»ға тамамлаған йәш белгес башҡорт әҙәбиәте һәм филологияһы кафедраһында ассистент итеп ҡалдырыла һәм бер йылдан М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты аспирантураһына ебәрелә. Ошонда ул «20 – 30-сы йылдар башҡорт әҙәбиәтендә тарихилыҡ принцибы формалашыуы» (1968) тигән темаға кандидатлыҡ, «Башҡорт прозаһының эпик формалары системаһында роман жанры» (1982) тигән темаға докторлыҡ диссертацияларын яҡлай.

Роберт Нурмөхәмәт улы 1982 йылдан алып 2010 йылдың майына тиклем башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһын етәкләне, республикабыҙ һәм

күрше өлкәләрҙең башҡорт мәктәптәре, мәғариф һәм мәҙәниәт учреждениелары өсөн меңдәрсә белгес әҙерләүгә, башҡорт әҙәбиәтенән мәктәп дәреслектәре, юғары уҡыу йорто студенттары өсөн методик күрһәтмәләр, программалар, ҡулланмалар төҙөүгә күп көс һалды. «Башҡорт әҙәби тәнҡит тарихы», «Роман жанры мәсьәләләре» кеүек махсус курстарҙан тыш, «Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте», «Шәреҡ әҙәбиәте» тарихтарын башҡорт филологияһының даими уҡыу планына индереп, уны кәрәкле әсбап-ҡулланмалар менән тәьмин итеүгә төп иғтибарын йүнәлтте. Уның етәкселегендә яҙылған «XX быуат башҡорт әҙәбиәте тарихы» дәреслеге (2003) йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, ә инде үҙенең «Великие лики и памятники Востока» дәреслеге (2005) матбуғатта «йыл китабы» тип билдәләнде.

Профессор Р.Н.Байымов мәғариф хеҙмәткәрҙәре менән тығыҙ бәйләнештә торҙо, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының белемдәрен камиллаштырыу маҡсатында семинарҙар, конференциялар, осрашыу-фекер алышыуҙар, кәңәшмәләр ойоштороуҙарға ла, туранан-тура лекция-докладтар менән ҡатнашыуҙарға ла оло яуаплылыҡ менән ҡараны.

Ғалимдың тынғыһыҙ педагогик хеҙмәте фәнни һәм ижади эшмәкәрлеге менән тығыҙ үрелеп барҙы. Уның студентлыҡ осорондағы тәүге әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә үк үткән быуаттың 60-сы йылдарына хас яңырыу рухына ауаздашлыҡ, ҡыйыулыҡ, идея-эстетик ҡараштарының аныҡлығы тойомлана. Рус телендә сыҡҡан тәүге китаптарының береһе «Шаг в зрелость» (1975) тип атала. Гәрсә һүҙ 20–30-сы йылдарҙа башҡорт совет әҙәбиәтенең художество кимәле тарихилыҡ принцибында нығыуы, реалистик тенденцияларҙың көсәйеүе хаҡында барһа ла, беҙҙеңсә, авторҙың үҙенең ғилми эҙләнеүҙәр өлкәһендә етди белгес булып өлгөрөп етеүенә лә ишара китаптың исеме. Мәскәүҙә «Современник» нәшриәтендә ҙур тираж менән донъя күргән «Поискам нет конца» монографияһын (1980) танылған тәнҡитсе А. Власенко «башҡорт прозаһы өлкәһендә иң абруйлы тикшеренеүҙәрҙең береһе» тип баһаланы. Әҙиптәребеҙҙең дә шул ваҡыттағы һөйөнөсөн З.Биишеваның Мәскәүҙән ебәргән хатынан аңларға мөмкин: «…китабыңды уҡып сыҡтым да, рәхмәт һүҙемде әйтеп, хат яҙырға ултырҙым. Үҙебеҙҙең әҙәбиәт хаҡында шундай етди китаптың Мәскәүҙә сығыуы ла, һәйбәт яҙылған булыуы ла ҡыуандырҙы…» Был хеҙмәттә башҡорт совет прозаһы жанрҙарынан, атап әйткәндә, роман һәм повестарҙың идея-тематик йүнәлештәре, тел-стиль, сюжет-композиция үҙенсәлектәре, ошо юҫыҡтағы айырым уңыштар һәм кәмселектәр ярайһы уҡ баҙыҡ төҫмөрләнә, әҙәбиәтебеҙҙе ил генә түгел, донъя орбитаһына алып сыҡҡан Һ. Дәүләтшина, З. Биишева, М. Кәрим, Я. Хамматов, Ә. Бикчәнтәев, Ж. Кейекбаев, Н. Мусин һәм башҡаларҙың мәшһүр әҫәрҙәренә объектив баһа бирелә. Бер-бер артлы нәшер ителгән «Башкирский историко-революционный роман» (1980), «Судьба жанра» (1984), «Истоки и устья» (1993) китаптарында башҡорт прозаһына бик төплө байҡау яһала, 70–80-се йылдарҙағы әҙәби процесҫа ҙур урын алған Ф. Иҫәнғолов, Рәйес Низамов, В. Исхаҡов, Ғ. Ибраһимов, Д. Исламов, А. Ғирфанов, башҡа әҙиптәрҙең проза әҫәрҙәренә системалы ҡараш ташлана, идея-эстетик критерийҙар юғарылығынан герой һәм характер бирелешендәге ҡаҙаныштар, етешһеҙлектәр асып һалына. Башҡорт әҙәбиәтенең күп милләтле совет әҙәбиәттәре менән әҙәби-мәҙәни бәйләнештәрен, типологик

оҡшашлыҡтарын яҡтыртҡан тәнҡит мәҡәләләре иһә «Вопросы литературы», «Наш современник», «Дружба народов», «Литературная газета», «Литературная Россия» һәм башҡа үҙәк баҫмаларҙа урын алды, Венгрия, ГДР, Төркиә һәм илебеҙҙең һәр төрлө ҡалаларында үткән фәнни конференцияларҙа доклад булып яңғыраны.

Р. Байымовтың алтмышынсы йылдарҙан башланған ғилми биографияһының үҙәгендә егермense быуат башҡорт прозаһы мәсьәләләре торһа ла, уның фәнни ҡыҙыҡһыныуҙары, Себер һәм Урта Азия төрки халыҡтарының тарихы һәм һүҙ сәнғәте, фарсы һәм ғәрәп телендәге Шәреҡ классикаһы менән ентекле танышыуы ла емешлерәк, ҡоласлыраҡ була барҙы.

90-сы йылдар башында илдәге ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә фәнни эҙләнеүҙәргә ҡарата методологик тыйыуҙар һәм сикләүҙәр юҡҡа сыҡҡас, тарихи дөрөҫлөктө тәрәндән өйрәнеүҙәргә һәм объектив баһалауҙарға юл асылды. Яңы информацион ресурстар нигеҙендә донъя кимәлендә фәнни-мәҙәни бәйләнештәрҙең әүҙемләшеүе халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, этнотарихтарындағы һәм рухи ҡаҙаныштарындағы оҡшаш һыҙаттарҙың генезисын төплөрәк тикшереүгә ҙур мөмкинлектәр тыуҙырҙы. «Бөгөнгөбөҙ тарихсыларға, тел һәм әҙәбиәт ғилеме менән шөғөлләнеүселәргә, мәрйен эҙләүсе диңгеҙгә сумғандай, ваҡыт даръяларын айҡау бурысын ҡуя», – тип, ғалим милли әҙәбиәтебеҙҙең бик боронғо тамырҙарын юллауға, ошо йүнәлештә белгестәр әҙерләүгә дәррәү тотондо.

Башҡорт әҙәбиәтенең Көнсығыш менән бәйле художество традицияларын барлау юҫығында уның етәкселегендә диссертациялар яҡланды, Бөтә Рәсәй кимәлендәге фәнни-ғәмәли конференциялар, методологик семинарҙар ойошторолдо, был йүнәлештең йөкмәткеһен билдәләүгә әҙәбиәт белгестәре, тарихсылар, фольклорсылар йәлеп ителде. Күмәк фекер алышыуҙар һөҙөмтәһе булараҡ, «Башкирская духовная культура древности и средневековья: проблемы изучения» (2007), «Боронғо һәм урта быуаттарҙа башҡорт художестволы фекер эволюцияһы» (2008, 2009), «Әҙәбиәт һәм фольклор үҫешенең актуаль проблемалары» (2010), «Әҙәбиәт тарихы – халыҡ тарихы» (2010) йыйынтыҡтары баҫылды. Уның тарафынан «Боронғо һәм урта быуаттарҙа башҡорттарҙың художестволы фекер эволюцияһы» тигән күләмле коллектив хеҙмәт баҫмаға әҙерләнде.

Профессор Р. Байымовтың һуңғы осорҙағы төрлө халыҡ-ара форумдарҙағы сығыштары, мәҡәләләре, айырым китап рәүешендә донъя күргән хеҙмәттәре («Литература Востока: материалы по иранской, индийской, арабской литератур с древнейших времен до XVIII в.» – 2001; «Фарсиязычная литература и ее межлитературные (тюрко-арабо-индоязычные) взаимосвязи: аннотированная программа. – 2003; сб. «Гармония многообразия». – 2007; «Төрлө йылдарҙа тыуған уйҙар: һайланма мәҡәләләр». – 2007; «Исчезающие истории: башкирско-якутские историко-литературные взаимосвязи». – 2007) – боронғо Һинд, Иран, Яҡын Көнсығыш, Урта Азия, Алтай, Себер һәм Урал-Волга буйы халыҡтарының яҙма ҡомартҡыларын сағыштырып өйрәнеүҙә яңы аҙым ул. Быны иҫәпкә алғанда, арҙаҡлы ғалимды, һис икеләнмәй, башҡорт компаративистикаһына, йәғни сағыштырма әҙәбиәт ғилеменә, нигеҙ һалыусыларҙың береһе тип һанарға мөмкин. Был тәңгәлдә шуны билдәләргә кәрәк: бүтән

тарафтарҙағы боронғолоҡто эҙләү, уларҙы башҡорт һүҙ сәнғәте менән сағыштырыу һис кенә лә донъяға танылған атаҡлы һүҙ ҡомартҡыларына яһалма «тағылыу» түгел. Ғалим, киреһенсә, уртаҡлыҡты эҙләү, башҡорттарҙың художестволы фекеренең үҫеш этаптарын асыҡлау маҡсатын күҙ уңында тота. Шуның өсөн дә ул Көнсығыш мәҙәниәте буйынса белгестәр әҙерләү зарурлығын республикабыҙ етәкселеге, ғилми даирә һәм йәмғәтселек алдында даими күтәреп сыҡты. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһына ағза-корреспондент булып һайланғас та, үҙе ойоштороған һәм алмашһыҙ баш мөхәррире булған «Йәдкәр» исемле ғилми журналдың (1995–2010) фәнни даирәһен киңәйтеү маҡсатында уны яңы – «Проблемы востоковедения» исемендә нәшерләүҙе бойомға ашырҙы.

***

Хәҙерге рухиәтебеҙҙең аҫыл тамырҙарын боронғолоҡтан эҙләү яҙыусы Байымовтың әҙәби эшмәкәрлегенә лә ҙур йоғонто яһаны. Әгәр ҙә 70 – 80-се йылдарҙа совет осорондағы күренештәрҙе, үҙ заманындағы халыҡ тормошон сағылдырған хикәйәләр («Сарсау» – 1980, «Бикле хазина» – 1982), повестар («Ҡайтырбыҙ һалдат булып» – 1986), роман («Яуап бирер көн» – 1989) тыуҙырһа, 90-сы йылдарҙа әҙип әҫәрҙәрендә тарихи тематика өҫтөнлөк алды. Башҡорт дәүләтселеге, милли автономия өсөн көрәш барышын һынландырған «Сыбар шоңҡар» романы, оло әҙәби күренеш булараҡ, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы менән билдәләнде (1997). Тағы ла боронғораҡ, Х быуаттағы башҡорт ысынбарлығын ислам донъяһы менән бәйләнештә һүрәтләгән «Каруан килә Бағдадтан» романын («Ағиҙел», 2008) киң ҡатлам уҡыусылар йылы ҡабул итте.

Йәнә Р.Н.Байымовтың күп ҡырлы эшмәкәрлегенең бер яғын – уның арыу-талыу белмәҫ тынғыһыҙ йәмғәт эшмәкәре булыуын да билдәләү фарыз. 1971 йылдан Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы булараҡ, ул егерме йыллап тәнҡит һәм әҙәбиәт ғилеме секцияһын етәкләй, идара эшендә ҡатнаша. Заманында Китап һөйөүселәр йәмғиәтенең республика бүлексәһе рәйесе, хөкүмәт эргәһендәге төрлө комиссиялар, диссертацион советтар, бер нисә журналдың, шул иҫәптән «Ағиҙел»дең, мөхәрририәт ағзаһы, алты томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте тарихы», «Башҡорт энциклопедияһы» кеүек фундаменталь баҫмаларҙың авторҙашы ла, редакцион советы ағзаһы ла булды, комсомол съездарына, башҡорт ҡоролтайҙарына делегат итеп һайланды һәм эшлекле фекерҙәре менән уртаҡлашты.

500-ҙән ашыу фәнни һәм ижади публикациялары булған күренекле ғалим-педагог һәм яҙыусының емешле хеҙмәте маҡтау таныҡлыҡтары, почетлы знактар, 1986 йылда БАССР-ҙың, 2005 йылда Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән исемдәр менән билдәләнде.

Балҡыштарға бай ғүмер... Сағыу яҙмыш...

**Зәйтүнә ШӘРИПОВА,**
**Башҡорт дәүләт университеты профессоры.**

## *АУЫЛҺЫҘ ИЛ – БӨЛГӘН ИЛ*

Меңәр йыллыҡ донъя тарихы һәм хәҙерге тәжрибә шуны күрһәтә: бер ниндәй цивилизация ла, дәүләт тә халҡын аҙыҡ-түлек менән тулыһынса тәьмин итергә һәләтле ауыл кеүек тылдан башҡа етеш көн итә алмай. Шуға күрә цивилизацияла кешелек ауылға матди, финанс, әхлаҡ яғынан ярҙам итеү кеүек хәстәрлек күрергә мәжбүр ителгән. XIX быуатта Америка фекер эйәләренең береһе Буккер Вашингтон, ауыл хужалығына, ер эшкәртеүгә яҙыусылар, шағирҙар һәм рәссамдар хеҙмәтенә булған кеүек мөнәсәбәт күрһәтергә кәрәк, тигән фәһемле һәм тәрән мәғәнәле фекер әйтеп ҡалдырған. Рәсәйҙең психологтары шундай һығымтаға килгән: атап үтелгән ижад кешеләренең хеҙмәт көсөргәнешлелеге Йыһанға осоусыларҙыҡына тиң.

Хәҙерге осорҙа Рәсәй ауылының, ғөмүмән, ауыл хужалығы комплексының хәле ҡатмарлы, һәм был иң элек уның продукция етештереү ҡеүәтендә сағылыш таба. XX быуаттың 90-сы йылдарында игендең тулайым йыйымы, мәҫәлән, 60 миллион тоннаға тиклем кәмене. Йәй ҡоро килгән йылдарҙа ул хатта 47 миллион тоннанан артманы. Ә бит 90-сы йылдарға тиклем Рәсәй игенселәренең 116 миллион тонна иген һуҡҡан йылдары ла булды. Реформа йылдарында дәүләт ауылды тәрән сүплек соҡорона этеп төшөрөп, һаман да һөйрәп сығара алмай. Етди финанс ярҙамынан тыш, төрлө кимәлдәге чиновниктар теле менән әйткәндә, Рәсәй ауылын тергеҙеп булмаясаҡ. Был турала, һис шикһеҙ, ил етәкселәренә лә яҡшы билдәле. Әммә улар үҙҙәренең ауылға мөнәсәбәтен бер нисек тә нигеҙләмәйенсә, тармаҡҡа финанс ярҙамын 15 йыл инде кәметә килә. Әгәр ҙә Совет власы йылдарында агросәнәғәт комплексын үҫтереүгә дәүләт ҡаҙна сығымдарының 27 проценты йүнәтелһә, хәҙер ул ни бары 1,5 процент ҡына тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй иҡтисадсыларының күпселеге, илдең етештереү потенциалы үҙ халҡын ғына түгел, ә бер нисә дәүләттекен тәьмин итергә һәләтле, тип иҫәпләй. Ғәмәлдә илебеҙ сит мәмләкәттәрҙән ауыл хужалығы продукттары һатып алыуға йыл һайын 35 миллиард доллар сарыф итә. Һумға әйләндергәндә, был 1 триллионға торошло аҡсаны Рәсәй властары үҙ крәҫтиәндәренә биреүҙе хәстәрләһә, яҡшыраҡ булмаҫ инеме ни?

Ил халҡы, бигерәк тә ауыл эшсәндәре, Рәсәй башлығының Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтен йыл һайын көтөп ала. Д. Медведевтың, ниһайәт, Рәсәй ауылы ихтыяждарына тейешле мөнәсәбәт белдереүенә өмөтләнә улар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Кремль етәксеһе былтыр ҙа тармаҡ мәсьәләһенә еңелсә генә ҡағылып үтте. Социаль тормоштоң барлыҡ өлкәләрен инновация алымдарын киң ҡулланып яңыртыу тураһында һүҙ алып барғанда, Д. Медведев Рәсәй ауылын яңыртыуға иғтибарҙы күберәк бүлер кеүек ине. Сөнки ул күреп ҡайтҡан Ҡытай

Халыҡ Республикаһында ундай тәжрибә бар бит. Ауыл хужалығын модернизациялау сәйәсәтен әҙмә-эҙ ғәмәлгә ашырып, Ҡытай етәкселәре беҙҙең илдәге кеүек (мәҫәлән, олигархтарҙың колхоз, совхоздар ерҙәрен баҫып алыуы) эш итмәй, үҙенең аҙыҡ-түлек йәһәтенән именлеген хәстәрләп, матди, финанс ярҙамы күрһәтә. Ил башлыҡтарының ошондай аҡыллы сәйәсәте һөҙөмтәһендә Ҡытай донъяла иң күп аҙыҡ-түлек етештереүсе һәм сит илдәргә сығарыусы дәүләттәр рәтенә сыҡты. Рәсәй, киреһенсә, ауыл хужалығы продукттарын күпләп етештереүселәр исемлегенән төшөп ҡалды. Был ниндәйҙер дәрәжәлә былтыр илгә ҙур зыян килтергән ҡоролоҡҡа һәм киң масштаблы янғындарға ла бәйле. Шул уҡ ваҡытта бөтәһен дә был афәткә генә ҡайтарып ҡалдырыу етди булмаҫ ине. Иң төп сәбәп, моғайын, ғәмһеҙлектәлер, сөнки ҡоролоҡ Башҡортостан менән Татарстанды ла урап үтмәне. Ләкин беҙҙең яҡтарҙа ауылдар, нефть промыслалары, заводтарҙы көслө ялҡын ялмаманы бит. Сөнки ҡороған үләндәр ваҡытында йыйылып, ауыл хужалығы ерҙәре көҙҙән һөрөп ҡуйылды.

Ауыл хужалығында хәүефле хәл килеп тыуҙы. Былтыр Рәсәй хөкүмәте сит илгә иген сығарыуҙы тыйҙы. Уға тиклем Мысыр республикаһына 540 мең тонна иген һатыу тураһында килешеү төҙөлгәйне. Тоннаһын 183 – 250 долларға. Рәсәй хөкүмәтенең был ҡарарынан һуң игендең донъя баҙарындағы хаҡы 300 долларға тиклем күтәрелде. АҠШ менән Франция хөкүмәттәре был хәлдән оҫта файҙаланды, хәҙер Мысыр менән Иорданияны иген менән улар тәьмин итә. Әлбиттә, Рәсәйҙең донъя баҙарында конкуренция тыуҙырыуы бөтәбеҙ өсөн дә отошло. Мәҫәлән, Төньяҡ Африка, Көньяҡ-Көнсығыш Азия илдәре беҙҙән 50 миллион тонна иген һатып алырға теләй. Был уларға игенде Канада менән АҠШ-тан ташыуға ҡарағанда арзаныраҡ.

Рәсәй ауылдарын интектергән проблемалар байтаҡ. СССР тарҡалғандан һуң эшкәртелмәй-сәселмәй ятҡан элекке ауыл хужалығы ерҙәре 40 миллион гектарға етә. Был уҙған быуаттың 50 – 60-сы йылдарында күтәрелгән сиҙәм ерҙәр майҙанына тиң. Ауыл хужалығы машиналары эшләп сығарыу ҙа ҡырҡа кәмене. 90-сы йылдарҙа һөрөнтө ерҙәрҙе эшкәртеүҙә 1,4 миллион трактор, игенде һуғып алыуҙа 408 мең иген комбайны файҙаланылһа, бөгөнгө Рәсәй ауылдарында ни бары 400 меңләп трактор һәм 95 мең комбайн эшкә яраҡлы. Уларҙың да күпселеге 15 – 20 йыл эшләп, күптән файҙаланыу срогын тултырған. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн ауыл хужалығының матди-техник базаһы бөлөп, юҡҡа сығып бара. Егерме йыл элекке менән сағыштырғанда, тракторҙар эшләп сығарыу – 10, комбайндар эшләү 11 тапҡырға кәмегән. Тула, Краснодар, Люберцы, Рубцовск ҡалаларындағы ҡеүәтле ауыл хужалығы техникаһы етештереүсе предприятиелар туҡтап ҡалған. Ә бит Совет власы йылдарында Рәсәйҙең иген комбайндары АҠШ-тыҡынан өс тапҡырға күберәк ине.

Һуңғы ун йыллыҡтарҙа күпселек төбәктәрҙә ауыл хужалығы ерҙәренең уңдырышлылығы түбәнәйеүе лә тармаҡ эшсәндәрен борсоуға һала. Мәҫәлән, бихисап күп майҙандар ашлама индереүгә мохтаж. Реформа йылдарында ерҙәрҙе мелиорациялау, фосфор ашламалары индереү, гипслау һәм һуғарыу кеүек культуралы эштәр ун тапҡырға аҙыраҡ атҡарыла. Тармаҡ иҡтисадсыларының мәғлүмәттәре буйынса, һөрөнтө ерҙәрҙең өстән бер өлөшөнә ашлама бөтөнләй индерелмәй, ҡалған ерҙәргә лә ул талап ителгәндән өс-дүрт мәртәбә аҙыраҡ бирелә. Рәсәй ауыл хужалығы техника һәм кадрҙар етмәүҙән, тармаҡ продукцияһына хаҡтарҙың түбәнлегенән яфа сигә. Ҡаҙнанан бүленгән сығымдар аграр хужалыҡ күргән зыяндың бер өлөшөн дә ҡапламай.

Рәсәй ауылдарының кредит бурысы 1,5 триллион һум тәшкил итә. Төрлө енәйәтсел элементтарҙың ойошҡан эш итеүе арҡаһында тармаҡ эшсәндәре үҙҙәре етештергән продукцияны тотҡарлыҡһыҙ баҙарға сығарыу мөмкинлегенән мәхрүм. Ямғырҙан һуң сыҡҡан бәшмәктәрҙәй күбәйгән аралашсы структуралар ҙа ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәрҙән арзан хаҡҡа алып, үҙ кесәһен ҡалынайта. Был, әлбиттә, тауар етештереүселәрҙең үҙ хужалығын киңәйтеү кеүек теләк-ынтылышын юҡҡа сығара. Быға кемде ғәйепләргә? Билдәле, төбәк башлыҡтарын, муниципалитет етәкселәрен. Проблемаға ҡағылып, БР Президенты Р. Хәмитов продукция эшкәртеүҙе урында ойоштороу мәсьәләһен тиҙерәк хәл итергә саҡырҙы. Ысынлап та, Урал арьяғы райондарында етештерелгән һөт, ит һ.б. сеймалды Ырымбур, Силәбе, Свердловск өлкәләре эшҡыуарҙары йыйып ала ла, эшкәткәндән һуң, ошонда уҡ килтереп һата. Был, өҫтәмә хаҡ (НДС) һәм саф килем эшҡыуарҙар ҡулына әләгә, тигән һүҙ.

Реформа йылдарында һыйыр малдарының иҫәбе лә ҡырҡа аҙайҙы. Һөҙөмтәлә ит һәм һөт продукттары етештереү 1913 йыл менән сағыштырғанда ике тапҡыр кәмегән. Ә бит батша Рәсәйендә ил халҡы ла күпкә аҙыраҡ булған. Баҙар иҡтисадының һөҙөмтәле эш итеүе арҡаһында Рәсәйгә 3 миллион тонна иттең сит илдәрҙән ташылыуына аптырарға түгел. Әлбиттә, был ҡәҙәре продукцияның сифатлы булыуы ла шик тыуҙыра, сөнки туңдырылған ит йыш ҡына дәүләт резервтарында бер нисә йыл ятҡандан һуң алына. Рәсәйгә сығарыласаҡ итте етештереүселәр, мал тиҙерәк ауырлыҡ йыйһын өсөн, төрлө яһалма препараттар ҡулланыуҙан да баш тартмай. Шуға күрә ил магазиндарында хлор тултырылған тауыҡ боттарының тулып ятыуына ғәжәпләнергә түгел. Үҙебеҙҙә етештерелгән ит 90-сы йылдар кимәленән ни бары 60 процент тәшкил итә.

Малсылыҡты үҫтереү буйынса республика программаһына ярашлы, 2010 йылға продукция етештереүҙе 30 процентҡа арттырыу бурысы ҡуйылғайны. Өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә һуңғы өс йылда һөт етештереү – 10,3, ит – 10,4 һәм балыҡ үрсетеү 38,2 процентҡа артты. Тармаҡты үҫтереү буйынса эре инвестиция проекттары ғәмәлгә ашырыла. Мәҫәлән, Мәләүез районының М. Ғафури исемендәге хужалығында ҡошсолоҡ комплексының икенсе сираты файҙаланыуға тапшырылды. Комплекс тулыһынса сафҡа ингәндән һуң унда йылына 30 мең тонна күркә ите етештерергә мөмкин буласаҡ. Әлшәй районында «Башҡорт бройлеры» тигән проект ғәмәлгә ашырылһа, мең тонна ҡош ите һәм 28 миллион дана йомортҡа етештереләсәк. Көйөргәҙе районының «Забариев-агро» яуаплылығы сикләнгән ширҡәттә 2007 йылдан бирле лимузин тоҡомло һыйыр малдары үрсетеү комплексы төҙөлә. 2012 йыл аҙағына унда мал иҫәбен 25 меңгә еткереү планлаштырыла. Башҡортостанда шулай уҡ заманса һөтсөлөк комплекстары төҙөү буйынса ла эш алып барыла. План буйынса улар һигеҙ, Ейәнсура районының «Инәк» яуаплылығы сикләнгән ширҡәттә 1280 һауын һыйырға, Учалы районының «Байрамғол» агрофирмаһында, Баймаҡ районының «Йылайыр» ауыл хужалығы предприятиеһында, Ҡырмыҫҡалы районының «Алатау» (1800), Ауырғазы районының «Агрогалс» хужалыҡтарында 1200 һауын һыйырға иҫәпләнгән һөтсөлөк комплекстары эшләйәсәк. Яңыртылғандан һуң биш сусҡасылыҡ комплексы 50 мең сусҡа һимертеп, иткә тапшырыу мөмкинлеге бирәсәк.

Рәсәйҙә йылына 37 миллион тонна һөт етештерелә. Продукция эшкәртеүсе предприятиеларҙа ҡорамалдар һәм технологиялар иҫкергән, ҡайһы берәүҙәре

эштән туҡтаған. Һөҙөмтәлә һөт продукттарының 20 проценты сит илдәрҙән ташыла. Һөт аҙыҡтары менән туҡланыу етерлек дәрәжәлә булмаһа, был кешеләрҙең һаулығына кире йоғонто яһай. 2010 йылда федераль хөкүмәттә һөт аҙыҡтары ҡулланыуҙы кәмендә бер ярым тапҡырға арттырыу бурысы ҡуйылды. Ҡасандыр, имеш, һөт аҙыҡтары менән туҡланыу зарарлы, тигән киң таралған фекер ялған булып сыҡты. Скандинавия илдәрендә һәр кем йылына 500 килограмм һөт аҙыҡтары ҡулланһа, беҙҙә ул 240-тан артмай. Ә бит 90-сы йылдарҙа ул 370 килограмм ине. Кока-кола һ.б. газлы эсемлектәрҙән балаларҙың һөйәк-мускул һәм эндрокрин системаһы зыян күрә, тын юлдары һәм ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары ла арта.

Рәсәй ауылдары фәҡирлектән һәм эшһеҙлектән интегә. Тармаҡта эш хаҡы уртаса ил кимәлендәгенән бер нисә тапҡыр кәмерәк. 30 – 40 йәшлектәр араһында үлем осраҡтары йышайҙы. Социаль-көнкүреш объекттары, дауаханалар, фельдшер-акушерлыҡ пункттары, клуб һәм мәктәптәр ябыла. Заманында ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән ауыл хужалығы фәне лә ауыр хәлдә, сөнки дәүләт ярҙамы һуңғы сиккә тиклем кәмегән. Себерҙә һәм Алыҫ Көнсығышта элекке Ауыл хужалығы академияһы филиалдары хәҙер эшләмәй. Быға тармаҡ фәне өсөн полигон ролен үтәгән колхоз һәм совхоздарҙың ябылыуы ла булышлыҡ итте.

Илдә тәүгеләрҙән булып, Башҡортостанда умартасылыҡ һәм бал ҡорто продукцияһынан дарыуҙар эшләү буйынса ғилми үҙәк ойошторолдо. Уның тоҡомсолоҡ заводында 5 меңдән ашыу күс аҫырала. Рәсәйҙә умартасылыҡты үҫтереүҙә был ғилми учреждениеның өлөшө ҙур. Күргәҙмә һәм форумдарҙа ҡатнашып, ул бик күп награда, диплом һәм сертификаттар яуланы. Башҡорт балы Рәсәй төбәктәренә, сит илдәргә лә оҙатыла.

Ил башлыҡтарының фекеренсә, беҙҙә игенгә ҡытлыҡ юҡ. Ул саҡта ни өсөн икмәккә хаҡтар арта һуң? 2010 йылда игенде донъя баҙарына сығарыуҙы тыйыу ҙа хаҡтар сәйәсәтенә йоғонто яһай алманы. Киреһенсә, донъя баҙарында хаҡтар тағы ла юғарыраҡ сөйөлдө. Дөрөҫ, Рәсәй – иген менән һатыу итеүҙә алдынғылар рәтендә. 2009 йылда, мәҫәлән, ул өсөнсө урынға күтәрелде. Уның ҡарауы, ауыл эшсәндәренә ҙур көс-сығымдар түгеп үҫтерелгән ашлыҡты бушлай тиерлек дәүләткә тапшырырға тура килде. Хәҙер улар аҡыллыраҡ, иҫәп менән эш итә, сөнки дәүләттең бушлай алған игенде интервенцион фондҡа һалдырып юҡҡа сығарыуын яҡшы белә. Ошо айҡанлы ауыл хужалығы фәнендә абруйлы ғалим, РФ Иҡтисад министрының элекке урынбаҫары Иван Стариковтың «Комсомольская правда» гәзитенә интервьюһындағы юлдарҙы тыныс ҡына ҡабул итеү мөмкин түгел. «Интервенция фондына эләккән игендең хужаһы юҡ, сөнки беҙҙә дәүләттекен бер кемдеке лә түгел тип ҡарау киң таралған. Былтыр (2009 йыл – **М. С.**) бер өлкәлә миңә мул уңышҡа ҡарата шундай мөнәсәбәт күҙәтергә тура килде: ашлыҡ өйөмө өҫтөнән пар күтәрелә. Иген янып ята икән. «Нишләп бындай йүнһеҙлеккә юл ҡуяһығыҙ?» – тип һорайым. «Ә был интервенцион фонд игене, – тигән яуап бирәләр. – Уның өсөн беҙгә ҡаҙна аҡсаһын түләне инде». Тимәк, 8 миллион тонна интервенцион фонд юҡҡа сыҡты, тигән һүҙ».

Рәсәй ауылын тергеҙеү буйынса хөкүмәт ниндәй саралар күрә алыр ине? Иң мөһиме, әлбиттә, дәүләттән финанс ярҙамы кәрәк. Һәм уның федераль ҡаҙнаның 10 – 15 процентына торошлолоғо шарт. Советтар Союзында был өлөш хатта 20 проценттан төшмәне. Рәсәйҙең тәүге президенты Б. Ельцин етәкселек иткән шарттарҙа ла ҡаҙна ярҙамы 14 процент кимәлендә бүленеп килде. Ҡаҙнанан йоғонтоло ярҙам булмай тороп, беҙ урмандарҙы һәм уңдырышлы ерҙәрҙе

һаҡлап ҡала алмаясаҡбыҙ. Тик сығымдарҙы ҡайҙан табырға? Яуап бер: тәбиғәт ресурстарын ҡомһоҙ рәүештә һурған олигархтарҙың табышына прогрессив һалым индереү иҫәбенә. РФ Финанс министрлығының элекке башлығы А. Кудриндың мәғлүмәтенә ҡарағанда ғына ла, ошо юл менән ҡаҙнаны 800 миллиард һумға тулыландырырға мөмкин. Рәсәй Президентының 2011 йылға Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтендә иң мөһим эш йүнәлештәренең береһе тип аталған коррупцияны ла ауыҙлыҡларға ваҡыт. Ҡараҡтар һәм жуликтар кеҫәһенә ингән байлыҡ миллиард долларҙар менән иҫәпләнә. Был – бер.

Икенсенән, ауыл хужалығын фермерлаштырыу идеяһынан баш тартыу. Урыҫ фермеры илде туйындыра алмаясаҡ, сөнки һалҡын ҡыштары оҙон булған Рәсәй шарттарында уға өмөтләнеү урынһыҙ. Ғалимдар фекеренсә, беҙҙәге биологик массаның шытымы АҠШ-ҡа ҡарағанда 2 – 2,5 тапҡырға кәсһеҙерәк. Ауыл хужалығы продукцияһын тик күмәк хеҙмәт нигеҙендә генә күпләп етештерергә мөмкин. Хәйер, хәҙер Ҡушма Штаттарҙа ла иген етештереү менән заманса эре хужалыҡтар шөғөлләнә. Америкала улар тулайым игендең 80 процентын бирә. Рәсәйҙә әлегә өс төрлө хужалыҡ иҫәпләнеп, ауыл хужалығы продукцияһының 90 процентын эре һәм ярҙамсы хужалыҡтар етештерә. Фермерҙар өлөшө иһә 10 проценттан артмай. Тимәк, артабан да илде туйындырыусылар эре хужалыҡтар буласаҡ.

Беҙгә, Рәсәй – Европа менән Азия халыҡтары һыҙаттарын һаҡлаған ил, тигән фекерҙе башҡа һеңдерергә ваҡыт. Бөтә Рәсәй йәмғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, граждандарҙың 71 проценты тап шундай ҡарашта. Көнбайышса үҫеш юлы беҙҙең өсөн түгел. XIX быуат аҙағында Рәсәй зыялыларының күпселеге, мәҫәлән, славянофиндар ҙа шундай фекерҙә булған. Александр II «бөйөк реформалары» осоронда йәшәгән билдәле рус яҙыусыһы Ф. Достоевский ҙа «урыҫ либерализмы… Рәсәйгә һөжүм ул» тип әйтеп ҡалдырған. Рәсәй либералының Көнбайыш һимməттәре алдында ҡуштанланыуын Достоевский былай һүрәтләгән: «Беҙҙең либерал тәбиғәте буйынса хеҙмәтсе, берәй немецтың итеген таҙартып биреүҙе ҡарап ҡына тора».

Ата-бабаларынан айырмалы, хәҙерге Рәсәй либералы немецҡа ҡарағанда американдарға нығыраҡ ҡойроҡ болғай, уларҙың доллар менән шыплап тултырылған сумаҙандарын күтәреп йөрөтөргә лә риза. Рәсәйҙең үҙенсәлеген Евразия теоретиктары Л. Гумилев менән П. Савицкий ҙа яҡшы аңлаған. «Рәсәй масштабы, – тигән улар, – Көнбайыш Европаса ла, Азияса ла түгел, үҙенсә». Рәсәй кешеһе үҙен коллектив, община эсендә генә яҡшы тоя. Шуға күрә ауыл хужалығын фермерлаштырыу туҡталып ҡалды ла инде. Беҙгә ерҙә хужалыҡ итеүҙең коллектив формаһын яңынан тергеҙергә кәрәк.

Әлбиттә, ауыл хужалығы машиналары етештереү менән дә етди шөғөлләнергә ваҡыт. Хәҙерге мәлдә төрлө илдәрҙең 20-ләгән фирмаһы, бер ниндәй сертификатһыҙ һәм дәүләт һынауҙары үткәрмәй тороп, Рәсәй баҙарына үҙ техникаһын тәҡдим итә. Иген комбайндарының ғына бер-береһенә мөнәсәбәте булмаған 80-дән ашыу өлгөһө һатып алына. Уларҙың хаҡы ла үҙебеҙҙә эшләнгәндән ике-өс тапҡыр ҡиммәтерәк. Тимәк, был комбайндар һуҡҡан иген дә алтын хаҡына төшә.

**Миҙхәт САҘРЫЕВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге**
**Башҡорт дәүләт педагогия**
**университеты профессоры.**

*1812 йылғы Ватан һуғышына — 200 йыл*

# БАШҠОРТТАР КИТТЕ ҺУҒЫШҠА

1812 йылғы Ватан һуғышы һәм 1813 – 1814 йылдарҙа сит илгә поход башҡорт халҡының ижтимағи аңында, рухи донъяһында, шул иҫәптән йырҙары, риүәйәттәре һәм легендаларында тәрән эҙ ҡалдырған. Документтарҙан, тарихи әҙәбиәттән күренеүенсә, был яуҙа Рәсәй империяһында йәшәгән 200-ҙән ашыу халыҡтан тик ун – ун дүртенең, мәсәлән, грузин, осетин, адыгей, кабардин, ҡалмыҡ, Балтик буйы халыҡтарынан латыш менән эстондарҙың ҡатнашыуы ғына билгеле. Әлбиттә, һуғыштың төп ауырлығы урыҫ, белорус, украин халыҡтары иңенә төшкән.

Яугир һәм яҙыусы Сергей Глинка бер хеҙмәтендә, 1812 йылғы Ватан һуғышында мордвалар менән сирмештәр (мари) ҙә ҡатнашҡан, тип яҙа. Автор яңылыша, сөнки ул халыҡтарҙың был һуғышта ҡатнашыуы тураһында рәсми документтарҙа ла, тарихи әҙәбиәттә лә бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Инглиз ғалимы Роберт Фред Бауманн «Башҡорттар миҫалында урыҫ булмаған халыҡтар Рәсәй империяһының хәрби хеҙмәтендә» тип аталған күләмле мәҡәләһендә: «Волга буйында көн иткән татар, мордва, мари һәм башҡалар империя ғәскәрендә хеҙмәт итмәгән», – тип яҙған[1]. Шуға ҡарамаҫтан, Ә.Усманов, Р.Рәхимов һ.б. тарихсылар, мишәр һәм типтәрҙәрҙе күҙ уңында тотоп, «татар полктары» тигән төшөнсә индерә. Һуғышта Башҡортостанда йәшәгән – башҡорттарҙан башҡа – халыҡтарҙан урыҫ, мишәр һәм «типтәр» тип аталған халыҡтар вәкилдәре ҡатнаша. Мишәр – татар түгел, айырым төрки халыҡ. Типтәрҙәр араһында ла башҡорт, мишәр, сыуаш, мари, татар һәм башҡалар булған. Татарҙарҙың, мәсәлән, типтәрҙәр араһында 25 – 30 процент тәшкил итеүе билдәле. Типтәр ҡатламының яртыһынан күберәге ерһеҙ ҡалған башҡорттарҙан торған. Был факттар атап үтелгән тарихсыларға билдәһеҙҙер, күрәһең.

Ырымбур һәм Силәбе казактарының һуғышҡа – бишәр, мишәр һәм типтәрҙәрҙең – икешәр, Өфө урыҫтарының йәйәүле алай (полк) ойоштороп оҙатыуы билдәле. Был алайҙа башҡорттар ҙа булған. Бородино һуғышында батырлыҡ күрһәткәне өсөн бер төркөм яугирҙар орден һәм миҙалдар менән бүләкләнгән. Шулар араһында башҡорттарҙан Ислам Бакиров, Тимерйән Солтанов, Арыҫлан Әхмәтов, Әхтәм Сөләймәнов һәм Салауат Нурыевтар күренә.

Ватан һуғышы башланғанға ҡәҙәр үк хәрби ҡатламға ингән башҡорттар 1811-1812 йылдарҙа Наполеон ғәскәренә ҡаршы 28 алай ҡуя алған. Күренекле совет тарихсыһы профессор Л.Г. Бескровный «1812 йылғы Ватан һуғышы» (Мәскәү, 1962 й., 188-се бит) тигән төплө тарихи хеҙмәтендә, үҙенә генә билдәле сығанаҡҡа таянып: «Башкирское казачье войско послало в действующую армию 32 полка», – тип яҙа. Типтәрҙәрҙең ике алайы һуғыштан күпкә алда – 1798 йылда ойошторола. Мишәр алайҙары иһә 1812 йылдың август – октябрендә ойошторолоп, хәрәкәт итеүсе армияға ноябрь аҙағында ғына килеп ҡушыла (Ҡара: Ә.Н. Усманов. «Башҡорт халҡы 1812 йылғы Ватан һуғышында». Өфө, 1964 й., 17-се, 56-сы биттәр).

Башҡорттар ҡасан һәм ни өсөн казак, йәғни хәрби ҡатламға индерелгән һуң? Ни өсөн үҙ иҫәбенә шул тиклем ғәскәр ойоштороп оҙатҡан, аяуһыҙ һуғышҡан һәм күп юғалтыуҙар кисергән? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп ҡарайыҡ. Билдәле булыуынса, Рус дәүләте башҡорттарҙы хәрби хеҙмәткә, шул иҫәптән һуғыш һәм хәрби походтарға, XVI быуаттың икенсе яртыһынан уҡ йәлеп итә башлай. 1557-1558 йылдарҙағы Ливон һәм Ҡырым ханлығы менән һуғыштарға, XVII быуат башында Мәскәүҙе поляк һәм швед баҫҡынсыларынан азат итеүҙә башҡорттар ҙа ҡатнаша. XVII быуат аҙағында ла башҡорт атлылары кенәз В.В. Голицын етәкселегендәге Ҡырым хәрби кампанияһында, Петр I алып барған һуғыштарҙа була.

Башҡорттарҙың борондан килгән хәрби һәләтен, ғәскәри әрһеҙлеген файҙаланып, 1735 – 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалынан һуң Рәсәй хөкүмәте тәү тапҡыр уларҙы, яһаҡ түләтеү урынына, күпләп хәрби хеҙмәткә йәлеп итергә тотона. 1748 йылда 5 меңдән ашыу башҡорт Тубыл йылғаһынан Каспий диңгеҙе ярҙарына ҡәҙәр һуҙылған линияла хеҙмәт итә, йәғни империяның көнсығыш-көньяҡ сиген һаҡлай.

1755-1756 йылдарҙағы башҡорт ихтилалынан һуң батша хөкүмәте урындағы, урыҫ чиновниктарының тәҡдиме буйынса, башҡорттарҙан тәүге милли ғәскәри алайҙар ойоштора башлай. Тарихҡа «Ете йыллыҡ һуғыш» исеме менән ингән 1756 – 1763 йылдарҙағы Пруссияға ҡаршы хәрби кампанияла Рәсәй империяһы ла ҡатнашып, урыҫ ғәскәренә генерал-фельдмаршал Степан Апраксин етәкселек итә. Уның ғәскәрендә, ышаныслы сығанаҡтар буйынса, 15 мең кешелек 12 башҡорт алайы ла була. 1760 йылдың 28 сентябрендә, башҡа ғәскәри төркөмдәр менән бергә, улар Берлинды яулап ала. Тимәк, башҡорттар тәү тапҡыр Көнбайыш Европа менән таныша.

Салауат батыр (XVIII быуат) яуы баҫтырылғас та батша хөкүмәте башҡорттарҙы хәрби хеҙмәттән азат итмәй. Иҙел-Урал буйының аҫаба халҡын яйлап казак-тар ҡатламына күсереүҙә шул замандарҙа Өфө генерал-губернаторы, артабан Ырымбур губернаһының хәрби губернаторы булған барон Иосиф Андреевич (Отто Генрих – **Ә.Й.**) Игельстром айырыуса күп көс һала. 1786 йылда Рәсәй империяһының көньяҡ-көнсығыш сиген һаҡлауға ул 7 меңгә яҡын башҡортто ылыҡтыра. Шул уҡ йылда барон үҙ белдеге менән башҡорттарҙы командаларға, йәғни 103 йортҡа бүлә. Һәр йортҡа уртаса 45 – 50 хужалыҡ ҡарап, улар менән старшиналар, уларҙың ярҙамсылары идара итә. Бынан тыш, 63 хәрби старшина һәм 213 йөҙ башы башҡорттарҙың хәрби хеҙмәтен ойоштороу менән шөғөлләнә. Йорт һәм хәрби старшиналарҙы Игельстром үҙе билдәләй. Нәҡ ошо сара Башҡортостанды кантондарға бүлеүҙә, аҫабаларҙы казак ҡатламына күсереүҙә тәүге аҙым булып тора.

1797 йылдың 30 ғинуарында барон башҡорттарҙы хәрби ҡатламға күсереп, кантон башлыҡтарын билдәләй һәм уларға башҡорт ауылдарын кантондарға бүлергә бойороҡ бирә. Шундай уҡ әмер мишәр старшиналарына ла бирелә. 1798 йылдың 10 апрелендә император Павел I ҡул ҡуйған указға ошо бойороҡ нигеҙ булып тора ла инде. Указдың проектын, кәрәкле дәлилдәр килтереп, барон Иосиф Игельстром үҙе яҙа.

«Введение кантонной системы управления башкирцами и мещеряками» тип аталған указ нигеҙендә башҡорттар кантон системаһы буйынса идара ителеп, башҡа бурыстарҙан азат ителә, тулыһынса казак ҡатламына күсерелә. Хәрби бурыс, хәрби хеҙмәт башҡорт өсөн төп бурысҡа әүерелә. *«Сделать точное исчисление башкирцев,* – тип әйтелә указда, *– в состоянии нести службу, считая по летам от 20 до 50 и разделить их по кантонам, и в разсуждении нарядов (на*

*службу) наблюдать крепко, чтобы ближние кантоны отправляли службу по ближней их дистанции на линии (т.е. на границе). Самую линию, в рассуждении службы по кантонам, разделить на пять дистанций от Усть-Уйской крепости… до Гурьева»*[2].

Башҡорттарҙың иҡтисади, ижтимағи-сәйәси һәм рухи тормошонда тәрән эҙ ҡалдырған кантон системаһын индереү уларҙың азатлыҡ көрәшенә бәйле. Батша хөкүмәтенең был документы халыҡты ауыҙлыҡлау, улар өҫтөнән даими күҙәтеүҙе көсәйтергә тырышыу, башҡорттарҙың рух ныҡлығын ҡаҡшатып, ерҙәрен тартып алыу, милли байлыҡтарын талауҙы дауам итеү маҡсатын ҡуйған. Бынан тыш, Рус дәүләте башҡорттарҙы төрлө һуғыштарға күпләп йәлеп итеп, уларҙың хәрби һәләтенән файҙа күргән, һуғыштарҙа күпләп ҡырҙырған. Мәҫәлән, Ете йыллыҡ һуғышта меңәрләгән башҡорт Көнбайыш Европаның төрлө тарафында ятып ҡалған.

Указ нигеҙендә Башҡортостанда – 21, шул иҫәптән 11 башҡорт, 5 мишәр һәм 5 Ырымбур казактары кантоны барлыҡҡа килгән. Шадрин өйәҙендә көн күргән башҡорттарҙы властар 1803 йылда айырым кантонға бүлә. Шулай итеп, 1812 йылғы Ватан һуғышы алдынан илебеҙҙә 12 башҡорт кантоны була. «Кантон» француз телендә «бүлем» тигәнде аңлата, сөнки тәүге кантондар Франция менән Бельгияла ойошторола. Һуңынан Австро-Венгрия империяһы менән Пруссия һәм Швейцария ла кантондарға бүленә. Барон Игельстром, һис шикһеҙ, ошо система менән таныш булған. Башҡорт ерҙәрендәге кантондар бына нисек барлыҡҡа килгән. I кантон – Уса (Юша – **Ә.Й.**), Пермь; II – Екатеринбург һәм Красноуфимск; III – Пермь губернаһының Шадрин өйәҙен; IV – Ырымбур губернаһының Троицк өйәҙе ауылдарын; V – Силәбе; VI – Верхнеуральск; VII – Стәрлетамаҡ; VIII – Өфө өйәҙҙәрен; IX – Ырымбур; X – Бөрө; XI – Минзәлә һәм Вятка губернаһының Алабуға менән Сарапул; XII Ырымбур губернаһының Бәләбәй, Бөгөлмә һәм Боғорослан өйәҙҙәрен берләштергән. Минзәлә башҡорттарының 1812 йылғы Ватан һуғышында күпләп ҡатнашыуы билдәле. Һәр кантонға яҡынса 150 – 155 ауыл ҡараған. Тик IX кантонда – 242, XII кантонда 284 ауыл иҫәпләнгән. Кантондар йорттарға бүленеп, уларҙың иҫәбе лә төрлөсә булған.

Ни өсөн 1801 йылдан башлап 1812 йылдың 12 июненә ҡәҙәр Рәсәй менән Франция араһында мөнәсәбәттәр боҙолоп, был1812–1814 йылдарҙағы һуғышҡа сәбәпсе була? Һөҙөмтәлә Европа халыҡтары быға́са күрелмәгән ғазап-юғалтыуҙар кисерә, һуғыштарҙа 28–30 меңдән ашыу башҡорт ҡатнашып, 10 меңе ҡылыс, һөңгө, уҡ-һаҙаҡ менән генә ҡоралланған килеш пушка, мылтыҡ, пистолеттар менән ҡоралланған дошманға ҡаршы барып, һуғыш яландарында ятып ҡала.

Һәр тарихи хәл-күренештең, ваҡиғаның үҙ сәбәптәре бар. Уларҙы үҙ заманы, үҙ ысынбарлығы аша һәм башҡа ваҡиғалар менән бәйләнештә генә тулыһынса аңлап, дөрөҫ баһа бирергә мөмкин. Тарих фәненең был ҡағиҙәләре 1806 – 1814 йылдарҙа барған һуғыштарға, шул иҫәптән ошо һуғыштарҙа башҡорттарҙың ҡатнашыуына тотош ҡағыла. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыш ҡына был ҡағиҙәләр үтәлмәй.

XIX быуат башында Европала халыҡ-ара хәл киҫкен ҡатмарлаша. Уның төп сәбәбе итеп 1784 – 1794 йылдарҙағы Бөйөк француз революцияһын, 1793 йылдың 21 ғинуарында Франция короле Людовик XVI революционерҙар тарафынан язалап үлтерелеүен һәм Наполеон Бонапарттың тарихи аренаға сығыуын иҫәпләргә кәрәк. Франция короленең язалап үлтерелеүен ишетеп, Рәсәй императоры Франция менән дипломатик мөнәсәбәттәрҙе өҙә лә, Австрия, Англия менән өс яҡлы килешеү төҙөп, Францияға ҡаршы һуғышҡа әҙерләнергә тотона.

Килешеүгә Төркиә менән Неаполь дәүләте лә ҡушылғас, һуғыш башлана һәм 1799 йылдың ноябренә, йәғни Наполеон власҡа килгәнсе дауам итә. Рәсәйҙә тәхеткә Александр I ултырғас, 1801 йылдың сентябрендә ике дәүләт араһында солох төҙөлөп, Франция менән дипломатик мөнәсәбәттәр яңынан аяҡҡа баҫтырыла. Ошонан һуң Наполеон милли армияһын үҙгәртеп ҡороу эшенә тотона. Хәрби көстө күпкә арттырып, ул бөтә ғәскәрҙе ете армияға бүлә. Һәр береһенең үҙ етәксеһе, ғәскәри штабы һәм ғәскәри төркөмдәре була: артиллерия, йәйәүле һәм атлы полктар, элемтә полкы, разведка төркөмө, хатта санитар полк, армияны ҡорал, хәрби кейем-һалым, аҙыҡ-түлек һ.б. тәьмин итеү командалары булған. Ҡорал етештереү заводтары өҙлөкһөҙ эшләй, кәрәк-яраҡ менән тәү сиратта тәьмин ителә. Шуға күрә француз ғәскәре бер ҡасан да ҡорал, патрон, снарядҡа ҡытлыҡ кисермәгән. Наполеон үҙенә генә буйһонған һәм яҡшы ҡоралланған гвардия полктары ойоштороп, улар иң тәжрибәле яугирҙар менән тулыланған. 1801–1812 йылдарҙа гвардиясыларын 10 меңдән 60 меңгә еткереп, Наполеон күп алыштарҙың һөҙөмтәһен үҙ файҙаһына хәл итә. Хәрби берәмектәргә етәкселәр итеп төрлө ҡатламдарҙан сыҡҡан йәш һәм талантлы кешеләр ҡуйылған. Иң талантлы маршал һәм генералдар: Даву, Мюрат, Макдональд, Ней, Бертье, Мармон, Бернадот, Сульт һ.б. Йоахим Мюрат, мәҫәлән, элек атаһының ашханаһында йөк тейәүсе булып эшләгән. Мишель Ней – мискә эшләүсе улы, хәрби хеҙмәтен 1787 йылда һалдат булып башлай. 1804 йылда инде ул Наполеондың маршалы булып китә. Эш эҙләп Францияға килеп сыҡҡан швед Жак Жозеф Макдональд та 1784 йылда һалдат хеҙмәтенән башлап, 1793 йылда – бригада, өс йылдан – дивизия генералы, 1809 йылда маршал булып өлгөрә. Нотариус улы маршал Никола Жан Сульт та ябай һалдаттан 14 йыл эсендә – дивизия генералы, 1804 йылда маршалға тиклем күтәрелә.

Көслө армия төҙөп, Наполеон Европа илдәрен берәм-берәм баҫып алырға тотона, бөтә донъяға хакимлыҡ итеү планы менән йәшәй. Нәҡ шул арҡала ул, Европала барған ваҡиғаларға ҡыҫылып, өҫтөнлөк алыу һәм үҙ мәнфәғәттәрен тормошҡа ашырыу өсөн агрессив сәйәсәт үткәргән Рәсәй императоры менән конфликтҡа инә.

1804 йылдың мартында Франция королдәре нәҫеленән булған бер ғәйепһеҙ герцог Луи Антуан Энгиенскийҙы, заговор ойоштороуҙа ғәйепләп, Наполеон бойороғо буйынса атып үлтерәләр. 1804 йылдың майында Рәсәй императоры Александр I Франция менән дипломатик мөнәсәбәттәрен өҙә, 1805 йылдың июлендә Англия, Австрия, Швеция менән килешеү төҙөп, Францияға ҡаршы һуғышҡа әҙерләнергә тотона. Тәүге ҡораллы бәрелештәр 1805 йылдың октябрь-ноябрендә Наполеон файҙаһына тамамлана. 1805 йылдың 8 октябрендә Австрияның Ульма тигән урынында Австрия ғәскәрен ҡыйратып, француздар Вена ҡалаһын баҫып ала. Ә 20 ноябрҙә Аустерлиц янында 73 меңлек ғәскәре менән Наполеон Австрия менән Рәсәйҙең 85 меңлек ғәскәрен тар-мар итә. Австрия һуғыштан сығып, Франция менән солох төҙөргә мәжбүр була. Был алышта Рәсәй 21 мең һалдатын юғалта. 1808 йылдың сентябрендә Францияға ҡаршы хәрби союзға Пруссия ла ҡушыла. Ләкин 1806 йылдың октябренән 1807 йылдың июненә ҡәҙәр Иен, Ауэрштед тигән урындарҙа барған һуғыштарҙа Пруссия ғәскәре лә еңелә. 1806 йылдың 27 октябрендә французлар – Берлинға, ә 28 ноябрҙә Варшаваға баҫып инә. 1807 йылдың 14 июнендә Пруссияның Фридлянд тип аталған урынында улар 60 меңлек урыҫ армияһын ҡыйрата. Был алышта башҡорттар ҙа була. 1807 йылдың 25 июнендә Рәсәй ҙә Франция менән солох төҙөргә мәжбүр ителә. Ике император Пруссияның Тильзит ҡалаһында (бөгөнгө көндә Калининград өлкәһенең Советск ҡалаһы) килешеүгә ҡул ҡуя.

Нәҡ ошо осорҙа Рәсәй армияһын ашығыс тулыландырыу мәсьәләһе килеп тыуа. Францияға ҡаршы һуғышты дауам итеү өсөн 1805 йылдың октябрендә Александр I хәрби министр һәм хәрби губернаторҙар, шул иҫәптән Ырымбур хәрби губернаторы Г.С. Волконский, алдына армияны тулыландырыу буйынса аныҡ бурыстар ҡуя. Волконский император бойороғон тиҙ үтәй, декабрь аҙаҡтарында хәрәкәт итеүсе армияға Ырымбурҙан ҡалмыҡтар, Ырымбур һәм Силәбе казактары менән бергә 7 мең башҡорт йәлеп ителә. Был 14 башҡорт алайы тигән һүҙ. 1806 йылдың көҙөндә башҡорттар тағы өс һыбайлы алай ойоштора. Улар Ырымбур казактарының ике һәм ҡалмыҡтарҙың бер алайы менән Пруссияға ҡарап юлға сыға. Билдәләнгән урынға 1807 йылдың майында барып етеп, генерал Леонтий Беннигсен етәкселегендәге 60 меңлек урыҫ армияһына ҡушылалар. Генерал-майор М.И. Платовтың атлы корпусы составында ике башҡорт алайы була. 1807 йылдың 2 июлендә француздар тарафынан тар-мар ителгәндән һуң иҫән ҡалған башҡорттар илдәренә ҡайтып китә.

1806 – 1807 йылдарҙа Рәсәй менән Франция араһында барған һуғыштарҙа ҡатнашҡан ҡайһы бер башҡорт яугирҙарының исемдәре тарихи әҙәбиәттә, архив документтарында күҙгә салынып ҡала. Ырымбур өлкәһенең хәҙерге Ҡыуандыҡ районы Ҡыуат ауылынан IX кантон башлығы Үҫәргән ҡәбиләһе башҡорттары поручик Буранғол, уның өлкән улы подпоручик Ҡаһарман Ҡыуатовтар, йөҙ баштары Ҡарағужа Ҡәҙерғолов менән Айсыуаҡ Үҙәнбаев – шулар иҫәбендә. Улар генерал-майор Матвей Платов етәкселегендәге айырым атлы корпуста хеҙмәт итә. Польша армияһының (исеме шулай) баш командиры граф Леонтий Беннигсенға рапортында Платов уларҙың батырлығы тураһында яҙып, рәхмәт белдерә[3].

Буранғол Ҡыуатовтың майор дәрәжәһенә етеүе билдәле. Кантонда хеҙмәтен тамамлап, 1819 йылда һигеҙ улы менән нәҫелле дворян булып китә. Атаһы отставкаға сыҡҡас, 1817 – 1832 йылдарҙа IX кантон менән өлкән улы Ҡаһарман, 1832 – 1842 йылдарҙа икенсе улы Таһир Ҡыуатовтар идара итә.

1806 –1807 йылдарҙағы һуғыштарҙа хәҙерге Баймаҡ районы Билал ауылынан Тирбәнғәли Алтынаманов; Бөрйән районы Байназар ауылынан Аслай Байрамғолов менән Рафиҡ Атанғолов; Иҫке Монасиптан яҫауыл Рахманғол Яҡшыбаев, Хоҙайбиргән Ишҡолов, Зыянғол Туғыҙбаев һәм Иҫәнғәли Ишембәтов; Тимер ауылынан Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы кешеләре Ҡаһарман Сирбаев, Миңлебай Сирбаев һәм Һатлыҡ Күбәков; Байғазынан Хәйбулла Ташбулатов менән Рәсүл Ишкилдин; Бикташтан (хәҙер был ауыл юҡ) Исламғәли Ишмөхәмәтов; Әбделмәмбәттән Миңлебай Вәлитов; Әбйәлил районы Хәлил ауылынан Ниғмәтулла Ташбулатов; Мәхмүттән Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары Ишбулды Ҡусҡаров менән Алтынсура Кинйәбаев; Һәйетҡолдан Баязит Һамарғолов; Әхмәттән Баҙарғол Ейәнсурин; Әбделмәмбәттән Йәрмөхәмәт Ишкинин менән Әбделмәжит Юлымбәтов; Дәүләкән районы Ҡаҙанғол ауылынан зауряд-яҫауыл Рәхмәтулла Хәмзин; Дүртөйлөнән йөҙ башы Юлай Абдуллин ҡатнаша[4].

1806-1807 йылдарҙағы һуғыштарҙа хәҙерге төньяҡ-көнбайыш райондарҙан, шул иҫәптән Краснокама районы Иҫке Нуғай ауылынан йөҙ башы Таһир Сирләков (бәлки, Сираев – **Ә.Й.**); Иҫке Йәнйегеттән Мөхәммәт Әхмәров; Илеш районының Үрге Йәркәй ауылынан яҫауыл Ҡорамша Ишемов; Иҫәнбәттән Бүләр ырыуы башҡорто йөҙ башы Ғәбделғәфүр Иҫәмәтов; Ҡалтасы районы Күгәрсен ауылынан яҫауыл Бикташ Яҡупов; Яңы Аткүлдән Мораҡҡужа Йыһангиров; Ҡариҙел районы Үреш ауылынан хорунжий Зәйнетдин Ҡансөйәров (бәлки, Ханһөйәровтыр) ҡатнаша. Батырлыҡ күрһәткәне өсөн һуңғыһы Изге Георгий ордены менән бүләкләнгән. Хәҙерге Борай районы Дауытлар ауылынан Танып

ырыуы башҡорто урядник Рахманғол Мәхмүтов; Ҡайынлыҡтан Йылан ырыуы башҡорто яҫауыл Рәхмәтулла Сабаҡов; Борай ауылынан Йәлдәк ырыуы башҡорто йөҙ башы Миңлебай Килмәтов; Мишкә районы Оло Шаҙы ауылынан йөҙ башы Атйетәр Көсөков; Балтас районы Имән ауылынан Танып ырыуы башҡорто яҫауыл Фәйрүш Нурыев; Пермь өлкәһенең Барҙы районы Мастай ауылынан Абдулхәлил Хәйҙәровтар ҙа бар[5].

Шулай уҡ хәҙерге Татарстан Республикаһында йәшәгән Минзәлә башҡорттарынан Аҡтаныш районы Кужәкә ауылының ябай казагы Шәмсетдин Сөләймәнов; Солтанғолдан Йәнәй ырыуы башҡорто яҫауыл Әхтәри Хөсәйенов; Бурһыҡтан Гәрәй ҡәбиләһе башҡорто Бәхтейәр Агитов; Әтәстән Байлар ырыуы башҡорто Ғәли Сираев; Мөслим районының Зөбәйер ауылынан Буләр ҡәбиләһе башҡорто ғәскәри старшина Шәңгәрәй Зөбәйеров; Минзәлә районы Бикбул ауылынан Йәнәй ҡәбиләһе башҡорто ғәскәри старшина Илкәй Араптаров; Аҙнаҡай районы Митрәй (Жүнәй) ауылынан Йәнәй ҡәбиләһе башҡорто йөҙ башы Йәрмөхәмәт Ибраев; Ағрыҙ районы Иҫәнбәт ауылынан Йәнәй ҡәбиләһе башҡорто хорунжий Абдуллатиф Тутаевтарҙы атарға мөмкин[6].

Үрҙә әйтелгән хәрби дәрәжәләрҙе лә асыҡлап китәйек. Урядник – казак ғәскәрендә кесе офицер, хәҙер сержант дәрәжәһенә торошлоҡ итә. Хорунжий – урядниктан олораҡ тәүге офицер чины, армияла подпоручик, йәғни лейтенант дәрәжәһенә тап килә. Зауряд-хорунжий алыштарҙа алай байрағын йөрөтөп, байраҡты һаҡлауҙа уға подхорунжийҙар ярҙам иткән. Йөҙ башы – урта офицер чины, армияла поручик, йәғни өлкән лейтенант. Башҡорт алайында биш йөҙ башы иҫәпләнгән. Яҫауыл капитан дәрәжәһенә тап килеп, һәр алайҙа биш яҫауыл булған. Был дәрәжәгә еткән һәр башҡорт дворянлыҡ исеменә дәғүә итә алған.

1806 –1807 йылдарҙағы Рәсәй менән Франция һуғышында күпме башҡорт ҡатнашҡаны билдәһеҙ. Тарихсыларҙан Әбүбәкер Усманов менән Әнүәр Әсфәндиәров һәм Ырымбурҙан П.Е. Матвиевскийҙы иҫәпкә алмағанда, был темаға бер ғалим да ентекле ҡағылмаған. Тарихи әҙәбиәттә төрлө мәғлүмәттәр осрай. Роберт Фред Бауманн аталған хеҙмәтендә: *«В 1806 – 1897 годах государство организовало из них (йәғни башҡорттарҙан –* ***Ә.Й.****) 25 полков по 500 человек, два из которых приняли участие в сражениях против французов под Фридляндом и Тильзитом. Когда военные действия возобновились в 1811 году, 1-ый Башкирский полк вошел в 1-ую Западную армию генерала Барклая де Толли, в то время как 2-ой полк влился в 3-ю армию генерала Тормосова. Оба позднее сражались на Бородинском поле. В августе 1812 г. военный министр санкцинировал формирование до 30 полков. В целом в 1806 – 1812 годах было создано 29 башкирских полков[7]»*, – тип яҙа. «Очерки по истории Башкирской АССР» тип аталған хеҙмәттә: «в 1806 – 1807 годах во время войны с Францией было сформировано 20 пятисотенных башкирских полков», – тип әйтелгән[8]. Ә совет тарихсыһы Л. Г. Бескровныйҙың «башҡорттар һуғышҡа 32 алай ойоштороп оҙатҡан» тигән фекерен әйтҡәйнек инде.

Тильзит солохо Франция менән Рәсәй араһындағы ҡаршылыҡтарҙы бөтөрә алмай. 1809 йылдың июлендә Австрия Наполеондың ҡан дошманы булған Англия менән алыш-бирешкә ҡоролған килешеү төҙөй. Франция императоры, уға яуап итеп, 1809 йылдың июлендә Ваграм тигән урында яңы күтәрелеп килгән Австрия ғәскәрен тағы ҡыйрата ла, солох төҙөп, Австрияны үҙенең союздашы итә. 1812 йылдың февралендә Пруссия ла Наполеон яғына сыҡҡас, Европала Францияның позициялары нығый. Ҡитғаны бөтөнләй баҫып алыу өсөн ике дәүләт – Рәсәй менән Англия ғына ҡамасаулай.

Австрия менән Пруссияны союздаш итеп һәм Рәсәй империяһы менән солох төҙөгән булып, Наполеон 1812 йылдың яҙына ҡәҙәр яңы һуғышҡа әҙерләнә. Францияның ғәскәре бер миллионға еткерелеп, яҡшы ҡоралландырыла. Һуғышҡа Рәсәй ҙә әҙерләнә, әммә ул бик һүлпән бара. 1812 йылдың март башында урыҫ армияһында 590 мең кеше иҫәпләнеп, һуғыш башланыр алдынан ғына иҫәпте 975 меңгә еткерәләр. Урыҫ армияһы ҡоралға ла ҡытлыҡ кисерә. 1812 йылдың баштарында батша хөкүмәте Англиянан 50 мең мылтыҡ һатып алыу тураһында һөйләшһә лә, ҡорал һуғыш башланғас ҡына килеп етә. 1812 йылдың март – июнендә хеҙмәткә алынған һалдаттарҙың хәрби әҙерлеге лә бик түбән була.

Шуға ҡарамаҫтан, 1811 йылдың башынан 1812 йылдың июненә ҡәҙәр төп штаб генералдары Александр I бойороғо буйынса француз ғәскәрен тиҙ арала тар-мар итеү пландары өҫтөндә баш ватып, ун план төҙөп өлгөрә. Уларға ярашлы, урыҫ армияһы тиҙ арала Польшаны яулап алырға ла, Францияға етеп, Наполеон ғәскәрен көтмәгәндә тар-мар итергә тейеш була. 1812 йылдың февраль-мартында был хаҡта Франция императорына ишетелеп, ул хәл иткес һуғышҡа әҙерлекте тиҙләтә, Рәсәйгә ҡаршы һуғышҡа махсус ойошторолған «Бөйөк армия»ла 640 мең кеше һәм 1372 туп туплана. Башҡа тарихи мәғлүмәттәрҙә 648 мең, 665 мең, 668 мең тигән иҫәп тә атала. Армияһын Наполеон ике төркөмгә бүлеп, беренсеһендә сама менән – 440 мең, икенсеһендә 200 меңгә яҡын һуғышсы иҫәпләнә. Беренсе эшелонға Наполеон үҙе һәм талантлы сардарҙары Жак Этьен Макдональд, Л. Даву, М. Ней, И. Мюрат, поляк Юзеф Понятовский етәкселек итә.

1812 йылдың 12 июнендә «Бөйөк армия»ның тәүге эшелоны Ковно, Меречь, Гродно ҡалалары ҡаршыһында Неман йылғаһын пантон күперҙәр аша кисеп, Рәсәйгә аяҡ баҫа. Французларға өс урыҫ армияһы ҡаршы тороп, 1-се армияға (120 мең кеше) – сығышы буйынса француз Барклай де Толли, 2-сеһенә (49,5 мең) – генерал Петр Багратион, 3-сө армияға (44,2 мең) генерал Александр Тормасов етәкселек итә. Улар французларҙан өс: Петербург, Мәскәү һәм Киев йүнәлештәрен һаҡларға тейеш булып, үҙ-ара бәйләнешһеҙ, өсөһө өс яҡта урынлашҡан була. Петербургты баҫып алыу Наполеондың планына бөтөнләй инмәһә лә, ул йүнәлеште 120 мең кешелек иң көслө армия һаҡлай. Был урыҫ армияһының баш штабында ултырған генералдарҙың иң ҙур хәрби хатаһы була. Ысынбарлыҡта Мәскәү йүнәлеше дошман өсөн асыҡ булып сыға. 22 июлдә 1-се һәм 2-се армия Смоленск ҡалаһы эргәһендә ҡушылмаһа, французлар Мәскәүҙе июнь аҙаҡтарында – июль баштарында еңел яулап алған булыр ине. Ләкин ике армия ҡушылыу менән ваҡиғалар үҙгәрә. Ошо йәһәттән урыҫ армияһының атлы ғәскәрен арттырыу маҡсатында Александр I хәрби министрға һәм хәрби губернаторҙарға 1811 йылдың апрелендә биргән бойороғон иҫкә алып үтәйек. Указ рәүешендә ул Ырымбур хәрби губернаторы Григорий Волконскийға ла килгән.

*Указ*

*115. О сформировании трех полков, одного из ставропольских калмыков и двух из башкир. Именной, данный генералу от кавалерии князю Волконскому.*

*7 апреля 1811 г.*

*Для усилия армии нашей легкими иррегулярными войсками и чтобы приобучить на будущее время к службе калмык и башкир, обитающих в краю, управлению вашему порученном, признали Мы за нужное нарядить три полка, один из ставропольских калмыков и два из башкир, для чего Повелеваем вам:*

*полк Ставропольский составит из 560 человек рядовых при атамане их и надлежащем числе офицеров и урядников, башкирские же два полка, назвав по нумерам, должны быть каждый из 500 человек, определя в каждой 5-сотенной команде из них же командира и старшин, по примеру прочих иррегулярных войск*[9].

Г.С. Волконский шунда уҡ 5-се, 6-сы, 7-се кантондар башлыҡтарына һуғышҡа әҙерләнергә, алайҙар ойоштороорға бойороҡ биргән. 5-се (Бөрө өйәҙе) кантон башлығы Ҡолой Көсөков тиҙ арала 215 кешелек төркөм ойошторған. 6-сы кантонда (Верхнеуральск өйәҙе) Буранбай Ҡотошов етәкселегендә 1 мең яугирҙан торған резерв төркөм төҙөлөп, Сибай ауылынан 40 саҡрымдағы Ҡарағайлы үҙәк тигән ерҙә торған[10]. 6-сы кантонда хәрби старшина Юлбарыҫ Бикбулатов етәкселегендә 500 кешелек алай ойошторола. Ул ошо уҡ кантонда ойошторолған 14-се башҡорт алайының командиры булып һуғышта бик күп батырлыҡтар күрһәтә. Атап үткән командалар һәм 7-се, 9-сы, 12-се кантон башҡорттарынан 1-се һәм 2-се алай барлыҡҡа килә. Сембер, Серпухов ҡалалары һәм Курск губернаһы аша үтеп, алайҙар 1812 йылдың ғинуарында 2-се армияға ҡушыла. Һуғыш алдынан 1-се алай Гродно ҡалаһында генерал Матвей Платовтың атлы корпусына инә, 2-се башҡорт алайы 2-се армияның 5-се атлы дивизияһына ҡушыла. 1812 йылдың июненән 2-се башҡорт алайы 3-сө армияға күсерелә һәм Неман йылғаһының уң ярында позиция биләй.

Наполеон ғәскәре Неманды кисә башлағас, дошманға беренселәрҙән булып ике башҡорт алайы ла ҡаршы сыға. Көстәр тигеҙ булмай, урыҫ ғәскәре, шул иҫәптән башҡорт алайҙары ла, һуғыша-һуғыша сигенергә мәжбүр була. 15 июндә Гродно эргәһендә барған ҡаты алыштарҙа 1-се башҡорт алайы ла ҡатнаша. Унда хәҙерге Көйөргәҙе районы Беренсе Кинйәабыҙ ауылынан йөҙ башы Үзбәк Аҡмырҙин; Мәләүез районының Ҡотлобулат ауылынан урядник Буранбай Сыуашбаев, хорунжий Ғилман Хоҙайбирҙин; Мәләүез районының Үрге Таш ауылынан яҫауыл Ихсан Әбүбәкеров һ.б. айырыуса батырлыҡ күрһәтә. 16 июлдә Кобрин ҡалаһы (Украина) янында барған һуғыштарҙа 2-се башҡорт алайы яугирҙары ла ҡатнаша, хәҙерге Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылынан йөҙ башы Аралбай Аҡсулпанов батырлыҡ күрһәткәне өсөн III дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнә. Әлшәй районының Сәпәш ауылынан йорт старшинаһы, һуңынан урядник, йөҙ башы Әйүп Ҡәйепов IV дәрәжә Изге Анна орденына лайыҡ була. Бына ошо хаҡта 3-сө армия башлығы генерал А. Тормасов ҡул ҡуйған документ.

*Указ*

*о награждении пятисотенного старшины 2-го Башкирского полка Аксулпанова орденом Св. Анны 3-й степени.*

*18 июля 1812 г.*

*Господин пятисотенный старшина Аралбай Аксулпанов. Именем е.и.в. и властию высочайше мне вверенною, в справедливом уважении к отличной храбрости Вашей в сражении 15 июля при городе Кобрине оказанной, по личному моему в том удостоверению препровождаю у сего для возложению на Вас орден Св. Анны 3-го класса.*

*Подлинно подписал генерал от кавалерии Тормасов. Июля 18 дня 1812 года при г. Кобрине. 2-го Башкирского полка.*

Старшина Әйүп Ҡәйеповтың исеме архив ҡағыҙҙарында өс тапҡыр осрай. 1836 йылда 66 йәштә подпоручик дәрәжәһендә булып, ул хәрби хеҙмәтен дауам итә. Һуғышты Парижда тамамлай, ике көмөш миҙал менән бүләкләнә. Архивта уның ғаиләһе тураһында ла мәғлүмәт бар. Ҡаһарман ике ҡатын: Һәҙисә һәм Зөләйха менән йәшәгән. Ғүмәр, Усман, Лоҡман, Сөләймән, Дауыт, Ҡорман, Ишйегет исемле ете улы булған. 1836 йылда Ишйегетҡә дүрт йәш[11].

Һүҙ ыңғайында йөҙ башы Буранбай Сыуашбаевҡа һуғыштан һуң бирелгән характеристика менән дә танышып китәйек. *«Бывший в 1-м Башкирском полку рядовой башкирец Буранбай Чувашбаев был командирован в числе прочих в*

*армию, действующую против французских войск и находился в прошлом 1811-го го мая с 10-го числа по 1814 год, и отличив себя храбростью, а именно в походах: в Польше, Саксонии, Пруссии, Таисии, Голландии, Барабандии и Франции и в действительных противу французов сражениях находился, а именно: под городом Гродною – 1812-го июня 15-го; под Миром – июля 25-го, под местечком Несвижем – июля 30-го, под селением Романовым – июля 31-го, где за отличную службу произведен урядником; под городом Смоленским – августа 12-го, под городом Можайским – сентября 3-го, 4-го и 5-го числа; под городом Акаданском – генваря 13-го 1813-го года; под городом Висенбургом – марта 12-го; под городом Линбургом – марта 21-го, где за храбрость и за отличие награжден будучи еще урядником крестом Георгия, военного ордена; под местечком Югербоком – августа 15 и 16-го; под городом Винтербургом – августа – 21-го и 22-го числа, где он представлен был за отличие и храбрость всемилостивейше пожалован чином сотника, и за отличную службу получил от его императорского величества благодарность; под городом Винтербургом – августа 21-го и 22-го числа, а на последок он при здаче города Парижа находился и имеет медаль; а за исправную, отличную службу, ревность и усердие дан ему аттестат 1814 года декабря 22-го дня от полкового командира есаула и кавалера Абубакирова за № 250-м».*

1812 йылдың июль аҙағы – август баштарында Смоленск янында барған һуғыштарҙа башҡорт алайҙары ла ҡатнаша. 1-се алай яҫауылы Ихсан Әбүбәкеров һәм урядник Буранбай Сыуашбаев унда айырыуса батырлыҡ күрһәтә. 18 июлдә Александр I, Рәсәй халыҡтарына манифест менән мөрәжәғәт итеп, илде һаҡларға саҡыра. 8 августа хәрби министр ҡул ҡуйған указ донъя күрә. Уны бер аҙ ҡыҫҡартылған килеш тәҡдим итәм.

*Указ*

*О сформировании башкирских казачьих полков. Именной, объявленный главнокомандующему в С. Петербурге управляющим военным министерством*[12]*.*

*8 августа 1812 г.*

*Я имел счастие подносить Государю Императору прилагаемую у сего записку, содержащую в себе правила, на основании коих предполагается составить один Атаманский тысячный полк из войска Оренбургского и от 10 до 30 и более пятисотных полков из башкирского и мещерякского народов, жительствующих в Оренбургской, Саратовской, Вятской и Пермской губерниях, коим дать название Башкирских казачьих по нумерам.*

*Его Императорское Величество, по уважению нынешних чрезвычайных военных обстоятельств и необходимой нужды в усилении армии, пробуя предположение сие во всех его частях, Высочайше повелеть соизволил: правесть оное в подлежащее исполнение.*

*Составление сих полков возложено на войсковаого атамана Оренбургского войска полковника Углицкаго, под руководством Оренбургского военного губернатора.*

*Сделав на предмет сей нужныя распоряжения, имею честь сообщить об оном вашему Высокопревосходительству с тем, неугодно ли вам, Милостивейший Государь, будет предписать гг.начальникам помянутых губерний, дабы они к скорейшему составлению и выкомандированию оных полков в армию, содействовали войсковому атаману Углицкому всеми зависящими от них мерами. Женам же и детям чиновников и казаков, отправившихся на службу, оказывали защиту и покровительство, и чтобы домы их освобождены были от воинского постоя.*

*Высочайше утвержденная записка управляющего военным министерством. В Оренбургской и сопределенных к оной губерниях Саратовской, Вятской и*

*Пермской, как представляет мне войска Оренбургского войсковой атаман полковник Углицкий, состоит и по изчислению 1811 года башкирцев 109.409 и мещеряков 19.800, всего 129.209. душ. Народы сии, кроме содержания по Оренбургской линии кордонной стражи, более никаких государственных повинностей не отправляют. Они, по природной своей склонности к воинским упражнениям и навыкам, весьма способны к казачьей службе, и могут быть с пользою употребляемы в армии противу неприятеля. Знатное число народа сего без отягощения поставить ныне из себя на службу от 10 до 30 и более пятисотных полков.*

*Полковник Углицкий, будучи движим усердием на пользу службы и любовию к Отечеству, приемлет на себя составление сих полков, как равно одного атаманского тысячнаго из войска Оренбургского.*

*Составление оных по мнению его можно произвести на следующем основании:*

*1. Число людей в полках, образ управления оными и продовольствие их вообще, должно быть точно на том же положении, на каком находятся уже в армии от сих народов казачьи полки.*

*2. Вооружение составит употребляемое ими и именно: ружья, пистолеты, сабли, пики, и луки, кто чем может и навык употреблять, не требуя единообразия.*

*3. Равномерно не требовать единообразия и в одежде, а дозволить им иметь оную по своему обычаю; если же кто по собственному своему желанию употреблять будет мундир, установленный для казачьих войск: то сего не только невозбранять, но считать оное отличное ревностью к службе, и о таковых для поощрения к тому прочих доносить начальству в месячных рапортах.*

*4. Полковых командиров и прочих чиновников выбрать из башкирского и мещерякского народов; но как не весьма много найдется знающих хорошо русский язык: то недостающее за тем число дополнить из Оренбургского войска. Равономерно дать из одного войска по нескольку человек казаков в каждый полк, для введения порядка службы и внутренного благоустройства, также в полковые квартирмейстры и писаря, и дозволить определять в сии должности из другаго состояния людей по аттестатам.*

Указға ярашлы, кантон начальниктары хәрби губернатор Григорий Волконский күҙәтеүе аҫтында яңы алайҙар ойоштора башлай. 3-сө алай һәм 5-се алайҙың бер өлөшө XI кантонда (Минзәлә), 4-се һәм 5-се, 12-се һәм 20-се алайҙың бер өлөшө – XII кантонда (Бәләбәй һәм Бөгөлмә) ойошторола. 7-се, 8-се һәм 9-сы алайҙар IX кантонда йыйыла. 5-се алайҙың бер өлөшөн һәм 19-сы алайҙы – X кантон (Бөрө), 11-се алайҙы – V һәм VIII кантон (Силәбе һәм Өфө), 12-се, 13-сө алайҙарҙы – VII кантон (Стәрлетамаҡ), 14-се һәм 15-се алайҙарҙы – VI кантон (Верхнеуральск), 18-се алайҙы – IV кантон (Троицк), 19-сы алайҙы – III кантон (Курган башҡорттары), 20-се алайҙы I кантон (Пермь, Екатеринбург һәм Красноуфимск) башҡорттары ойоштора. Шулай итеп, башҡорттарҙан 1811 йылда – 2, 1812 йылдың июль – октябрендә 18 атлы алай йыйыла. Профессор Әнүәр Әсфәндиәров мәғлүмәте буйынса, 1812 йылдың аҙағы –1813 йылдың башында башҡорттар тағы 8 алай бирә. Тимәк, башҡорт халҡы 1811–1813 йылдарҙа һуғышҡа барлығы 28 атлы алай оҙатҡан[13].

Һәр алайҙың 530 кешенән тороуы мәғлүм. Унда 500 ябай казак, ике командир (башҡорт һәм урыҫ), бер старшина, биш яҫауыл, биш йөҙ башы, биш хорунжий, ун илле башы, берәр мулла һәм писарь иҫәпкә ингән. Һәр алайҙың үҙ байрағы, һәр башҡорт яугирында ике: хәрби һәм йөк аты була.

Башҡорттарҙан 28 һыбайлы алай һуғышҡа китеүен беҙ VI башҡорт кантонынан яҫауыл Ҡасҡын Дауытов, хәрби старшина Әйүп Муғаитмасов,

хорунжий Зөлкәрнәй Буранбаевтарҙың 1820 йылдың ғинуарында Ырымбур генерал-губернаторы Петр Волконскийға тапшырған ғаризаһынан да беләбеҙ. «*В достопамятном 1812 году, кроме обыкновенной службы в содержании Оренбурской и Сибирской линиий, исправления всех повинностей и пожертвований, 28 полков откомандировано было против нашествия врагов в действующую армию, вооруженные и одетые своею собственностию, где также... доказали свою преданность и усердие Отчеству*», – тиелә унда. Бынан тыш, улар башҡорттарҙан алты резерв алайы ойошторолоуы тураһында ла яҙған[14].

Ҡайһы бер тарихсылар был факттарға шик белдерә. Мәҫәлән, БДУ уҡытыусыһы Р. Рәхимов «Ватандаш» журналында (2000 й., № 3, 150 – 155-се биттәр) донъя күргән «Отечественная война 1812 года в современном сознании» тигән мәҡәләһендә, һуғышҡа башҡорттар 28 түгел, ә 20 алай оҙата; һуғышта тик 20 алай ғына ҡатнаша, тип яҙа. Имеш, «Ни в одном документе нет информации о полках под номерами 21 – 28». Бик күп ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашып, пушка, мылтыҡ, пистолеттарға һөңгө, ҡылыс, уҡ-ян менән ҡаршы барып, башҡорттар бик күп юғалтыу кисергән. Һәләк булған, яраланған һәм ауырығандар урынына яңы яугирҙар йәлеп итергә, алайҙарҙы даими тулыландырып торорға кәрәк булған. Яңынан-яңы номерһыҙ, запас алайҙар шулай барлыҡҡа килгән. Әбүбәкер Усманов «Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года» тигән хеҙмәтендә «Үҙәк хәрби-тарихи архивы делоларында номерһыҙ башҡорт алайҙары тураһында һүҙ бара», «уларҙың иҫәбен асыҡлап булманы» тип яҙа[15]. Тарих фәндәре кандидаты Р. Рәхимов быны белмәйме, әллә белмәмешкә һалышамы?

1812 йылдың 8 авгусында сыҡҡан указға ҡаршы килеп, ул, башҡорттар, имеш, хәрби ҡатламда булмаған, тигән фекерен иҫбатларға маташа. Мәҡәләһенең бер бүлеге хатта «Башҡорттар казак булғанмы, юҡмы?» тип атала. Яуап: башҡорттар казак булмаған. Ә 1812 йылдың 8 авгусында сыҡҡан батша указының «О сформировании башкирских казачьих полков» тигән исеме үк әйтеп тора. Бынан тыш, тарихи әҙәбиәттә лә «башкирские казачьи части», «с переходом башкир в военно-казачье сословие», «башкирские казачьи полки», «башкирское казачье войско» тип яҙыла. Башҡорт алайҙары «казачьи» тип аталған, ә бына яугирҙары, Р. Рәхимовса әйтһәк, казак булмаған икән. Шул уҡ ваҡытта тарихсы мишәр һәм типтәрҙәрҙең казак ҡатламында булыуына шикләнмәй.

Профессор Әнүәр Әсфәндиәровтың раҫлауынса, Наполеон ғәскәренә ҡаршы һуғышҡан алайҙарҙан тыш, 12 мең башҡорт Рәсәйҙең көнсығыш сигендә үҙ иҫәбенә һыҙыҡ һағы хеҙмәтен үтәгән. 1811 – 1813 йылдарҙа французларға ҡаршы башҡорттар кәмендә 15-16 мең яугир ебәргән, тимәк, барлығы 27 – 28 мең кеше. Ә бит башҡорттарҙан 1806 – 1807 йылдарҙа ла французларға ҡаршы сама менән 15 мең кеше йәлеп ителгән. 1806 – 1813 йылдарҙа батша хөкүмәте һуғышҡа кәмендә 30 мең башҡортто алған.

Башҡорттарҙың хәрби кейеме үҙҙәре теләгәнсә булған. Ләкин күбеһендә аҡ йәки күк буҫтау сәкмән, ҡыҙыл һыҙатлы (лампаслы) киң салбар, осло башлы аҡ кейеҙ бүрек, ат тиреһенән тегелгән итек, ҡайыш билдек, күн портупея, ҡылыс ҡыны һәм патрон ҡумтаһы – барыһы ла башҡорттарҙың үҙҙәренеке булған. Һөңгө, ҡылыс, йәйә һәм уҡ-һаҙаҡтан тыш, мылтыҡ һәм пистолет бик һирәктәренә эләккән. Боронғо замандарҙағы кеүек, башҡорт алайҙары йөҙ, илле, ун кешелек төркөмдәргә бүленгән. Һуғыш яланында уларҙы күп һынаған хәрби етәкселәр, мәҫәлән, генералдар Леонтий Беннигсен, Матвей Платов, Александр Тормасовтар башҡорт яугирының алышта тиҙ хәрәкәт итеүен, ныҡлы хәрби тәртип менән айырылып тороуын билдәләгән.

Рәсәй империяһы алып барған һуғыштарҙа йыш ҡатнашыу арҡаһында,

башҡорттар үҙенсәлекле һуғышыу алымдарын уйлап таба. Профессор Әнүәр Әсфәндиәров мәғлүмәте буйынса, улар дошмандың айырым отрядтарын ҡамап тар-мар итеүҙә ҙур оҫталыҡҡа ирешә. Йыш ҡына ҡурҡып ҡасҡан булып, дошманды уңайлы урынға ылыҡтырып индерәләр ҙә ҡапыл кире боролоп урата һәм ҡыра торған булғандар. Ҡыҫымда ҡалған дошман, бик күп юғалтыуҙар кисереп, бирелергә мәжбүр булған. Ватан һуғышынан һуң Өфө гимназияһында уҡытҡан әҙәбиәт һәм тел белгесе Павел Размахин башҡорттар тураһында бына ниҙәр яҙып ҡалдырған: «Башҡорттар хәрби хеҙмәткә, хәрби күнекмәләргә бала саҡтан өйрәнә. Улар атта оҫта йөрөй, һөңгө менән оҫта эш итә, мылтыҡ һәм һаҙаҡтан төҙ ата. Күбеһенең уҡтары 100 аҙымдағы бәләкәй генә нәмәгә, мәҫәлән, турғайға барып тейә[16]». Ошондай фекерҙе һуңыраҡ Өфөләге дини семинария уҡытыусыһы – Башҡортостан тарихы менән, башҡорттарҙың көнкүреше, хужалығы, мәҙәниәте, шөғөлдәре, һаулығы менән ҡыҙыҡһынған Василий Черемшанский «Ырымбур губернаһы тасуирламаһы» тип аталған хеҙмәтендә былай яҙа: «Башҡорттарҙың төп хәрби ҡоралдары: мылтыҡ, һөңгө, ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ. Улар хәрби алымдарҙы ҙур теләк менән өйрәнә, атта бик оҫта йөрөй. Һөңгө менән оҫта эш итә, мылтыҡтан, һаҙаҡтан төҙ ата. Уларҙың уғы 15 сажин алыҫлығында (сама менән 32 метр – **Ә. Й.**), кешене генә түгел, хатта атты ла тишеп үтә[17]». Бер билдәһеҙ автор башҡорттарҙың һуғыштағы хәрәкәтен ошолай һүрәтләй: «Уларға уҡтан атыу өсөн иң уңайлы ара – дошманға 40 аҙым ҡалғас. Башҡорт уҡ-һаҙағын арҡаһынан күкрәгенә күсерә лә, ике уҡты теше менән ҡыҫып тотоп, икеһен тиҙ генә йәйәгә ҡуя һалып, күҙ асып йомғансы бер-бер артлы дүртеһен дә тоҫҡап атып ебәрә лә һөжүмгә күсә. Һөжүм иткәндә улар алға ныҡ итеп эйелә, һәм иҙеүе асыҡ, еңе һыҙғанған килеш, үҙәк өҙгөс әсе тауыш менән дошмандың ҡотон алып, уға ташлана, һөңгө менән оҫта эш итә[18]».

Наполеон армияһы менән иң ҡаты алыш 1812 йылдың 26 августа Можайск ҡалаһынан 12 саҡрымдағы Бородино ауылы янында булған. Генерал Матвей Платов етәкселегендәге атлы корпуста 1-се башҡорт алайы ла ҡатнаша. Ике армия ла бик күп яугирҙарын юғалта. «Совет тарихи энциклопедияһы»нда, урыҫ армияһы 44 мең, француздар 50 мең кешеһен юғалтҡан, тиелә[19]. «СССР тарихы»ның IV томында Бородино һуғышында урыҫтарҙың 38,5 мең, француздарҙың 58,5 мең кешеһе үлгән, тиелә. Профессор Л. М. Лященконың «История России. XIX век» тип аталған дәреслегендә ошо яуҙа урыҫтарҙың – 45,6 мең, французтарҙың 60 меңгә яҡын яугирын юғалтыуы хаҡында яҙылған.

Фельдмаршал М.И. Кутузовтың бойороғо буйынса урыҫ армияһы ошонан һуң да сигенеүен дауам итеп, 2 сентябрҙә Мәскәүҙе ҡалдырып, 80 саҡрымдағы Тарутино ауылы эргәһендә лагерь ҡора. Ошонда 85 меңгә ҡалған армия 11 октябргә ҡәҙәр тора. М.И. Кутузов армияны тәртипкә килтереп, ҡорал һәм кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә, армия иҫәбен 120 меңгә (икенсе сығанаҡта – 180 мең) еткерә. 6 октябрҙә улар маршал Мюрат етәкселек иткән француз армияһын ҡыйрата. Тарихсылар, ошо еңеү 1812 йылғы Ватан һуғышында тәүге һиҙелерлек хәрби уңыш булып, урыҫ яугирҙарының хәрби рухын күтәргән, тип билдәләй.

Бөтә губерналарҙа ла күпләп партизандар, халыҡ ополчениеһы отрядтары барлыҡҡа килеп, уларҙа ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр иҫәбе тиҙ арала 200 меңгә етә. Герасим Курин етәкселек иткән отрядта, мәҫәлән, 6 меңгә яҡын партизан иҫәпләнгән. Ермолай Четвертаковтың төркөмөндә – 4 мең, Федор Потаповтыҡында – 3 мең, Василиса Кожинаныҡында 2 мең партизан һуғыша. Күп һанлы партизандарға етәкселек иткән Денис Давыдов, Александр Сеславин, В. Орлов-Денисов, Александр Фигнерҙарҙың исемдәрен бөтә ил белгән. Шулай итеп, дошманға ҡаршы күтәрелгән урыҫ армияһының дөйөм һаны 240 меңгә еткән.

Солох төҙөүҙән өмөтөн өҙөп, Наполеон 7 октябрҙә армияһын Мәскәүҙән сығара ла Калуга ҡалаһына йүнәлә. Сафта ни бары 116 мең яугир һуғышсыһы ҡалған булһа, француздар Калугаға барып етә алмай. Малоярославец ҡалаһы янында М.И. Кутузов армияһы уларҙың юлын бүлеп, бер нисә ҡаты алыш була. Бик күп яугирын юғалтып, Наполеон Смоленскиға ҡарай сигенергә мәжбүр ителә. Ләкин Рәсәй армияһы ноябрҙә Днепр менән Березина йылғалар араһындағы бер нисә ҡаты алышта дошманды тағы ҡыйрата. Березинаны 50 мең самаһы ғына француз сығып өлгөрә. Армияһын ташлап, Наполеон 23 ноябрҙә (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа – 28 ноябрҙә, 5 декабрҙә – **Ә. Й.**) яңы армия ойоштороу өсөн ашығыс рәүештә Парижға китә. Французларҙы эҙәрлекләй барып, Кутузов ғәскәре 28 ноябрҙә Рәсәй еренән аҙаҡҡы дошман һалдатын ҡыуып сығара. Шулай итеп, Ватан һуғышы тамам була. 25 декабрҙә император Александр I унығ еңеү менән тамамланыуы тураһында мөрәжәғәткә ҡул ҡуя.

Фронтҡа килеп еткән башҡорт алайҙары тәүҙә – Тарутино менән Малоярославец эргәһендә барған һуғыштарҙа, һуңынан французларҙың айырым ғәскәри төркөмдәрен ҡамап юҡ итеүҙә әүҙем ҡатнаша. 1812 йылдың октябрь-ноябрендә генерал-лейтенант Петр Вигтенштейн корпусы составында 3-сө, 4-се һәм 5-се башҡорт алайҙары Петербург йүнәлешен ҡаплап тора. Октябрь аҙағынан ноябрь аҙағына саҡлы 15 башҡорт алайы (6 – 20-се полктар) генерал Александр Тормасовтың 3-сө армияһы составында Украинаға ынтылған дошманға ҡаршы тора. 1-се башҡорт алайы Калуга, Смоленск һәм башҡа ҡалалар яңында барған һуғыштарҙа була. 2-се башҡорт алайы Польша генералы Конотка ғәскәре менән ҡаты алыштарҙа ҡатнашып, октябрь аҙағына ҡәҙәр 234 яугирын юғалта.

Рәсәйҙә бик күп генералдарын, бөтә маршалдарын юғалтҡан, әммә күпкә һирәгәйгән гвардияһын һаҡлап ҡалған Наполеон Парижға ҡайтыу менән яңы ғәскәр ойоштора башлай. Был ваҡытта урыҫ армияһы Неман йылғаһы аша сығып, Польша, Пруссия биләмәләрендә һуғыша-һуғыша, Висла менән Одер, артабан Эльба йылғаһы ярҙарына барып етә. Тәүҙә француз армияһы яғында һуғышҡан Пруссия менән Австрия королдәре, урыҫ армияһының уңышлы һөжүм иткәнен күреп, ғәскәрҙәрен Рәсәй яғына сығара. Ләкин яңы көс туплап өлгөргән Наполеон 1813 йылдың майында, бер нисә уңышлы алыштан һуң, элекке союздаштарын Одер йылғаһына ҡәҙәр сигенергә мәжбүр итә. 14-15 августа Дрезден ҡалаһы эргәһендә французлар тағы еңеүгә өлгәшә һәм яңы алыштарға әҙерләнә башлай.

1813-1814 йылдарҙа башҡорттар урыҫ ғәскәренең сит ил походтарында ла әүҙем ҡатнаша. Башҡорт алайҙары генерал-лейтенант граф Леонтий Беннигсен етәкселегендәге армияла Польшала, Германияла һуғыша. Варшаваны яулап алыуҙа, Данциг (Гданьск) ҡалаһын штурмлауҙа һигеҙ башҡорт алайы ҡатнаша. Был һуғыштарҙа 1-се башҡорт алайынан командир һәм баш яҫауыл Сәңкем-Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорто Ихсан Әбүбәкеров – III дәрәжә Изге Анна ордены менән, хорунжий Хөсәйен Күсәрбаев IV дәрәжә Изге Анна ордены менән икенсе тапҡыр бүләкләнә. Ирназар Дәүләтсурин, Байбулат Торсонбаев һәм Иҫәнғол Ишҡужиндар Хәрби орденға лайыҡ була. 1-се башҡорт алайы Берлин, Дрезден, Висенбург, Лисимбург, Винтиербург, Десава, Бреда, Лейпциг ҡалалары, Дефентер ҡәлғәһе өсөн һуғыштарҙа, Парижды яулауҙа ҡатнаша. Профессор Әнүәр Әсфәндиәров архивта 1-се башҡорт алайына ҡағылышлы бер документҡа тап булған.

*«Список отличившихся и награжденных башкир в период Отечественной войны 1812 г. и заграничного похода 1813 – 1814 гг., составленный управляющим 2-м отделением 9-го кантона Юлбердиным*

*1-й. Бывший в 1-м башкирском полку полковым командиром есаул и орденов Св. Анны 3-й степени и Владимира 4-й степени же кавалер Ихсан Абубакиров был командирован и сначала поступил сотенным есаулом и, отправляясь в поход в армию, действующую против французов в прошлом 1811-го, мая с 10-го числа и находясь по 1814-й год в походах и отличив себя храбростию, а именно: под городом Гродно 1812-го июля 1-го, под городом Смоленском того же года, августа 2-го, где за отличие и храбрость представлен был в полковые есаулы и награжден по высочайшему повелению 1813-го года марта 3-го; под городом Можайском – сентября 3-го, 4-го и 5-го чисел; под городом Москвою генваря 20-го, где и занимал с командою главный бикет по Серипивской дороге* в селе под Молодом – октября с 3-го по 26-е. А в 27-е вслед за неприятелем под Малым Ярославцем – 29-го и 30-го; под городом Агдинским** – 1813-го (года), генваря 13-го, где за отличие и храбрость был представлен к кресту, за что и награжден по высочайшим приказам в числе протчих 2-го декабря 1813-го и получил при городе Дюссельдорфе Святые Анны 3 степени и саблю; под городом Берлином марта 3-го; под городом Дрезденом – 15-го; под городом Лисимбургом 29-го; под местечком Ютербоком августа 15-го и 16-го; под городом Винтербургом – августа 21-го и 22-го; под городом Десавою – сентября 16-го, где за отличие и храбрость был представлен к кресту Владимира 4-й степени, за что и награжден в числе протчих по высочайшим приказам при крепости Бредою 1814-го года, а генваря 3-го под городом Либцыгом (Лейпциг –* ***Ә. Й.****) октября 15-го 1813 года: под крепостъю Дефентером – ноября 10-го, под крепостию Бродею – декабря 8-го и 9-го, под городом Леоном – февраля 24 и 25-го 1814-го года; под крепостию Ремидом – 29-го и при сем сражении был захвачен в плен же полка полковый командир Кутлугильда Темиров, место коего поступил он, есаул Абубакиров, полковым командиром, и при здаче города Парижа был с полком 1814-го года марта 18-го числа, за что и имеет на георгиевский ленте серебренную медаль.*

*Бывший же в Пруссии, 1813 года в мае м-це в местечке Илденеве получил он по высочайшему повелению денежное награждение не в зачет полугодового есаульского жалования серебром двести пятьдесят семь рублей пятьдесят копеек».* Үҙ ваҡытында был бик ҙур аҡса булған[20].

1-се башҡорт полкы командиры баш яҫауыл Ихсан Әбүбәкеровтың хәрби юлына ҡарап башҡорттарҙың 1812–1814 йылдарҙағы француз яуында ҡатнашыу тарихын күҙалларға мөмкин. Хәрби белеме булып, ҙур ғәскәри төркөм менән етәкселек итһә, Ихсан Әбүбәкеров, моғайын, Наполеон маршалдарынан ҡалышмаҫ ине. Ул, һис шикһеҙ, – халыҡ геройы. Мәләүез районы хакимиәте батырҙың исемен мәңгеләштереү тураһында уйланһа, һәйбәт булыр ине, тигән фекерҙәмен.

1813 йылдың 4 – 8 октябрендә Лейпциг ҡалаһы янында булған «Халыҡтар һуғышы»нда 1-се, 4-се, 5-се һәм 15-се башҡорт алайҙары ҡатнаша. Биш тәүлеккә һуҙылған ҡаты һуғышта батырлыҡ күрһәткәне өсөн бик күп башҡорт яугиры ордендар менән бүләкләнә. Араларында 5-се алайҙан хорунжий Ниғмәтулла Ғазиев Хәрби орденға лайыҡ була, ошо уҡ берәмектең старшинаһы Ибраһим Биксурин, 9-сы алай яҫауылы Ҡотлогилде Ишемғолов һәм йөҙ башы Аҡкөсөк Тимербаев – III дәрәжә, 14-се алай командиры Абдулла Сурағолов, яугирҙар Насир Абдуллин һәм Ғәлекәй Ташбулатов IV дәрәжә Изге Анна ордендар менән бүләкләнә[21]. Документтар араһында Ибраһим Биксурин, Аҫылғужа Бакиров, Аҡкөсөк Тимербаев һәм Ҡотлогилде Ишемғоловтарҙы орден менән бүләкләү тураһында указдар һаҡланған.

*Указ*

*О награждении сотника 9-го Башкирского полка А. Тимербаева орденом Св. Анны 3-го класса за сражение под Лейпцигом*

*Господин сотник Аккучук Тимербаев!*

*Именем е. и. в. и властию высочайше мне вверенною, в справедливом уважении к отличной храбрости вашей в сражениях 6 и 7 чисел октября под городом Лейпцигом, оказанной по засвидетельствованию г. генерал-майора Крейца, препровождаю у сего для возложения на вас орден Св. Анны 3-го класса.*

*Подлинный подписал*
*Главнокомандующий Польскою армиею граф Бенигсен.*
*С подлинным верно: Оренбургского отдельного корпуса старший адъютант майор Горский.*
*№ 407, ноября 30 дня 1813 года, в г. Кальбе.*
*9-го Башкирского казачьего кантона.*

*Указ*

*о награждении старшины 5-го Башкирского полка Бикчурина орденом Св. Анны 3-го класса за сражение под Лейпцигом*

*Господин войсковой старшина Ибрагим Бикчурин.*

*Именем е.и.в. и властию высочайше мне вверенною, в справедливом уважении к отличной храбрости вашей в сражениях 4-го и 6-го октября под г. Лейпцигом, оказанной, по засвидетельствованию начальника главного штаба генерал-лейтенанта Сабанеева, препровождаю у сего к вам орден Св. Анны 3-го класса.*

*Подлинный подписал главнокомандующий армиями генерал от инфантерии граф Барклай де Толли.*

*С подлинным верно: кантонный начальник капитан (ҡултамға).*
*№ 121 генваря 13-го дня 1814 года.*
*5-го Башкирского полка.*

*Указ*

*О награждении старшины 4-го Башкирского полка Бакирова орденом Св. Анны 3-го класса*

*27 декабря 1813 г.*

*4-го Башкирского полка господину старшине Асылгуже Бакирову.*

*Именем е.и.в. и властию высочайше мне вверенною, в справедливом уважении к отличной храбрости вашей, оказанной в сражениях с 10-го августа по 6-е сентября, где вы, находясь в моем конвое, были неоднократно посылаемы в разичные места и все делаемые вам поручения исполняли с особенным усердием. По засвидетельствованию начальника конвоя генерал-майора Аклечиева препровождаю при сем для возложения на вас орден Св. Анны третьего класса.*

*Подлинный подписал граф Витгенштейн.*

*Верно: дежурный полковник (ҡултамға).*

***Документтың икенсе яғында:** за неимением ныне орденских знаков таковой доставлен будет по получении от г. военного министра. Подлинную подписал полковник Каховской.*

*Декабря 27 дня 1813 г.*

*Указ*

*О награждении есаула 9-го Башкирского полка Кутлугильды Ишимгулова орденом Св. Анны 3-го класса*

*Господин есаул Кутлугильда Ишимгулов.*

*Именем е.и.в. и властию высочайше мне вверенною, в справедливом уважении к отличной храбрости вашей в сражениях 6-го и 7-го октября под городом Лейбцигом оказанной, по засвидетельствованию господина генерал-майора барона Крейца, препровождая у сего для возложения на вас орден Св. Анны 3-го класса.*

*Главнокомандующий Польскою армиею генерал от кавалерии граф Бенигсен.*

*С подлинным верно: дежурный полковник (ҡултамға).*

*№ 406-й, ноября 30 дня. 1813 года, г. Кальбе.*

*9-го Башкирского казачьего полка.*

1813 йылдың октябрь башынан йыл аҙағына ҡәҙәр башта – 2-се, 13-сө һәм 15-се, ә Лейпциг һуғышы тамамланғас, 1-се, 4-се, 5-се һәм 14-се башҡорт алайҙары Дрезден ҡалаһын яулап алыуҙа ҡатнаша. Башҡорттар был алышта бик күп кешеһен юғалта. Батырлыҡ күрһәткәне өсөн бер төркөм башҡорт яугиры IV дәрәжә Изге Анна орденына лайыҡ була. 14-се алайҙан улар араһында Килдейәр Байбулдин, Назарбай Теләпов, Абдулнасир Наурыҙовтар бар. Шул йыл аҙаҡтарында 8-се, 12-се, 13-сө һәм 15-се башҡорт алайҙары Глогау ҡәлғәһен яулап алыуҙа ҡатнаша, французДарҙы Берлин, Веймар, Гамбург, Эрфурт һәм Майндағы Франкфурт ҡалаларынан ҡыуып сығарыуҙа әүҙемлек күрһәтә. 1-се, 2-се, 5-се, 8-се, 9-сы, 12-се, 13-сө, 14-се, 15-се башҡорт алайҙары Париж эргәһендәге барған ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашып, 1814 йылдың 19 мартында ҡалаға тәүгеләрҙән булып бәреп инә. Иҫән ҡалған яугирҙар «1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн» һәм «1812 йылғы һуғыш иҫтәлегенә» тигән көмөш миҙалдар менән бүләкләнә.

III һәм IV дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнгәндәр араһында хәҙерге Ҡыйғы районы Әбдразаҡ ауылынан прапорщик Оморҙаҡ Әбдразаҡов, 9-сы алай хорунжийы Хөсәйен Буранбаев, Күгәрсен районы Бикес ауылынан Йәнмырҙа Ишкилдин, 9-сы алай командиры яҫауыл Алмалит Уразғолов менән Уйылдан Дәүләтов, Учалы районы Истамғол (элекке атамаһы – Ҡыштау) ауылынан Абдулнасир Ҡорманаев, Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Бикбирҙе ауылынан Хөсәйен Күсәрбаев һ.б. бар. Бик күп башҡорт яугирҙары Изге Георгий ордены менән бүләкләнгән. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Назар (элекке атамалары Атанғол, Тойғон – **Ә.Й.**) ауылынан яҫауыл Ғөбәйҙулла Атанғолов, Беренсе Этҡолдан (Ямаш) – Ниғмәтулла Бирҙебаев, Ҡариҙел районы Үреш-Битулланан хорунжий Зәйнетдин Ҡанһөйәров, Мәләүез районы Томансы ауылынан Иҫәнғол Ишкужин, Көйөргәҙе районы Беренсе Кинйәабыҙҙан йөҙ башы Үзбәк Аҡмырҙин, 8-се алайҙан Зөлҡәрнәй Ҡотлогилдин, хәҙерге Ырымбур өлкәһе Октябрь районы Беренсе Иманғол ауылынан Ҡәнәфий Ҡотлогилдин, Һарыҡташ районы Килембай ауылынан йөҙ башы Аманбай Турышев, Ҡыуандыҡ районы Ишкужа ауылынан Ирназар Дәүләтсурин, Ҡансуранан яҫауыл Мирғәли Байғолов, Буранғолдан Байбулат Торсонбаев һ.б. бар[21].

Нисә башҡорт яугиры орден һәм миҙалдарға лайыҡ булды икән? «Советская Башкирия» гәзитендә (1962 й., 18 октябрь) баҫылған бер мәҡәләлә, 137 башҡорт орден һәм миҙал менән бүләкләнгән, тип әйтелә. Шул йылдың 16 октябрендә «Совет Башҡортостаны» гәзитендә донъя күргән мәҡәләлә, һуғышта ҡатнашҡан 287 башҡорт орден һәм миҙалға лайыҡ булған, тиелә. Был авторҙар – Башҡортостандың элекке Үҙәк тарихи архивы начальнигы К. Нурғәлиев менән

ғилми хеҙмәткәр Р. Ҡотошов. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттарҙың ҡатнашыуы тарихын өйрәнеүгә бик күп көс һалған профессор Әнүәр Әсфәндиәровтың мәғлүмәте буйынса, 1836 –1839 йылдарҙа иҫән-һау башҡорттарҙан 1211 кеше орден һәм миҙал менән бүләкләнгән[22]. Әммә был иҫәп тә күпме башҡорт һуғышсыһының орден һәм миҙал менән бүләкләнеүен асыҡламай, сөнки ул һуғыш тамамланып 12 – 15 йыл үткәс төҙөлгән. Башҡорттарҙан һуғышта нисә кеше ҡатнашыуы, күпмеһенең һәләк булыуы, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнеүе һаман билдәһеҙ. Быларҙы асыҡлау өсөн Мәскәүҙәге Үҙәк дәүләт хәрби-тарихи архивтың 103-сө, 395-се, 489-сы һәм башҡа фондтарының «эш»тәрен ентекле өйрәнергә кәрәк. Бәлки, әлегәсә билдәһеҙ батырҙарыбыҙҙың исемдәре мәғлүм булыр. Уны тарихыбыҙға битараф булмаған йәш ғалимдар атҡарһа ине, тип әйтке килә.

**Әхмәт-Гәрәй ЙӘНҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты**.

## ҺЫЛТАНМАЛАР:

[1]*«Любезные вы мои...» Өфө, 1992 й., 192-се бит.*
[2]*«Законы Российской империи о башкирах», 1999 й., 187-се бит.*
[3]*«Любезные...» 16-сы бит.*
[4]*ЦГИА РБ, ф. И-2, опись 1, д. 4023, 1. 81 об.*
[5]*«Любезные...» , 57-се, 58-се, 59-се, 60 – 62-се биттәр.*
[6]*Шунда уҡ, 58 – 61-се биттәр.*
[7]*Шунда уҡ, 123 – 124-се биттәр.*
[8]*«Очерки по истории Башкирской АССР», I том, II киҫәк, Өфө, 1959 й., 64-се бит.*
[9]*«Законы Российской империи о башкирах», 327-се бит.*
[10]*Ә. Әсфәндиәров. Олатайҙарҙың бар тарихы. Өфө, 1996 й., 104-се бит.*
[11]*ЦГИА РБ, ф. И-2, от 1, д. 4023, л. 93 об; д. 14605, л. 83 об.*
[12]*«Законы Российской империи о башкирах» 328-се, 329-сы биттәр.*
[13]*А.Н. Усманов «Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года», Өфө, 1964 й., 55-се, 58-се биттәр; «Любезные...», 20-се бит; Ә.З. Әсфәндиәров. Аталған хеҙмәт, 118-се бит; А.З. Асфандияров. «Кантонное управление в Башкирии. 1798 – 1865 гг.», Өфө, 2005 й., 75-се бит.*
[14]*А.Н. Усманов. Күрһәтелгән хеҙмәт, 54-55-се, 58-се биттәр.*
[15]*Шунда уҡ, 57-се бит.*
[16]*«Любезные...», 227-228-се биттәр.*
[17]*Шунда уҡ, 227-се бит.*
[18]*Шунда уҡ, 226-сы бит.*
[19]*«Советская историческая энциклопедия», X том, М., 1967 й., 670-се бит.*
[20]*«Любезные...» , 149 – 151-се биттәр.*
[21]*Шунда уҡ, 53 – 56-сы биттәр.*
[22]*Шунда уҡ, 30 – 63-сө биттәр.*

# ТАРИХҠА ЯҢЫ «АҢЛАТМА»МЫ БЫЛ?

«Ватандаш» журналының 10-сы сығарылышында (2010) тарихсы Р. Н. Рәхимовтың «Төньяҡ амурҙары» тарихын боҙоп күрһәткән мәҡәләһе донъя күрҙе. Мәкерле уйҙырмаларын тарихи хәҡиҡәт менән (әлбиттә, күҙ буяу өсөн) буташтырып, автор башҡорттарға насар мөнәсәбәттә булыуын белдереүҙән дә тартынмай. Мәҡәләнең йөкмәткеһенән ғәрләнеп, мин шунда уҡ редакцияға «Бойся трижды кандидатов исторических наук лихих 90-х дары приносящих» тип аталған яуап яҙып һалдым. Ләкин журнал уны баҫманы. Рәхимов иһә, минең өҫтән көлгән кеүек, киләһе 11-се номерҙа башҡорттарға ҡаршы рух менән һуғарылған өс мәҡәләһен сығарыуға өлгәште. Тәүге мәҡәләһен тарихсы «һаулыҡҡа» тип башлаған кеүек тойолһа ла, «әруахтар рухына» тип тамамлай. «Ул (Мәскәү тарихсыһы М. Д. Рабинович – **С.Ә.**) проблеманы ентекле өйрәнмәй һәм Ырымбур өлкәһе Дәүләт архивында документтарҙы сығанаҡтар менән сағыштырып ҡарамай тороп, ғилми ҡулланыуға 20 урынына 28 башҡорт полкы тигән төшөнсәне үҙ белдеге менән индереп ебәрә, тип хәбәр итә Р. Рәхимов. Ошоноң менән ул Наполеонға ҡаршы һуғышҡа бәйле башҡорт тарихы фәненә буталыш индерә»[1].

Ә бит тарих фәндәре докторы М. Д. Рабинович 1820 йылдың 18 ғинуарында ошо тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан VI кантон яһауылы Ҡасҡын Дауытов, поход старшинаһы Әйүп Мөғәтмәсов һәм хорунжий Зөлҡәрнәй Буранбаевтарҙың ғарызнамәһенә таянып эш иткән. Һуңынаныраҡ тарих фәндәре кандидаты Әнүәр Әсфәндиәров 28 башҡорт полкы ойошторолоу тураһында тағы ла бер документ тапты. IX кантондың эштәр алып барыусыһы Дәүләткилде Дәүләтбәков 1820 йылдың 18 февралендә 28 башҡорт полкы ойошторолоу тураһында хәбәр иткән. Ләкин Р. Рәхимов был мөһим сығанаҡтарҙы танырға теләмәй. Ул һәм уның кеүек белгестәр теге йәки был тарихи документты инҡар итеү өсөн «сығанаҡтарҙы тәнҡитләү» кеүек уңайлы төшөнсә уйлап тапҡан, 90-сы йылдарҙағы йәмәғәтселекте албырғатыу өсөн «дөйөм кешелек ҡиммәттәре», «көнбайыш демократияһы» кеүек төшөнсәләр менән мауығыу киткәйне. Ғәмәлдә быңдай төшөнсәләрҙе власть башын биләгән ультралибераль демократтар, үҙҙәренә һәм яҡындарына бөтәһе лә рөхсәт ителә, тигән фекерҙе башҡаларға ла һеңдереү өсөн файҙаланған икән.

Р. Рәхимовтың «тәнҡит»ен миңә Можайск йыйынтығында 2009 йылда уҡ уҡырға тура килгәйне. Унда документтарҙы инҡар итергә маташыуҙан башҡа бер ни ҙә юҡ. Авторға, әгәр ҙә ул тарих фәндәре докторы йәки кандидаты кеүек ғалимдар тапҡан тәүсығанаҡтарға шикләнеп ҡарай икән, башҡа мәғлүмәттәр килтерелгән дүрт тәүсығанаҡ тап та үҙеңдекен иҫбатла, тип әйтке килә. Әммә бының өсөн оҙаҡ эҙләнергә кәрәк, ә «ышанмайым!» тип тауыш ҡуптарыу ниндәйҙер дәрәжәлә танылыу яуларға мөмкинлек бирә. Ошолар менән бәйле «Переписчик истории» тип аталған фельетон яҙып, өс редакцияға ебәргәйнем –

баҫылып сыҡманы. Бына хәҙер ваҡытында тейешле баһаһын алмаған «тарихсы» үҙ «хеҙмәттәре»н Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы баҫмаһы булған журналда йәмәғәтселек иғтибарына тәҡдим итә.

Авторҙың икенсе мәҡәләһендә Чарльз Стейнведалдың 2006 йылда Ҡазанда донъя күргән мәҡәләһе күсереп алынған. Эмиграцияға Ҡазандан китеүсегә «бик оҡшаған» йәш американ былай яҙа: «Хәҙер башҡорт исеме менән билдәле халыҡ XVIII быуаттан үҙен ҡатлам һәм милләт тип иҫәпләгән»[2]. Әгәр ҙә мин беҙҙең яҡтарҙа IX һәм X быуаттарҙа уҡ булып киткән ғәрәп сәйәхәтселәренең Урал тауҙарының ике яғында ла йәшәгән һәм ҡатлам, этник хоҡуҡтар менән файҙаланған башҡорттарҙың үҙ аллы этнос булып көн итеүе хаҡында уҡымаған булһам, әлбиттә, «XVIII быуаттан» тигән һүҙгә ышаныр ҙа инем. Белмәгән кешеләр тап шулай итә лә.

Йәнә бер уйҙырма: «Тел башҡорт этносын теүәл билдәләгән сифат булып һаналмай. XX быуатҡа тиклем башҡорт теленең яҙмаһы булмай, тел үҙе лә бер-береһенән айырылған һөйләштәрҙән тора. Төбәктә административ эш алып барыу өсөн татар теле ҡулланыла». Ҡазанда һәм Мәскәүҙә саҡта татар милләтселәренән, башҡорттар милләт булараҡ XIX быуаттың 20-се йылдарында Совет хөкүмәте тарафынан ойошторола, тигән фекерҙе миңә күп ишетергә тура килде. Һүҙ, әлбиттә, иң элек яңы әлифба булдырыу хаҡында бара. Әммә был фекерҙә татарҙарҙың Алтын Урҙа дәүерендәге йоғонтоһон ҡайтарырға йыйыныуын да шәйләргә мөмкин. Башҡорт ҡоролтайы журналын сығарыусыларға был нимәгә хәжәт булды икән!?

Йөкмәткеһенән аңлашылыуынса, мәҡәләлә һүҙ башҡорт халҡын Рәсәй империяһының барлыҡҡа килтереүе тураһында бара. Тап «империя сәйәсәте башҡорт этносының ойошоуына булышлыҡ иткән». Башҡорттарҙа урыҫҡа ҡарата ҡайнар һөйөү тоҡанып китмәһен өсөн, ҡапма-ҡаршы фекер ҙә индерелә. Мәҫәлән, «башҡорттарға ҡаршы империя сәйәсәте ҡаты, урыны менән хатта аяуһыҙ була. Бигерәк тә 1557 йылдан һуң». Аңлашылыуынса, автор, башҡорттар Бөйөк Мәскәү батшалығына үҙ ихтыяры менән ҡушылған көндән алып уларға ҡарата аяуһыҙ сәйәсәт алып барыла, тип әйтмәксе. Ә бит тарихтан билдәле булыуынса, Ҡазан һәм Себер ханлыҡтары, Нуғай урҙаһына бүленеп көн иткән башҡорттарҙы йәш Рәсәй дәүләте үҙенә ҡушылғандан һуң йөҙ йыл борсомай. Чикаго тарихсыһын ҡайтанан баҫтырғансы, тарихты үҙҙәренә өйрәнергә кәрәк ине.

Ғөмүмән, Рәсәй өсөн Чикаго байтаҡ мәшәҡәттәр тыуҙырыуы менән билдәле. 1893 йылда ошонда уҙғарылған Бөтә Донъя күргәҙмәһенә ҡуйыу өсөн Өфө губернаһынан алып барылған экспонаттарҙы яңы асылған Христофор Колумб музейына бүләк сифатында бирергә мәжбүр итәләр. Бөгөн был ҡиммәтле экспонаттар Башҡортостандың үҙенә кәрәкмәҫ инеме ни? Белеүемсә, АҠШ-тан бер генә тарихи документты ла ситкә сығарырға ярамай. Кемдеке булыуына ҡарамаҫтан. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: 90-сы йылдар башында власҡа килгән ультралибераль демократтар ҙа, ниндәйҙер сәйер уртаҡлыҡ арҡаһында, иҡтисад мәктәбен ошо Чикагола тамамлаған. 1998 йылда мин уларҙың кешеләргә ҡаршы сәйәсәтенә сабырлығым бөтөп, Бөтә Донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһына ошо мәктәпте тикшереүҙе һорап мөрәжәғәт иткәйнем. Бәлки, унда кеше мейеһенә йоғонто яһау кеүек тыйылған тәжрибә үткәреләләр.

Бына аҡыллы хәйләкәр һәм мәкерле Чарльз Стейнведал «Ватандаш» журналы биттәренә үтеп ингән. «Башҡорттар – иң элек социаль ҡатлам» тигән төп фекерен раҫлау өсөн ул былай яҙа: «Башҡорттоң статусы билдәле өҫтөнлөктәрҙән ҡолаҡ ҡаҡҡандан һуң... башҡорт булып теркәлгәндәр... үҙҙәрен башҡа милләт вәкилдәре итеп күрһәтә башланы». Шәхси фекерен нигеҙләү өсөн автор

икенсе бер сәйәсәт белгесе Д. Горенбургҡа һылтана: «1897–1920 йылдарҙа хәҙерге Башҡортостан биләмәләрендә башҡорттар 10,6 процентҡа кәмей». Рәсми статистика урынына политологтың мәғлүмәттәрен файҙаланыуын Стейнведал халыҡ иҫәбен алыуҙа эҙмә-эҙлелек булмауы менән аңлатырға маташа. Ныҡышмалыраҡ эҙләргә кәрәк ине, профессор әфәнде! Һәр хәлдә башҡорт тарихсыһы Әнүәр Әсфәндиәровтан өлгө алырға! Ул тапҡан бит. Ә Стейнведал үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте нисек тә нигеҙләү артынан ҡыуып, башҡорттарҙың ике ҙур һуғышта – Беренсе Донъя һәм Граждандар – күп юғалтыуҙар кисереүен күрмәмешкә һалыша. Башҡорттарҙың кәмеүе, билдәле, башҡа халыҡтарҙың күберәк күренеүенә булышлыҡ итә.

Һис бер икеләнеүһеҙ автор түбәндәге һығымтаға килә: «Шулай итеп, башҡорт булып йөрөгән байтаҡ кеше яңы шарттарҙа үҙен татар, типтәр йәки мишәр итеп атауға өҫтөнлөк бирә». Бында ла төньяҡ-көнсығыш Иллинойс университеты белгесе хата ебәрә, сөнки бынан өс бит алдараҡ ҡына ул «башҡорт ҡатламы этник күҙлектән сығып билдәләнмәгән, уның составына башҡа этник төркөм ағзалары ла ингән» тип яҙа. Йәнәһе, ул осорға документтарында «сирмештән сыҡҡан башҡорттар», «вотяктан сыҡҡан башҡорттар» тигән төшөнсәләр осрай. Тимәк, башҡорт булып теркәлгән удмурт, мордва, мари һәм сыуаштар артабан татар, типтәр йәки мишәр булып китә?

Стейнведал фекеренсә, этнос булараҡ башҡорттар 1917 йылдарға тиклем генә формалаша. Күләмле хеҙмәтендә ул уҡыусыһын, башҡорттар тарихы, башҡорттар тигән төшөнсәләр тәүге мәлдәрҙә этник (милли) ҡатлам икәнлеген аңларға нигеҙ бирмәгән. Икенсе төрлөрәк әйткәндә, ул IX быуатта халҡыбыҙ өсөн уртаҡ булған ҡыйыулыҡ, боронғо тарих, Тәңрегә инаныу, эпостар, ҡурай тартыу һәм башҡорт бейеүҙәрен бер һелтәүҙә юҡҡа сығарған. Чикаго белгесе раҫлауынса, «XIX быуат аҙағында ғына (башҡорттарҙың) милли һәм ҡатлам үҙенсәлектәре бергә тоташа».

Бөгөн алтаҡталарын ғына алмаштырған, ғәмәлдә Советтарға ҡаршы эшмәкәрлеге тиҫтәләрсә йылдар АҠШ хөкүмәте тарафынан мул финансланған ойошмалар эш итеүе аңлашыла. «Ватандаш» журналының, ғәмәлдә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы баҫмаһының, ошо йүнәлештә эш итеүе генә аңлашылмай. Етмәһә, мәҡәләне ҡыҫҡартып, инглиз теленә тә тәржемә иткәндәр. Был емергес эшмәкәрлек алып барыу тураһында сит ил ойошмаһына отчет биреү кеүек ҡабул ителә. Ә идеологиялар көрәше дәүләттәр араһында һәр саҡ барасаҡ, хатта бер үк капиталистик ҡоролошҡа ингәндәре араһында ла. Урындағы халыҡ үҙенекен ни тиклем түбәнерәк баһалай, уны һатып алыу ҙа шул саҡлы еңелерәк. Элекке Советтар Союзы мөлкәтен «прихватизациялау» өлгөһөндә беҙ уны яҡшы беләбеҙ. Әгәр ҙә халыҡ Ватанын ысынлап та баһалай икән, тимәк, был ышанысты ҡаҡшатыу өсөн «белгестәр» йәлеп итергә кәрәк. Эшмәкәрлекте тарихтан башлау отошло, сөнки халыҡ рухы тап шунда тупланған.

Өсөнсө мәҡәләлә тарих фәндәре кандидаты Юлдаш Йосопов «Ғосманлылар империяһына йүнәлеш тотоу башҡорттар өсөн традицияға әүерелгән»[3] тип раҫларға маташа һәм Тубыл йылғаһынан Волганың түбәнге ағымына саҡлы күп һанлы күскенселәрҙе ҡырып бөтөрөүҙе башҡорттарға ҡайтарып ҡалдыра. Шул уҡ ваҡытта автор Ғосманлы төрөктәр империяһының йоғонтоһо аҫтында булған Ҡырым ханлығы менән Ҡазандағы идара итеү даирәләренең бәйләнешенә һылтана. Ҡазанға башҡорттарҙың ни ҡыҫылышы бар һуң? Был ханлыҡҡа башҡорттарҙың аҙ өлөшө генә буйһонған. «Сыуаш, сирмеш, башҡорт, вотяк һәм Көнбайыш Себер аристократтары»ның 1635 йылда төрөк солтанына ебәргән

хатына ысынлап та башҡорттарҙың ҡайһыһылыр ҡул ҡуйған булһа ла, «башҡорттар өсөн бындай алым традицион булған» тигән һығымта яһарға нигеҙ бирмәй. Ҡазан хандары өсөн – эйе, әммә башҡорттар өсөн – юҡ. Исемлеккә ни өсөндөр татарҙар индерелмәгән. Бәлки, уларҙы тәржемәлә башҡорт эсенә ҡушып яҙғандарҙыр. Башҡорттарҙы ла күберәк булһын өсөн индереүҙәре ихтимал. Улар араһында быуаттарҙан мираҫҡа килгән аристократтар булмаған. Башҡорт мәсьәләләре, шул иҫәптән Мәскәү батшалығына ҡушылыу ҙа, халыҡ ихтыярын иҫәпкә алып, ҡоролтайҙарҙа хәл ителгән.

Артабан автор һәштәктәрҙе (хещдек – **С. Ә.**) башҡорттар араһында индерергә маташа. Төрөк сәйәхәтсеһе Әүлиә Челебиҙың ғилми аңлатмалар менән рус телендә сыҡҡан «Книга путешествий» тигән хеҙмәтендә һәштәктәр Әстрәхан татарҙары менән бергә иҫкә алына. Тарих фәндәре докторы И. В. Зайцев фекеренсә, «һәштәк» атамаһы Әстрәхан тирәһендәге төрлө телдә һөйләшкән халыҡтарҙы берләштереп, Әстрәхандың (элекке Хажи тархан) исеменә бәйле[4]. Әммә Йосопов бының менән иҫәпләшмәй, ләкин шул уҡ ваҡытта Әүлиә Челебиҙың «Һәштәктәрҙең бик ҙур территорияла – Ҡырымда, Азов, Кавказ буйҙарында, Волганың түбәнге ағымынан Яйыҡҡа тиклемге арала, хатта Можайскиғаса Урта Волга тарафтарында йәшәүе» тураһында яҙғанын ҡабатлай. Башҡорттар хатта иң көслө саҡтарында ла ул тиклем биләмәләргә хужа булмаған. Был хәл татар, мишәр һәм нуғайҙарға ғына хас. Йосопов үҙе үк, тәү сығанаҡҡа һылтанып, «һәштәк-татарҙар», «нуғай-татарҙар», «иман-татарҙар», «тат-татарҙар», «шәйҙәк -татарҙар» һәм татарҙарҙың бер нисә ҡәбилә союзы тураһында иҫкә ала. Үҙ-үҙенә ҡаршы барып, тарих фәндәре кандидаты, һәштәктәр – башҡорт булған, тип раҫларға маташа. Беренсенән, башҡорттар Волганың уң ярында бөтөнләй йәшәмәгән. Автор күрһәткән ваҡытта был ерҙәрҙә, йәғни Ҡазандан көнсығышҡа табан, мишәрҙәр йәшәүе билдәле. 1794 йылда Абдулҡадир Әбделкәримов етәкселегендәге мишәр депутаттары генерал-прокурорға ғаризнамәһендә үҙҙәренең тарихына ҡарата түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: «Башҡа урыҫ булмаған халыҡтарҙан айырмалы, беҙҙең мишәр халҡы 7001 (1493) йылда үҙ ирке менән Алтын Урҙанан Рәсәйгә күсеп ултырҙы. 1552 йылда Ҡазанды алыу һ.б. кеүек тоғро һәм фиҙакәр хеҙмәттәре өсөн ата-бабаларыбыҙ Рәсәй тәхетенән бүләк рәүешендә Волганың таулы ерҙәрендә йәшәү өсөн уңайлы ерҙәр ҡабул итеп алған»[5]. Артабан был урындарҙа Пенза, Сембер һ.б. ҡалалар үҫеп сыға. Тап ошо ерҙәрҙе «Челеби» Һәштәкстан, йәғни һәштәктәрҙең тыуған ере тип атай». Ә Әстрәхан менән Ҡырымда, Челебиса, улар «ялланып хеҙмәт итеүселәр» булып күренә. Башҡорттар бер ҡасан да Ҡырымда ялланып һуғышмаған. Киреһенсә, Ҡырым ханлығына ҡаршы һуғыштарҙа улар Рәсәй яғында тороп ҡатнашҡан. Тарихи сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, Мәскәү батшалығына ҡушылған йылдарҙан алып башҡорттар поход һәм һуғыштарҙа уның яғында ҡатнаша. 1557-1558 йылғы Ливон һуғышында, мәҫәлән, рус ғәскәрендә башҡорттар ҙа була[6]. 1570 – 1572 йылдарҙағы Ҡырым һуғышында ла ҡатнаша улар. Башҡорт шәжәрәһендә был хаҡта «Иван Васильевич башҡорттарҙы саҡыра» һәм «улар Аҙау (Азов) янында һуғышҡа бара[7] тип әйтелә. Муса Мортазин «Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну» (17-се бит) тигән тикшеренеүендә, Дмитрий Пожарский осоронда ҡырымдар менән һуғышта мең башҡорт ҡатнаша, тип яҙған.

Башҡорттар Себер ханлығы менән көрәштә лә ситтә ҡалмай. Мәҫәлән, Тобольск ҡалаһынан Иртыш буйлап үргә күтәрелеү өсөн А. Елецкий етәкселегендә экспедиция ебәрелеп, уның составына башҡорттар ҙа йәлеп ителә. Башҡорт ерҙәренә даими сапҡын яһап торған ҡаҙаҡ һәм нуғайҙарға ҡаршы көрәштә башҡорттарға ярҙамға урыҫтар ҙа килә. Мәҫәлән, «1635 йылда берлектәге рус

һәм башҡорт отрядтары Өфө янында Аблай менән Тәфкил ханзадаларҙы ҡыйрата. 1643-1644 йылдарҙың ҡышында башҡорт һәм рустарҙың ҙур атлы отряды ҡалмыҡ олоҫтарын туҙҙыра»[8] Батша Алексей Михайловичтың башҡорттарҙы «Себер ханзадаларына ҡаршы тороуҙа күрһәткән хеҙмәттәре өсөн Новгород алтыны менән бүләкләү» тураһында воевода Сомов менән дьяк Родионовка биргән наказы ла бар[9].

XVII быуат башында поляк-швед баҫҡынсыларына ҡаршы көрәштә Рус дәүләтенең бойондороҡһоҙлоғон яҡлауҙа урыҫтар менән бергә башҡорт атлылары ла ҡатнаша. Башҡорттар Түбәнге Новгород воеводаһы А. С. Алябьев ғәскәре составында 1608 йылдың декабрь башында Вормс ауылына урынлашҡан Дмитрий II отрядын ҡыйрата[10]. Шул уҡ йылда воевода кенәз Репник ебәргән хәбәрҙә Балахна янында интервенттарҙы тар-мар итеүҙә башҡорттарҙың да ҡатнашыуы телгә алына[11]. Башҡорт атлылары Мәскәүҙән поляктарҙы ҡыуып сығарған К. Минин һәм Д. Пожарский ополчениеһында ла була[12].

Ю. Йософовтың «Беҙ Әүлиә Челебиҙың һәштәктәр тураһындағы байтаҡ мәғлүмәтен башҡорттарға ҡайтарып ҡалдыра алабыҙ» тигән һығымтаһы ла хәҡиҡәткә тап килмәй. «Книга путешествий»ҙан тарихсы үҙе килтергән алынмалар ҙа ошо фекерҙе раҫлай. «Һәштәк ҡәбиләһенә килгәндә, улар Һәләгү хан дәүеренән үк иҙеүҙән ҡасып Мәскәү тирәһенә һыйына һәм уға буйһоноп китә». Ә бит башҡорттар, IX быуат ғәрәп сығанаҡтары буйынса, татар-монгол яуына тиклем үк хәҙерге Ватанында көн иткән. Һәштәктәрҙе, моғайын, Ҡасим татарҙарына һәм мишәрҙәргә ҡайтарып ҡалдырырға кәрәктер, әммә Йософов хеҙмәтендә ул турала телгә лә алынмай.

«Бында (Ҡазанда) һәштәк менән нуғайҙарҙан мосолман бик күп»,– тип яҙа тарихсы. Ә бит башҡорттар Ҡазанда йәшәмәгән. Челеби һәштәк һәм нуғайҙарҙы ҡалмыҡтар тарафынан буйһондоролған тип иҫәпләй. Әммә тарихта башҡорттарҙың ҡалмыҡтарға буйһоноуы билдәле түгел. «Һәштәктәр һәм казактар менән бергәләп беҙҙән Аҙауҙы тартып аласаҡ» тип яҙа төрөк кешеһе. «Улар (һәштәктәр) араһында заимдар һәм падишаһзадалар бар». Ләкин башҡорттарҙа ундай атамалар осрамай. Һәштәктәрҙең башҡорттарға беҙ ниндәй мөнәсәбәте юҡлығы хаҡында факттар быуа быуырлыҡ булыуға ҡарамаҫтан, Ю. Йософов ҡапма-ҡаршы һығымта яһай: һәштәктәр – башҡорттар. Ә хәҙер тарихсының немец сәйәхәтсеһе Адам Олеарийҙың мәғлүмәттәрен бутап биреүенә туҡталайыҡ. Һарытауҙы үткәндән һуң Олеарий былай яҙа: «Йыш ҡына уларға Һарытауға тиклем һибелеп ултырған даими дошмандары ҡалмыҡтар һәм был яҡтарҙа «болғар татарҙары» тип аталған, ләкин Яйыҡ аръяғында йәшәгән халыҡтар һөжүм итә. Ғәҙәттә, улар ҡыш йылғалар туңып, боҙҙан еңел үтеү мөмкин булған саҡта сапҡын яһай». Был һөйләмдә аңлашылмаҫлыҡ бер ни ҙә юҡ. Ә автор уны үҙенең мәнфәғәтенә бора. «Болғар татарҙары» атамаһы Урта Волгаға бәйле, ти ул. Был төшөнсә Ҡазан һәм Ҡазан татарҙарына бер нисек тә мөнәсәбәтле түгел.

Ары китәйек. «Ҡазан ханлығында болғар тип сыуаш, сирмеш, мишәр һәм башҡорттарҙы атағандар»,– тип яҙа Ю. Йософов. Башҡорттар бер ҡасан да болғар булмаған! Өсөнсө һығымта тағы ла нығыраҡ һағайта: «Әүлиә Челеби менән Избрант Идестың (Өфө татары – **С.Ә.**) башҡорттарҙың таралып ултырыуы тураһындағы мәғлүмәттәрен сағыштырып ҡарағандан һуң, Адам Олеарий «болғар татарҙары» тип аталған ҡалмыҡтар төшөнсәһе менән башҡорттарҙы күҙ уңында тотҡан. Тимәк, ҡалмыҡтар гонаһын башҡорттарға ауҙарырға мөмкин! Ни өсөн Олеарий болғар татарҙарын ҡалмыҡ татарҙары тип атаған тигән һорауға тарихсы бер ниндәй шикләнеүһеҙ: «Күренеүенсә, был күскенсе башҡорттарҙың ҡалмыҡ тайшаһы буйһоноуына күскән мәле булған»,–

тип яуаплай. Күрәһең, тарихсы башҡорттарҙың ҡалмыҡ буйһоноуында бер ҡасан да булмауын инҡар итә.

Мәҡәләһенең аҙағында автор был хеҙмәттең ни айҡанлы яҙылыуын, ниндәй маҡсат ҡуйыуын аңлатып бирә. «XVII быуатта Волга буйында сәйәси һәм этномәҙәни процестарҙың нисек барыуы тураһында концептуаль ҡараштар тыуыу өсөн яңы мөмкинлектәр асыла. Шулай уҡ уларҙа башҡорт этносының ҡатнашлығы тураһында. Был сығанаҡтар рус-башҡорт мөнәсәбәттәрендә беҙгә билдәле мәғлүмәттәрҙе үҙгәртә һәм башҡорттарҙың Рәсәй сәйәси структураларына әле бәйләнеп бөтмәүе, Дәшти Ҡыпсаҡтағы көньяҡ күршеләре менән мөнәсәбәте хаҡында һөйләй».

Тимәк, башҡорт тарихын кемдәрҙер яңынан яҙырға йыйына. Күрәһең, башҡорттарҙың Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуының 450 йыллығын байрам иткәндән һуң кемдәрҙер барыһын да оноттороп, тарихҡа икенсе күҙлектән ҡарарға саҡыра. Нимә был: аңралыҡмы, әллә кемдәрҙеңдер усал ниәтеме? Әллә һатлыҡ йәнлекме?

**Салауат ӘСФӘТУЛЛИН.**
**Калуга ҡалаһы.**

## ҺЫЛТАНМАЛАР:

[1]*Рахимов Р. «Военные традиции башкирского народа». («Ватандаш», 2010 й., № 11, 11-се бит).*

[2]*Стейнведал Чарльз. История формирования идентичности башкир и условиях российской империи. («Ватандаш», 2010 й., № 11, 15, 20-се, 27-28-се, 29-сы, 31-се биттәр).*

[3]*Ю. Юсупов. «Башкиры в путевых заметках иностранных путешественников XVII в.» («Ватандаш», 2010 й., № 11, 39-сы, 40-сы, 41-се, 43-сө, 44-се, 45-се, 46-сы, 47-се биттәр).*

[4]*И. В. Зайцев. Астраханское царство. Мәскәү, 2004 й., 238-се, 239-сы биттәр.*

[5]*А. З. Асфандияров. Башкирия после вхождения в состав России. Өфө, «Китап», 2006 й., 253-254-се биттәр.*

[6]*А. Н. Усманов. Присоединение Башкирии к Русскому государству. Өфө, 1960 й., 169-сы бит.*

[7]*Д.Н. Соколов. Опыт разбора одной башкирской летописи (Труды Оренбургской ученой архивной комиссии). 1898 й., IV сығарылыш, 142-се бит.*

[8]*Очерки по истории Башкирской АССР. Өфө, I том, I киҫәк, 105-106-сы биттәр.*

[9]*М.Л. Муртазин. Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну. Мәскәү, Инсан, 2007 й., 17-18-се биттәр.*

[10]*Акты исторические. II том, № 113-сө, 142-се биттәр.*

[11] *М.Л.Муртазин. Аталъан хеҙмәт, 17-се, 41-се биттәр.*

[12]*Труды научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпросе БАССР. Стәрлетамаҡ, 1922 й., IV сығарылыш, 48-се, 60-сы биттәр.*

## МӘКТӘП ҒОРУРЛЫҒЫ

Күптән түгел Благовар районы Иҫке Күсәрбай урта мәктәбе 100 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Байрамға ҡайтҡан бихисап ҡунаҡтарҙы мәктәптең бай тарихлы музейы хайран итте. Һәр кем үҙе тураһында ниндәй ҙә булһа мәғлүмәтте күреп ихлас ҡыуанды. Һәр бер уҡыусыһы, уҡытыусыһы тураһында матур иҫтәлектәр һаҡлаусы икән дә музейыбыҙ. Уға нигеҙ 1988 йылда һалына: БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Ф. И. Ишмаева һәм тарих уҡытыусыһы Н. И. Ғайсин тырышлығы менән төҙөлә ул.

Бөгөн музейҙа алты даими экспозиция бар. Беренсеһендә Иҫке Күсәрбай ауылы мәғарифы тарихына бағышланған материал тупланған. Иң беренсе уҡыу йорто — рус-башҡорт училищеһы 1911 йылдың 1 октябрендә асыла. Беренсе уҡытыусыһы Вәлиулла Кинйәкәев була.

Стендтар, альбомдарҙағы фотографиялар аша мәктәптең бай тарихы менән танышырға мөмкин. Унда мәктәп директорҙары, хөкүмәт бүләге алыусылар тураһында тулы мәғлүмәт бар.

Педагогия хеҙмәте ветерандары, уҡытыусы династиялары — Әхмәтшиндар, Бигловтар, Хәкимовтар тураһында альбомдар төҙөлгән.

Мәктәптең ғорурлығы — уның уҡыусылары, әлбиттә. Уларҙың 48-е урта мәктәпте миҙалға тамамлаған. 2007 йылда мәктәптең яңы бинаһы асылыуға уҡытыусылар З. Я. Хәкимова һәм Ф. А. Галина (музейҙың бөгөнгө директоры) етәкселегендә, балалар менән берлектә мәктәп тамамлаусылар «ағасы»н эшләне. Уның япраҡтарына, 1949 йылда мәктәп тамамлаусыларҙан башлап, бөтә уҡыусыларҙың да исем-фамилиялары яҙылған. Күптән түгел генә элекке уҡыусыларыбыҙ Кәйфә Зиннәтуллина, Риф Ғабдрахмановтар 1942, 1949 йылдарҙа төшөрөлгән фотографиялар килтерҙе. Шулай уҡ район техник ижад йорто директоры, элекке уҡыусыбыҙ, БР-ҙың мәғариф алдынғыһы Ә. Ш. Ғабдрахманов музейҙа һаҡланған фотографияларҙы яңыртты, йәғни реставрацияланы. Өфө ҡалаһының «Зоркий» фото

ательеһында эшләүсе уҡыусыбыҙ Әлмира Риф ҡыҙы Сәйетғәлиева ла музейға мәктәп менән бәйле фотографияларҙан альбом төҙөп бүләк итте. Улар барыһы ла хәҙер музейҙың алтын фондын тәшкил итә.

Бөгөнгө уҡыусыларыбыҙға үрнәк алырлыҡ кешеләр күп. Мәктәп тамамлаусылар араһында төрлө һөнәр эйәләре бар. Бына бер нисәһе: ОДАТУ-ның хәрби әҙерлек кафедраһы начальнигы, РФ профессиональ мәғарифының почетлы хеҙмәткәре М. М. Биглов, фән докторҙары Ф. Я. Баһауетдинов, З. М. Хәсәнов, Ф. Ш. Ғарифуллин, республиканың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре Ф. Г. Абдуллин, В. Х. Камалетдинов, Р. Р. Фәрхетдинов, Ф. И. Вилданов, республиканың атҡаҙанған врачтары Ф. Г. Абдуллин, Ә. Ә. Әминева, журналистар З. Ш. Әхтәрйәнова, Ф. М. Ғилманов, Н. Ә. Бәширова һәм башҡа күптәр.

Экспозицияларҙың береһе Күсәрбай ауылы тарихына бағышланған. Унда көнкүреш әйберҙәре, һауыт-һаба, эш ҡоралдары, кейем-һалым һәм башҡалар йыйылған. «Нумизматика» бүлегендә боронғо аҡсалар тупланған. Айырым экспозиция «Октябрь» колхозының бай һәм сағыу тарихын сағылдыра. Уны 30 йылдан ашыу (ул да мәктәбебеҙҙең элекке уҡыусыһы) Ленин ордены кавалеры М. Х. Баязитов етәкләй.

Бөйөк Ватан һуғышы халыҡ хәтерендә юйылмаҫ эҙ ҡалдыра. Күсәрбай ауыл Советынан 700-ҙән ашыу кеше фронтҡа китә, шуларҙың яртыһынан күбеһе тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта алмай.

Был йылдарға бағышланған экспозицияла өсмөйөшлө һалдат хаттары, фотографиялар... Советтар Союзы Геройы Ғилемхан Иҙрисов тураһында бай материал тупланған. Туғаны Рәсүл Муллаян улы Иҙрисов Геройҙың шәжәрә ағасын яһатып, музейыбыҙға бүләк итте. Ата-бабаларыбыҙҙың хәрби дан юлын йәштәр дауам итә. Уларға айырым стенд бағышланған. Музейҙа батырлыҡ дәрестәре, ветерандар менән осрашыуҙар үтә. Былар барыһы ла йәш быуынды тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай.

*(Музейҙан фотоһүрәттәр тышлыҡтың 3-сө битендә.)*

**Гөлфирә ӘХМӘТШИНА,**
**БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, директорҙың**
**тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары.**
**Благовар районы, Иҫке Күсәрбай мәктәбе.**

### «Ағиҙел» – «Йыл журналы»!

Төркиәлә Евразия Яҙыусылар союзы 2011 йыл аҙағында халыҡ-ара әҙәби бәйләнештәрҙе, дуҫлыҡты нығытыуға булышлыҡ иткән, ошо йүнәлештә һөҙөмтәле эшләгән барлыҡ сараларға йомғаҡ яһап, йыл яҙыусыһын, йыл журналын, йыл тәржемәселәрен, йыл телеканалын билдәләне.

Әзербайжан Яҙыусылар союзы рәйесе Анарҙы төрки донъяла «Йыл кешеһе» тип иғлан итергә Төньяҡ Кипрҙың Лефкос ҡалаһында үткән IV Төрки донъяһы әҙәбиәт журналдары конгресында ҡарар ителгәйне. Анар, шулай итеп, төрки донъяла «Йыл кешеһе» тип танылды.

Төрки телдәр араһында иң яҡшы шиғыр тәржемәләре премияһы Ҡаҙағстанда нәшер ителгән «Донъя әҙәбиәте» журналында төрөк әҙәбиәтенән тәржемәләре өсөн ҡаҙаҡ шағиры Бауыржан Жаныптҡа биреләсәк.

Әзербайжан яҙыусыһы Эльчиндың «Яҡты төштәр» хикәйәләр китабын төрөк теленә ауҙарғаны һәм башҡа тәржемәләре өсөн төрөк яҙыусыһы Имдат Авшар шундай уҡ бүләккә лайыҡ тип табылған.

Татар яҙыусыһы Аяз Ғиләжевтың «Өс аршын ер» романын төрөк теленә тәржемә иткән Фәтих Ҡотло ла премия лауреаты тип билдәләнгән.

Хакасиянан Тимур Дәүләтовтың фәнни тәржемәләре иң яҡшыһы тип табылған. Профессор, доктор Рамиз Аскериҙың тәржемәләләре лә – ошо мәртәбәле премия лауреаты. Төркиәләге «Ауаз» телеканалы – ошо бүләк эйәһе.

Ошондай мәртәбәле премияға лайыҡлылар араһында беҙҙең баҫмабыҙҙың да аталыуы айырыуса һөйөнөслө, көтөлмәгән шатлыҡ булды!

Һәр һанында дуҫлыҡты, әҙәби бәйләнештәрҙе нығытыуға арнап әҫәрҙәр баҫтырған, ҡәрҙәш яҙыусыларҙың ижады менән таныштыра барған, үҙе лә тәржемә ителәсәк әҫәрҙәрҙе һайлап алыу критерийына әйләнгән «Ағиҙел» журналының төрки донъяһында «Йыл журналы» тип билдәләнеүе – төрки донъяһы журналдары вәкилдәре саҡырылған йыйылыштарҙа ҡатнашыу ғына түгел, йыл әйләнәһенә алып барылған эште күреү, баһалау, тип тә аңларға кәрәк.

Премия быйыл Ҡаҙағстандың Астана ҡалаһында үтәсәк V Төрки донъяһы әҙәбиәт журналдары конгресында тапшырыласаҡ.

***

Башҡорт дәүләт университетында «Күп милләтле Рәсәй киңлегендә Аксаковтар ғаиләһе миҫалында рус мәҙәниәтенең һәм әҙәбиәтенең тотҡан урыны» тигән Бөтә Рәсәй конференцияһы булып уҙҙы. Сара Сергей Аксаковтың тыуыуына 220 йыл тулыу һәм Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы айҡанлы ойошторолғайны. БДУ профессоры Сергей Семенов «Рәсәйҙең күп милләтлелеге, уның мәғәнәһе һәм әһәмиәтенең асылы: Аксаковтар күҙлегенән» тигән ҙур доклад менән сығыш яһаны.

Конференцияла Мәскәү ҡунаҡтары: Рәсәй философия йәмғиәтенең беренсе вице-президенты, философия фәндәре докторы, профессор Александр Чумаков, М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты профессоры, философия фәндәре докторы Михаил Маслин, РФ-ның Президент янындағы дәүләт хеҙмәте һәм халыҡ хужалығы академияһы профессоры Хәлил Барлыбаев, шулай уҡ Рәсәй өлкәләренән байтаҡ вәкил ҡатнашты.

***

Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Рафаил Зинуровтың шәхси күргәҙмәһе булып үтте.

Төрлө милләт вәкилдәренә арналған «Онотолған геройҙар» экспозицияһы авторҙың егермеләгән ижад өлгөһөн үҙ эсенә йыйған. Скульптуралар араһында башҡорт ханы Ҡараһаҡал да, ҡурҡыу белмәҫ Понтиак, Әрмәнстандың батшаһы Тиран Аршакуни һ.б. бар. Күргәҙмә Рафаил Зинуровтың Әрмәнстан тарихын шиғри юлдар ярҙамында бәйән иткән «Әрмәнстан – меңйыллыҡтар юлы» китабының презентацияһы менән тап килде.

Авторҙың өс скульптураһы нигеҙендә һәйкәлдәр ҡойолған: Кинйә Арыҫлановҡа (Көйөргәҙе районы Кинйә ауылында),

Ҡаранай Моратовҡа (Стәрлебашта), Зәки Вәлидигә (Ишембайҙа ошо арала ҡуйыласаҡ). Юридик фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, РФ һәм БР Яҙыусылар, Рәссамдар, Журналистар союздары ағзаһы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты Рафаил Зиннуровҡа БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев китаптың исем туйы һәм күргәҙмә асылыу айҡанлы ҡотлау ебәрҙе. Уны шулай уҡ президент аппараты, республиканың ижади союздары, министрлыҡтар вәкилдәре, хеҙмәттәштәре, коллегалары тәбрикләне.

***

Башҡорт дәүләт университетының «Шоңҡар» әҙәби ижад берекмәһе ойошторолоуға 77 йыл тулды. Ошо үҙенсәлекле юбилей (ике «7») айҡанлы, вуздың ҙур залында ижади осрашыу үткәрелде. Ул бик ҡыҙыҡлы уйланылған: ижадсылар дүрт төркөмгә бүленеп сығыш яһаны.

Тәүҙә сәхнәгә өлкән быуын әҙиптәре сыҡты. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай, Рәшит Шәкүр, Гөлфиә Юнысова, Ирек Кинйәбулатовтарҙың иҫтәлектәре, шиғырҙары сағыу яңғыраны. Алып барыусы Ирек Кинйәбулатов ҡорҙаштарын сәхнәгә шаян эпиграммалар менән саҡырҙы.

Уларҙан һуң килгән быуын – етмешенсе йылдар шоңҡарсыларының алып барыусыһы Рәмил Йәнбәк бер-бер артлы Зөһрә Ҡотлогилдина, Сабир Шәрипов, Таңсулпан Ғарипова, Рәсимә Ураҡсина, Тамара Искәндәриә, Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина, Ринат Камалға һүҙ бирҙе.

Тәнзилә Дәүләтбирҙина етәкселегендә сәхнәгә күтәрелгән төркөмдәге Фәрзәнә Аҡбулатова, Гөлназ Ҡотоева, Мөнир Ҡунафиндың сығыштары ла ихлас алҡыштарға күмелде. Дүртенсе төркөм – «Шоңҡар»ҙың хәҙерге ағзалары. Улар араһында өмөтлө йәш ижадсылар байтаҡ. Зарина Бағышаева менән Урания Вахитова ана шундайҙарҙан.

Әҙәби ижад берекмәһе етәксеһе, филология фәндәре докторы Зәйтүнә Шәрипованың хеҙмәте киләсәккә ҙур өмөттәр уята.

***

Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театрының ҙур сәхнәһендә «Аҡ ҡар балҡышы» тип исемләнгән шиғыр һәм йыр байрамы булып үҙҙы. Уны БР Яҙыусылар союзының урындағы ойошмаһы менән ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге ойошторғайны.

Байрамды инеш һүҙ менән Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Хәмит Ирғәлин асты. Артабан шағирҙар Рәмил Йәнбәк (Өфө), Земфира Муллағәлиева, Рәсим Шәфи-Рәхмәт, Вера Витека, Андрей Ефремов, Римма Ғәлимова, Эльмира Сәсәнбаева, Рита Фәтҡуллина (бөтәһе лә Стәрлетамаҡ), шулай уҡ Мөҙәрис Багаев менән Сибәғәт Рахманғолов (Ишембай), Тимер Ниәтшин менән менән Рәзилә Ҡотлогилдина (Мәләүез) сығыш яһаны. Үҙешмәкәр сәнғәт оҫталарының концерт номерҙары ла байрамға йәм өҫтәне.

***

Мәләүез ҡала китапханаһында йыр - моң оҙатыуында прозаик Сәлмән Яҡуповтың юбилей кисәһе үҙҙы. Юбилярҙы «Ағиҙел» журналы исеменән шағир Фәнил Күзбәков, ҡәләмдәштәре Тимер Ниәтшин, Мәрйәм Күсмәева, Юнир Кинйәбаев, «Мәләүез таңдары» әҙәби берекмәһе ағзалары, урындағы ойошмалар исеменән Ю.Ғ. Аҙнағолов һ.б. ҡотланы, ихлас теләктәрен еткерҙе.

***

Ишембай ҡалаһының 11-се (директоры Н.В. Михеева), Эҫкол ауылының дөйөм урта белем биреү (директоры Д.С. Баһауетдинов) мәктәптәрендә шағир, әҙәби тәнҡитсе Фәнил Күзбәков уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, юғары синыф уҡыусылары менән осрашыуҙар үткәрҙе. Әңгәмәләр «Ағиҙел»гә яҙылыу, әҙәбиәт, туған телдә уҡытыу проблемаларына арналды.

***

Шағирҙар Мөхәммәт Закиров менән Рәмил Йәнбәк Асҡын, Ҡариҙел райондарында ижади осрашыуҙар үткәреп ҡайтты. Асҡындағы 1-се, 2-се мәктәптәрҙә, 96-сы һөнәрселек училищеһында, Кубияҙ ауылында улар уҡыусылар һәм уҡытыусылар алдында шиғырҙар уҡыны, һорауҙарға яуап бирҙе, «Ағиҙел» журналы хаҡында һөйләне, уға әүҙем яҙылырға саҡырҙы.

Ҡариҙел районы үҙәгендәге 2-се мәктәптә, Хәлил, Иҫке Аҡбүләк ауылдарында ла әҙиптәрҙең сығышы ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Был яҡтарҙа «Ағиҙел»дең дуҫтары артасағына шик юҡ.

# 2012 ЙЫЛҒЫ ЮБИЛЯРҘАР

## Ғинуар

| | | |
|---|---|---|
| Сулпан Иманғолов | 1 ғинуар 1932 йыл | 80 йыл |
| Мәрйәм Күсмәева | 1 ғинуар 1952 йыл | 60 йәш |
| Бәхтиәр Хәлитов | 7 ғинуар 1942 йыл | 70 йәш |
| Роберт Байымов | 10 ғинуар 1937 йыл | 75 йыл |
| Илгиз Кәримов | 10 ғинуар 1942 йыл | 70 йәш |
| Сәғит Мифтахов | 10 ғинуар 1907 йыл | 105 йыл |
| Рәшит Шәкүр | 11 ғинуар 1937 йыл | 75 йәш |
| Ихсан Әхтәмйәнов | 11 ғинуар 1932 йыл | 80 йыл |
| Шакир Бикҡолов | 15 ғинуар 1932 йыл | 80 йыл |
| Буранбай Исҡужин | 15 ғинуар 1952 йыл | 60 йыл |
| Хәсән Назар | 15 ғинуар 1942 йыл | 70 йәш |
| Рамай Ҡаһир | 19 ғинуар 1962 йыл | 50 йәш |
| Фәррәх Дәүләтшин | 31 ғинуар 1887 йыл | 125 йыл |

## Февраль

| | | |
|---|---|---|
| Салауат Рәхмәтулла | 1 февраль 1942 йыл | 70 йәш |
| Ким Әхмәтйәнов | 5 февраль 1932 йыл | 80 йыл |
| Рәми Ғарипов | 12 февраль 1932 йыл | 80 йыл |
| Хөсәйен Ҡунаҡбай | 12 февраль 1912 йыл | 100 йыл |
| Рафаэль Сафин | 16 февраль 1932 йыл | 80 йыл |
| Әхмәт Әһлиуллин | 23 февраль 1927 йыл | 85 йыл |
| Илшат Йомағолов | 26 февраль 1932 йыл | 80 йыл |

## Март

| | | |
|---|---|---|
| Станислав Шалухин | 1 март 1952 йыл | 60 йыл |
| Кәбир Аҡбашев | 10 март 1932 йыл | 80 йәш |
| Нәжиб Иҙелбай | 12 март 1912 йыл | 100 йыл |
| Әнисә Хәмәтдинова | 13 март 1927 йыл | 85 йыл |
| Хөрмәт Бикҡолов | 22 март 1927 йыл | 85 йыл |
| Иршат Теләүембәтов | 26 март 1962 йыл | 50 йәш |
| Рәшит Сабит | 27 март 1937 йыл | 75 йәш |

## Апрель

| | | |
|---|---|---|
| Лариса Керчина | 6 апрель 1962 йыл | 50 йәш |

## Май

| | | |
|---|---|---|
| Йәмил Мостафин | 20 май 1927 йыл | 85 йәш |
| Сергей Воробьев | 24 май 1952 йыл | 60 йәш |

## Июнь

| | | |
|---|---|---|
| Евгений Мальгинов | 1 июнь 1942 йыл | 70 йәш |
| Раил Байбулатов | 2 июнь 1937йыл | 75 йыл |
| Гүзәл Ситдиҡова | 10 июнь 1952 йыл | 60 йәш |
| Мөслим Әбсәләмов | 12 июнь 1932 йыл | 80 йыл |
| Рәмил Хәкимов | 13 июнь 1932 йыл | 80 йыл |

| | | |
|---|---|---|
| Шамун Фидаи | 15 июнь 1902 йыл | 110 йыл |
| Дим Дәминов | 21 июнь 1942 йыл | 70 йыл |
| Салауат Әсфәтуллин | 21 июнь 1952 йыл | 60 йәш |
| Әсхәл Әхмәт-Хужа | 24 июнь 1942 йыл | 70 йәш |

## Июль

| | | |
|---|---|---|
| Рәйес Низамов | 1 июль 1932 йыл | 80 йыл |
| Дилә Булгакова | 11 июль 1937 йыл | 75 йәш |
| Кирәй Мәргән | 11 июль 1912 йыл | 100 йыл |
| Динә Талхина | 27 июль 1952 йыл | 60 йыл |

## Август

| | | |
|---|---|---|
| Вафа Әхмәҙиев | 5 август 1937 йыл | 75 йыл |
| Рәмил Йәнбәк | 10 август 1952 йыл | 60 йәш |
| Юлай Әминев | 15 август 1937 йыл | 75 йәш |
| Рәмил Сурағол | 16 август 1962 йыл | 50 йәш |
| Матвей Нагаев | 22 август 1892 йыл | 120 йыл |

## Сентябрь

| | | |
|---|---|---|
| Әхмәт Ғайсин | 1 сентябрь 1937 йыл | 75 йыл |

## Октябрь

| | | |
|---|---|---|
| Вәзих Исхаҡов | октябрь 1927 йыл | 85 йыл |
| Нина Зимина | 1 октябрь 1942 йыл | 70 йәш |
| Лилиә Һаҡмар | 3 октябрь 1962 йыл | 50 йәш |
| Фәрит Богданов | 7 октябрь 1932 йыл | 80 йыл |
| Иван Недолин | 17 октябрь1892 йыл | 120 йыл |
| Рәшиҙә Бик | 21 октябрь 1952 йыл | 60 йәш |

## Ноябрь

| | | |
|---|---|---|
| Эдуард Әғзәми | 5 ноябрь 1937 йыл | 75 йәш |
| Александр Филиппов | 7 ноябрь 1932 йыл | 80 йыл |
| Миңлегөл Хисмәтуллина | 24 ноябрь 1927 йыл | 85 йыл |

## Декабрь

| | | |
|---|---|---|
| Фәнил Күзбәков | 2 декабрь 1952 йыл | 60 йәш |
| Фәнил Мансуров | 3 декабрь 1932 йыл | 80 йыл |
| Йыһат Солтанов | 3 декабрь 1932 йыл | 80 йәш |
| Әнүр Вахитов | 20 декабрь 1932 йыл | 80 йыл |
| Реан Бикчәнтәев | 21 декабрь 1937 йыл | 75 йыл |
| Ғабдулла Амантай | 23 декабрь 1907 йыл | 105 йыл |

| | | |
|---|---|---|
| Тажетдин Ялсығол | 1767 йыл | 245 йыл |
| Ғ. Мәсғүт | 1907 йыл | 105 йыл |
| Мазһар Абдуллин | 1912 йыл | 100 йыл |
| Жан Лоҡман | 1912 йыл | 100 йыл |